Рафик НОҒОМАНОВ
Әмир ИШЕМҒОЛОВ

# УМАРТАСЫ КӘҢӘШТӘРЕ



Ғилем

«УМАРТАСЫЛЫҠ ҺӘМ АПИТЕРАПИЯ БУЙЫНСА
БАШҠОРТОСТАН ҒИЛМИ-ТИКШЕРЕНЕҮ ҮҘӘГЕ»
ДӘҮЛӘТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ АГРАР УНИВЕРСИТЕТЫ

Рафиҡ НОҒОМАНОВ
Әмир ИШЕМҒОЛОВ

# УМАРТАСЫ КӘҢӘШТӘРЕ

Өфө «Ғилем» 2008

УДК638.1
ББК 46.91
Н Х7

Рецензенты
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты
Ивний Вәхит улы ШАФИҠОВ

Ноғоманов Р. Ғ., Ишемголов Ә. М.
Умартасы кәңәштәре. — Өфө: Ғилем, 2008 — 156 б.

ISBN 978-5-7501-0850-3

Китаптың авторҙары — умартасылык эшен яҡшы белгән йәш ғалимдар.

Ҡулланманың йокмәткеhе бик бай. Унда умартасылык тарихы, бал ҡортоноң төҙөлөшө һәм йәшәйеше, уларҙың ауырыуҙары, ҡортсолоҡтоң аҙыҡ базаһы хаҡында бай мәғлүмәт бирелә. Авторҙар шулай уҡ бал ҡорттары менән нисек эш итеү, уларҙы тәрбиәләү, үрсетеү, күс йыйыу һәм умартаға ябыу, балды дауа итеп файҙаланыу буйынса бик ҡиммәтле кәңәштәр бирә, солоҡ умартасылығы, Бөрйән солоксолары менән таныштыра.

Ҡулланма йәш умартасыларға, ауыл һөнәрселек училищелары уҡыусыларына, ғөмүмән ҡортсолоҡ менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

ISBN 978-5-7501-0850-3

© Ноғоманов Р.Ғ.,
Ишемғолов Ә.М., 2008

# БАШ ҺҮҘ

*Халкыбыҙҙың иң борощо һөнәрҙәренең береһе — бал корто үрсетеү, бал алыу бик аҙ кешеләр генә эйэ булған һөнәргә әйләнде. Умарта тоторға теләүселәр бар, әлбиттә. Тикбыл шипең нескәлектәрен белеп еткермәгәнгәме, э бэлки, түҙемлек етмәүҙәндер, корт аҫрай башлаған һәр кем уңышка өлгәшә алмай. Йә уның корттары үлеп бөтә, йэ туктауһыҙ күс айыра, һөҙөмтәлә умартанан мул уңыш алып булмай. Ә бөгөнгө кытлык нык бжәлгә һуккан, баш ауырыуына эйләнгән бер мәлдә башкорт калкының боронғо һөнәрен бөтәбеҙ булмаһа ла, күбебеҙ үҙлэштереү камасауламаҫ ине.*

*Һөтә кеше лә, училищеға инеп укып, умарта пютоу нескэлектэрен өйрәнә алмай, шуға күрә беҙ, күп укыусыларҙың һорауҙарын үтэп, йяш һәүәҫкәр умартасылар өсөн китап сыг,арырға булдык. Унда кортсолок шөғөлөнөң ҺЖ'беҙ ицмөһим тип иҫәплэгэн яктарын асыкларға тырыштык, шуның өсөн ул файҙалы ғына кулланма булыр, тип өмөтләнәбеҙ.*

Авторҙар

# Нисек умартасы **булырға?**

Бал ҡорто тереклегенең бөтә
нескәлектәрен яҡшы белгән һәм
үҙ зиһенен эшкә ҡуша алған кеше
генә ысын умартасы була ала.

А.М.Бутлеров

Һуңғы йылдарҙа күп кешелә - – өлкәндәр һәм бигерәк тә **йвштөрҙә** умартасылыҡҡа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Уларҙың күбсһсн, нисек итеп умарта тоторға, бал ҡорттарын ҡарарға, күс тоторға һәм ябырға, ә дөйөм эйткәндә, умартасылыҡ **мснөн** нисск шоғолләнергә, тигэн һорау борсой. Быга бер-**ике** һүҙ мснон генэ яуап биреп тә булмай.

Иц **мөһиме** — тоүҙә кешенең умартасы эшенә һәм бал **корттарына ҡызыҡһыныуы** булырға тейеш. Әгәр ғаиләгеҙҙә **һом ноҫслсгеҙҙә** ата-бабаларығыҙ бал ҡорттары тоткан һәм **үрсеткон** икои, Сжгерок то һәйбәт. Бер һүҙ менэн эйткәндә, ул **прммсгы вйрвнеү** тслоге ҙур булырға тейеш. Ә кем инде **тоү бШЛАЛ умарта** тотоп ҡарарға уйлай икән, уға алдан бал **корттары тураһында** ауылдағы елкэн кешеләрҙән, ҡорт тотоу-**ы ларҙан һәм ЭШНП** йорогән умартасыларҙан һорашырға кәрэк. **Улар** моммш **тиклем** һейләп, аңлатып, бэлки, өйрәтеп тә

**БыНШ** п.ип, **бер-икс** китап табып, бал ҡорттары ғаиләһе **тураһында уларҙы нисек** үрсетергә һәм ҡарарға икәнлеге хаҡығада укып **ПНЫШырға көрөк.** Был йэһэттән бик уңайлы, аңлайыш-**лы, һәйбәт нтеп** яҙылған башҡортса китап бар. Ул — ауыл **хужаЛЬIҒЫ фвндөре** кандидаты Ивний Вэхит улы Шафиҡов-и.|ң **«Бал** кортоноң наҙы бар» (Башкортостан китап нәшриэ-**те** 2006) иссмлс китабы. Шулай уҡ Д.Т.Шакировтың «Пче-**ЛЯЮДСТВ0 Башкирии»** ҡулланмаһы (Башкнигоиздат, 1992), «Сло-**варь-справочник** пчеловода» (Өфө, 1998), «Пчеловодство. Учебник для **10 11** классов общеобразовательных учреждений Респуб-**ЯИХИ Башкортостан»** (Өфө: Китап, 2003) һәм В.Н.Власовтың **1983 йылда** сыккан «Башҡорт балы» тигон китабынан күп **МЭҒЛүмөт** алып була.

Шулай итсп, умартасылыҡ менэн шөғөллэнэм тигэн ке-**ШеГ9, Твүҙэ** ныклап теория менэн ҡоралланып, бал ҡорто ғаилоһснсң тормошо менэн танышырға кэрэк.

Ватан умартасылығы эшмәкәре профессор В.И.Логинов былай тип яҙған: «Оҙаҡ йылдар буйы умартасылыҡ менән ЦШГоллонсүсе танылған умартасылар араһында бик йыш ҡына: «Йәшәү умартасылыҡ менән швғөлләнеү ул, бал ҡорттары аҫрамау — ул, тимок, йошомәү», — кеүек һүҙҙәрҙе ишетерго тура кило. Пстербургтың (XIX быуат аҙағы) Мариинский театрының опсра артисы Г.П.Кандратьев, умартасылыкта эшләүҙе үҙенең икенсе һөнәре, бал ҡортһоҙ тормошто «маҡсатһыҙ hпм ҡыҙыкһынныуһыҙ тормош» тип һанай.

Бал корттары менән аралашыу — бик ҡыҙыклы шөғөл, [illegible] к ошсгө тәрән ҡэнәғэтлек бирэ. Ҡорттар менән танылған [illegible]ар, ғалимдар, дәүләт эшмэкәрҙәре, мәҫәлән, Аристотель, Дарвин, Мичурин, Лев Толстой һәм Бутлеров ҡыҙыкһынған hом шоғоллэнгән.

Умартасылыгк «ауыл хужалығының поэзияһы», ә умартасылыктагы эш «умартасылыҡтың үҙенең поэзияһы» булып [illegible] бына шулай тип раҫлай умартасылар.

Бишлаусы умартасыларға кәңәшебеҙ шул. Әгэр ысынлап үрсетеүҙе ҡортсолокта һынап ҡарарға булғанһығыҙ икән, досогоҙҙо hом аҡсағыҙҙы йәлләмәгеҙ. Икенсенән, әгәр hеҙ араҡы-шарап менон дуҫ икәнһегеҙ, — ҡорт менән булышмағыҙ. Үҙегеҙ ҙә йонсомағыҙ, бал ҡорттарын да туҙҙырмағыҙ. Ҡорт эскән ксшене яратмай.

[illegible] урснсклс драматург Азат Абдуллин «Умартасы» очеркында умартасы Әхмэҙи ағай Ҡусмаев тураһында былай тип һөйләй: «...Умартасы эше ҡатмарлы, үҙенде күс менән бергә йәшәү »пдпн хис итмәһәң, лутсы маташма. Бөгөн нимэ бул[illegible] иртого ни булырын алдан ук белеп торорға кәрәк...»

Бал корттарын тоторға һәм үрсетергә ниәтләнһәгеҙ, иң тәүҙә умарта табыуҙы хэстәрлэгеҙ. Уны үҙегеҙгә эшләп йәки һатып илырға була. Эште башлап ебәреү өсөн шулай ук башҡа махсус ҡорамалдар ҙа кәрәк.

Әгәр hеҙ, профессиональ белем алып, умартасы булып китергә теләһәгеҙ, ауыл һөнәрселек училищеһында укып сығырға клрок. Умартасыларҙы Михайловкалағы (Өфө районы) [illegible] училищс эҙерлэй.

Ҡорт ҡорттары менән шөғөлләнеү өсөн уларҙы тотоу һәм үрсетеү алымдары һэм ысулдарыша эйә булырға кәрәк. Шулай уҡ бал корттары күсенең йәшәйешен, ауырыуҙарын, ҡороткостарын һом уларға ҡаршы корәш сараларын белеү мотлаҡ. Бынан тыш, һеркәлс үҫсмлектэр тураһында мәғлүмэтегеҙ булыу мөһим, сөнки улар ҡорттар сәскә һуты һәм һеркә йыя. Был китапта өсөн һорауҙарҙың барыһына ла яуап табырһығыҙ.

# I. Умартасылыҡ тарихынан

## БАЛ ҠОРТОНОҢ ТАРИХЫ

Донъяла миллионға яҡын төр бөжәк, шул иҫәптән сәскәнән сәскәгә һеркә күсереп, һут менән туҡланып аңғыҙ йәшәгән 20 меңләп төр ҡорт иҫәпләнә. Шулар араһында бал ҡорто тәбиғәткә һәм кешегә килтергән файҙаһы менән беренсе урында тора.

Бал ҡорттарының барлыҡҡа килеү тарихы бик боронғо замандарға барып тоташа. Палеонтология — файҙалы ҡаҙылдыҡтар тураһындағы фән — мәғлүмәттәренә ярашлы, бал ҡорттары әле нисек булһалар, шул килеш Ерҙә бынан 40 миллион йыл элек тә йәшәгәндәр. Францияла өсөнсө ҡатламанан сығарылған таштай ҡатҡан бал ҡорто ошо дәүергә тура килә. Эшсе бал ҡорттары миоцен ҡатламаһында ла табылған, уларҙың йәше сама менән 20—25 миллион йыл иҫәпләнә. Ғалимдар, тәүге бал ҡорттары Ерҙә 50 миллион йыл элек барлыҡҡа килгән, тип фараз итәләр.

Бал ҡортоноң иң боронғо һүрәтен Испанияла Валенсия эргәһендәге тауҙарҙа, Аран мәмерйәһе ҡаяһында тапҡандар. Арҡан буйлап ҡаялағы ҙур булмаған тишеккә күтәрелгән ике кеше һүрәтләнгән унда. Уларҙың береһе ошо тишектән бал ҡорто кәрәҙе тартып сығара. Кешеләрҙең өҫтөндә ҡорттар осоп йөрөй. Һүрәткә 15 мең йылдан ашыу ваҡыт үткән! Ул палеолит дәүерендә, йәғни боронғо таш быуатта (мадлен дәүере) төшөрөлгән. Һүрәт беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. Шулай уҡ Төркиәлә Анкара ҡалаһы эргәһендәге мәмерйәлә табылған, бынан 9 мең йыл элек төшөрөлгән рәсемдә һунарсының бал ҡорто ояһынан кәрәҙле бал алыуы күрһәтелгән. Тимәк, кеше балды борон-борондан киң файҙаланған.

Бал ҡорттары, уларға аҙыҡ биреүсе сәскәле үҫемлектәр кеүек үк, Ерҙә бик борон барлыҡҡа килгән. Ҡырағай бал ҡорттарын кешеләр 5—6 мең йыл элек йортҡа «эйәләштергән». Тарихи ҡомартҡыларға ярашлы, әле беҙҙең эраға тиклем үк Әрмәнстан, Грузия һәм Кавказдың башҡа райондары халҡы умартасылыҡ менән шөғөлләнгән. Хәтерләүҙәрҙән шул бил-

дәле: боронго грек тарихсыһы Геродоттың раҫлауынса, беҙҙең эраға тиклем V быуаттар тирәһендә Көнсығыш Европа далаларында йәшәүсе скифтар бал һәм балауыҙ менән киң сауҙа алып барған.

Өс мең йыл элек Боронғо Египетта умартасылыҡ үҫешкән була, һәм ибай умартасылыҡ түгел, ә күсерел йөрөтөлөүсе. Был илдең көньяғында бал йыйыу иртәрәк башлана, шуның өсөн һәр яҙ һайын бал ҡорттарын Нил йылғаһының башынараҡ алып киләләр. Унда күстәр һалдарҙа тора, ҡорттар бал йыйыу өсөн шунан оса. Һалдар Египеттың тоньяктараҡ урынлашҡан провинцияларында бер-бер артлы, баллы үҫемлектәр сәскә атыуға ҡарап, акрынлап Нил буйлап түбәнгә табан күсерелә.



*Испаниялағы мәмерйә ҡаяһында һаҡланып ҡалған боронғо һүрәт*

Бал ҡорто был илдә изге зат була. Картуштарҙа (эмблемалы һәм яҙыулы таҡталарҙа) фараон исеме алдынан ҡортто һүрәтләйҙәр. Батшаларҙың саркофагына ла ҡорт рәсеме төшөрөлгән.

Бер мең йылға һуңыраҡ Ассирияла үлгән кешеләрҙең мәйетен балауыҙ менән ҡаплап балға батыра торған булғандар. Был йола-ғәҙәт оҙаҡ, Александр Македонскийға тиклем, дауам итә. Уны ла үлгән ере Персиянан Египетҡа алып барыу һәм ерләү өсөн тәүҙә үк өҫтөнә сыҡҡанса бал ҡойолған табутҡа һалалар.

Беҙҙең көндәрҙә Ер шарында Apis (Апис ҡорт тигәнде аңлата) төкөмөнән дүрт төрлө бал ҡорто осрай. Шуларҙың өс төрө һинд бал ҡорттары: гигант һинд ҡорттары, кәрлә йәки бәләкәй һинд ҡорттары һәм уртаса һинд ҡорттары. Ә дүртенсе төрө — Европа бал ҡорттары.

Бөгөнгө көндә был һуңғы төр кеше тарафынан ысынбарында күпләп бал йыйыу өсөн киң файҙаланыла.

## УМАРТАНЫҢ ТАРИХЫ

Бик боронғо замандарҙа ҡырағай бал ҡорттарының йәшәү урыны мәмерйәләр, ҡая ярыҡтары һәм ағас ҡыуышы була.

Ҡортсолоҡ һөнәре — ҡырағай бал ҡорттары балына һунар менән кеше бик күп йөҙ йыллыҡтар буйына шөғөлләнгән. Умартасылыҡ үҙенең үҫешендә бер нисә этап үткән. Кеше, ҡырағай ҡорт ҡыуышын табып, бөтә балды һыпырып ала, бының менән ҡорт күсен үлемгә дусар итә. Һуңғараҡ һунарсылар эҙләп тапҡан бал ҡортло ағастарға билдә (тамға) һала һәм был ағас ҡыуыштарын (солоҡтарҙы) үҙҙәренең милке тип һанай башлайҙар. Ҡорттар үлмәһен өсөн улар балдың



*Умарта*

бер өлөшөн кышкылыкка калдыра. Солок умартасылығы бына шулай барлыкка килә. Солоксолар ағастарға бал корттары, күстәр күнһын өсөн кыуыштар эшләргә өйрәнә. Кешеләр был солоктарҙы талап китеүҙән һаклай һәм, йыйылыуға карап, балын ала башлай.

Икенсе этап — ул түмәр умартасылык. Бал корттарын үҙе соколған, урмандан килтерелгән түмәрҙәрҙә, йәғни һүтелмәй торған умарталарҙа үрсетәләр. Уға алмашка рамлы умартасылык килә. 1814 йылда, донъяла беренсе булып, украин умартасыһы, ватан умартасылығының күренекле эшмәкәре Петр Иванович Прокопович рамдары һурып сығарылмалы умарта уйлап таба, ошо нигеҙҙә корт күстәрен аҫрау һәм үрсетеү технологияһын эшләй. Уның эшмәкәрлеге илдә умартасылыкты үҫтереүгә ҙур булышлык итә.

Һуңынанырак, 1851 йылда, америка умартасыһы Лоренцо Лангстрот бал кортоноң биологик үҙенсәлеген — бушлыкты яратмауын өйрәнгәндән һуң, асылмалы капкаслы һәм үргә күтәреп алына торған рамлы умарта конструкцияһын төҙөй. Шылдырып куйылмалы, күтәреп алынмалы рамдарҙы кулланыу немец Иоганн Мерингтың 1857 йылда яһалма балауыҙ һәм Австриянан Франц Грушка 1865 йылда бал кыуғыс уйлап табыуына килтерҙе.

XIX быуат аҙағында Дадан-Блаттың 12 рамлы умартаһы уйлап табыла. Унан күп корпуслы умарталар һәм яткырып куйылмалы горизонталь умарталар барлыкка килә. Уларҙың бөтәһе лә хәҙер һәүәҫкәр умартасылар умарталыктарында ла кулланыла.

## УМАРТА ҺӘМ УМАРТА ЯҺАУ

Умарта — бал корттарының торлағы, улар унда балауыҙ кәрәҙенән оя эшләйҙәр. Кәрәҙ күҙәнәктәрендә бал корттары үрсей (үрсемдәрҙе — бала корттарҙы тәрбиәләйҙәр), аҙык — бал һәм һитә запасын туплайҙар. Ә оло бал корттары рамдар араһындағы аралыкка (кәрәҙҙәр араһындағы бушлыкка) урынлаша. Умарта ояларҙы һәм бал корттарын тышкы һауаның насар шарттарынан һаклай, бал корттары бүлеп сығарған йылылыктың һакланыуын тәьмин итә.

Боронғо замандарҙа кырағай бал корттарының торлағы булып ағас тишектәре, мәмерйәләр һәм ағас кыуыштары һаналған. Унда кешеләр бал корттарын үҙ мәнфәғәттәренә буйһондорған — «кулға эйәләштергән» һәм солоктарға, түмәр (дүңгәк)

умарталарға күсергэн. Һуңынаныраҡ бал ҡорттарын тәрбиәләүҙә гагатылмай торған, о унан һүтелмәле корпуслы умарталар ҙа ҡуллана башлай.

Хәҙерге ваҡытта умартасылар рамлы умарталарҙың ике төрөн: вертикаль тсрэүлеһен һәм горизонталь ятмалыһын (лежаки) файҙаланалар. Вертикаль умарталарҙың күләме кәрэк булған сакта оҫтомо юғары корпустар һәм магазиндар ялғанмалары ҡуйыу юлы менән арттырыла. Бындай умарталарҙың бсйеклегс уларҙың оҙонлоғонан һәм киңлегенән артыҡ була. Горизонталь умарталарҙың киңлеге бейеклегенон артыҡ һәм уларҙың күләме бейеклеккэ түгел, ә ян-яҡҡа арттырыла.

Йыш ҡына кешеләр: «Ниндэй умарта яҡшыраҡ, уларҙың ниндойсндә бал ҡорттарын тоторға икэн?» - тип һорайҙар. Бср гсно торлө яуап биреүе ауыр һәм мөмкин дэ түгсл. Күп йыллыҡ тәжрибәнән сығып, умартасылар күпселек дорожолэ, вертикаль умарталар бал ҡорттарының биологик талаптарына һом уларҙы тәрбиәләүҙең интенсив технологияһына тап килә, тип яуап бирәләр. Әйтергә корәк, ике корпуслы, икс магазин ялғанмалы 12 рамлы (дадан) умарталар Һвм күп 4 5 корпуслы умарталар, шулай уҡ күп корпуслы умартаның ике корпусы һэм яртышар рамдары (оя рамдарынвн икелөтә болэкой) мснән ике-өс магазинлы умарталар уңай.

Ләкин ҡайһы бер умартасылар горизонталь ятмалы умарталарҙы ла ярата һэм уңышлы файҙалана. Бындай умарталарҙа яҙ коно бер тигеҙ итеп ояларҙы киңәйтеү ғәмәлгә ашырыла. Шулай иткондо, балды алыуы — умартанан баллы кәрәҙҙәрҙе сығарыуы һәм бал ҡорттарына ҡышкылыкка оялар йыйыуы ҡулайыраҡ, Ятмалы умарталарҙың (20 һэм 24 рамлы) етсшһеҙлеге шунда, ул күсереп йөрөтеүгә ауыр, бик ҙур. Әгәр һеҙ башҡа тер умарта эшләргэ теләһәгеҙ, уларҙың үлсәмдәрен ошо китаптарзан таба алаһығыҙ:

1. В.Д.Лукоянов, В.Н.Павленко. Пчеловодный инвентарь, пассчное оборудование. Справочник. М.: Агропромиздат, 1988.

2. Л.С.Нуждин. Основы пчеловодства. М.: Агропромиздат, 1988.

3. Н.Л.Буренин, Г.Н.Котова. Справочник по пчсловодству. М.: Агропромиздат, 1985.

4. А.Н.Бурмистров, Н.И.Кривдов, В.И.Лебедсв, О.К.Чупахина. Энциклопедия пчеловода. Континенталь Книга ТИД Континент-Пресс. М., 2006.

Был китаптар һом башҡа белешмәлэр район, ауыл китапханаларында һэм умартасыларҙа булырға тейеш.

## Умартаға талаптар

Умврта коро, йылы, яҡшы еллэтслерлек, яуым-төшөмдэн һәм тышкы тсмпсратураның киҫкен үҙгәреүенэн бал ҡорттарын мшаныслы һаҡларлыҡ һәм ҡышкы осорҙа уларҙың һәлэк булмауын тоьмин итерлек булырға тейеш.

Бал ҡорттарының биологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, бөтә типтағы умарталарға ла эске ояларҙың мәжбүри ҙурлығы (үлсәмә) булырға тейеш:

ИКС оя кэрэҙе араһындағы аралыҡ — 37 мм;

йәнәш корэҙҙәр араһындағы буш урындар, бал ҡорттары эсен йороү юлдары ҙурлығы — 12 мм (был ике бал ҡорто бейеклеге);

рамдарҙың кабырғалағы планкалары һәм умартаның ситтәре (стенаһы) араһындағы аралыҡ — 7,5 мм;

рамдарҙың өҫтөндәге аралыҡ — 8 мм;

рамдар аҫтындағы бушлыҡ (рамдың аҫҡы планкаһынан умартаның тобоно тиклем) — 20 мм.

Умартаны яһағанда мотлаҡ роүештэ ошо параметрҙарҙы иҫәпкә алырға кэрәк. Әгэр ҙә был үлсәмдәрҙе сикләһәң, ул саҡта бал корттарына үтеп йореү өсөн ҡыҫынкы буласаҡ, ә әгәр ... ...\ рамтыбыраҡ ебэрһәң, улар буш урында кэрэҙ төҙөй, ... оролары – «телсәләр» һаласаҡ. Хэтерегеҙҙә тотоғоҙ: ... ҡортпары бушлыҡты яратмай һәм бының менән килешә алмай!

Умарталарҙы һом рамдарҙы башлыса ылыҫлы һәм йом... ... япраҡлы ағастарҙан: ыҫмалаһыҙ ҡарағайҙан, шыршынан, ... шроктон, күк тирэктән һәм уҫаҡтан эшләйҙәр. Шулай ... осраҡта ҡыҙыл талдан, өйәңкенән һәм ҡараманан ... умарта эшләйбеҙ тип, ундай ағастарҙы һыу, ... буйҙарынан йыҡмағыҙ! Ағастың сүешлеге 15 проценттан ... түгел. Умарта эшләү өсөн ағас беренсе һәм ... сортлы булырға тейеш, ә рамдар өсөн 3—5-се сорт... ... файҙаланырға мөмкин. Ҡаты тоҡомло ағастар (кайын ...) ... яраҡлы түгел, улар ауыр була һәм йылылыҡты ...

Ағас ... ирһеҙ, тура ҡатламлы, бөжәктәр йырғысламаған булырға тейеш. сэрсгән һәм ярылған урындары булмаһын. Ку... ... өсөн блләкос ботаҡтар рөхсәт ителә.

Умарта эшләү осон тағы ла бер-ике кәңәш. Умарта яһау ... ... ағасты киҫмәҫкә кэрэк. Ни өсен? Беренсенэн, ... тәбиғәттә, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау саралары маҡсаты ..., ... мкчмичмюн, ҡорт айырған осорҙа умарталыҡты таш-




*Ике магазинлы бер корпуслы (дадан)*
*1— төп; 2 — корпус; 3— оя рамы; 4 — бүлем taktahы;*
*8 — kankac; 9 — кейәнең өҫкө kankacы;*




*умартаның төзелеше һәм үлсәмдәре:*
*5 — магазин; 6 — магазин рамы; 7 — aςkы kankac;*
*10 — кейәнең aςkы kankacы*

лап ситкә осоп киткән бер күс тә, шулай уҡ кейек ҡорттар ҙа йәш ағасҡа барып ҡунмай бит, ә ҡартыраҡ ағастың ҡыуышына һарый.

Умарта эшләгәс, уны оҙаҡ йылдар ҡулланыу һәм бал ҡорттары үҙ умартаһын тиҙерәк тапһын өсөн тәүҙә олифа, шунан умартаның тыш яҡтарын аҡ, зәңгәр, күк, һары, йәшел төҫтәргә буярға кәрәк (ҡорттар ошо төҫтәрҙе яҡшы күрә һәм айыра). Май буяуы менән буяу һәйбәт. Эмаль буяу насар, тиҙ ҡубыусан була.

## Умартаның төп өлөштәре

**Корпус** — унда умартаның ҙур рамдары менән бал ҡорттарының оялары урынлаштырыла.

**Магазин өҫтәлмәһе** — унда бал йыйыу осоронда балды һалыу өсөн ярты, магазин рамдары ҡуйыла.

**Ҡапҡас** — яҫы, бер яҡҡа иңкеү, ике яҡҡа иңкеү, корпусҡа йәки магазин өҫтәмәһенә кейҙерелә.

**Аҫҡы ҡапҡас** — умартаның түшәмен нығытыусы беркеткес, бында кәмәшәүҙәрҙе урынлаштыралар, өҫкә йылытҡыс материалды (яҫтыҡты) һалалар.

**Төп** — ысҡынлырып алынмалы йәки түбәнге кейәһе һәм осоп килеп ултырыу таҡтаһы менән тотош корпусҡа ҡағылған булырға мөмкин.

## Умарта рамдары

Оя һәм магазин рамдары була. Уларҙа бал ҡорттары кәрәҙ — ояларҙың нигеҙен һуҙа. Һәр рам өҫкө һәм аҫҡы бурсанан, ике ян-яҡ планканан тора. Өҫкө бурсаның ике башы рамды умартаға элеп ҡуйыу өсөн 10-ар мм оҙонлоҡҡа артып сығып тора. Бөтә төр умарталарҙа ла рамдың өҫкө бурсаһы һәм ян-яҡ планкалары яҫылығы буйынса бер тигеҙ — 25 мм була (өҫкө өлөштә 1/3 бейеклеккә улар 37 миллиметрға тиклем киңәйтелгәндәр); өҫкө бурсаның ҡалынлығы 20—22 мм, ян-яҡтағылары 8—10 мм. Аҫҡы бурса оҙонлоғо буйынса рамдың асыҡлығына тигеҙ, ә киҫелеше буйынса 15x15 мм тәшкил итә. Ян-яҡ планкаларҙы өҫкө һәм аҫҡы бурсаларға 30—35 миллиметрлы ҡаҙау менән ҡағалар.




*Умарта рамы*

Стандарт оя рамдарының күләме 435х300 мм (оҙонлоғо һәм бейеклеге). Һүрәттә ҡарағыҙ! Күп корпуслы умартаның рамдар үлсәме 435х230 мм, ә магазиндың яртылаш рамдар үлсәмдәре 435х145 мм; ошо һуңғы әйткән ике төрлө рамдарҙың башҡа үлсәмдәре (киңлеге, ҫыҫлығы һ.б.) оя рамдары менән бер иш.

Умарта эшләргә йәки һатып алырға теләүселәргә тағы ла бер әйтер һүҙебеҙ бар: умарталар яһау осон шулай уҡ пенополистирол, пенопласт файҙаланалар. Умартасыларҙың умарта эшләү өсөн ҡамыш, пресланған юныҫҡы, ағас бетоны һәм башҡа материалдарҙы файҙаланыу осрағы ла бар. Шулай ҙа умарта осон иң һәйбәт материал — ағас.

## УМАРТАСЫ ҠОРАЛДАРЫ

Умартасыға күс ябыр өсөн иң тәүҙә, әлбиттә, умарта кәрәк. Хәҙерге көндә йыш таралған умарталар түбәндәгеләр: 12 рамлы дадан умартаһы, икс корпуслы умарта, умарта-лежак (йәғни горизонталь, киң 20—24 рамлы умарта) һәм күп корпуслы (4—5 корпустан торған) вертикаль умарталар.

Беҙҙең Башҡортостанда, үкенескә ҡаршы, умарта эшләү менән айырым бер завод та, бер урман хужалығы ла, леспромхоз да шөғөлләнмәй тип әйтеү яңылыш булмаҫ. Стәрлетамаҡта һәм Таганрогта умартасылыҡ инвентары һәм ҡоралдары сығарыусы заводтар бар, ләкин улар умарта эшләп сығармай. Беҙгә умарталар йышыраҡ Киров, Пермь өлкәләренән килә. Ҡайһы бер урман хужалыҡтары, бәлки, үҙҙәре өсөн умарта эшләп сығаралыр, ә күпләп сығарыу юҡ. Һуңғы йылдарҙа умарталарҙы Башҡортостандың төрмәләрендә эшләй башланылар.

Шуның өсөн һеҙ, ҡортсолоҡ менән шөғөлләнер булғас, үҙегеҙ умарта эшләп ҡарағыҙ! Ауыл ерендә ундай мөмкинселек булырға тейеш.

Умартанан тыш тағы ла ошондай ҡоралдар кәрәк буласаҡ: **курск йәки тототкес, битлек йәки күҙлек, умарталыҡ бысағы, аҡ халат** — уны күс һәм оя ҡарағанда, умарта янында эшләгәндә кейәләр. Бал ҡорто ғаиләләрен ҡарағанда айырым рамдарҙы, баллы кәрәҙҙәрҙе ҡулда тотоп йөрөмәҫ



1 2 3

*Моҙғаның төрҙәре*

өсөн айырым, рам һыйырлыҡ күсереп йөрөтә торған йәшник йә кап (пакет) кәрәк.

Корт айырған осорҙа умартасыға моҙға кәрәк. Уны төрлөсә әйтәләр, ҡайһы бер райондарҙа, ауылдарҙа тубал тиҙәр, ҡайһылары тәгәс, йә ҡаяҙ тип йөрөтә. Нисек кенә атамаһындар, уның маҡсаты — берәй урынға ҡунған, һарыған күсте йыйып алыу өсөн яһалған һауыт, ә йыйыр өсөн ҙур ағас ҡалаҡ кәрәк. Моҙғаны завод эшләп сығара. Айырым умартасылар ҙур күстәр өсөн оло моҙға яһайҙар, сөнки бәләкәй моҙғаға ҙур күстәр ябылһа, бар күс бешеп, уның эсендә һыйып үлә.

Корттарҙы ҡарағанда ҡаҙ, бигерәк тә өйрәк ҡанаты булһа яҡшы. Уның менән рамдағы, кәрәҙҙәге ҡорттарҙы һыпырып төшөрөргә уңайлы.

Ә бал осоро еткәндә, бал ҡыуҙырғыс, бал ҡыуҙырыр алдынан кәрәҙҙәрҙе аса торған бысаҡ кәрәк. Был осраҡта өйҙәге кухня бысағы бармай.

Ҡыш осоронда умартаға сысҡандар инмәһен өсөн кейәһенә (умарта ауыҙына) алюмин кейә япҡыс ҡуялар.

Умартағыҙ булып, ояға ҡуйырға рамдарығыҙ булмаҫҡа мөмкин. Рамдарҙы үҙегеҙ эшләп ҡарағыҙ.

Бөгөнгө көнгә умартасы ҡоралдарының хаҡы арзандан түгел. Өлгә хаҡтар бөгөн бер, иртәгә икенсе төрлө буласаҡ. Хаҡтарға ҡарап, ниндәй күп сығымдар килеп сыҡҡанын белеп, уйлап эш итәһегеҙ инде: умартасылыҡ менән шөғөлләнергеме әллә юҡмы? Тәүҙә башлап китеүселәргә бик ҡыйынға тура киләсәк (Бигерәк тә аҡса яғына ҙур мохтажлыҡ кисерһегеҙ). Етмәһә, эште башлап ебәреүселәр өсөн, һәүәҫкәр умартасыларға бер ниндәй ҙә ташламалар юҡ. Һеҙ яһалма балауыҙҙы ҡайҙан алырға тейешһегеҙ? Элек уны складта тик иретелгән балауыҙға алмаштырып ҡына бирәләр ине. Ә хәҙер, аҡсаң булһа, теләгән умартасы магазинынан һатып алырға була.

# II. Бал ҡортоноң йәшәйеше

## БАЛ ҠОРТО ҒАИЛӘҺЕ

Инәһеҙ ҡорт кошоҙ булыр.
Халыҡ мәҡәле

Ауыл хужалығы малдарын ҡышлатып сығарыр өсөн кеше йәй буйына аҙыҡ запасы — бесән, һалам, сенаж, силосты күпләп әҙерләһә, бал йыйыусы ҡорттар ҡышҡылыҡҡа үҙҙәренә үҙҙәре сәскә һуты һәм һерко йыя. Шундай өҫтөнлөгө булғанға ла, кешеләрҙең бал ҡорто күстәрен аҫрарға теләге ҙур. Ләкин был хәл ҡорттар ботонләй үҙ көндәрен үҙҙәре күрергә тейеш тигәнде аңлатмай.

Умартасылыҡта биологик һәм хужалыҡ берәмеге, объекты булып айырым бер ҡорт түгел, ә бал ҡорто ғаиләһе иҫәпләнә. Ул ғаиләлә өс төрлө бал ҡорто була: инә ҡорт, эшсе ҡорттар һәм ата ҡорттар.

Бер ҡорт та япа-яңғыҙ йәшәй алмай. Әйтәйек, һеҙ йәйгеһен йөҙәрләгән эшсе ҡорттарҙы йыйып, бер умартаға япһағыҙ, ә улар араһында инә ҡорт юҡ икән, был ҡорттар үлеп бөтә. Шулай уҡ бер инә ҡорт табып, бер эшсе ҡорт та ҡушмай,




*Бал ҡорттары:*
*1 — инә ҡорт; 2 — эшсе ҡорт; 3 — ата (әре) ҡорт*

умарта эсенә, кәрәҙле рамға ебәрһәгеҙ, ул да бер-ике көндән һәләк буласаҡ.

Йәйге көндә һәйбәт бал ҡорто ғаиләһендә бер инә ҡорт, кәмендә 20 мең, ә көслө ғаиләлә 60—80 мең самаһы эшсе ҡорт, шулай уҡ йөҙҙән, меңдән ашыу, ҡорт айырған осорҙа бер нисә мең ата ҡорт була. Ҡыш осоронда һәм яҙғыһын умарта эсендә эшсе ҡорттар 10—30 мең иҫәпләнеп, ата ҡорттар бөтөнләй булмай.

Күстә ҡорттар һаны, уларҙың йәш айырмалылығы һәм физиологик торошо даими көйөнсә һаҡланмай. Яҙ һәм йәй дауамында эшсе ҡорттарҙың бер нисә (уртаса 6—7) быуыны алмашына — ҡарт ҡорттар үлә һәм йәштәре сыға. Әгәр яҡшы шарттар тыуҙырһаң, бал ҡорттары күсе сикһеҙ оҙаҡ, ҡайһылары мәңге йәшәй һәм тереклек итә ала.

Бал ҡорттары күсенең тормошон, уның балауыҙ һуҙғандағы, кәрәҙ төҙөгәндәге, бал йыйғандағы берҙәмлеген, үҙ-ара ярҙамсыллығын, архитектура һәләтлеген философтар, дәүләт эшмәкәрҙәре, ҡала төҙөүселәр өйрәнгән. Спартаға нигеҙ һалыусы Ликург үҙе төҙөгән дәүләт системаһының өлгөһө итеп бал ҡорто күсенә хас булған идеаль тәртипте алған. Ә ул тәртип нимәнән ғибәрәт һуң? Әйҙәгеҙ, умарта эсендәге һәм тышындағы бал ҡорто күсенең һәр заты, уларҙың тормошо һәм эше менән танышайыҡ.

## Инә ҡорт

Бал ҡорто ғаиләләрендә ике төрлө инә ҡорт — ҡәҙимге, һәйбәт ғаиләлә аталанған инә һәм ҡайһы бер күстәрҙә аталанмаған инә ҡорт йәшәй. Инә ҡорт эшсе һәм ата ҡорттарҙан ҙурлығы менән айырылып тора. Ул төҙөк кәүҙәле, эсе ҡанаттары аҫтынан күренеп тора. Уртаса оҙонлоғо 20—25 мм, аталанмаған инә ҡорттоң ауырлығы 180—190 миллиграмм, ә аталанғанының — 210—250, ҡайһыларыныҡы 270—280 мг.

Һәйбәт ғаиләлә, күстә бер генә инә ҡорт йәшәй. Әгәр ике инә ҡорт булһа, улар бер-берен «күрә» алмай, үҙ-ара һуғыша һәм йәше, көслөһө, ғәйрәтлеһе ғаиләлә тороп ҡала.

Умартала ул бер генә эш башҡара — йомортҡа һала. Башҡа төр ҡорттар менән сағыштырғанда, ул иң оҙон ғүмерле — 5—7 йыл йәшәй. Ләкин инә ҡорт ҡарт булған һайын, уның йомортҡа һалыу һәләте йылдан-йыл ныҡ кәмей. Алдынғы, тәжрибәле умартасылар йыш ҡына инә ҡортто бер-

ике йәшендә, ҡайһы саҡта ос йылдан һуң яңыға алмаштыра. Беренсе йәшендәге инә ҡорттар кәрәҙ күҙәнәктәренә көн һайын уртаса 1500—1800, ә яҡшылары 2000—2500 самаһы йомортҡа һала. Инә ҡорттоң бер тәүлектә һалған йомортҡаларын йыйып үлсәп ҡарағандар: уларҙың ауырлығы үҙенең ауырлығынан күпкә артып киткән.

Инә ҡорт ике төрлө йомортҡа һала: тәүгеһе — аталанған йомортҡалар, уларҙан эшсе ҡорттар һәм, әгәр ғаиләлә кәрәк икән, буласаҡ инә ҡорт тәрбиәләнә. Икенсе төрө — аталанмаған йомортҡалар, уларҙан киләсәктә ата ҡорттар үҫеп сыға. Шондай уҡ йомортҡаларҙы аталанмаған инә ҡорт та һала ала, уларҙан да шул ата (әре) ҡорттар хасил була. Буласаҡ инә ҡорт ҙур итеп яһалған инә көбөндә, ә эшсе ҡорттар кәрәҙ күҙәнәктәрендә, ата ҡорттар ҡәҙимге ҙур кәрәҙ күҙәнәктәрендә тәрбиәләнә. Ҡорт айырыу осоронда яңы йәш инә ҡорттар шул көбөлә 16 көн эсендә тәрбиәләнеп, үҫеп сығалар. Айырма шунда: буласаҡ инә ҡорттоң ҡарышлауығы 5 көн үҫеш осоронда сифатлы инә ҡорт һөтө менән генә туҡлана, ә эшсе ҡорттоң ҡарышлауығына был һөт 6 көндөң тәүге өс көнөндә генә ашатыла, ҡалған өс көнөндә уға һитә һәм бал ҡатыштырып әҙерләнгән аҙыҡ бирәләр. Әре ҡорттоң ҡарышлауығына 7 көндөң өс көнөндә һөт, дүрт көнөндә бал ҡатыш һитә аҙыҡ бирелә.

Умартасы ҡарт инә ҡорттарҙы алмаштырмаһа ла, йыл да булып торған күс айырыу осоронда күп умарталарҙа инә ҡорт алышыныуы була. Әгәр оҙаҡ йылдар инә ҡорт алмашынмаһа, ул бик ҡарт (3—4 йәш) булһа, аҙ йомортҡа һалһа йәки ауырыһа, эшсе ҡорттар үҙҙәре инәһен алмаштырып ала — ул «инәне үҙҙәре алмаштырыу» йәки «шым алыштырыу» тип атала.

Бал ҡорто ғаиләһендә инә ҡапыл юғалһа йәки үлһә, ҡорттар йәш бала ҡорт араһынан үҫеп килгән 1—2 тәүлек йәшәгән ҡарышлауыҡты һайлап, шуларҙан яңы инә ҡорт көбө, һуңынан инә үҫтереп сығаралар.

Йәш инә ҡорт һауала бер нисә (6—8) ата ҡорт менән осрашып, аталана һәм шул аталаныу үҙ ғүмерендә йомортҡа һалырға етә. Яңы инә ҡортто йәш тәрбиәләүсе ҡорттар, йәғни ҡарап йөрөтөүселәр була, уларҙың һаны 10—12-гә етә. Инә ҡортто ашаталар, уға гел сифатлы инә ҡорт һөтө бирәләр, көүҙәһен таҙарталар, «ялайҙар-һыйпайҙар». Йәштәре үтеү менән, был «свита»ны икенсе йәш ҡорттар алыштыра.

Инә ҡорттоң ҡаяуы булһа ла, кешене саҡмай, уны икенсе инә менән һуғышҡанда ғына ҡуллана.

## Эшсе корттар



*Эшсе корттоң тышҡы күренеше*

Эшсе корттар — үҫешеп етмәгән инә затлы корттар ул. Әгәр инә корттоң енес ағзалары, биҙҙәре бик яҡшы үҫешкән булһа, эшсе корттар тураһында улай тип әйтеп булмай. Енес ағзалары, биҙҙәре үҫеп етмәгәнлектән, был корттар ғаиләлә төрлө ҡара эш башҡаралар. Буйҙары 12—14 мм һәм ауырлығы 100—110 мг булһа ла, уларҙың эшләмәгән эше юҡ. Яңы ғына тыуған эш корто үҙе сыҡҡан урынды, йәғни кәрәҙ күҙәнәген таҙарта, «ялай», шымарта. Шул кәрәҙ күҙәнәктәрендә улар 21 көн тәрбиәләнеп, үҫеп сыға. Һуңынан был корттар йәш бала кортто тәрбиәләй башлайҙар, ашаталар, инә корт һөтө бирәләр. Тыуғандан һуң 12—18 көн үтеүгә балауыҙ айырып сығарыу биҙҙәре көсәйеп эшләй башлай. Шул осорҙа эшсе корттар үҙ ояһында балауыҙҙан кәрәҙҙәр төҙөй. 20 көнлөк булғас, умартанан сығып, ситкә оса башлайҙар: һыу, бал һуты, сәскә һеркәһе, корт елеме ташыуға ҡушылалар. Бер төркөм эшсе корттар умартаның кейәһендә һаҡсы «вазифаһын» башҡара, ҡарауыллай. Улар сит кортто, икенсе умартанан килгәндәрҙе индермәйҙәр. Ҡайһы саҡта сит корт та ят умартаға ингеләй. Әгәр улар «күстәнәс» менән килһә, йәғни бал бөрләтәүҙәре тулы булһа, керетәләр.

Йәй көндәре бик күп эшләп, эшсе корттарҙың ғүмере ҡыҫҡа була — бөтәһе 30—45 көн. Ошондай аҙ ғына ғүмерендә улар ни бары 7—8 грамм бал һуты йыя, бал иҫәбенә күсергәндә, 4 грамм өлгөргән бал була. Беҙгә аҙ тойолһа ла, корт өсөн ул ҙур эш.

Йәйгеһен берәй ғаиләлә оҙаҡ ҡына инә корт булмаһа, ә эшсе корттар йәш бала корт — ҡарышлауыҡтар юҡлыҡтан, яңы инә корт сығара алмағанға, тәрбиәләүсе корттар умарта эсендәге эшсе корттарҙы бик һәйбәт, инә кортто ашатҡан кеүек, сифатлы аҙыҡ менән ашата башлайҙар. Һөҙөмтәлә инә корт һөтө менән яҡшы туҡланған эшсе корттарҙың енес ағзалары, инәлек биҙҙәре бер аҙ үҫешә һәм улар кәрәҙ күҙәнәктәренә аталанмаған йомортҡа һала башлайҙар. Уларҙан әрә корттар үҫеп сыға. Бындай ғаиләне корттар төҙәтә

алмай, умартасының ҡатнашлығы кэрэк. Ваҡытында тоҙэтеү саралары күрелмэһэ, инэ ҡорт булмағас, ҡорттар һаны күпкэ комей һэм ғаилэ улэ.

Эшсе ҡорттар есөн иң ауыр эш — бала ҡорттарҙы торбиэлэу һом шэкэр сиробын, шэрбэтен эшкэртеү. Кеҙ, август аҙаҡтарында — сентябрҙэ донъяға килгэн эшсе ҡорттар, ҡышты ҡышлап, барлығы 6 –7 ай йэшэйҙэр ҙэ яҙға үлэлэр. Бар ҡорттар ҙа мөмкин тиклем һауаға сығып, яланда үлэ. Ҡорт торло сэбэптэр менэн умарта эсендэ үлһэ (рамдар араһына ҡыҫыла йэки умартасы яңылыш ҡыҫа), ударҙы һэм башҡа тор ҡыйҙы, ауырыу ҡарышлауыҡтарҙы ситкэ. умартанан тыпгка сығарып ташлайҙар. Таҙартыусы ҡорттар умартаның төбен «һсперсп» ҡуя.

Ҡорттар үҙҙэрен һэм умарта ояһын һаҡлау инстинкты менэн ксшснс лэ, хайуандарҙы ла саға. Лэкин саҡҡандан һуң ул ксшс тонснэн ҡаяуын ала алмай, уның менэн эске ағзалары ла килсп сыға. Шуға күрэ ҡорт, йэрохэтлэнеп, бер-ике сэғэт ˙плонгондэн һуң үлэ.

## Ата (эре) корттар

**Бып ҡорттарҙы** һоро йэки эре ҡорттар тип йөрөтэлэр. Кэроҙ **Күҙонэктөрендо 24 КӨВДӘ** үҫсп сыға улар. Оҙонлоғо уртаса 15—17 мм, a иу!.флығы 200—220 мг самаһы була. Эре ҡорттар **йойгеһен, корт айырған осорҙа,** бср гснэ эш баигкара — инэ **корт гарҙы аталандыра,** умарта ˙ксндо ғаилэлэ бапгка бср ниндэй ҙо ип **бшгпрмайҙар, Бал** күплоп килһо, эшсе ҡортгар ата **корттарға иг˙гйовр итмэй, улар йвй буйы** бал ашап тик яталар.

Тобигэттэн **бал килеү кэмеһө,** эшсе корттар уларҙы умар˙танан ҡыуа **башлай. Бигерөк** то бал һуты йыйыу тамамланһм, эшсе **корттар уларҙы аяуһыҙ «тукмай»,** канаттарын өҙгөлэп, **ипгтарын КЫҒКЫП** коу:рлорсн йэрэхэтлэндереп, умартанан сығарып **ташлайҙар.** Был күренеште йой аҙағында, көҙ көндэрендэ кұртсрго момкин. Ундай эрэмтамаҡтар ҡышҡылыкка ҡорттар **ӨСӨН** һис то кэрэкмэй. Бына ни.ндэй фажиғэ, ауыр яҙмыш кото орс ҡорттарҙы. Бал ҡорттары йыл ойлэнэһенэ бер мил**ЛИГрамм** балды ла бушҡа ҡулланмай, шуға ла умарталағы **аҙыҡты** кометмэү маҡсатында «эрэмтамаҡ» ҡорттар ҡыуыла ла инде. Был ҡорттар ҡаяуы булмағанға **үҙҙэрен** бер нисек тэ яклай алмайҙар.

Иноһеҙ, **көсһөҙ** ғаилэлэрҙэ эрс ҡорттар ҡыуылмай ҡала, шуға ла был күстэрҙэ ата ҡорттар ҡышлап сығыуы ихтимал. Әлбиттэ, был хэл умартасыға ҡыуаныс түтел: һэйбот

ғиңәләрҙә кышкылыкка ата корттар калмай. Кыш үткәс, ...ч бал корто ғаиләһе яңынан әре корттар сығарып ала (май пюнь айҙары).

Ныш лСглонойсно бал корто ғаиләһе үҙенең ошондай тәбиғи, ... өммә ғәҙел биологик закондары һәм үҙенсәлектәре мснән йәшәй

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... күп кенә халыктарҙа элск-элсктән бал корто егәрлелек, теүәллек, үҙ ғаиләһенә сикһеҙ бирелгәнлек билдәһе булып һаналған;

... тэбиғэттә бал йыйыусы бал корттарынан тыш уларҙың якын «кәрҙәштәре» — яңғыҙак корттар ҙа була. Улар араһында — мегахилдар, мелиттар, мелиттургтар, евцерҙар, анцрендар, рофиттар, номиҙар һэм башкалар бар. Ә Рэсэй ерендә йәшәүсе бындай корттар 200 терҙән ашыу иҫәпләнэ;

... бал корттары — үҙ ояларының һаксылары уғры корттарҙан «үткэреү кағыҙы» һорап тормайҙар, ә шунда ук уларҙы, теләһә ниндәй башка ғаилә корттарын таныған һымак, еҫенән танып белэләр. һәр бер бал корто ғаиләһенең үҙенсң генә үҙенсэлекле еҫе була;

... инә корт ата (әре) корт менән барлығы бер генә гапкыр аталана, уның орлоғон махсус урында һаклай һом үҙенә касан кәрәк, шул сакта корттар күкәйҙэрен шаландырыу есөн файҙалана;

... инә корт карышлауығы йәшәүенең 5 көне эсендә ҙурлыкка 3 мең тапкырға үҫә, ә эш корто — 1,5 мең тапкырға;

... инэ корт үҙенең нәҫелдәш корттарына карағанда 50 60 тапкырға оҙағырак йәшәй;

... ино корт йэйен тэүлеген 2000-гә тиклем, э иң күбендә 3500-гә кәҙәр йомортка һалыуға һәләтле. Был йоморткаларҙың ауырлығы инә корттоң үҙенең ауырлығынан ике тапкырҙан да ашыуыракка артып китә;

... әре корттар, хайуандар донъяһындағы башка ир затлы вәкилдәрҙән айырмалы рәүештә, ифрат дуҫтарса монэсәбәтлеләр. Уларҙың үҙ-ара «көрмәкләшеп һуғышыу» осрағын бср гена умартасы ла күргәне юк әле;

... үҙҙәренең тәбиғәте буйынса космополит булған оре корттар ниндәй ҙә булһа кәрҙәшлек сиген белмәйҙәр һом теләһә ниндәй бал корто ғаиләһенә лә иркенләп

барып инә алалар, үҙҙәрен «ойгә» ҡайтып ингән һымаҡ итеп тоялар, күрше умарталыҡҡа ла шундай уҡ мөнәсәбәттә булалар;

... топ бал йыйыуҙың тамамланыуының беренсе һәм иң дөрөҫ билдәһе булып ҡорттарҙың умартанан әрс ҡорттарҙы туҡмап ҡыуып сығарыуы һанала.

# БАЛ ҠОРТОНОҢ АНАТОМИЯҺЫ

## Бал ҡортоноң төп төҙөлөшө

Бал йыйыусы бал ҡорто бөжәктәр класына инә һәм үҙенең төҙөлөшө буйынса башҡа бөжәктәрҙән айырылып тора. Бал ҡортоноң тәне ос өлөшкә — башҡа, түшкә һәм ҡорһаҡ өлөштәренә бүленә, был ағзалар бер-береһе менән һығылмалы итеп тоташҡан.

Бал ҡортоноң башында биш күҙ урынлашҡан: икәүһе ҡатмарлы һәм өсәүһе ябай. Ябай күҙҙәре ярҙамында бал ҡорто яҡын (1—2 см) аралыҡтағы әйберҙәрҙе танып белә һәм умарталы, сәскәләрҙә эш иткәндә йүнәлеш ала, тип иҫәпләйҙәр. Улар таң атыуы һәм ҡараңғы төшөүе тураһында сигнал бирә. Ҡатмарлы күҙҙәре менән бал ҡорто алыҫта урынлашҡан әйберҙәрҙе айырып таный. Ябай күҙҙәр ҡатмарлы күҙҙәрҙең үҙ эшен камилыраҡ үтәүенә булышлыҡ итә. Ҡорттарға төҫлө күреү хас, улар аҡ, зәңгәр, күкһел йәшел, миләүшә төҫ, ҡарағусҡыл ҡыҙыл, һары төҫтәрҙе яҡшы айыра, шулай уҡ кешенең ябай күҙенә күренмәй торған ҡояштың ультрафиолет нурҙарын тоя. Ҡыҙыл һәм ҡара төҫтәрҙе айырмай, шулай уҡ күкһел йәшел төҫтө һоро төҫ тип ҡабул итә, «терегөмөш» төҫөн күкһел зәңгәр итеп күрә (мәк сәскәһе бал ҡорто өсөн ҡыҙыл түгел, ә «ультрафиолет» төҫтә, аҡ сәскәләр ҡорттарға төҫлө булып күренә, сөнки улар ҡояш яҡтылығынан ультрафиолет нурҙарҙы үткәрәләр).

Һиҙеү һәм тойоу ағзалары бал ҡорттарының мыйыҡсаларында йәки «антенналары»нда урынлашҡан. Ҡорттар еҫле әйберҙәрҙе 1:500 сағыштырмаһында айырып тоя һәм кеше тоймаған еҫтәрҙе һиҙә. Шуға ла бал ҡорттары иң һиҙгер, нервы системаһы нык үҫешкән һәм аҡлы бөжәк булып иҫәпләнә. Умартасынан, кешенән сыҡҡан араҡы-шарап эсемлектәре, тәмәке еҫен, одеколон, духи, лосьон, төрлө крем, майҙар, шулай уҡ бензин, мазут, солярка еҫтәрен яратмай.




*Бал ҡортоноң тән төҙөлөшө:*
*1 — баш; 2 — мыйыҡсалар; 3 — ҡатмарлы күҙҙәр; 4 — өҫкө ияктар («тештәр»); 5 — морон; 6, 7, 8 — алғы, урта һәм артҡы аяҡтар; 9 — алғы ҡанат; 10 — артҡы ҡанат; 11 — балдаҡтар, ҡорһаҡтың алты сегменты; 12 — түш; 13 — ҡорһаҡ.*

Бигерәк тә кешенән, хайуандан тир еҫе килеп торһа, ҡорттар ҡуҙғый һәм саға башлай. Улар шулай уҡ үҙҙәренең ағыуы еҫен яратмай һәм ул еҫ сығыу менән, кешене саҡҡас, тағы ла сағыу — үҙҙәрен яҡлау инстинкты көсәйә. Умартаның кейо янындағы һаҡсы бал ҡорттары үҙҙәренең мыйыҡсалары менән һәр осоп ҡайтҡан бал ҡортон «еҫкәп» үткәрә, үҙ ҡорттарын сит ҡорттарҙан яҡшы айыра.

Тәм тойоу ағзалары бал ҡортоноң нервылары үткән ауыҙы эсендә, мыйыҡсаларында һәм аяҡтарында урынлашҡан. 4 процентлы шәкәр шәрбәте бал ҡорттарында «тәм» тойоу тойғоһо уятмай һәм улар унан баш тарталар, асығыуҙы артығыраҡ күрәләр; улар үтә тәмленән дә баш тарталар. Бал һутында 40-тан алып 70 процентҡа тиклем шәкәре булған сәскәләргә ихлас ҡунаҡлайҙар. Бал ҡорттары морондары менән үҫемлектәрҙең һутын һәм балауыҙ күҙәнәктәренән бал һура. Тәм тойоу ағзалары бал ҡорттарына тәмлене, әсене, ҡырҡыуҙы һәм тоҙлоно айыра белергә булышлыҡ итә.

Ҡорттарҙың ваҡытты тойоу тойғоһо ныҡ үҫешкән. Улар сәскә атыусы үҫемлектәргә бал һуты һәм һеркә алып була торған ваҡытта ғына киләләр. Күҙәтеүҙәр шуны күрһәтте: ҡорттар ҡояш хәрәкәтенә, тәбиғәт шарттарына һәм ҡайһы урында булыуға бәйләнешһеҙ рәүештә ваҡытты тойоу һәм үҙҙәренең эш-хәрәкәтен көйләү тойғоһона эйә.

Иштеү ағзалары бал ҡорттарында кж тип иҫәпләнде. Умартасы, ғалим-тикшеренеүсе Е.К.Еськов уларҙа ҡатмарлы күҙҙәре менэн баштың арткы йейе араһында ишетеү ағзаһы булып хеҙмәт итеүсе ишетеү ҡылсалары булыуын асыкланы. Бал ҡорто оҫкө яңаҡтары ярҙамында күҙәнәктәрҙең өҫкө япмаһын кимерэ, аҙык өсөн һитәне ыштый, балауыҙҙы кимереп йомшарта. Өҫкө яңаҡтар һаҡланыу һәм бөжэктәргә һөжүм итеү ҡоралы булып хеҙмәт итә.

Башта нервылар системаһының мөһим өлөшө -- баш мейеһе бар. Түш бер-береһенә нык итеп тоташкан дүрт сегменттан, йәғни балдаҡтарҙан (склериттарҙан) тора. Бал ҡортоноң түшенэ аҫтан өс пар аяҡтар, ә өҫтән ике пар ҡанаттар тоташҡан. Ҡорттар якшы осоу һэлэтенэ эйә. Уларҙың осоу тиҙлеге үтә юғары булыу мөмкин. Эшсе ҡорттар йөкһөҙ саҡта сәғәтенә 60—65 км, э йек менэн 20—30 км оса, өс минутта улар тиҙлекте 1 километрға тиклем үҫтерә, осоу алыҫлығы 3—4 километрға етә, ҡорт күсс 20—25 километрға тиклем китэ, о осоу бер сәғәт тирәһе дауам итэ. Бал ҡорто һауала үҙ массаһының яртыһы тиерлек ауырлыҡтағы йөктө (бал һутын, һеркәс) күтәреп оса ала.

Алғы аяҡтарында мыйыҡсаларын таҙартыу өсөн ҡулайламалары бар. Эшсе ҡорттарҙың арткы аяҡтарында бәләкэй генэ Кәрзиндәр (башҡа кылсалар менэн уратып алынған уйпаттар) урынлашкан, уларға сәскәләрҙең һеркәһе йыйыла. Инэ корттоң һом һоро ҡорттарҙың кәрзиндәре булмай.

Ҡорһаҡ асыҡ ҡына айырып күрерлек алты балдаҡтан тора. Һәр ҡорһаҡ балдағы ярым балдаҡтарҙан ҡоролған. Инә ҡорттоң һом ·мнсе ҡорттоң ҡорһағының һуңғы балдаҡтары аҫтында ҡаяу аппараты урынлашҡан. Ҡорһаҡ бүлегендә эске ағзалар тупланған.

## Эске ағзаларҙың төҙөлошө

Аҙыкты эшкәртеү ағзалары. Аҙыкты эшкәртеү һәм һендереү эсәктэр эсендә башҡарыла, ә был эсэктәр алғы, урта һәм арткы бүлектәрҙэн тора. Алғы бүлек йотҡолоҡтан, үңэстэн — аҙык үтеү юлынан, бал бөрләтэүенэн — 45 миллиграмға тиклем бал һуты һыйҙыра алырлыҡ моҡсайҙан тора.

Ҡышлау осоронда ҡорттар бөтөнләйгә бушанып ҡалмай, йыуан эсэктә 40 миллиграмға тиклем тиҙэк туплана. Яҙҙан алып көҙгә тиклем бал ҡорттары умартанан тышта, һауала бушана.

**Кян ЭЙлэнеү ағзалары.** Бал ҡорттарының ҡан йөрөү системаһы мбык түгсл, аортанан һәм йорәктән — арҡаның ҡорһаҡ ...до урынлашкан биш камералы тамырҙарҙан тора. Ҡан һәм лимфа функцияһын шыйыҡ фазанан (плазманан) һәм гемоцитарҙан торған гемолимфа үтәй. Гемолимфа туклыклы мнтдолорҙе бето тән буйынса тарата һәм аҡһымдың тарҡалыу иролукттарын йыйып ала. Өлкон ҡорттоң йорәге ... ссо тибә: **балауыҙҙа** йәки сәскәлә тыныс ҡына ултырғанда минутына **65—70 тапҡыр ҡыҫҡара,** хәрәкәттә саҡта — 100 тапкыр, э оскан саҡта — 150 тапҡыр.

**Тын алыу** ағзалары яҡшы үҫешкән, тын алыу көпшәһенән, һауа тоҡтарынан һәм тын алғыстарҙан (стигмаларҙан) — түштә һәм ҡорһаҡтың ян-яҡ өлөштәрендә урынлашҡан тишектәрҙән б|ш.

**Үрсеү** органдары инә ҡорттарҙа һәм һоро ҡорттарҙа яҡшы үҫешкән. **Эшсе** ҡорттарҙың енес ағзалары оҡшаштар, инә ҡорттоң енес ағзаһын хәтерләтә, әммә үҫешкән түгел.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... бал ҡорто оскан саҡта бер секундта 440 тапҡыр **ҡанатын** ҡаға;

... **100** мг ауырлыҡтағы бал ҡорто оскан саҡта сәғәтенә 10 мг-ға тиклем бал һуты ҡуллана;

... бср осоуҙа бал ҡорто **50—60** мг-ға тиклсм бал **һуты** килтерергә мөмкин, э ҡорт күсе кесөргәнешле эшләгәндә көнонә уны **10—12** килограмға тиклем йыя ала;

... ҡытыраш йөҙлө әйбер өҫтөнэн бал корто үҙенең **ауырлығынан** 20 тапҡырға ауырыраҡ йөктө тартырға **һәләтле** (ат үҙенең ауырлығына тиң **йөктө** тарта ала);

... бал ҡорто күсе **5—6** килограмға тиклем ауырлыҡта булырға мөмкин. Ул **50—60** мең ҡорттан тора, улар҆ҙың бал бөрләтәүендә **2—3** килограмм балы була. **Йонсоу,** насар көндәр торғанда, бал ҡорттары үҙенең **һмслык** балы менән 8 көн буйына туҡлана ала;

... бал ҡорто умартанан 8 километрға тиклем алыҫлыҡка осоп китә һәм кирс ҡайтыу юлын таба ала. Бал ҡортоноң файҙалы осошо радиусын 2 км тип **иҫәпләйҙәр,** был иһә 1256 гсктарға тиң.

# БАЛ ҠОРТО ОЯҺЫ ҺӘМ УНЫҢ МИКРОКЛИМАТЫ

Тобиғи шарттарҙа бал ҡорттары ағас тсыуыштарында, ҡая тишсктэрендә, башка тыштан ҡурҡынысһыҙ урындарҙа йәшәй. Уларҙың ояһы вертикаль урынлашҡан бер нисә балауыҙ **кәрәҙенән** тора, ғәҙәттә бер-береһенән 12 мм аралыҡ менән **сикләшә,** ағас ҡыуышында йэки ҡая эсендэ булһа, өҫ яктан якшылап нығытып ҡуйыла. Ҡырмыҫкаларҙан, иңкештәрҙән, һағыҙаҡтарҙан айырмалы рәүештә, вертикаль кәроҙҙәрҙе тәбиғи материалдан, шулай ук кәрәҙле рам уртаһынан горизонталь урынлашҡан ике рәтле **күҙәнәктәрҙән** төҙеү — бал ҡорттарына ғына хас.

Бал ҡорттары ояһы — бал ҡорттары торлағындағы бушлыҡ, улар үҙҙәре умартала балауыҙҙан ҡороп бал ҡорто ғаилоһен урынлаштыра торған урын ул.

Хәҙерге заман умарталарында бал ҡорто ғаиләһенең ояһы ҡәтғи рәүештә вертикаль урынлашҡан күсермәле рамдарҙағы балауыҙ кәрәҙенэн тора. Оя рамдары үрсемде үҫтереү, шулай ук бал һәм һитәне йыйыу, һаҡлау өсөн кәрәк.

Кәрэҙле рамдар умартала кейәгә ҡарата ҡабырғаһы менән, йоғни умартаның алғы һәм артҡы стеналарына ҡарата перпсндикуляр ҡуйыла.

**Кврвззәр** араһында буш урындар, бал ҡорттарының йөрөү **юлдары** — урамдар ҡалдырыла. Уларҙың киңлеге 12—13 мм тошкил ито (был иһә ике ҡорт бейеклегенә тигеҙ тиерлек, улар бср-бсрсһено теймәй үтеп йөрейҙәр). Ә ике оя кәрәҙе **араһындағы,** йоғни бер рамдың уртаһынан күрше рамдың уртаһына тиклсмгс аралыҡ 37—38 мм була. Үрсемде урынлаштырыу урынында кәрәҙҙең ҡалынлығы 24—25 миллиметрға тиң, о унын юғары елөшөндэ, өҫтәрәк, корттар бал өсөн **күҙәнәктәрҙе** оҙонораҡ итеп яһай.

Бал ҡорттары ғәҙәттә **кәрәҙҙәрҙең** юғары өлөшөндә бал йыя. Уны ашауға ҡарап үрсем һаны арта бара. Бер рамды икенсеһенән 12 миллиметрҙан күберәк аралыҡка шылдырып күсергән хэлдә ҡорттар юғары күҙәнәктәрҙе бик ныҡ һиҙелерлек итеп оҙонайта. Ошо күҙәнәктәрҙе бал күҙәнәктәре тип йөрөтәләр. Кәрәҙ рамдарында бал һәм үрсем араһында бер ни тиклем һандағы күҙәнәктәр аҡһым аҙығы — һитэ менән тултырыла.

Яҙын һәм йәйен аталанған инәле бал ҡорто ғаиләһендә үрсемле һәм аҙыҡлы кәрәҙҙәр билдәле бер тәртиптә урынлаша. Үрсем (йоморткалар, ҡарышлауыҡтар, ҡурсаҡтар) ояның уртаһында, елләтеү шарттары якшыраҡ булған кейәгә яҡыныраҡ

урынлаштырыла. Үрсемде уратып, һитә, унан бал була. Бал һаклығын былай урынлаштырыу уның менән яҡшыраҡ эш итсү уғры (ҡараҡ) бал ҡорттарынан, һағыҙаҡтарҙан һәм башҡа дошмандарҙан яҡшыраҡ һаҡлау мөмкинселеген бирә. Ләкин бал һутын һәм һеркәне күпләп килтергән осорҙа, әгәр ҙә ҡорттар ояһын кәрәҙҙәр менән ваҡытында киңәйтмәһәң, улар бөтә буш торған күҙәнәктәрҙе лә, хатта үрсемдәрҙән буша-ғандарын да бал менән тултырасаҡ.

Температура режимы. Бал ҡорто ғаиләһенең имен-һау йәшәүе өсөн эш ҡорттары умарта эсендә температураны һәм дымлылыҡты билдәле кимәлдә тота. Ояның үрсем өлөшөндә, ҡарышлауыҡтар һәм ҡурсаҡтар үҫешә торған ерҙә, даими рәүештә 34, 35 градус йылылыҡ тоторға кәрәк, сөнки ҡорттарҙың 30-ҙан алып 37 градусҡа тиклемге йылы температурала ғына үҫешә алыуы билдәле.

Ғаилә ояһындағы һауа температураһының һиҙелерлек үҙгәреүе ҙур зыян килтерә, мәҫәлән, әгәр ҙә үрсем зонаһында температура +34 градустан түбән төшһә, йоғошло ауырыуҙар барлыҡҡа килергә мөмкин. Һауа көслөрәк һыуынһа, аскосфероз — эзбизлы (аҡбур) үрсем, бәшмәк ауырыуы киүек сирҙәр тарала. Шуның өсөн һеҙгә, әле генә эш башлаусы йәш һәүәҫкәр умартасыларға бигерәк тә яҙын бал ҡорттары ояһын ваҡытһыҙ, бик иртә киңәйтеү менән һәм үрсем зонаһын ояның үрсем өлөшөнә яһалма балауыҙ ҡуйыу менән бүлгеләргә ярамай, сөнки бал ҡорто «балалары»ның — үрсемдең температура режимы боҙоласаҡ. Киңәйтеү эшен әкренләп, ғаилә үҫешеүен күҙәтеп һәм ныҡлы йылы көндәр урынлашыуға ҡарап үткәрәләр.

Үрсем тәрбиәләүсе ғаиләлә ҡорттар тәненең оптималь температураһы +34—36 градус була, йәғни үҙгәреш 2 градус сикһендә генә тирбәлергә мөмкин. Асыҡ һауала ҡорт тәненең температураһы, тышҡы тирә-йүн мөхиттең температураһына бәйләнешле, 13 градустан 44 градусҡа тиклем тирбәлә. Ҡорттоң ояла булмаған саҡтағы, мәҫәлән, бал һуты һәм сәскә һеркәһе йыйғандағы температураһы +35—38 градусҡа тиклем күтәрелә, йә иһә әйләнә-тирәләге һауа температураһынан 8—10 градусҡа юғары була.

**Һауаның дымлылығы.** Ул да шулай уҡ ҡорттарҙың үҙҙәре тарафынан көйләнә. Ояла һауаның дымлылығы, ғаиләнең көсөнә, тәүлектең, миҙгелдең ваҡытына, һауа торошона бәйле рәүештә, 25-тән алып 100 процентҡа тиклем үҙгәреп тора. Һауаның сағыштырмаса иң дымлы урыны (85—90 процент) [illegible] йомортҡалы һәм асыҡ үрсемле урынына тура килә.

Ҡарышлауыҡтар күҙәнәктәрҙән тишеп сыҡһын осон сағыштырмаса оптималь дымлылыҡ — 90—95 процент.

Иң төп бал йыйыу ваҡытында, шыйыҡ һут умартаға күпләп килтерелгәндә ояла һауаның сағыштырмаса дымлылығы 50—60 процент кимәлендә, ә миҙгелдең башҡа осоронда 70—80 процент кимәлендә тотола. Артыҡ дымлылыҡты ҡорттар оянан әүҙем елләтеү юлы менән ҡыуып сығара.

Шуны әйтергә кәрәк: был — бик мөһим мәсьәлә. Сөнки һуңғы осорҙа бал ҡорттарында киң таралған торло ауырыуҙар ошо талаптарҙың үтәлмәүе менән бәйләнгән. Әгәр ҙә умарта ояһында тейешле температура һәм дымлылыҡты һаҡлаһағыҙ, мул бал алыуға өлгәшерһегеҙ.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... тән температураһы 15 градусҡа тиклем түбәнәйгәндә, бал ҡорто осоуын туҡтата;

... бал ҡортоноң тән температураһы +13, +14 градус булһа (бик ауыр, ҡурҡыныс мәл), уның хәле ауырлаша, быңдай температурала ул хәрәкәт итеүҙән туҡтай;

... тән температураһы 8—9 градус булһа, ҡорт хәрәкәтләнеү һәләтлеген юғалта һәм үлем хәленә килә;

... тән температураһы 8 градус һәм унан да түбән төшһә, ҡорттар ҡатып ҡала;

... әгәр ҙә ҡатып ҡалған ҡорттоң тән температураһы ике көн эсендә 2 градустан түбән төшмәһә, ул йылытҡан ваҡытта терелә;

... әгәр ояның үрсем өлөшөндә температура +32 градусҡа тиклем түбәнәйһә, бал ҡортоноң үҫеше 2—3 тәүлеккә тиклем тотҡарлана һәм ҡорттар зәғиф ҡанатлы булып сығалар;

... үрсем өлөшөндә температура +27 градусҡа тиклем һыуынһа, сыҡҡан ҡорттар бөтәһе лә шунда уҡ һәләк була;

... ояның температураһы 38—39 градусҡа тиклем күтәрелһә, артыҡ йылылыҡтан үрсем һәләк була;

... ҡышҡы осорҙа ояла күстең үҙәк өлөшөндә, ҡорттар рамдар араһында тупланған ерҙә, температура 24 градус самаһы була;

... бер килограмм бал ҡулланып, ҡорттар яҡынса 1450 грамм углекислота һәм пар формаһында 500 грамм һыу бүлеп сығара. Уңайлы ҡышлатыу урындарында, умарта баҙында ҡорт ғаиләһе ҡышҡы осорҙа 10 кило-

грамм самаһы бал файҙалана. Был иһә 14,5—17,4 кг углекислый газ һәм 5—6 кг һыу барлыҡҡа килтерә;

... углекислота ла, һыу ҙа оянан даими сығарып торола. Һөҙөмтәлә ояла тейешле дымлылыҡ, углекислый газ һәм кислород ҡушымтаһы булдырыла;

... ояла һауаның дымлылығы 50 процент булһа, бал ҡортоноң йомортҡалары кибә, ә дымлылыҡ 95—100 процент булһа, уларҙың үлеүе күҙәтелә.

## БАЛАУЫҘ БҮЛЕП СЫҒАРЫУ ҺӘМ КӘРӘҘ ТӨҘӨҮ

Бал ҡорто ғаиләһенең көн итмеше балауыҙ кәрәҙенән ҡорттар тарафынан оя яһауҙан башлана һәм бөтә ғүмере шуның менән нығыҙ бәйләнгән. Бал ҡортоноң балауыҙы уның эсендә урынлашҡан айырым биҙҙәр тарафынан бүлеп сығарыла.

Балауыҙ — бал ҡорттарының биҙҙәре бүлеп сығарған матдә, ҡорттарға төҙөлош материалы булып хеҙмәт итә. Кәрәҙ төҙөү өсөн кәрәкле балауыҙҙы башлыса 12—18 көнлөк йәш ҡорттар бүлә, биҙҙәрҙең нығ үҫеше ҡорттоң шул ваҡытына тура килә. Яҙын һәм йәйен мул итеп туҡланған саҡта ҡорттарҙың эсендәге быуынсалар араһында аҫта балауыҙ бүлеүсе һигеҙ биҙ үҫешә. Балауыҙ биш мөйөшлө йоҡа ғына пластинкалар рәүешле итеп бүленә. Кәрәҙ төҙөү эшен башлағас, ҡорттар



*Ҡорттарҙың кәрәҙ төҙөү ваҡыты*

гирлянда һымаҡ тәлгәшләнеп, аяҡтары менән бер-берeһенә тотона. Улар ныҡлап тәндәре менән һыйынышҡас, температура 35 градусҡа тиклем күтәрелә, балауыҙ пластинкаһы йылынып йомшаҡлана һәм ҡорттар уларҙан кәрәҙ яһай.

Бал ҡорттарының эсендәге һуңғы дүрт ярым балдаҡтың аҫҡы яғында икешәр бәләкәй балауыҙ «көҙгөһө» — асыҡ төҫтәге биш мөйөшкә оҡшашлы хитиндың айырым өлөштәре урынлашҡан. Эске яҡтан уларға балауыҙ биҙҙәренең туҡымаһы тоташа. Мул итеп туҡланған саҡта ҡорттар шыйыҡ балауыҙ бүлеп сығара. Ҡорт «көҙгөләр»ҙән балауыҙ пластинкаларын аяҡтары менән айырып ала, балауыҙҙы көйшәгестәре — оҫкө яңаҡтары менән йомшарта һәм уны яһалып ятыусы кәрәҙгә йәбештерә. Бер кәрәҙ-күҙәнәкте яһау өсөн 6—7 ҡорттоң дөйөм ауырлығы 12—13 мг булған балауыҙ пластинкаһы стә, йәғни 13 миллиграмға яҡын балауыҙ кәрәк. Ә ул 50 балауыҙ пластинкаһы тигән һүҙ. Ә бер һоро (әре) ҡорт күҙәнәге өсөн 30 миллиграмм балауыҙ, йә иһә 120 балауыҙ пластинкаһы тотонола.

Балауыҙ тәңкәләрен — пластинкаларҙы ҡорттар ҡайһы берҙә, айырыуса төҙөлөш эштәре булмаған саҡта төшөрөп ҡалдыралар. Уларҙы умартаның төбөндә күпләп күрергә мөмкин. Ҡайһы ваҡытта ҡорттар балауыҙ тәңкәләрен рамдың бурсаларына һәм ағас түбәләргә һала, киҫәктәр итеп тығыҙлап беркетә, уларҙан йөрөү юлдары өсөн тоташтырғыстар, бәләкәй баҫмалар, оролар яһай. Был балауыҙ менән ҡорттар иртә яҙҙан ҡарышлауыҡлы күҙәнәктәрҙе — үрсемдс күплəп биклəй.

## Балауыҙ бүлеү өсөн талап ителеүсе шарттар

Умартаға бары тик яңы татлы бал һуты һәм һеркәләр килһә генә, ояла кәрәҙ төҙөү һиҙелерлек йәнләнә. Йыйым, йәғни бал йыйыу ни тиклем көслөрәк булһа, ҡорттар балауыҙҙы шул тиклем күберәк бүлә ала. Ғаиләлә аталанған үрсемле инә ҡорт булғанда, ояла йылы (яҡшы микроклимат торғанда) һәм тәбиғәттә бал йыйымы көслө мәлдә ҡорттар балауыҙ бүлә һәм кәрәҙ эшләй. Инәһе булмаған ғаиләлә кәрәҙ төҙөү туҡтап ҡала. Ғаилә күс айырыуға әҙерләнгән саҡта ла шулай уҡ кәрәҙ яһау туҡтатыла. Кәрәҙ төҙөү өсөн умартала бал һәм һитә менән мул туҡланыуҙа бик мөһим.

## Кәрәҙҙәр төҙөү

Бал корттары үҙенең кәрәҙен һәр саҡ өҫтән аҫҡа табан яһай. Береһе артынан икенсеһе урынлашып, кәрәҙҙәр ҡатмарлы оя барлыҡҡа килтерә. Әгәр ҙә ояның бөтөнлөгө боҙолһа, ҡорттар шунда уҡ биологик норманы аяҡҡа баҫтыра: өмөрәләнгән йәки алынған кәрәҙ урынына улар яңыһын төҙөй. Кәрәҙ яһау буйынса эштәрҙе тиҙләтеү һәм эшсе ҡорттар күҙәнәктәренән ныҡлы кәрәҙ алыу өсөн яһалма балауыҙ файҙаланалар. 410x260 миллиметр ҙурлыҡтағы яһалма балауыҙҙан яңы кәрәҙ төҙөү өсөн 435x300 миллиметрлы оя рамына корттар уртаса 70 грамм балауыҙ өҫтәй. Ә яһалма балауыҙҙан рамға 110—120 грамм өҫтәргә кәрәк була. Уңайлы шарттарҙа ҡорт ғаиләһе бер сезон эсендә 10-ға тиклем яңы кәрәҙ төҙөй ала, уртаса хәлле күс 12—16, ә көслө бал ҡорто ғаиләһе йәйгө осорҙа 20—24 балауыҙлы рамды тултыра ала.

Әле генә төҙөлгән кәрәҙҙәр шәкәр ҡомо кеүек аҡ төҫтә була. Әгәр ҙә инә ҡорт тиҙ арала уларға йомортҡа һалмаһа, корттар күҙәнәктәрҙе елем менән һылап ялтырата. Һөҙөмтәлә яһалма балауыҙ аҡһыл-алтын төҫкә инеп, һуңынан бер аҙ һарғылт төҫ ала.




*Кәрәҙ күҙәнәктәре:*
*I — баллы күҙәнәктәр; II — корттар үҫтереп сығарыу күҙәнәктәре; III — әре (һоро) корттар күҙәнәктәре*

## Кәрәҙ менән күҙәнәктәрҙең төрҙәре

Кәрәҙҙәрҙең төҙөлөшө бик үҙенсәлекле. Улар күҙәнәктәрҙән — геометрик тура алты мөйөштәрҙән (призмаларҙан) тора. Һәр күҙәнәктең төбөндә өсәр тигеҙ ромбик урынлашҡан.

Кәрәҙ күҙәнәге алты мөйөшлө булыу сәбәпле, һәр береһе алты күҙәнәк менән сикләшә. Күҙәнәктең төбө ос яҡлы, ул бер үк ваҡытта кәрәҙҙең ҡаршы яғындағы өс күҙәнәк төбөнөң өлөшө булып тора. 435x300 миллиметр ҙурлыҡтағы бер стандарт кәрәҙ рамы үҙ эсенә 9100-гә тиклем күҙәнәк һыйҙыра, шуларҙың 8000-гә яҡын күҙәнәге үрсем сығарыуға яраҡлы.

Бал ҡорттары күҙәнәктәрҙе өс төрлө яһай: диаметры 5,4 миллиметр һәм тәрәнлеге 11—12 миллиметр булған ваҡ күҙәнәктәр — ҡорттар үҫтереп сығарыу, бал һәм һитә һаҡлау өсөн; диаметры 6,9 һәм тәрәнлеге 14—16 миллиметр булған эре ҡорттар күҙәнәктәре — һоро ҡорттар сығарыу һәм бал һаҡлау өсөн, уларҙа ҡорттар һитә һаҡларға тырышмай. Ғәҙәттә эре ҡорттар күҙәнәктәре кәрәҙҙең аҫҡы өлөшөндә урынлаша. Күсмә күҙәнәктәрҙә дөрөҫ булмаған формалы, улар эре ҡорттарҙыҡынан бәләкәйерәк, бал күҙәнәктәре кеүек, бал һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән.

Күс айырыуға әҙерләнгәндә ҡорттар кәрәҙҙең ҡабырғаларында йәки аҫтында имән сәтләүегенең түбәсәйенә оҡшаш һауыт һымаҡ айырым күҙәнәктәр төҙөй. Был һауытты һуңынан инәлек ояһы, инә кобо тип атайҙар. Бында йәш инә ҡорт тәрбиәләп үҫтерелә.




*Күҙәнәк төрҙәре:*
*1 — эшсе ҡорт күҙәнәктәре;*
*2 — ата ҡорт күҙәнәктәре;*
*3 — дөрөҫ булмаған күҙәнәктәр*

## Кәрәҙҙәрҙең иҫкереүе

Яҙ-йәй көндәре ояла яҡынса алты быуын йәш ҡорттар тәрбиәләп сығарыла. Һәр сығарылыштан һуң күҙәнәктәрҙең төбөндә бер аҙ ҡорт тиҙәге, ә стеналарҙа ҡарышлауыҡтар [illegible] һауыт ҡабыҡтары тороп ҡала. Ҡорттар уларҙы таҙартып ала, әммә күҙәнәктәрҙән ҡорттарҙың бихисап быуыны ҡалыуы арҡаһында кәрәҙ һорғолт һәм ҡоңғорт төҫ ала. Яҙын ана ҡорт йомортҡаларын һорғолт кәрәҙҙәргә ихласыраҡ һала, ләкин ҡорттар уларҙа бәләкәй булып үҫешә һәм йәшәп китеү һәләтлеге аҙыраҡ була. Ҡоңғорт кәрәҙҙәрҙә тиҙ арала балауыҙ көйәһе күбәләктәре, ҡарышлауыҡтары үрсеп китә. Ҡоңғорт кәрәҙҙәр зарарлы ауырыуҙар таралыуға булышлыҡ итә, ҡорттар ҙа йышыраҡ айырыусан була. Шуның өсөн һеҙгә кәрәҙҙәрҙе ояла ике йыл торғандан һуң, йәғни ҡорттарҙың 10—12 быуын үҫеп сыҡҡас (иң оҙағы — өсөнсө йылға) алмаштырырға кәрәк. Иҫке кәрәҙҙәрҙе башҡаса тотонмайҙар, балауыҙға иретеп алалар.

Яңы кәрәҙҙәрҙең ауырлығы 140—150 грамм тарта. Был ауырлыҡ алты быуын ҡорт сығарғандан һуң икеләтә арта.

## Бал ҡорттары — оҫта төҙөүселәр

Бал ҡорттарының тормошонда иң ғәжәйеп нәмә — балауыҙ кәрәҙҙәре яһау. Был тәбиғи төҙөүселәрҙең техник аныҡлығы хайран ҡалдыра. Архитекторҙар бал ҡорттарының кәрәҙ төҙөлөшөнә күп тапҡыр иғтибар йүнәлтте, һәм был уларға иң яҡшы техник ҡарарҙар эҙләп табырға ярҙам итте.

Кәрәҙҙең конструкцияһы бөтә йәһәттән дә камил. Ул бал ҡорттарынан төҙөлөш материалын бик әҙ талап итә, ләкин кәрәҙ иҫ киткес ныҡ һәм күп һыйҙырышлы була. Күҙәнәктәрҙең алты яҡлы формаһы ҡорттарға майҙанды яҡшыраҡ файҙаланырға мөмкинлек бирә. Бөтә бөжәктәрҙең тормошо һаҡсыллыҡ ҡануынына буйһонған. Һәм бары тик бал йыйыусы ҡорттар ғына шундай юғарылыҡҡа күтәрелә алған. Иңкештәрҙең һәм [illegible]ҙаҡтарҙың күҙәнәге түңәрәк, һәм шуның өсөн уларҙың араһында буш ҡалған урын күп була. Бал ҡорттарында иһә файҙаланылмаған бушлыҡ юҡ. Уларҙа, беҙҙең замандың уңайлы фатирҙарындағы кеүек, күҙәнәктәрҙең һәр стенаһы бер үк ваҡытта башҡа күҙәнәктәр өсөн дә стена булып хеҙмәт итә.

# ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... бал ҡорто **кәрәҙе** күҙәнэге тәбиғәттәге иң рациональ геометрик формалы һауыт булып тора, уны төҙөү өсон үтә аҙ һанда материал талап итеүә (ҡорттарҙың 100 күҙәнәгенә 1,3 г балауыҙ тотонола), ә теҙөлөш яғынан ныҡлығы һәм һыйҙырышлылығы буйынса уның тиңдәше юҡ;

... бал ҡорттары — «математиктар». Улар төҙөгән кәрәҙҙәр ҙурлыктарының аныҡлығы, формаларының бер ишлеге һәм дөрөҫлөгө менән айырылып тора. Улар иң рациональ геометрик форманы кәрәҙ күҙәнэгенең төбөндә түңкәрелеп ятҡан ромбиктарҙан торған өс яҡлы пирамидалы алты ҡырлы форманы һайлаған. Ошондай форма арҡаһында кәрәҙ күҙонәктәре бер-береһенә үтә лә яҡын, тығыҙ итеп урынлашҡан, **һөҙөмтәлә** төҙөлөшкә урын эҙ китә һәм был бик нескә, ватылып барыусан төҙөлөштөң иң юғары ныҡлығы тәьмин итеүә, кәрәҙҙәрҙең иң күп һыйҙырышлылығына ирешеүә (стандарт оя рамына 4 кг бал һыя) һәм уларҙы төҙөүгә балауыҙ тотоноуҙа ҡәтғи экономия яһауға өлгәшеүә. Бал ҡорто корәҙҙәре күҙәнәге формаһының рационаллеге тураһында түбэндэге факт та асыҡ һөйләй: боронғо грек ғалимдары **үҙҙәренең** ике йыллыҡ эҙләнеү иҫәпләүҙэрендә, тобиғотто материал тотоноу буйынса башҡаса даими ҡәтғи **ҙурлыҡта** булған ҡорттар күҙәнэктэренән дә экономлыраҡ һәм ныҡ һыйҙырышлыраҡ һауыт юҡ, тигән һығымтаға килеләр. Ромбиктарҙың йәйенке мөйөштәре һәр саҡ 109°28', ә ҡыҫынҡылары **70°31'-ҡа** тигеҙ;

... бал ҡорттары «скульпторҙар». Уларҙың «заказсы»һы, Красноуфимскиҙан ҡарт Урал умартасыһы Н.В.Давыдов, бал ҡорттарының балауыҙ күҙәнәктәре һәм кәрәҙҙәр төҙөүгә бәйләнешле инстинктын файҙаланып, йәйенке мөйөштәре 109°28', ҡыҫынҡылары **70°31'** булған (был **ҙурлыҡтар** кәрәҙ күҙәнәктәрендәге ромбиктар ҙурлығына тап килә) трафареттар киҫеп әҙерләй, э бал ҡорттары улар буйынса фигуралар һәм хәрефтәр йәбештерә;

... умартаны яңы урынға урынлаштырған саҡта ҡыйыш ултыртырға ярамай, сөнки ҡорттар кәрәҙҙәрҙе дөрөҫ ҡормаясаҡ. Бик аҙға ғына умартаның кейоһе яғына ауышлыҡ рөхсәт итеүә, был умартаға яуым-төшөм эләктермоу һәм ҡорттарға умартаның төбен таҙартыуҙы еңеллэштереү өсөн кәрәк;

... 'эссиэ бал һала торған быяла һауыт балдың үҙенә Квраганда 2 тапкырға, ағас һауыт — 6—8, ә тэбиғи ба' і корто күҙәнәге балдың үҙенең үлсәү массаһынан 27 тапкырға еңелерәк. Әгәр ҙэ быяланан йәки ағастан һауытты балдың ауырлығынан 20—27 тапкырға кәмерәк һыйҙырышлы итеп яһаһаң, ул сағында быларҙың һуңғыһы үҙекең ауырлығы менән уны баҫып ватасаҡ. Балауыҙ КОролмаһының ныҡлығы бал кәрәҙе күҙәнәгенең дә, короҙҙең үҙенең дә конструкцияһы менән тәьмин ителә;

... балауыҙ -- бал ҡорттарының иң ҡиммәтле төҙелөш Мвтериалы. Ысын умартасы балауыҙҙы бәләкәй генә бортоктәрҙән йыя; сөнки ҡорттар бүлеп сығарған 100 бвлауыҙ тәңкәһе, барлығы ни бары 25 мг (бер грам-.•пщ ҡырктан бер өлөшө) тарта һәм, шулай булыуға карамаҫтан, айырым умартасылар бер сезонда һәр ҡорт гаилэһснэн 2 килограмға тиклем балауыҙ алыуға өлгәшә.

## БАЛ ҠОРТТАРЫНЫҢ АҘЫҒЫ, УЛАРҘЫҢ ТУКЛАНЫУЫ

Бал корттары үҫемлектәрҙән татлы һут һәм сэскә һеркәһе йыя. Уны аҙыкка —- балға һәм һитәгә эүерелдерәләр. Ҡорт-тарға йошәү, эшләү һәм үрсеү өсөн, башка бөжәктэр һәм хайуаншдар кеүек, аҙык талап ителә. һитә аҡһымдарҙы, майҙар-ҙы, ус [сводтарҙы үҙ эсено ала. Быларҙан тыш, бал ҡортта-рына күп булмаған миҡдарҙа минераль матдәләр (тоҙҙар), витаминдар кәрәк.

Аҡһым айырым матдогә -- азотка бай, ул инэ ҡорт һөтө составына инә. Углеводтар, майҙар, минераль матдәләр, ви-таминдар ҡорттарға энергияның төп сығанағы булып хеҙмэт итә, я ҡорт органдарының бөтә эшмәкәрлеге ошо энергия иҫәбенән башкарыла. Умартаға ҡорттар татлы һуттан, һеркәнән ... һыу ҙа килтерә.

Гатлы һут — ул углеводлы аҙык, шокэрҙәрҙән (сахароза, Чкжоча, фруктоза), һыуҙан, бер аҙ күләмдә аҡһымдарҙан, МИМсраль тоҙҙарҙан ғибәрәт. һыуҙың һәм шэкәрҙәрҙең күләме үҫемлектәрҙең ботаник составына, һауа шарттарына бәйләнешле шактай үҙгәреп тора.

Гатлы һут — ул үҫемлектәр сәскэләре һәм шәрбәтлектәре бүлеп сығарған органик һәм минераль матдэлэр ҡатнашмаһынан Ториж шокәрле, тәмле шыйыкса. Бал бирә торған үҫемлек-тәрҙең күпселегенең шәрбэтлеге сәскәнең башланған ерендә

йәкиһ иң тобонда була. Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең шәрбәтлектәре булмай, ә татлы һутты сәскә туҡымаларының береһен тәшкил иткән махсус күҙәнәктәр бүлеп сығара. Мәҫәлән, йүкә сәскәләрендә татлы һут сәскә япраҡсаларының табағы тобондағе күбенсе-күбенсе таралышып урынлашҡан күҙәнәктәр тарафынан бүлеп сығарыла.

Үҫемлектәрҙә 50-нән алып 56 процентка тиклем шәкәр булған осраҡта, корттар татлы һутты ихлас, әүҙем йыя, ә шәкәр 4,25 проценттан кәм булғанда, уны алмай ҙа, йыймай ҙа. Үтә лә ҡуйы һут һылашып ятыу сәбәпле, корттарға йыйыуы ауырға төшә. Һутта шәкәрҙең юғары миҡдарҙа булыуы корттарҙың эшен ауырлаштыра. Умартаға үтә лә шыйыҡ һут — «ярым фабрикат» миҡдары 70 процент килһә, кабул итеүсе ҡорттар татлы һутты юғарыраҡ урынлашҡан бер күҙәнәктән икенсеһенә, кәрәҙ рамының оҫҡо өлөшөнә күсерә. Шулай улар бер нисә тапҡыр уны томшоҡтарына сығара һәм унан яңынан бал йыйыу бөрләтәүсенә һурып ала. Татлы һутҡа шайыҡ өҫтәп, һыуҙы айырып сығарып, ҡорттар уны балға әйләндергәнсе эшкәртә. Һәйбәт елләтелгән умартала татлы һуттан һыуҙы парландырыу биш көнгә тиклем дауам итә. Вентиляцияның кәмеүе унан һыуҙы айырыуҙы сегерме көндән ашыуға тиклем тоткарлай. 450 грамм һыуҙы кәметеү өсөн 100 грамм шәкәр тотонола. Һыуҙың миҡдары татлы һутта 20 процентҡа тиклем кәмегәс, ҡорттар күҙәнәктәрҙе өҫтөнә тиклем тулғансы бешкән бал менән тултыра ла уларҙы балауыҙ ҡапҡас менән йоҡа ғына итеп һылап-мисәтләп ҡуя.

Ҡорттар тарафынан татлы һутты, рәшә балды яңынан эшкәртеү һөҙөмтәһендә бал — виноград (глюкоза) һәм емеш (фруктоза) шәкәрҙәре ҡатнашмаһы хасил була. Бал үҙендә 17—21 процент һыу, органик кислоталар, азот һәм минераль матдәләр, витаминдар тота.

**Сәскә һеркәһе** — бал ҡорттарына ҡарышлауыҡтарҙы ашатыу өсөн кәрәкле аҡһым — витамин аҙығы ул. Сәскә һеркәһе сәскәле үҫемлектәр тарафынан һеркә япраҡтарының һеркәлектәрендә һаҡлана, һеркәне йыйған саҡта ҡорттар уға бер ни тиклем шайыҡ һәм татлы һут өҫтәй, унан оҙонсараҡ борсаҡ рәүешле йоморсалар йомарлай һәм уларҙы артҡы аяҡтарындағы махсус ҡулайламаларҙа (кәрзинләрҙә) урынлаштыра. Күп райондарҙа йәттә тип әйтәләр.

«Бал ҡортоноң наҙы бар» китабының авторы Ивний Шафиҡов былай нимәләр яҙа: «...Һеркәгә манһылған бал ҡорттышҡы ҡиәфәте менән онға буялған тирмәнсегә оҡшаш була... Һитәне ҡайһы бер райондарҙа манса тип тә йөрөтәләр»

Йоморсалар массаһы үҫемлектәрҙең ботаник составына һәм метеорологик шарттарға бәйле 8—22 миллиграмм ауырлыҡтағы, йәғни он бөртөгө кеүек ваҡ ҡына 3—4 миллион һеркә бөртөктәренән тора. Йоморсаларҙы әҙерләү өсөн ҡорт 3-тән 20 минутҡа тиклем ваҡыт сарыф итә.

Ҡорттар сәскә һеркәһен (ул төрлө төҫтә була) һитәгә әйләндерә, уны кәрәҙ күҙәнәктәренә йыйыштыра, уларҙы тығыҙлап, һәйбәтләп тултыра ла, татлы һут һәм шайыҡ менән еүешләп, консервалай. Тығыҙлап һалынған һеркә әсеүгә дусар була. Бактериялар тарафынан эшкәртелгән һөт кислотаһы һитәне боҙолоуҙан һаҡлай.

Бер ҡорт үҫеү өсөн 0,1 грамм тирәһе һитә талап ителә. Яҙғы йәйге осорҙа бер көслө ғаиләне (60—80 мең ҡортто) үҫтереүгә 6—8 килограмм һитә китә. Һитәнең — ҡорттарҙың «икенсе икмәге"нең шаҡтай өлөшө бала ҡортто, үрсемде тәрбиәләүгә, үҫтереүгә китә. Һитә етешмәгән саҡта ҡорттар ашатылыусы ҡарышлауыҡтар һанын аҙайта. Әгәр ҙә тәбиғәттән умартаға һеркә килеү туҡтап ҡалһа йәки бөтөнләй булмаһа, ул сағында инә ҡорт йыш ҡына йомортҡа һалыуҙы кәметә йәки хатта туҡтатып уҡ ҡуя. Ә үҫешеп етмәгән ҡарышлауыҡтарҙы, ояла ашарға аҙыҡ — һитә етешмәгәнлектән, ҡорттар тәрбиәләп үҫтермәй, хатта уларҙы умартанан тышҡа сығарып ташлай. Умарталыҡтарҙа ямғырлы йәйҙә ошондай хәл күҙәтелә.

Төрлө үҫемлектәрҙән йыйылған сәскә һеркәһе төрлөсә миҡдарҙа туҡлыҡлы матдәләр тота. Умартала төрлө үҫемлектәр



һеркәһе бврге ҡатыштырыла. һитәлә уртаса 20 процент тирмм мсһым бар.

Сөскә һеркәһе минсраль матдәләргә бай. Унда натрий, магний, ялюмин, крсмний, көкөрт, хлор, калий, кальций, марганец, тимер, баҡыр була. Инвертаза, каталаза, диастаза, липаза ферменттары һәм башкалар бар.

һыу — бал ҡорттарына ҡарышлауыгктарға аҙык әҙерлогондо балға оҫтәү һәм шыйыҡлатыу, ояла температураны, һауа дымлылығын яйға һалыу осөн кәрәк. Умартаға татлы һут килгән саҡта ҡорттар ғәҙәттә һыуға мохтажлыҡ кисермәй. Яҙын иһә, тобиғотто йыйым булмаған, ә үрсем күп саҡта, һыуға талап арта. Был мәлдә ҡорт ғаилэһенең һыуға ихтыяжы үрсем һанына пропорциональ рәүештә үҫә. Шуның өсон яҙ конө ҡорттарҙы ҡышлау урынынан йәки ҡар аҫтынан сығарғас, ҡорт ғаиләһе эргәһенә һәм умарталыҡ биләмәһенә сөсө һыу менән һуғарғыс ҡуялар. Хатта ике һуғарғыс ҡуйыу бик хуп, уларҙың береһенә тоҙланған һыу (1 литр һыуға аш тоҙоноң 0,01 процентлы ирстмәһе, йәғни 100 литрға 10 г) ҡойола. Ул сағында инде ҡорттар яҙ-йәй көндәре тиреҫ шыйыҡсаларында, күләүектәрҙә, малсылыҡ фермалары янында, бәҙрәфтәрҙә, бысҡы табы өйөмдәре тирэһендә минераль тоҙҙар эҙләп осоп йөромәйәсәк.

Ҡоро, эҫе көндәр торғанда, ояла температураны нисектер түбән төшөрөү, унда тейешле дымлылыҡ һаҡлау маҡсатында, ҡорттар килтерелгән һыуҙы кәрәҙҙэргә һиптереп сыға, кәрәҙҙәр күҙәнәктәренә тамсылап-тамсылап һарҡыттырып элеп ҡуя. Парланып, ул һауаны һалҡынайта, уның дымлылығын күтэрә. Яҙ көнө ҡорт ғаиләһе бер тәүлек эсендә 100—200 грамм, ҡоро һауа торғанда 400 грамдан ашыу һыу тотона.

Умартаға килтерелгән һыу шунда уҡ ҡорттар тарафынан тукланыу өсөн тотонола. һыуҙы ҡорттар запасҡа һаҡламай. Ҡыш көндәре ғәҙәттә балдағы һыу ҙа етә, улар уның менән балда барлыҡҡа килә торған кристалдарҙы, ялтырауыҡ бөртөктәрҙе еботеп аса.

Йәш умартасыларға шуны хәтерҙә тотоу мөһим: яҙын ҡорттар осон һыу балдан да ҡиммәтерәк. Бары тик һыуҙы йылытып бирергә онотмағыҙ.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?.

... ҡорттарҙы шәкәрҙәр ҡатышмаһы тоткан татлы һут шундай уҡ концентрацияла бер генә шәкәр һутына ҡарағанда нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра;

... һито составына бик күп микроэлемснттар: барий, ванадций, вольфрам, тимер, алтын, иридий, кальций, кадмий, кобальт, кремний, магний, баҡыр, молибден, мышьяҡ, аҡ ҡурғаш, палладий, платина, терегөмөш, фосфор, хлор, хром, цинк, стронций инә;

... бср кэрәҙ күҙәнәгенә 18-гә тиклем йоморса (һитә йомғағы) һыя, унда һитә массаһы 140—180 мг тэшкил ито;

... ҡорттар тарафынан йыйылған татлы һут улар тарафынан бик нығ ентекле эшкәртеү үткәргәндән һәм 40-тан алып 70 процентка тиклем һыуҙы парға әйләндереп ҡыуып сығарғандан һуң ғына балға әйлэнә. Бер кондо йыйылған 5 килограмм татлы һуттан, эшкәрткондон һуң, 1,5—2 килограмм ғына бал тороп ҡала;

... бер йыл зсендо бер бал ҡорто ғаилоһенең йэшәү һәләтлеген тәьмин итеү өсөн 80—100 кг бал (шуның 10—12 кг-ы ҡышкы мәлдә тотонола), 20—25 кг һитә һом 30 литр һыу талап ителэ.

## БАЛ ҠОРТТАРЫНЫҢ ИНСТИНКТТАРЫ

Рефлекс — бал ҡорттарының тортибе йэки тере организм Нврныларының тыштан ярһытыуға яуап биреүе ул. Шартһыҙ һәм шартлы рефлекстар була.

Шартһыҙ рефлекстар (инстинкттар) — тышҡы мөхиттең теге йэки был ярһытыуына организмдың (хайуандар һәм бөжәктәрҙең) тыумыштан булған реакцияһы. Бал ҡорттарында шартһыҙ рефлекстарға яҡын шундай хәрәкэттәр күҙәтелә:

умарта стенаһын туҡылдатыуға геүләп яуап бирәләр;

күрек менән төтон өрҙөроүгә яуап итеп, бөрләтоүҙәрен бал менон тултыралар;

- ҡырҡыу еҫтэргә (хушбый, алкоголь, тир һәм бал ҡорто ағыуы еҫе) ярһып китәләр һәм сағалар.

Шартһыҙ рефлекстарҙың тыумыштан булыуы, уларҙы ғәмэлгә ашырыу осөн өйрэтеүҙең кэрокмәүе үҙе бер үҙенсәлек булып тора. Шул уҡ ваҡытта шартһыҙ рефлекстар — тәбиғәттәге йәшәүҙе һаҡлауға ҡулайлашыу ҙа ул. Бының шулай булыуы түбәндәге миҫалда асыҡ күренэ: төтөн еҫе бал ҡорттары осон һәләкот булырын, янғын сығып, уларҙың ояһы юҡҡа сығыу ихтималлығын алдан хәбзр итә, шуның өсөн улар, иҫке оянан һаҡлыҡ аҙыҡтарын йыйып, бөрләтәүҙәрен бал менән тултыра.

Шартһыҙ рефлекстар хайуандарҙың нервы системаһында шартһыҙ рсфлекстар нигеҙендә барлыкка килеусе ваҡытлыса элемтә ул. Үткәрелгән тәжрибәләр ярҙамында бал ҡорттарының шартлы рефлекстарға, йәғни аҙык сығанағы (шартһыҙ ярһыткыс) һәм уның төҫө, аҙык һәм уға хас булған еҫе араһындағы ваҡытлыса элемтәгә эйә булыуға һәлотлелеге асыҡланған. Зоңгәр һәм һары квадраттарҙа урынлашкан аҙыкты алырға ойротелгән ҡорттар һуңынан да, бында аҙык булмаһа ла, шул квадраттарға осоп килгән. Ниндәйҙер тәмле еҫле шорбот менән аҙыкландырғанда, ҡорттар ошо аҙык булмаған, әмма уның еҫе сығып торған контроль йәшниккә инә.

Шулай ук ҡорттарҙа теге йәки был үҫемлектең кондоҙ кайһы ваҡытында бал һутын иң интенсив булеп сығарғанын белеү һәләте лә бар.

Шартлы рефлекстар йәки ваҡытлыса элемтәләр ҡорттар тормошонда ҙур әһәмиәткә эйә: бал ҡорттары танышыу өсөн осош яһағанда ла үҙ умартаһының хәл-торошон, әйләнә-тирәлеге ойберҙәрҙе хәтерендә ҡалдыра, бал һуты йыйырға осҡан сакта барыу һәм ҡайтыу юлын иҫтә тота.

Бал корто, аҙык эҙләп, тыумыштан барлыкка килгән шартһыҙ рефлекс тәьҫире аҫтында оса. Был ваҡытта сәскәнең тоҫо, сҫе һәм формаһы ҡорт өсөн бер ниндәй әһәмиәткә лә эйә түгел. Ләкин ул төҫтәр, еҫтәр һәм формалар сиратлашҡан сәскәләрҙә аҙык тапһа, был билдәләр уның өсөн аҙык сигналдарына әйләнә, бал ҡорттарында соскәләрҙәге билдәле тоҫкә, еҫкә һәм формаға шартлы рефлекс үҫешә.

Инстинкт — (латин һүҙенән — ҡуҙғытыу), шартһыҙ рефлекс, хайуандар тәртибенең тыумыштан булған ҡатмарлы формаһы, организмдың эске һәм тышҡы ярһытыуҙарға яуап тезмәһе ул.

Бал ҡорто ғаиләһе биологияһынан инстинкт миҫалдары:

1. Теҙелөш алып барыу инстиякты ҡорттарҙың балауыҙ бүлеү, төҙеү эштәре башҡарыуында сағылыш таба; йәш ҡорттар тыуып бер аҙ йошогәс тә, ояла тәжрибә туплаган ҡорттар ксүек үк, кәрәҙҙәрҙе доп-дөрөҫ итеп төҙөй башлай. Бер ҡасан да һоро (әре) ҡорттар кәрәҙен күрмәгән эшсе ҡорттар яҙын Ьоро ҡорттар күҙәнәктәрен төҙөү эшенә тотона.

2. Аҙыҡ йыйыу инстинкты үҙҙәрснең ихтыяжынан да күбсрпк аҙык — бал һуты һәм һерко йыйыуҙа сағылыш таба. Ул бал ҡорттарында әүҙем, көслө, еҫтонлөклө. Күпләп бал Йыйырға мөмкинлек булғанда, бал ҡорттары бер ниндәй СЯМНЫ (норманы) белмәй, улар өсөн бер генә сик юҡ («етер-

юк йыйҙык инде» тип туктап ҡалмайҙар). Әгәр ҙә умартаһы, ояла балға урын булһа, улар уны үсемлектәр бал һутын бөтөп сығарыуҙы туктатмайынса йыя.

3. Һаҡланыу инстинкты ҡорттарҙың ояны, умартаны һаҡлауҙа, ҡорттар менән тышҡы дошмандарҙан, ҡоротҡостарҙан һаҡлауында сағылыш таба.

4. **Ҡорттарҙың** элекке урынға ҡайтып инеү инстинкты. Был инстинкт ҡортло умартаны алып китеп, уның урынына бушҡаһын килтереп ултыртҡанда яҡшы күҙәтелә. Осоштан ойға юнеп ҡайтҡас, ҡорттар яңы умартаға инә. Бында улар иңһез есҡә лә, формаға **һәм** төҫкә лә ҡарап тормай. Был инстинкт **умартасылыҡта** — ғаиләләрҙе төрлө ысул менән яһалма бүлеүҙә, күстәрҙе формалаштырыуҙа, элекке көслө ғаилә урынына сибек ғаиләне күсереп ябыуҙа киң ҡулланыла.

5. Яңы инә **ҡортто** тәрбиәләү инстинкты. Ул элекке инә ҡортто юғалтҡанда, ҡорттар ҡарышлауыҡтарҙан яңы йәш инә ҡортто тәрбиәләгәндә **яҡшы** күҙәтелә.

6. **Енси** инстинкт инә ҡорттоң йомортҡалар һалыуында, инә ҡорттарҙың һәм һоро (әрс) ҡорттарҙың, инәләрҙең, йәғни инә ҡорттарҙың үрсеү, аталаныу есен парлашыуға («туй») осошонда сағылыш таба.

7. Ҡатмарлы инстинкт миҫалы булып ҡорт айырыу хеҙмәт итә. Был иһә ҡорт ғаиләләренең артыу, тәбиғәттә бал йыйыусы ҡорттарҙы таратыу ысулын коүҙәләндерә. Ҡорт ғаиләләренән айырым заттарының берәмләп яңы ғаиләләр нигеҙләргә һәләтлеге булмау сәбәпле, күс айырыу иң уңайлы күренеш булыуын, гауға ҡулайлашыуҙы күрһәтә. Ләкин айырым осраҡтарҙа ҡорт айырыу инстинкты кире әһәмиәткә эйә, **сөнки** күс айырыу осоронда төп инә ҡорт ғаиләһе шул тиклем күп күс айыра, ул үҙе лә, унан бүленеп сыҡҡан күс тә умартаны аҙыҡ запасы менән тәьмин итә алмай. Әгәр ҙә умартасы алдан тейешле саралар күрмәһә, улар үлеп бөтөргә мөмкин.

Тәбиғәттә көтмәгәндә ҡыҙыу бал йыйыу башланып китһә, ул сағында күс айырыу инстинкты актив аҙыҡ йыйыу, аҙыҡ запасы туплау менән баҫырылып ҡала. Ҡорттар шунда уҡ үрсеүҙе (ҡорт айырыуҙы) туктата, ә кәрәҙҙәрҙәге күс айыра торған инә ҡорттарҙың ояларын — **көбөләрен** кимерә, ватып бөтөрә һәм бал һуты йыйырға тотона.

**Һөҙөмтә.** йәш умартасыларға, бал ҡорттары тотор өсөн ошо **инстинкттарҙы** белеп эш итергә кәрәк.

## ҺЕҘ ЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... инстинкт — ҡорт ғаиләһенең берҙән-бер һәм айырылғыһыҙ «хужаһы». Уға 40—60 мең эш ҡорттары составындағы бетә «бал ҡорттары берекмәһененең» ҡатмарлы һәм иң юғары дәрәжәлә камиллашҡан сеймал һәм аҙағына тиклем төрлө продукция әҙерләү циклы буйһонған;

... күп быуаттар буйы кешеләр, бал ҡорттарының ҙур ғаиләһендә инә ҡорт, ҡорттар төркөмө йәки һорө (эре) ҡорттар хужа булып тора, тигән бәхәс алып барҙы. Моғайын, күп быуаттарға һуҙылған бәхәстә ҡатнашыусылар, бөтөнләй «хужа» булмауын белһә, бик аптырашта ҡалыр ине. «Хужа» ролен үтәүсе инстинкт бар, йәғни ҡорттарҙың йәшәү эшмәкәрлеге «идара итә»;

... бөйөк тәбиғәтте тикшереүсе Чарльз Дарвин ҡорттарҙың кәрәҙ эшләү инстинктын «бөтә инстинкттарҙың иң ғәжәбе» тип атаған.

## НИ ӨСӨН ҠОРТТАР КҮС АЙЫРА?..

Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа,
күсе шунда һарыр.
Халыҡ әйтеме.

### Нимәне беҙ күс айырыу тибеҙ?

Бал ташыусы ҡорттарға үрсеүҙең ике юлы хас. Беренсеһе — айырылып тороусы бал ҡорто күсенең һәр затын яңыртыу. Был юл бал тсорттарының даими йәшәүе өсөн кәрәкле, ләкин үрсеү процесы булып тормай. Икенсеһе — бөтә бал ҡорто ғаиләһе берҙәм үрсеү өсөн эшләй. Һөҙөмтәлә ҡорттарҙың билдәле бер өлөшө, тәүҙә — төп инә ҡорт, икенсе күстәрҙә йәш инә ҡорт менән айырылып, яңы йәшәү урыны эҙләп сәфәр сыға. Был күренеш күс айырыу, ә ҡорттарҙың бүленеп сыҡҡан өлөшө күс тип атала. Ҡорттарҙың мираҫ үҙенсәлектәренә, инә ҡорттоң тоҡомона, сифатына, ҡорттар ғаиләһенең тормош шарттарына ҡарап, уларҙың күс айырыуға һәләтлеге төрлесә баһалана. Күс айырыу — нәҫел үҙенсәлеге ул. Тәбиғи шарттарҙа күс айырыу бал ташыусы ҡорттарҙың йәшәүенә булышлыҡ итә.

Күс ... әҙерлек күпкә алдан башлана. Ҡорттар ояһын... үҙгәрештәр була. Ҡышлауҙан һуң ҡорттар яңы ғына ... сыҡҡан йәш ҡорттар менән алмаштырыла. Йәш ҡорттар ҡышлап сыҡҡан ҡорттарға ҡарағанда ҡарышлауыҡ... ... тапҡырға күберәк ашатырға һәләтле. Был ҡорт ... тиҙ үҫсүенә булышлыҡ итә. Умартала инә ҡорт ... йомортҡа һалыуын арттыра бара, ғаилә бик ... Унда ҡорттар үрсемен ашатыу менән ... йәш ҡорттар күп туплана. Әгәр ҙә был мәлдә ... һуты бүленмәһә, эш менән мәшғүл булмаған ҡорттар уим йыйыуға ҡушыла алмаһа, ул сағында ғаиләлә күп ҡорт инһеҙлеккә дусар була. Бал ҡорто ғаиләһендә ... клмсй.

## Күс айырыу билдәләре

Бал ҡорто ғаиләһенең күс айырыуға әҙерләнеүен ул ба... һаумттар, йәғни буласаҡ инә оялары, кебөләренең ... ғоҙоүснән, инә ҡорттоң уларға йомортҡа һалыуынан белеп була. Ҡорттар 10-ға тиклем һәм унан да күберәк инә ... тозөй. Кәроҙ, яһалма балауыҙ төҙөлөшө туҡтала, ҡорттарҙың һут, һеркә өсөн осоуы кәмей. Эшсе ҡорттар башта ... күҙәнэктәрен төҙөй, һәм ғаиләлә ата (эре) ҡорттар үрсеме күбәйә. Инә ҡортто ашатыусы ҡорттар һаны кәмей, ... йомортҡа һалыуҙы аҙайта, еңеләйеп китә һәм осорға ... һула. Күс менән осоп сығыусы ҡарт инәләрҙең ауырлығы ... саҡта хатта аталанмаған икенсе, өсөнсө һәм ... күстәр менән осасаҡ йәш инәнең ауырлығынан да ... була. Йомортҡа һалыуҙың кәмеүе умартаның аҫтында ... п.шып, ҡайһы саҡта умартаның ян-яҡ стеналарында ... рлүсшендә ойошоп торған (йәй көнө күҙәтеп ҡарағыҙ) ... ҡорттарҙың артыуына килтерә. Был ҡорттар көс туп... һәм физиологик йәһәттән йәш ҡорттар булып ҡала. ... көстө (уны күс айырыу энергияһы тип атайҙар) ... яңы оя төҙөүгә йүнэлтэ.

Ҡорттарҙа ҡатмарлы күс айырыу инстинкты барлыҡҡа килеүгә Г»улышлыҡ итеүсе сәбәптәр:

— оимың эш менән мәшғүл булмаған йәш корттар менән ... китеүе;

— КОрттар торлағындағы ҡыҫынҡылыҡ;

— ОЯла ҡарт (2 йәштән елкән) инә ҡорттоң булыуы;

— ояны ваҡытында киңәйтмәү һәм уны насар елләтеү;



*Ағаска һарыған күс*

— ояның (умартаның) ҡояш нурҙары йоғонтоһонда артыҡ йылынып китеүе;
— умартаның коплэнгэн, олгөргэн үрсемдэр менэн тулып китеүе;
— ояла иҫке, көңгөрт, ҡара кэрэҙҙэр булыуы;
— насар, өҙөп-өҙөп бал йыйыу;
— ауырыуҙың нык аҙып китеүе, ҡорт тэнендэ күп һанда талпандар — варроатоз булыуы;
— бал ҡорто ғаилэлэренең нэҫел үҙенсэлектэре (ҡорттарҙың урта Рэсэй тоҡомо һэм уның популяцияһы — башҡорт йэғни бөрйэн ҡорттары, күс айырыуға бигерэк эүэҫ).

Йыш ҡына ҡорттар ғаилэһендэ күс айырыу йэш ҡорттарҙың эш менэн тулыһынса мэшғүл булмауы һэм эшкэ егелмэгэн йэш ҡорттарҙың — ашатыусыларҙың кэрэгенэн артыҡ тупланыуы арҡаһында килеп сыға.

## Күстең осоп сығыуы

Күс айырғанда ҡорттар ғаилэһе сама менэн ике тигеҙ өлөшкэ бүленэ. Күс менэн төрлө йэштэге ҡорттар осоп китэ. Күс менэн сығыусы ҡорттарҙың бөтэ һанының 80 проценты самаһын 24 көнгэ тиклемге ҡорттар тэшкил итэ. Айырым осраҡтарҙа күс менэн 7 процентҡа тиклем эре ҡорттар китэ.

Тәүге күс карт инә ҡорт менән (ул һауыттарга инә ҡорт йомортҡалары һалғандан һуң 8-се, 9-сы көндә була был хәл) осоп сыға. Был ваҡытта тәүге инә оялары көпләнгән була. Күстең айырылып сығыуы ямғыр һәм һыуыҡ көндәр арҡаһында тотҡарланырға ла мөмкин. Ул саҡта ҡарт инәнән башҡалары, йәғни инә көбөләренән әле генә сыҡҡан йәш инә корттар күс менән осоп китә. Тәүге күс көндөң беренсе иртыһында (сәғәт 9—10-дарҙа ла мөмкин) йәки төш көно сыға һәм айырым ҡорттарҙың сигналы буйынса ел өрмәй торған урынға йыйыла. Әгәр ҙә ҡорттарҙың торлаҡ һайларға форсаты булһа, был саҡта улар 25 саҡрымға тиклем һәм унан да күберәк араға осоп китә. Беренсе күстәр гәҙәттә ағасҡа, ҡыуаҡҡа, ҡоймаға йәки ерҙән бейек булмаған Т рәүешле кәкре әйбергә (махсус эшләргә мөмкин) ҡуна. Бер нисә (2—3) сәғәткә тиклем, разведка яһаусы ҡорттар яңы торлаҡ урыны тапҡансы, ошонда ҡалалар һәм аҙаҡтан ғына яңы урынға осоп китәләр.

Беренсе күс айырылып сыҡҡандан һуң, төп ғаилә инә ҡортһоҙ тороп ҡала, уның ҡарауы, инә ҡорттар көбөләре була. Әгәр ҙә тәүге күс айырылып сыҡҡас, бер иң эре, киләсәле инә ҡорт кобоһонан тыш, ҡалған инә ҡорттарҙың ояларын юҡ итмәһәң, икенсе, өсөнсөләр һәм артабанғы күстәр айырылып сығыуы ихтимал. Күпләп күс айырыу ғаиләне бик нык косһөҙләндерә.



*Моҙғаға күс йыйыу*

## Икенсе һам артабанғы күстең осоп сығыуы

Күс сығарып ебәргән ғаиләлә ҡорттарҙың бер елөшө, терле кимәлдө үҫешкон үрсемдәр һәм инә ҡорт ҡарышлауыктары тороп кала. Кобеләге үрсемдән сыккан ҡорттар икенсе күсте төп олошон тәшкил итә.

Тәүге йәш инә ҡорт кебөнө кеплэп ҡуйғандан һуң һиге ҙенсе көндә оянан сыға. Йәш инәле икенсе күс, әгәр ҙә көндор торошо беренсе күстең сығып китеүенә тоткарлыг яһамаһа, тәүге күстән һуң туғыҙынсы көндә айырыла. Икенсе һәм артабанғы күстәр сығыуҙан 1—2 тәүлек элек инә ҡорттарҙың сигнал тауыштарын ишетергә момкин. Инә ҡорттарҙың был «йырын» ғәҙәттә кисен һәм иртән иртүк ишетеп була.

Инә ҡорт «йыры» буйынса улар эле оялағы кеболәрҙ көндәштәренең барлығын белә. Икенсе күстәр тәүгеһенә ҡарағанда йонсоу көндәргә аҙыраҡ иғтибар итә. Шуға ла улар көсле ел иҫеп торһа ла, ҡояш балҡып торған көндә лә осоп сығырға мөмкин. Күстә иһә инә ҡорттар ояһынан бер үк ваҡытта сыккан ике-өс инә ҡорт була.

Икенсе күс сыккандан һуң икенсе йәки өсонсө кондәрҙә аталанмаған йәш инә ҡорттар менән өсөнсө күс тә осоп сығырға мөмкин. Артабан һор күс айырған һайын ҡорттар һаны кәмей бара. Күс айырыу туктағандан һуң йәки ҡапыл көслә бал йыйыу (бигерәк тә йүкәнән, ҡандала үләненән, көнбағыштан башланған осраҡта ҡорттарҙа көслө аҙык әҙерләү -- һут йыйыу инстинкты «эшләп китә». Был иһә үрсеү — күс айырыу процесын туктата, һәм ҡорттар, шунда уҡ инә корттарҙың көбөләрен кимереп, улар эсендәге инәләрҙе юҡ итә. Йәш инә ҡорт, тыуып 7 көн үткәс, умартанан осоп сыға һәм умарталыктан 1—2 йәки 5—6 саҡрым самаһы алыҫлыкта һауала оре ҡорттар менән осрашып ҡушыла (бер нисә инә ҡорт 6—8 әре корт менән «кауышып» аталана), һәм ғаиләл яңынан ғәҙәти тәртип урынлаша.

Бал ҡорттары бал йыйыу насарыраҡ, өҙөк-өҙөк барһа ла, у бөтөнләйгә туктап ҡалмаған осраҡта, күс айырыуға эүәҫ бул сөнки улар үҙҙәре менән аҙык запасын — балды һәм һеркә бер нисә көнлөк алып китә. Ә йыйым буямағанда йәки көслө бал йыйыу мәле килеп етһә, улар күс айырыуҙы туктата.

Ғәҙәттәге күс айырыу бал ҡорттары ғаиләләренең көслө үҫеш мәлснә, уларҙа өлкән һәм үҫешеп килеүсе айырым ҡорттарҙы

ык к уоойгон осорона тура килә,ләкин айырым **йылдарҙа** күс ы||и.|у бик иртә (20—25 майҙа ук) башланырға момкин. Күс |.|р|.|у осоро, ғәҙәттә, 2—6 аҙна дауам итә, **әммә** һуңғы йылрҙа ул 2 айга һуҙылды, **аҙаҡкы** күстәр 20—25 июлдә сык. Бындай хәл умартасылыкта йыл да булмай.

## Тәбиғи күс айырыуҙың ыңғай яктары

**йырылып** сыккан күстәрҙең ҡорттары яңы кәрәҙ төҙөүҙә к (>алауыҙ бүлеүҙә бик юғары эшсәнлеккә эйә. Күс ғаиләрс (күс ҡорттары), аҙыктың ҙур запасын туплап, бал йыйған кти п(|)рат ҙур егәрлелек күрһәтә.

## Күс айырыуҙың етешһеҙлектәре

Ботәһснән элек ул:

стихиялы **процесс** һанала, йылдың-йылы тирбәлеп тора, иһо ҡорт ғаиләләре һанын планлы арттырыуҙа ҡыйынктар тыуҙыра;

**ғаилә** күс айырыу хәленә **күскәндән** һуң, инә ҡорттоң оморҡка һалыуы кәмсй, ә һуңыраҡ **бөтөнләйгә** туктап ҡала, ларҙың барыһы ла ҡорттарҙың үрсеүсәнлеген кәметә;

ҡорттар күс айырыу хәлендә һүлпән була, һутты һәм ркэ бик әкрсн йыя, кәрәҙҙәр төҙөмәй. Күс айырыу мәле у ь.м йыйыу (мәҫәлән, йүкәнән) мәлено тура килгәндә, пмйыуҙы шаҡтай кэмстә;

күстәрҙе тотоу һом уларҙы умартаға ябыу өсон күп гүгсү талап ителә;

шырым йылдарҙа күс айырыу шул тиклем көслө була, ҙә сараһын күрмэһәң, ҡорттар ғаиләләре бер нисо тапр күс айырып, аҙ ғына ла бал бирмәҫкә мөмкин;

**гоҡомсолоҡ** эшен ауырлаштыра, сонки күңслгә хуш |и.эн сифатка эйә булған ҡорттарҙың ғаиләләре лэ күс ыра;

**тәбиғи** күс айырыу умартасының хеҙмәт етештереүсән **кәмстә**, иң мөһиме бал ҡорттары аҫрауҙың интенсив ологияһын индереүгә ҡамасаулай.

Әгәр ҙә һеҙҙең бал ҡорто ғаиләләрегеҙ тейешле саралар дән һуң да күс айырыу хәленә килһә, бындай ғаиләләргә **айырыу** мемкинлеген бирергә кәрәк.

... күс айырырға эҙерлэнеүсе бал ҡорто ғаиләһенән иң якшы бероүһенэн башҡа ҡорт инэлоре ояларын юҡ итеү, был ғаиләне көсһеҙ ғаилә урынына, ә **көсһөҙө** уның урынына күсереп ҡуйыу күстең сығыуын иҫкәр теүҙең һәм уның юғалыуына юл ҡуймауҙың иң ябай ысулы булып тора;

... бал ҡорттарының күс айырыуға әҙерләнеүенең **бе**ренсе билдәһе - - ояла ата ҡорттар үрсеменең **барлыҡҡа** килеүе. Ләвсин был — сәбәп түгел, ә эҙемтэ генә;

... шундай осраҡтар ҙа булған: сығып киткән **күс** үҙенә һауа ояһы ҡороп, йүкә ботағында, көнбағыш корзиненде 35—46 конгә «туктап **торған»**;

... илебеҙҙең айырым төбоктәрендэ беҙҙең **көндәрг** тиклем умартасылар, күс айырып сыккан саҡта, **күнәкк** тасҡа, кәритогэ, салғыға һэм баиғка эйберҙәргэ **һуға** Уларҙың фекеренсо, был күсте «камап ала». **Ысынып** да иһә ҡорттарға был тауыштың бөтөнләй кәрәге юҡ. Саң ҡағыу — борондан килгән ғәҙәт кенә, уның асылы шуга ҡайтып ҡала: умартасы, берэй нэмэ **шылты** ратып, үҙенең күршеһен күс осоп сығыуы тураһында иҫкортә, әгәр ҙә күс уның ихатаһына барып ҡунһа күрше күсте ҡайтарып бирерго **тейеш** була;

... белендермәй генэ сығып киткән күсте уның ҡайһы ғаиләнән икәнен еңел белеп була. Бының есөн **кисе** күстән ҡорттарҙы бер ҡалаҡ һоҫоп алалар ҙа уларя шэкәр ҡомо (пудра) йәки он һиболәр һәм ҡалаҡта бушаталар. Ҡорттар үҙҙәре ҡайҙа **йәшәгәндәрен** «иҫк төшөрә» һәм элекке урындарына кире әйләнеп ҡайт

## III. Бал корттары менән нисек эш итергә?

Балын яратһаң, бәләһен дә ярат.
Халыҡ мәҡәле.

Бал киртоноң йәшэйешен үҙләштергәс, хәҙер эш башлауы умарinсмларға бал ҡорттарын нисек тәрбиәләү буйынса һәм у|;||> менон нисек эш итеү, ҡорттарҙы үрсетеү хаҡында кәңәштәр һәм тоҡдимдэр бирергә мөмкин.

Төрлө тоҡомло бал ҡорттары ояларын ҡарауға төрлөсо ауап бирә. Кавказ, Карпат ҡорттары һәм уларҙың ҡатнаш тоҡомло кеүек үк, көньяк тоҡомло тсорттар ҙа ғәҙәттә үҙҙәрен тыныс кпи. Уларҙың күсен битко селтәр ксймәйенсә, хатта кҮрекһеҙ карарға момкин. Ҡайһы саҡта урта Рэсәй тоҡомло бал ки|> ті мрын да бит селтэрһеҙ, эммә тетәткес файҙаланып карарға йули. Урта Рэсәй ҡорттарының танылған ырыуы (популяцияһы) булған ҡырағай башҡорт солоҡ (берйән) ҡорттарын ии иуыч, уҫал һэм агрессив ҡорттар, шуның өсөн улар менән эш итгэ ондэ биткэ битлек кейергә, күрек тә ҡулланырға кәрәк.

Кеүисляр умартасылыҡ менән күптэндэн шөгөлләнһә лә һәм бал корттарына билдәле дэрәжәлә йоғонто яһаһа ла, улар һуңғы өйләшеп китмәгәндәр. Ҡорттар кешегэ күнегеп бармайҙар һәм үҙенсң хужаһын — умартасыны танымайҙар, кешеләр шаяртып: «Хужаһын таныя, саҡмайҙар», — тиһәләр ҙә, уларҙа йорт малдары ғәҙәте юҡ, инстинктка ғына буйһоноп йәшәйҙәр. Уның ҡарауы, кеше ҡорттарға «күнегә», өйрәнә» барып, улар менән эш итеү алымдарын киңәйтә. Ҡорттарҙың тыныслығы кешенең эш итә белеүенә лә бәйле.

Бал корттарында һиҙеү тойғоһо нык үҫешкән, уларҙы ҡайһы V еҫтәр нык кyҙғыта. Умартасының кейеме лә шулай уҡ ҡорттарҙың тәртибенә билдәле, йоғонто яһай. Унан тегеһын ситсе еҫ сығып торорға тейеш түгел. Хатта таҙа, яңы ғына һмуылған халат та үҙенсәлсклс, ҡорттарҙы ҡуҙғытыусы еҫле була. Шуның өсөн уны ксйсү алдынан сллэтәләр. Гиреисич'үсс йылы йөн һэм синтетик кейем кейсрго ярамай. Кейем йоитоҫ булырға тейеш түгел, ҡорттар унда бутала ла, асыуы куба. Улар менән эш иткэндә аҡ халат йәки тоҫлө туҡымынан тсгелгон комбинезон иң яҡшы кейем һанала. Салбар балаҡтарын ойоҡбаштарға тығырға, о күлдэк йэки халат еңенә (кчш рсзинкаларға кәрәк.

Ҡорттар мснон эшләрҙән алда шохси гигиенаны һаҡларға, ҡулдарҙы һом битте яҡшылап йыумрға ҡушыла. Эш иткэндә үзенде тыныс һом ышанысл ы тоторға корок. Әгәр ҙә ҡулдар йоки тон буйлап ҡорт йөроһо, тыпырсынып китергә ярамай, о уны тыныс ҡына алып, осороп ебәрергә корок. Ҡорт оҫтонә баҫһаң йоки уны ҡыҫһаң, ул саға. Тэүгс осорҙа бик тэ ҡурҡһағыҙ, таҙа бирсәткәләр кейеп эшлэргo момкин, ләкин ҡортгар бирсэткәләр аша ла саға ала. Резина бирсәткэлорҙә ҡулдар тирләй, ә тир еҫен ҡорттар яратмай.

Ҡорттарҙы ҡарағанда күрск иң короклс ҡорал булып иҫәпләнә. Уны ҡулланыуҙан боронғо замандарҙа урман менән бергэ умарталыҡтар ҙа янған икән, һәм был янғындар умарталарҙан бал запасын альга киткән, тип аңлаталар.

Умарталарҙа аҙыҡ запасы аҙ булғанда, бал йыйыу булмағанда һәм ҡорттар ас булғанда уларҙың асыулы һәм сағыусан булыуы күҙэтелә. Әгәр ҙә йыйым булһа, умартаға бик күп бал һуты килһә, улар зыянһыҙ була. Берләтәүе бал менән тулы ҡорттар сағыу есөн ҡорһағын бөгөргә ауырһына.

Ояны йыш ҡарау ҡорттарҙы тынысһыҙландыра, уларҙың эшенә ҡамасаулай һәм күстең биологик ритмын боҙа. Юкка-бушҡа күсте тикшерергә ярамай. Бер ҡарағанда эштәр комплексын башҡарыу тэкдим итслә. Мэҫәлән, яҙ күстэ инә ҡорттар барлығы, аҙыҡ запасы тикшерелэ, умартаның төбө таҙартыла, оя ҡыҫҡартыла һәм өҫтәп аҙыҡ — баллы рамдар йәки шәкәр шәрбәте бирелә. Умартаны асҡанға тиьслем кәрәкле ҡоралдарҙы: күрек, сөрөк, умартасы ҡасауы, ҡанат йәки рамдарҙы һәм шуд әйберҙәрҙе күсереп йөрөтөү есөн йәшник әҙерләргә кәрәк. Тикшереү есөн иң яҡшы ваҡыт йылы ҡояш, елһеҙ көн үҙәге, температураның күләгэлә +12—1[illegible] градус булыуы хәйерле. Бындай көндө бик күп елкән ба[illegible] ҡорттары умартала булмай һәм эшлоргә ҡамасауламай (өлкә[illegible] ҡорттар саға), ә йәш ҡорттар артыҡ ҡуҙғып бармай. Ҡорт[illegible]тарҙы бал йыйыу булмаған, үтә нык эҫе, коро көндәрҙ[illegible] мөмкин тиклем ҡарамаҫҡа кәрәк. һауа торошо алмашынға[illegible] саҡта, көслө ел иҫкәндә, кен һалҡынса, болотло, ямғырлы булып торғанда һэм күк күкрәү алдынан ҡорттар асыулы булыуға тартым һәм йышыраҡ сағыусан була. Бал ҡортта[illegible]рының ауырыуы, ҡороткостар килеү, умартаны йыш асыу[illegible]уға ҡағыу, һуғыу, шулай ук ҡорттарҙың ағыулы үҫемлектәрҙ[illegible] (һазанаҡ, тилебәрән, бүре йүкәһе, аҡһырғаҡ һ.б.) ҡуныу[illegible] уларҙың асыуын ҡабарта.

Күсте тикшереү алдынан умартаның кейэһенэ бер-ике ағы[illegible] төтөн өрҙөрэлэр. Ояны ҡарағанда умартаның һул яғында торо[illegible]

...йәр. Әгәр ҙо ярҙамсы булһа, ул каршы яктан тороп ... Умартаның алдында, ҡорт оскан ерҙә, тороп эшлоү ... Ҡапҡасты — умартаның ҡыйығын һаклыҡ менән ...исалар һәм уны **умартаның** артҡы стенаһына күректе ... уңайлы ултыртырлыҡ йоки элеп ҡуйырлыҡ итеп һөйэп ...ҡуялар. Ҡапҡасҡа йылыткыс яҫтыкты ла һалалар. Киндер ...ымаһың мойошөн күтәреп, рамдар өҫтөнә (әммә ояға түгел) ... **ағымы өрҙөрәләр.** Әгәр ҙә умарта рамдар менән туп-...уны **булһа,** ул саҡта ваҡытлыса тикшергәнсе бер-ике рамды ...урын алалар һәм өҫтө ябыулы күсермәле йәшниккә ҡуялар. ... пянағы рамдарҙы умартасы ҡасауы менән шылдыралар ... **һикиыҡ** менән генә ҡырынлатып һурып сығаралар, бында **...рамдарҙың** сите менән инэне йәки ҡорттарҙы умартаның ...**...һына** ҡыҫып үлтермоү сараһы күрелә. Алынған рамды ...арта оҫтендә вертикаль итеп, аҙ ғына ҡырыныраҡ тота-...р. Рамды лыпын яткырып тоторға ярамай, сөнки балауыҙ ...ып төшөргә һәм һынырға мөмкин, бынан тыш **...күҙәнәктәрҙән** һеркә киҫәктәре төшә һәм яңы бал һуты ағып ... Каралған рамдарҙы запас киндер япма менән ябып ...алар **Әгәр** ҙә умартанан **рамды** алыу талап ителһә, уны ... мснон өҫке бурсаһынан йәки элэктергестәренэн тоталар ... умартаның **төбөнә** табан төшөрәләр. Уң ҡулдың йоҙроғо ... һул ҡулдың суғына йәки рамдың планкаһына һуғалар. ... милогэндә **корттарҙың** күпселеге кәрәҙҙән айырыла, ә **...ндарын** ҡанат., щетка йәки яңы үлән һеперткеһе менән ... гошөрәләр. Үрсемле, инә ҡорт кобо күҙәнәкле рамдарҙы ...ырға ярамай, ә ҡорттарҙы уларҙан һепереп төшөрәләр. ... **карағас,** рамдарҙы мекке урынына шылдырып ҡуялар. ... ваҡыт уңайһыҙ булһа һәм ҡорттарҙың ҡуҙғыуы форсат ... рамдарҙы каршы якка ҡуймаҫҡа мөмкин, о **элек** **...ындарын** иң һуңғылар итеп ҡуйырға кәрәк. Күсте ҡараған ... ҡортто умартанан тышҡа төшормәҫ осон иғтибар-... **булыу** талап ителә. Шулай итмәгәндә күсте инәһеҙ ҡал-... момкин.

**Күрәк** осон яныу материалы булып ҡоро ағас сөрөгө йәки ... **гоҡомло** ағас хоҙмәт итә, сөнки төтөн эҫе булырға ... түгел. Ағас бэшмәге якшы һәм әкрен яна. Ул ағас-... **...ктәрендә,** япраҡлы ағастарҙың олононда үҫә. **Күреккә** ... смккан рамдар йәки иҫке киндер япмалар киҫәктәрен ... **насар** булмаҫ, былай иткәндә төтөн ҡорттарҙы тыныс-... **...рыусы** хуш еҫлегә әйләнә. Күреккә үлгән ҡорттар эләгергә ... **түгел,** сонки улар янғанда ҡорттарҙа нык ҡуҙғыу уяна. ... **бер** умартасылар ҡорттар нык асыуланғанда һәм

агрессивланғанда тотәткескә иҫке балауыҙ киҫәктәре һала, шул уларҙы тынысландыра. Күрек яҡшы янһын өсөн, уны вертикаль хәлдә ҡуялар (төтөн тартыу косойэ). Яныуҙы кәметеү кәрәк булғанда, күректе яткырып ҡуялар. Уга үтә лә ҡоро сорөк һалырға ярамай, сөнки уны орҙорткәндә күплоп осҡон сыға. Быңдай сорөктө еңслсо гено гүешлотергә кәрок. Эш тамамланғандан һуң күректс һүндсролор. Уның ҡапкасын асалар, яныусы сөректэрго һыу ҡоялар һом махсус соҡорға түгәләр. Күректең ҡапкасындағы ҡором ҡырып тошөрөлә, ә тишектэре таҙартыла.

Бал ҡорттарын ҡарағанда түбэндоге ҡағиҙәне үтәргә кәрәк: «яйлап ҡына ашыҡ», йәғни кисекмәҫтэн һам бөгөн эшләйһе эште иртәгэгэ ҡалдырма, э ҡорттар мснэн эшләгәндә ашыҡмағыҙ һәм ҡапыл хәрэкәттәр яһамағыҙ. Киҫкен хәрәкәттәр һәм ашығыу ҡорттарҙы бик ныҡ ҡуҙғыта, улар ярһынып китэ һэм саға башлай. Ҡортто ҡыҫыш ултермэү өсөн бик иғтибарлы булырға һәм үҙенде йыйнаҡ тоторға кэрәк. һәр сағыу кеше менән ҡорттар күсенең үҙ-ара мөнэсзбәте боҙолоу тураһында раҫлай.

Әгәр ҙэ ҡорттарҙың асыуланыуы арҡаһында эште тамамларға форсат булмаһа, умартаны асыҡ килеш ҡалдырып китергә ярамай. Шундай халыҡ мэкәле ло бар: «Кем дә кем ҡорт сағыуына сыҙамай һәм умартаны асыҡ килеш ташлап китә, ул кеше умартасы түгел».

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... умартасы төтөн ярҙамында бал ҡорттарын тынысландырмай, э, йэнэһе, янғын икэн тигэн оҡшашлыҡ бирә. Миллиондарса йылдар буйына боронғо урманда йэшәүсе йэн эйәлэре булып һаналған бал ҡорттары төтөн еҫе сығыу менән оҙон юлға запас алыу өсөн балға ташлана. Ҡорһағы бал менон тулғанда ҡорт уны бөгә алмай, ул ҡаяуын эшко ҡуша алмай;

... күректе ышанысль тоҡандырып ебәреү өсон ҡоро ҡайын туҙы, ә яндырыу өсөн — өйәңке сөрогө файҙаланыла;

... ҡорттар_____һиҙеү буйынса «чемпиондар». Улар еҫтәрҙе кешегә ҡарағанда мең тапҡырға нығыраҡ тоя һом айырып таный. Ҡорт бал йыйымы сығанағын эҙләгәндә сэскэләрҙен хуш еҫен бер сакрымдан һэм унан

да алыҫтаныраҡ тоя һәм улар араһында иң яҡындарын белә, бал һуты барлығын һиҙә;

... ҡорттар -- «синоптиктар». Ямғыр алдынан, ойтср-һсң дә, «команда» буйынса улар берҙәм рәүешто умарталарға әйләнеп ҡайта. Ғалимдар был холде, ямғыр йәки дауыл килер алдынан һауа бик ныҡ электр мснән тула һәм ҡорттарҙың шунда уҡ статик заряды күбәйә, тип аңлата. Ул ҡорттарға умартаға ҡайтырға саҡырыусы хәүефле, ҡурҡыныслы хәл сигналы булып хеҙмәт итә лә инде.

## ҠОРТ САҠҠАНДА ЯРҘАМ ИТЕҮ

Бал тәмле лә, ҡорт саға.
Халыҡ мәҡәле.

Умартасылыҡ шөғөлөн башлап, ҡайһы бер умартасы-һөүөҫкәрҙәр үҙен бал ҡорто саҡҡанда аллергик реакцияға дусар булыу мөмкинлеген күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тейеш. Ҡорттар менән эш иткән кешелә лә, уның менән бср ниндәй шемтэһе булмаған кешелә лә, осраҡлы һәм бер тапкыр ғына корт саккан кешелә лә аллергия ҡуҙыуы ихтимал.

Умартасыларҙа ғәҙәттә тиҙ генә иммунитет — ҡорт ағыуын кабул итмәүсәнлек тыуа. Ҡорт сағыу әллә ни ауыртмайынса үтө, ҙур булмаған шеш барлыҡҡа килә лә, был хэл үтеп тэ китә. Әммә ҡорт ағыуына ҡаршы актив иммунитет ныҡлы Түгел (6 айға тиклем). Умартасыларҙың яҙ башында ҡорт сағыуына йэй аҙағына ҡарағанда һиҙгсрерәк булыу факты ла ошоноң менән аңлатыла. Организмда тыуған иммунитет даими түгел һәм ҡорттан сағылыу аралығы ҙур булғанда ул юғалып ҡала. Умартасылар эштә ҙур өҙөклөк яһағандан һуң улемесле хәлгә тиклем ауыр ағыуланыу алған осраҡтар күҙәтелә.

Бер таптсыр бал ҡортонан сағылыу теләһә ниндәй бөжәк осон дә үлем ҡуркынысы менән янай. Хайуандарға һәм кешегә һөжүм иткәндә ҡаяу ҡорттоң тәненән бик тиҙ ысҡына (ә ул үҙс үлемгә дусар була) һәм сағылыусының тәнендә ҡала, бығл иһә ҡорттарҙың ояһын туҙҙырыусы дошмандар менән көрәштә сағыуҙың файҙалылығын күтәрә.

Ҡорттар бал йыйыу тамамланған вакытта, һыуыҡ көндә һом кеше йәки хайуан уларҙың, осоу юлында эләккән осраҡта нығыраҡ саға. Ҡатын-ҡыҙҙар һәм бигерәк тә кескәй

балалар ҡорт сағыуҙы ир-атҡа һом олкон кешеләргә ҡарағанда ауырыраҡ кисерә. Шуның осон йокло ҡатын-ҡыҙға умарталыкка барырга һәм умарталарға яҡын йөрөргә ярамай, юғиһә ҡорт сағыуҙан бала төшоу момкин. Бәләкәй балалар ҙа сағылыуҙан һаҡланырға тейеш. Ксшслор араһында шулай уҡ ҡорт ағыуына бик ныҡ һиҙгер (индивидуаль кисерә алмаусы) кешеләр ҙә осрай.

Әгәр ҙә һеҙҙе ҡорт саҡһа, бик тиҙ гсно ҡаяуҙы һурып алырға һәм ауырткан урынға һыуыҡ һыуға сылатып, таҙа сепрәк ябырға, уны бер нисә тапкыр алмштырырға, яндырыу туктағансы шулай дауам итерго корок. Һыуыҡ тәьҫире аҫтында тире тартыла, һәм бының мснэн ул олөшләтә ағыуҙы ла тышҡа һурып сығара, ә һыу уны йыуа. Ғәҙәттә ҡорт саккан урын, көслө янып, ауырта башлай. 1—3 мм радиуста тире ағарып сыға. 1—3 минуттан һуң гиперемия (ҡан ағымы көсәйеүе) үҫеше һәм, киҫкен ҡыҙарып, шешенеү башлана. Шеш 15—20 минуттан һуң ҙурая, саккан урында тойөн кеүек кенә аҡһыл ҡыҙыл урын барлыкка килә, уның уртаһында, капилляр зарарланған хәлдә, ҡан тамсыһы ағып сыға. Сағылған урындағы реакция менән бер үк ваҡытта хэл бөтөү, тын ҡурылыу, баш әйләнеү, күкрәк ҡыҫылыу, тиреләү — сэбертеү, тәндә кесерткән биҙгэге билдәләре менән ҡысыныу күренештәре булырға мөмкин. Был күренештор ҡорттан сағылғандан һуң 5—15 минут үткэс барлыкка килеүе һәм 2—3 тәүлеккә, һирәк осраҡта бер аҙнаға һуҙылыуы ихтимал.

Күп ҡорттан сағылғанда күңел уйнау, баш ауыртыу, шыбыр тиргә батыу, температура күтәрелеү рзүешсндә ауыр ағыуланыу (интоксикация) күҙәтелә. Ҡайһы саҡта укшыу һәм эс китеү осраҡтары була, ҡыҫҡа ваҡытлы аң юғалтыу осрағы ла күҙәтелә. Яңаҡты, телде, тамаҡты йәки аңкауҙы һәм ирендең лайлалы тиресәһен ҡорт сағыу бигсрәк тэ ҡурҡыныслы. Тамаҡ йәки тамаҡ төбөнөң лайлалы тиресэһе шешенһә, был иһә тын быуылыуға (асфиксияға) килтерерго мөмкин, һөҙөмтәлә кеше быуыла һәм үлә.

Күҙҙең ҡараһын (роговица) ҡорт сағыу бигерәк тә ныҡ хәүефле: тиҙ арала күҙ насар күрэ башлай, күҙ ҡараһы төҫһөҙләнә, киңәйә, күҙ ағына (склера) ҡан һауа. Күҙ ҡараһы ҡатлауы зарарланғандан һуң күҙ ҡабағының ситтәре шешэ. Был күренештәр 7—10 көнго тиклем һаҡлана һәм һуңынан күҙҙең күреүе аҡрынлап элекке хэленә ҡайта. Күҙҙе ҡорт саҡканда күҙ эсендә ҡан баҫымының күторелеүе һәм күреү һәләтенең кәмеүе (глаукома) һәм күҙ яҫмығының (хрусталик) тоноҡланыуы (катаракта) барлыкка килеүе мөмкин.

**Бал** ҡорто ағыуына аллергиялы ксшелорҙо бср **бежактец сағыуына** ауыр аллергик реакция (анафилактик шок) **күҙәтслә һом** тын алыу үҙәгенең параличынан үлем килергә момкин. Шуның өсөн кем дә кем ҡорт ағыуына аллергия мснон нфалана, уға умартасылыҡ менән шөғөлләнеү эшснән баш **гартып** торорға кәңош итәбеҙ.

## Ҡорт сакканда беренсе ярҙам

Пинцет менән йәки һығып, саккан урынды баш бармаҡ ЙО иһә һук бармаҡ менән һыпырып, ҡаяуҙы алып ташлай-**ҙар** (былай эшлогэндә ағыулы резервуарҙы һытырға ярамай, **сонки** күп осраҡта ағыу тире аҫтына эләгә). Шешеүҙе кәме-**теү** есөн ағыуҙы яранан һығып сығаралар, сағылған урын-**ғҫы** тупраҡ менэн һыпырырға ярамай, организмға инфекция **индерергә** мөмкин. Яраға нишатырлы спирт йәки календу-**ланың** спиртлы тенэтмәһен һөртәләр. Ҡаяуҙы алғас, яраға 10 процентлы календула иретмәһе, спирт-ректификат һәм ва-**зелиндан** торған май ябалар. Сағылған урындан өҫтәрәк **30**—40 минутка жгут быуалар һэм һыуыҡ һалалар.

Пыҡ ағыуланғанда — күп итеп һыу эсерергә һәм меди-камснттар (димедрол, супрастин, тавегил — шуларҙың бере-**һен)** һәм йөрәк дарыуҙары (валокордин, кордиамин, Зеленин **тамсылары)** ҡабул итерго. Ауыр хәлдә тәнгә адреналин, пред-**низолон** (60 мг), бик ауыр хэлдә 100 мг уколы ҡаҙарға корэк.

Әгәр ҙә ҡулда дарыуҙар булмаһа, сағылған урындың ауыр-**тыуын** кәметеү өсон халыҡ саралары бар. Яраға бал, бопембә, һарымһаҡ йәки һуған һуты, шыйыҡ валидол, спирт, сей картуф, яңы ғына өҙөлгэн юл япрағын ябалар һэм бэлэкэй **генө** дозала баллы араҡы (5 г бал һәм 50 г араҡы) эсергэ момкин. Ауыр ағыуланған хәлдә яфаланыусыны яҡындағы мсдпунктка йоки дауаханаға оҙаталар.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... бал ҡорто бер тапкыр саҡканда 0,2 мг ағыу бүлеп сығара;

... кеше осон бал ҡорто ағыуының үлтерерлек до-заһы 1 кг ауырлыкка 1,4 мг йәки уртаса **0,1—0,2** г ағыу тәшкил итэ, ул **500—1000** ҡорт саҡканға тигеҙ;

... хатта һау-сәләмәт кеше лә аллергик реакция арҡаһында бер тапҡыр ҡорт сағыуҙан да үлергә мөмкин;

... сысҡандар — 2—3, себештәр — 3—5, тауыҡтар — 8—10, йорт ҡуяндары — 10—20 һом бер нисә тиҫтә ҡорт сағыуҙан үлә, ә аттар өсөн үлтерерлек доза — 1000-дән ашыу ҡорт сағыу;

... Йыланйарға, терпеләргә, баҡаларға, ташбаҡаларға, сәләндәргә, айыуҙарға һәм башҡа ҡайһы бер хайуандарға бал ҡорто ағыуы йоғонто итмәй, йәғни улар ағыуға бирешмәй;

... Миллиондарса йылдар элек бик күп бөжәктәр һәм хайуандар үлеп бөткән. Хатта динозаврҙар ҙа. Ә бал ҡорттары йәшәп ҡалған һәм бер нисек тә үҙгәрмәгәндәр тиерлек. Ҡорттар үҙҙәренең сағыу һәләте булыуы арҡаһында йәшәп китә алғандар, ә ағыуҙы улар үҙ ояларын һаҡлау өсөн файҙалана;

... инә ҡорт бер ҡасан да кешене саҡмай, хатта ул уның берәй ерен ауырттырған хәлдә лә, ләкин үҙенең тиңдәше — башҡа инә ҡорт менән осрашҡанда ул ярһынып, үҙенең ҡурҡыныслы ҡоралын — ҡаяуын эшкә ҡуша;

... әгәр ҙә умартасы ҡулдарын ентекләп мелисса үләне йәки лимон бөтнөгө япрағы менән ыуһа, ҡорттар саҡмай уларҙың еҫен ҡорттар бик ныҡ ярата. Шуға ла күс ябыр алдынан умартаның эсен шул үлән менән һөртәләр;

... умарталыҡтан алыҫ булмаған электр тапшырыу линиялары һәм юғары вольтлы линиялар бал ҡорттарының йәшәү ваҡытына, инә ҡорттарҙың һаҡланыуына һәм ахыр сиктә ҡорт күстәренең продукт биреүенә кире йоғонто яһай. Былай булғанда электр яланы тәьҫире аҫтында ҡорттар шаҡтай асыулы булып китә.

# IV. Бал ҡортоноң ауырыуҙары һәм ҡороткостары

## БАЛ ҠОРТОН ТОТОУҘЫҢ ВЕТЕРИНАР-САНИТАР ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

Умарталар елдәрҙән ышыҡ, ҡоро, бал бирә торған үҫемлекторгә бай, аҙыҡ базаһы етеш, ҡорттарға карантин ауырыуларҙан имен тормош тәьмин иткән ерҙәрҙә урынлаштырыла.

Улар шоссе һәм тимер юлдарҙан 500 метрҙан, юғары косоргэнеш линияһынан 400 метрҙан, малсылыҡ торлаҡтарынан, ҡоролмаларҙан 1 саҡрымдан, күрше умарталыҡтарҙан 3, кондитер һәм химия сәнәғәте предприятиеларынан 5 саҡрымдан алыҫырак ултырырға тейеш. Умарталыҡтарҙы кәртәләп алалар йәки территорияһын уратып, бал бирә торған ағастар, кыуаҡлыҡтар ултырталар, ә буш яткан урындарҙы йыл һайын һөрөп, үҫемлек сәсәләр.

Бер умарталыҡта умарталар бал бирә торған үҫемлектәрҙең күплегенә ҡарап урынлаштырыла, әммә 150 бал ҡорто ғаиләһенән күп ҡуйылмай. Умарталарҙың араһы 3—3,5 метр тирәһе булыу мотлаҡ. Ҡорттар аҙашып осмаһын өсөн, умарталарҙы бер-береһенә яҡын итеп ултыртмайҙар, кейәһе алдындағы ярты метр ерҙең үләнен ҡырып ташлайҙар ҙа ком һибәләр. Умарталыҡтың биләмәһен тип-тигеҙ итеп тигеҙләйҙәр, артыҡ-борточ эйберҙәрҙән таҙарталар, ваҡыт-ваҡыт үләнсн сабып, йыйып алалар, үлгән ҡорттарҙы, сүп-сарҙы яндыралар.

Корт ғаиләләрен тәҙөк, төрлө төҫко (аҡ, зәңгәр, күк, һары) буялған, номерҙар һуғып, ҡаҙыҡтарға йәки 30 сантиметр бейеклегендәге тимер ҡалкытмаға ултыртылған умарталарҙа тоталар.

Ҡорттарҙы ҡышлауҙан йә ҡар аҫтынан сығарған көндә уҡ умарталыҡта һыу эсергес (һуғарғыс) ҡуялар, шулай уҡ үлсәүҙәге умарта, дезинфекциялау майҙансығы булдырыу, һыу ағыу өсөн оҫтө ябыҡ сокор ҡаҙып, бәҙрәф ҡуйыу хәйерле. һаҡлыҡтағы умарталар (тик дөйом ғаилә һанынан 10—15 процентты да кәм түгел), кәрәҙҙәр һәм яһалма балауыҙ булырға тейеш Былар бөжәктәр. кимереүселәр инә алмаған махсус юро бинала һаҡлана. Элек файҙаланылған умарталар, бал кыуғыстар, умартасы ҡоралдары, шулай уҡ бал һала торған

һауыттар, фелэктэр һатып алһағыҙ, улар ҙа ентеклэп дезинфекциялана.

Һэр умарталыктың ветеринар-санитар паспорты булырға тейеш. Был ветсанпаспорт нигеҙендэ умарталыкты күсереп йөрөтөү, корттарҙы һэм продукцияны һатыу хокуғына рөхсэт бирелергэ тейеш.

## АУЫРЫУҘАР ХАКЫНДА КЫҪКАСА БЕЛЕШМӘ

Ауырыуҙарҙы уларҙың барлыкка килеү сэбэптэре буйынса ике төркөмгэ: йоғошло һэм йоғошһоҙҙарға бүлэлэр. Йоғошһоҙ ауырыуҙар бер ғаилэнэн икенсеһенэ күсмэй.

Йоғошло ауырыуҙар бал корто организмына куҙғыткыс килеп элэгеү аркаһында башлана. Был ауырыуҙар сирле ғаилэлэрҙэн һауҙарына күсэ. Сир, куҙғыткыс төрөнэ карап, инфекцион һэм инвазион ауырыуҙарға бүленэ (быларҙың һуңғыһы хайуан паразиттарынан зарарланыуҙы аңлата). Инфекцион ауырыу куҙғыткыстары — үҫемлектэрҙэге микроорганизмдар: бактериялар, бэшмэктэр, вирустар, риккетсиялар. Бактериялар бактериаль ауырыуҙар — Америка һэм Европа сереген, бэшмэктэр — аскосфероз, йэғни эзбизлы үрсем кеүек микоздарҙы, вирустар капсыклы үрсем кеүек вируслы ауырыуҙы, вируслы биҙгэктэрҙе барлыкка килтерэ.

Инвазион ауырыуҙар иң ябай талпандар, гельминттар, бөжэктэр тэьҫире аҫтында барлыкка килэ. Мэҫэлэн, иң ябай йэн эйэлэре протоооздар (нозематоз — йоғошло эс китеү), талпандар — арахноздар (акарапидоз, варроатоз) кеүек сирҙэрҙе тыуҙыра.

Ауырыуҙарҙың куҙғыткыстары бөжэк организмына төрлө юлдар менэн: тире япмаһы аша (бэшмэктэр), эсэктэр һэм карын аша (Америка һэм Европа сереге, нозема, вирустар) үтеп инэ.

Инфекцияның төп сығанағы — ауырыу бал корто ғаилэһе. Сирле корттар шайык һелэгэйе, тиҙэк массаһы менэн, трахея һэм тын алғыстар аша тышкы мөхиткэ, э ауырыу инэлэр — күҙэнэктэргэ һалынған йомортҡалар аша куҙғыткыстар бүлеп сығара. Ауырыу бал корто ғаилэһенэн кэрэҙҙэр, бал, һитэ, умартасы кулланған коралдар һэм шулай ук умарта үҙе инфекция сығанағы булып хеҙмэт итэ. Бал корттарының ауырыуҙары тураһында Ивний Шафиковтың «Бал кортонон наҙы бар» тигэн китабында бик ентеклэп яҙылған. Әле һеҙҙе бал корттарының бары тик үтэ куркыныслы һэм Башкортостанда

йын осрай торған ауырыуҙары менән генә таныштырып китмәксебеҙ.

## ТАЛПАН АУЫРЫУЫ (ВАРРОАТОЗ)

Бал ҡорттарының ҡурҡыныслы инвазион ауырыуы ул. Ҡарышлауыҡтарҙы, ҡурсаҡтарҙы, өлкән эшсе ҡорттарҙы, әрә ҡорттарҙы зарарлай. Ауырыуҙы Варроа Якобсони талпаны барлыҡҡа килтерә (ғалим Эдвард Якобсөни ошо талпанды тапҡас, уның исемен ҡушҡандар). Уны тәү башлап 1960 йылда Ҡытайҙың көньяғында белеп ҡалалар. Быға тиклем варроа талпаны бал бирә торған ҡорттарҙы зарарламаған. Әммә 1904 йылда тәүге тапҡыр Ява утрауында ҡырағай һинд ҡорттарының паразиты булараҡ һүрәтләп яҙыла, тик ул яңылыш браула (ҡорттар бете) тип ҡабул ителә. 50-се йылдар аҙаҡтарында, 60-сы йылдар баштарында был талпандың яңы расаһы барлыҡҡа килә. Ул бал йыя торған ҡортта йәшәүгә яраҡлаша. Беҙҙең илдә был талпан тәүге тапҡыр 1964 йылда Приморье крайының Лесозаводск районында бер умарталыҡта асыҡлана. Приморье һәм Хабаровск крайҙары умарталыҡтарында йылдам тарала башлай, ә унан Себер, Урал умарталыҡтарына ла барып етә, элекке СССР-ҙың Европа өлөшөн солғап ала. Башҡортостан умарталыҡтарында талпан (варроатоз) 1974 йылда тарала башлаған.



*Варроа талпаны бик күпкә (электрон микроскобы аша) ҙурайтылған күренештә*

Ауырыу ғаилә ҡорттары тәнендә талпандарҙы ябай күҙ менән дә күреп була. Инә талпан һорғолт төҫтә була. Оҙонлоғо һәм киңлеге 1,1x1,8 мм самаһы, тары орлоғоноң көбөнә оҡшаш. Ата талпан һөт кеүек аҡ төҫтә, оҙонлоғо һәм киңлеге 1,0x0,9 мм, йәғни улар инә талпандарға ҡарағанда ике тапҡырға бәләкәйерәк. Талпандарҙың бөжәктәрҙән айырмаһы шунда: уларҙың дүрт пар аяғы бар (һүрәтте ҡарағыҙ).

Инә талпан йәй көнө бал ҡорто ояһында 2—3 ай, ҡыш 5—6 ай йәшәй, оянан тыш 6—7 көн, үлгән эшсе ҡорттар, бал ҡорттары тәнендә һәм ҡурсаҡтарҙа 11—16 көн, ә өпләп ҡуйылған үрсемдә 40 көнгә тиклем түҙеп йәшәй ала. Үрсемлектәр сәскәһендә талпандың инәһе 5 тәүлеккә тиклем йәшәй, ул бал ҡорттарына йәбешергә һәләтле.

Талпандар кәрәҙ күҙәнәктәрендә өлкән ҡарышлауыҡтар менән бергә үрсей, унда улар күҙәнәктәрҙе өплләгәндән алда инеп ҡала. Инә талпан 4—8-әр бик бәләкәй генә йомортҡа һалып, уларҙы күҙәнәктәрҙең стенаһына беркетеп ҡуя. Әре ҡорт күҙәнәгенә инә талпан йомортҡаларҙы бал (эшсе) ҡорто күҙәнәгенә ҡарағанда 16—20 тапҡырға күберәк һала. Йомортҡалар инә ҡорт ояһына ла (көбөгә) һалынырға мөмкин.

Талпан инәһенең күкәйҙән сығып өлкән формаға тиклем үҫеше 8—9 көн дауам итә, атаһының — 7 көн. Уларҙың парлашыуы ҡорттар күҙәнәктәрҙән сыҡҡанға тиклем 2—3 көн алда үтә. Ата талпандар парлашҡандан һуң оҙаҡламай үлә. Аталанған инә талпандар күҙәнәктәрҙән йәш ҡорт менән бергә, уның тәненә йәбешеп сыға. Ҡорттарҙың ҡарышлауыҡлы күҙәнәктәренә талпан инәләре варроа менән зарарланған ҡорттар ҡарышлауыҡтарҙы ашатҡан саҡта эләгә.

Талпандың инәләре эшсе ҡорттарҙың һәм әре ҡорттарҙың ҡарышлауыҡтарына, ҡурсаҡтарына зыян яһай, уларҙың гемолимфаһы (ҡаны) менән туҡлана. Ә балды улар ашамай. Талпан бигерәк тә әре ҡорт үрсеме менән бергә күҙәнәктә көслө үрсей. Быны шуның менән аңлатып була: талпандар әре ҡорттар үрсеменә өҫтөнлөк биреүсән, сөнки был үрсемдәрҙең үҫеше (24 көн) бал ҡорто (21 көн) һәм инә ҡорт үҫешенән (16 көн) оҙағыраҡ дауам итә.

Көҙөн, күҙәнәктәрҙән һуңғы үрсем сыҡҡас, талпандар ҡорттарға күсә, эш ҡорттарының тәнендә ҡышлап яҙға етә.

**Ауырыуҙың төп билдәләре.** Талпан менән ныҡ зарарланған умарталыҡтарҙа умарталарҙың ҡорттар осоп килеп ултыра торған таҡталарында, улар алдындағы ерҙә лә эш ҡорттарының, әре ҡорттарҙың үлеп ятҡан ҡурсаҡтарын, үҫешеп етмәгән, ауырыу ғаиләләр ояһынан тышҡа сығарып ташлан-

ган йәш ҡорттарҙы күрергә мөмкин. Күпселектә зарарланған ҡарышлауыҡтар, ҡурсаҡтар үлә. Корттар уларҙы тышҡа сығарып ташлап өлгөрмәй, эстә ятып ҡарая, серей.

Корттар күҙәнәктәрҙән ваҡ ҡына, зәғиф, үҫеп етмәгән ҡанатлы, ҡайһы саҡта хатта ҡанатһыҙ ҙа булып сыға, шунда уҡ ҡолап төшә. Көҙ һәм ҡышлау осоронда ҡорт ғаиләләре бик ныҡ тынысһыҙлана, ҡуҙғыған хәлдә була, ҡорттар умартанан осоп сыға ла үлә. Яҙғы-йәйге осорҙа ғаиләләр көсһөҙләнә, үрсемдең япмаһы тишкеләнгән була. Әгәр ҙә талпан менән бөтөнләй көрәш алып бармаһаң, ул сағында ҡорттар ғаиләһе ғәҙәттә көслө зарарланғандан һуң 2—3 йыл эсендә үлә.


*Талпан ауырыуы менән зарарланған йәш ҡорт*

Диагнозды умарталарҙан әрс ҡорттар ҡурсаҡтарын күпләп сығарып ташлауға, ҡорттарҙың күпләп ҡойолоуына һәм ҡорттарҙа, үрсемдә, умартаның сүп-сарында тере талпандар булыуға ҡарап ҡуялар.

**Көрәш саралары һәм дауалау.** Талпандарға тәьҫир итеү буйынса ҡорттарҙы талпан ауырыуынан дауалау ысулдары зоотехник, физик, термик һәм химик алымдарға бүленә. Былар комплекста ҡулланылғанда, юғары дауалау эффекты бирә. Бал ҡорттарын талпандан дауалау осон 200 төрҙән ашыу дарыу ҡулланалар, тик улар талпандарҙың үҫешен тотҡарлаһа ла, тулыһынса юҡ итеп бөтөрмәй. Көслө ғаиләләр тиҙерәк һауыға. Бөгөнгө көндә ос дарыу: апифит, апистан, бипин иң йоғонтоло һанала.

Апистан — сит илдән индерелгән дарыу, уны ҡулланыу бик ябай. 10 процент актив матдәле (флувалинат) оҙонса киҫәк формаһында сығарыла. Апистандың эффектлылығы — 99—99,5 процент. Оҙонса киҫәктәрҙе ояның ике яғына, 3-сө һәм 4-се рамдар араһындағы йөрөү юлына, йәнәш кәрәҙҙәр араһына 30 тәүлеккә элеп ҡуялар. Бал йыйыу осоронда уны ҡулланмайҙар.

Бипин — 0,25—0,5—1—2—3 мл күләмендә ампулаларға һалынған. Күберәк 1 мл ампулала һатыла. Бер ампулалағы дарыуҙы (1 мл) 2 литр таҙа, тондоролған һыулы һауытта иретәләр, ныҡлап болғатып ҡатыштыралар. Бал ҡорто ғаиләһен эшкәртеүҙе бөтә үрсем сығып бөткәс, көҙ, һауа температураһы 0 градустан алып ±5 градусҡа тиклем булғанда, йәнәш кәрәҙҙәр араһындағы ҡорттарға 10 миллилитр күләмдә шприцтан һиптереү юлы менән үткәрәләр. Бер умартаға, косонә

ҡарап, 60—100 мл ирстмә ҡулланыла, йәғни 2 литр ирстмә 20—25 ҡорт ғаиләһен эшкәртеүгә етә. Ирстелгән дарыуҙы әҙерләгән көндә үк ҡулланалар. Артып ҡалған иретмәне һаҡламайҙар, шуның өсөн уны таныш-белеш һәүәҫкәр умартасыларға шул уҡ көндө тотонорға биреүегеҙ яҡшы булыр. Артабанғы эшкәртеүҙе ете көндән һуң үткәрәләр.

## АСКОСФЕРОЗ АУЫРЫУЫ ҺӘМ УНЫ ДАУАЛАУ

Эҙбизләнгән үрсем (аскосфероз) — башлыса 3—4 көнлөк асыҡ үрсемдең йоғошло бәшмәк ауырыуы ул. Иң беренсе сиратта эрс ҡорттарҙың ҡарышлауыҡтарын, ә унан иһә эшсе ҡорттарҙың ҡарышлауыҡтарын зарарлай. Ҡуҙғытҡысы — аскосфера аписы бәшмәге. Ул тышҡы мохит йоғонтоһона һис бирешмәй, тупраҡта, умартала тиҫтәләрсә йылдар һаҡлана.

Ауырыу кәрәҙҙең аҫтында йәки үрсем ишәйә торған рамдарҙың ситендә урынлашҡан ҡарышлауыҡтарҙы зарарлауҙан башлана. Күҙәнәктәрҙең өҫтөндә күгәргән аҡ таптар барлыҡҡа килә. Үлгән ҡарышлауыҡтар, кибеп, аҡбур киҫәген хәтерләткән ҡаты массаға әйләнә.

Аскосфероз Башҡортостан умарталыҡтарында бигерәк тә 1983—1985 йылдарҙа киң таралып китте, шул ваҡыттан бирле бөтә умарталыҡтарҙы солғап алды. Ҡорт ғаиләһендә ауырыу ап-



*Аскосфероз (эҙбизләнгән үрсем) күренеше*

рендән башлап октябргә тиклем, йәғни үрсем булған сакта күҙәтелә. Өлкән, осоп йөрөгән бал ҡорттары сирләмәй, ләкин ауырыуҙы таратыусы, ҡуҙғытҡыстарҙы йөрөтөүсе булып тора.

Аскосфероздың таралыуына һыуыҡ, дымлы һауа булышлыҡ итә. 1990-сы йылдар уртаһында ул үҙенең «иң юғары нөктәһенә» барып етте, тип әйтергә мөмкин.

Ауырыуҙың төп сығанағы булып сирле бал ҡорто ғаиләләре тора: ояның эсендә сир бөшмәктә ашаған ҡорттар аралашҡан саҡта тарала. Зарарланған умарталар, кәрәҙҙәр, аҙыҡтар һәм сирле умарталыҡтағы бөтә тотоноу кәрәк-яраҡтары ауырыуҙы таратыусылар булып һанала. Шик тыуған хәлдә кәрәҙ киҫәген 10—15 см ҙурлығында киҫеп алып, ауырыу һәм үлгән ҡарышлауыҡтарҙы район ветеринария лабораторияһына тикшерергә ебәрәләр.

**Дауалау.** Ауырыу бал ҡорто ғаиләләренә шәкәр сиробына һыуҙа ауыр ирерүсән антибиотик — нистатин ҡушып дауа бирәләр, йәғни өҫтәмә аҙыҡландыралар (1 литр һутҡа 500 мең берәмек нистатин ҡушыла). Өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн 50 процентлы шәкәр һуты (1 өлөш шәкәргә 1 өлөш һыу), әҙерләйҙәр һәм шул дозаға иретеп ҡуйылған нистатинды ҡушалар. Өҫтәмә аҙыҡты ҡорттарҙың йәнәш кәрәҙҙәр араһынан йөрөү юлына 100—150 милли литр иҫәбенән өс тапҡыр, 4—5 көн аша кәмәшәүҙәргә һалып бирәләр.

Аскоцин — бик эффектлы дарыу. Ул ампулаларҙа район-ара, шәхси умартасылыҡ магазиндарында һатыла.

Аскоцин менән дауалау курсы үткәрер алдынан зарарланған үрсемле рамдарҙы умартанан алалар, инә ҡортто (мөмкинлек булһа) алмаштыралар. Ауырыу бал ҡорто ғаиләләрен таҙа яһалма балауыҙға, яҡшылап дезинфекцияланған кәрәҙҙәргә һәм умартаға күсерәләр. Иретмәне әҙерләү өсөн бер ампуланы 30 мл ҡайнаған һыуҙа иретеп болғатырға кәрәк. Был иретмә препаратын ашатҡанда 5 литр (кг) шәкәр сиробына (бер өлөш һыу иҫәбенән — 1:1) дауа сифатында өҫтәмә аҙыҡ ҡушып бирәләр һәм 3,5 — 4 литр шәкәр сиробы (1:5) менән һуғарыу үткәрәләр йәки һиптереп сөсләйҙәр.

Ҡорттарға дауалау өсөн шәкәр сиробын йәки бал (1:1 нисбәтендә) ашатҡанда кәрәҙле рамдың аҫҡы яғына, өстән бер өлөшөнә һибәләр, аҙаҡ бал ҡорто ғаиләһенең ояһына ҡуялар. Бер рамға 60—70 мг (г) сироп кәрәк. Ә һуғарған саҡта «Росинка» һиптергесе йәки шприц менән асыҡ үрсемдәргә һәм кәрәҙле рамдарға 15 мл иҫәбенән йылы шыйыҡ иретмә рәүешендә һиптерәләр. Бал ҡорто ғаиләһен, барыһын да, 2—3 мәртәбә 3—5 көн аша эшкәртеп торорға кәрәк.

**Был** иропаратты һатып алған сакта иғтибарлы булығыҙ! **Ампулаларҙа** аскоцин төрлесә күләмдә була. Мәҫәлән, 0,48 мл ампула есөн ашаткан сакта 2 литр шәкәр сиробы (1:1), о корәҙле рамдарҙы һугарған сакта 1,5 литр шәкәр сиробы (1:5) талап ителә. 1,2 мл аскоцинлы ампула өсөн ярашлы рәүешто 5 литр һәм 3,75 литр (2,4 мл аскоцинға 10 л һәм 7,5 л) сироп кәрәк.

Халат, алъяпкыс, резина бирсәтколор, һаклау күҙлеге кейеп **эшләргә** кәрәк. Тәмәкс тартырға, ашанырға һәм һыу эсергә рөхсәт ителмәй. Дауалау вакытында балаларҙы якын килтерергә ярамай һәм уларҙың кулына препарат эләкмәһен. Эш беткәс, кулдарҙы якшылап йыуыу талап ителә.

Балды кыуыуға, корт ғаиләһен һуңғы тапкыр аскоцин менән эшкәрткәндән һуң, 15 тәүлек кенә тотонорға кәрәк. Препараттың **яраклы** булыу **вакыты** —– *2* йыл. **Ғаиләләрҙе иртә яҙын**, йәй көнө **10—15** июнгә тиклем һәм коҙго осорҙа ашатканда ла кулланалар. Бал корттарының аскосфероз менон ауырыуын иҫкәртеү осен һеҙгә норма буйынса яҙҙан (кәмендә 2 һитәле рам, **10—14** килограмм бал) тулы киммәтле акһым запасы етерлек булған **аҙыктар** менән тәьмин **ителгән** көслө бал корто ғаилэлэрен тоторға кәрәк. Кәрәҙҙәрҙе даими яңыртып тороу мотлак. **Яҙ, корттарҙы кышлау урындарынан сығарғас, күстәрҙең** көсөнэ карап, вакытында ояларҙы кәметергә кәрәк. Ғаилә ояһын бик иртә, һыуык көндәрҙә киңэйтерго ярамай. Бигерәк тә уларға яһалма балауыҙ биреү ояның эсен һыуытыуға ғына килтерэсэк, ә бәшмәк шундай түбән температурала тиҙ үрсей.

Умарталарҙы коро, кояш нурҙары тошкән асык урынға, 40 см, хатта **50—60** см бейеклектә **каҙыктарға** йәки тимер калкытмаға ултыртыу талап ителә.

Шулай ук, аскосферозды дауалауға асконазол препараты кулланыла.

## БАЛ КОРТОНОҢ КОРОТКОСТАРЫ

Бал кортоноң дошмандары -— улар иҫәбенэ йәшәргә тырышып, ҙур зыян килтерсүсе йәнлектор ул. Ундайҙар иҫәбенә кайһы бер бөжәктәр, талпандар, кимереүсе йәнлектәр һәм коштар инә. Паразиттар бал корто ғаиләһендә йәшәй, уның иҫзбенә туклана. **Уларҙан тыш, йырткыстар ҙа умарталыктарға** һөжүм итә, бал урлай, оскан **корттарҙы** аулай.

Бал корто паразиттарына балауыҙ көйоһе, асакай (эҫкәк койрок), **кайһы бер куныҙҙар, талпан һәм сыскан инә. Уларҙың** ботоһе лә даими рәүештә йәки оҙон-оҙаклап бал корто ояһында

Ioш.ш həм балауыҙ, һитə, бал, ағас (рамдар, умарта), ЙЫЛЫ-тыи.|усы материал, шулай ук үлгəн ҡорттар һом ҡарышла-уыҙтар мснəн туклана.

## Балауыҙ көйəһе

Ул корəҙҙəргə, ə ҡайһы сакта үрсемгə лə ҙур зыян кил-тɛро Умарталыктарҙа көйəнең ике төрө осрай: бал һəм ба-лауыҙ мснəн тукланыусы ҙур һəм кескəй балауыҙ көйəһе. Көйə юнен генə хəрəкəткə килə, умарталарға осоп инə, уларҙың төбөндəге ярыктарға, сүп-сар араһына һəм кəрəҙҙəргə йоморт-каларының бер ни тиклемен һалып ҡалдыра ла икенсс кискə үҙ төйəм ағасына əйлəнеп ҡайта.

Ҙур балауыҙ кейəһенең күболəге үрсемлерəк то, зарарлы-рак та. Ул йəшəү осоронда (25—26 көн) 1500—2000 йоморткa һ|ла. Балауыҙ койэһенең ҡарышлауығы йəшэй башлауының тəүге көнөндə — бал менəн, унан һитə һəм кəрəҙ менəн туклана. Балауыҙ көйəһенең ҡарышлауыҡтары рамдағы ба-лауыҙға юлдар һала, уларҙы үрмəксе ауы менəн каплап ҡуя. Карышлауыҡтар киндер япма аҫтына инеп, сигарстка оҡшаш Кеплө ҡортка əйлэно. Йыш ҡына ҡарышлауыҡтар, юлдар һалып, үрссмгə зыян килтерэ, һөҙөмтəлə улар үлə. Йышырак осраҡ-Га койэлəр көсһөҙ ғаилəлəрҙе, шулай ук иҫке кəрəҙҙəр менон ҡалпоүсе ғаилəлəрҙе зарарлай. Нығ зарарланған холдə кəрэҙҙəрҙең үрмоксе ауы, ҡарышлауыктар ҡалдығы менəн тулыуы мөмкин. Койə шулай ук буш торған корəҙҙəрҙе лə, дороҫ һаҡламаған квлдə, башҡа кэрэҙ араһын да зарарлай.

Койəгə **каршы көрəш саралары.** Косле бал ҡорто ғаило-ларсн генə тоторға кəрэк, ундай ғаилəлəр койəнсң ҡарышла-уыктарын үҙҙəре кж итэ. Быҡдай косле ғаилəлор аҫрау һеҙҙсң үҙегеҙгə бэйле. Умартала таҙалыҡ һаҡлайҙар, иҫке, эшкэ ашмаған кəрэҙҙəрҙе алыштыралар, ə койə менон зарарланған короҙҙəрҙе балауыҙ итеп иретеп алалар. Ғаилə бик нығ за-рарланған булһа, уны яҡшы сифатлы, асыҡ һоро төҫтэге кэрəҙҙəр ҡуйылған, дезинфекцияланған таҙа умартаға күсерəлəр.

Əгəр ҙə кəрəҙҙəрҙə ҡарышлауыҡтар (көйэнеке) барлыкка килһэ, уларҙы һалкынлыҡ ярҙамында юҡ итəлəр.

10—12 градуслы һыуыҡ температура, сэғəт ярым ваҡытта көйəне үҫешенең бетэ стадияһында ла үлтерэ. Көйə үтə өрөп торған елгə сыҙамай, кəрəҙҙəр һаҡланған бинаны даими еллəтеп торорға, һауаның үтэнəн-үтə ағылып тороуын тəьмин итсрго корəк. Шулай ук кейəне юғары температура менəн дə үлтсролэр. Корəҙҙəрҙе 80 процентлы уксус кислотаһының пары мснон эшкəртсп, дезинфекция үткəрəлəр.

Рамдарза бал булған хәлдә, уларҙы кокорт газы менән эшкортсү (яндырып) рохсәт ителмэй, сөнки көкөрт газы, балдың һыуы менән ҡатнашып, бал ҡорто өсөн зарарлы булған кокорт кислотаһы барлыкка килтерэ.

Койәго ҡаршы көрәштә микроблы препарат — энтобактеринды файҙалананалар. Ул иһә кешслэр өсен дә, ҡорттар һом хайуандар өсөн дә зарарлы түгел. Балауыҙ койәһе ҡарышлауыктары **кәрәҙҙәрҙе** дарыулап һиптергондо үлә. Ҡайһы сакта һатыуҙа (баҙарҙа, хужалык тауарҙары магазинында) осратып була торган көйәгә ҡаршы препарат --- антимолде балауыҙ көйәһе менән көрәштә файҙаланыу рөхсәт ителмой, сөнки уның составында ҡортгарға бик нык ярамаған матдә — хлорофос бар.

Көйә бер-береһенә тейеп торған кәрәҙҙәргә йоморткаларын ихлас һала, шуның өсон уларҙы **12—15** миллиметр аралыклы, һауа үтеп, еллэтелеп торорлок урында һаклайҙар.

## Сысҡандар

Сысҡандар умарталарҙы ҡышлау урынына йыйып алғас, э айырым осраҡта умарталыкта сакта ук, ҡорттарҙың ҡышкы **йомғағы** барлыкка килгэс, үтеп инә, умартала үҙ ояларын яһай. Улар бал, һитә, үлгән ҡорттар менән туклана. Үлгән ҡорттарҙың түшен ашап, эсен генә торғоҙоп ҡалдыра. Умартала сысҡандар йөрөүе, улар тиҙәгенең еҫе ҡорттарҙы **тынысһыҙландыра.** Сысҡандар кэрәҙҙәрҙе емереп, ҡорттарҙың тынысльиғын боҙоп кына ҡалмай, э уларҙың йомғағы таралыуына, насарланыуына, ҡайһы сакта ҡорт ғаиләһенең үлеп ҡалыуына сәбәпсе була. Сысҡандар умарта һакланған бина эсендә лә кәрәҙҙәрҙе емерә, нык-лы ябылмаган оя корпустарыша, магазиндарға үтеп инә.

**Көрәш саралары.** Ҡорттар ғаиләлэрен сысканларҙан һаклау өсөн, һыуыктар башланғас, умарта кейэһенә тимер ышыклағыстар (селтәр, япма) ҡуялар. Ҡорттар ҡышлаған ерҙә умарталарҙы йыйып килтергәнгә тиклем **бөтә** сыскан ояларын быяла вағы ҡушып иҙелгэн балсык менән һылап ҡуялар. Сысҡандарҙы ҡапкан, тоҙак, тәпе, ситлек, ағыуланған алдатҡыс аҙык менән юк итэлэр. Түбәндәге сараларҙың береһен ҡулланалар: зоокумарин, ратиндан, крысид, ҡурғаш фосфиды. Был ағыуҙарҙың береһе менән **ҡамырҙан,** сүпрәнән, бойҙай, һоло бөртөктәренэн, икмәктән, ондан, ҡатнаш аҙыктан, туң майҙан йәки балдан алдатҡыс эшләйҙәр. Ошо маҡсатта һакланған баллы йәки һитәле иҫке **кәрәҙҙәрҙе** ло файҙаланырға мөмкин. Был **ағыуҙарҙы** хужалык магазиндарында, ветеринария аптекаларында, санэпидстанцияларҙа һатып алып була.

# БАЛ ҠОРТОНОҢ БАШҠА ҠОРОТҠОСТАРЫ

**Улар** ҡайһы бер бежәк ашаусы ҡоштар, шулай уҡ умартанан тышта йошәүсе, бал ҡорттарына һөжүм итеүсе йоки бал **ашаусы** бөжәктәр. Бал ҡорттарын юҡ итеп, балға һөжүм итеп, улар ғаиләләрҙе көсһөҙләндерә, йыш ҡына продуктлылығын кометә. Бөжок ашаусы ҡоштарҙың күбеһе, умартаҙыҡтарға барып эләгеп, ҡорттарҙы ла юкка сығара, умартасылыҡҡа ла зыян килтерә. Ҡорттар өсөн тиле торма, ҡорт **ашаусы** (һағыҙаҡ аулаусы) ҡоштар һәм һайыҫҡан аулаусы **Коштар;** бөжәктәрҙән — филант (бал ҡорто бүреһе) һағыҙағы, башҡа торлө һағыҙаҡтар, тыраждар, сиңерткәләр һәм кырмыҫҡалар бигерәк тә ҡурҡынысла булып тора. Беҙ тик ике бөжәккә генә туҡталабыҙ.

## Ҡырмыҫкалар

Улар бал корттары ғаиләһенә үтеп инэ һәм үҙ ояларына ташып алып, балды урлай. Күпләп һөжүм иткәндә улар тәүлек эсендә килограмға тиклем һәм унан да күберәк балды алып китә ала, шулай уҡ ҡорттарҙың йоморткаларын ташый һәм **Кiтта** ҡарышлауыҡтарҙы ашай. Ҡайһы саҡта ҡырмыҫҡалар үҙ ояларын умарта стеналары буйындағы бушлыҡҡа ҡора, ә кайһы саҡта ямғырҙар ваҡытында үҙ ҡарышлауыҡтарын умарталарҙың йылытҡыс яҫтыҡтарына күсерә.

**Беҙ** һәр ваҡытта ла ҡырмыҫҡаларҙы файҙалы бөжәктор, *урман* «санитарҙары», короткос бөжэктәрҙе юҡ итеүселәр тип иҫәплэйбеҙ. Әммә умартасылыҡҡа уларҙың төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян да килтереүе ихтимал. Шуның есөн, әгәр ҙә **үҙегеҙҙең умарталыҡ** эргәһендә ҡырмыҫка иләүе күреп ҡалһағыҙ, айырым урынға, умарталарҙан алыҫыраҡка күсерегеҙ. Бал ҡорто ишлоһснә үтеп инмәһен есөн умарта аҫтындағы казыҡтарҙы нигрол, солидол, башҡа майҙар менән майларға кәрәк.

## һағыҙактар

**һағыҙаҡтар** умартаға инеп, бал, ә ҡайһы саҡта, үҙ ҡарышлауыҡтарын ашатыр өсөн, бал ҡорттарын алып китә. Улар **бүп** торлө. Ғәҙәттәге уртаса ҙурлыктағы һары урман һағыҙағы бал ҡорттарына бигерәк тә йыш зыян килтерә. һағыҙаҡтар **миләгә** берләшеп йәшэй, улар умартаға август, сентябрь айҙарында һөжүм итә.

Умарталыкка һағыҙаҡтар иртәнсәк иртә менән, түбән температура торғанда, ҡорттар хәрәкәтсеҙ булған саҡта һөжүм итә, шул ваҡытта һағыҙаҡтар умартаға еңел үтеп инә, бал урлай, һағыҙаҡтар үҙ ҡаршылауыҡтарын ваҡ бөжөктәр, ә ҡайһы саҡта бал ҡорттары менән туҡландыра. Иыш ҡына ерҙә ултырған ҡорттарҙы аулайҙар.

һағыҙаҡтар менән көрәшеү есон яҙ- коно уларҙың инәләрен тоталар. һағыҙаҡтарҙы үтә күренеп торған шешәгә тәмле йоки эсегән баллы шыйыҡса һалыу юлы менән аулайҙар. һағыҙаҡтарҙың ояларын кисен йоки ямғырлы көндә, бөтә һағыҙаҡтар ҙа бергә йыйылған саҡта, юҡ итәләр.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... балауыҙ койәһен йәшниктәргә йоки умартаға кәрәҙ менән киптереп һалынған цитрус емешенең (әфлисун, лимон, грейпфрут) ҡабығы, шулай уҡ айыу баланы, ҡара тамыр, әрем, кейәү үләне һәм башҡа ҡырҡыу еҫле үҫемлектәр ҡурҡыта;

... балауыҙ көйәһе һарымһаҡ еҫенон ҡурҡа. Әгор ҙә кәрәҙҙәр һаҡланған йәшниктең йәки умартаның стеналарына һарымһаҡ һөртһәң, көйә уларға зарар килтерә алмай;

... ҡырмыҫҡалар һаҙанаҡ үләненән ҡурҡа, уны йока ғына итеп ҡортгар үҙ йоморткаларын урынлаштыра торған киндер япмаға йәки умартаның тобөнә йәйеп һалырға кәрәк. Бигерәк тә ҡырмыҫҡаларға умарта аҫтына һибелгән көл, эзбиз оно якшы тәьҫир итә. Ҡырмыҫҡалар умартаға үтеп инә торған урындарға күмер һөртөп сығыу ҙа етә;

... көйәнән һәм кимереүселәрҙән ҡурҡытыу ысулы сифатында умартасылар бер йәки бер нисә үҫемлекте: әле генә өҙгән әрем, сәтләүек япрағы, үлмәҫгөл, еҙтөймо, һаҙанаҡ, айыу баланы, эт теле үләндәрен файҙалана, уларҙы умарта эргоһенә йәйеп һала. Кимереүселәр ул үҫемлектәр еҫенә түҙә алмай, был ерҙе ташлап китә;

... сысҡандар, ҡомаҡтарға аҡһырғаҡтың япрағын йәки ҡара зирәнең орлоғон онтап, онға бутап, шулай уҡ зәһәрле сүл боросон йоморткa һарыһына болғатып, тимерҙең бысҡы вағын сүпрәгә ҡатыштырып биреү үлемесле тәьҫир итә. Алдаткыстарҙы кәрәҙҙәр һаҡланған урынға йәки умарталар ҡышлай торған ергә йәйеп һалалар.

# V. Умарталыктың аҙык базаһы

Бал ҡорттарына ла аҙык базаһы кэрок. Бер ҡорт ғаилэһенең йылына бары тик үҙ хожәтенә 90—100 килограмға тиклем бал һәм 20—30 килограмм һитэ ҡулланыуы асыкланған. Бал нигеҙҙо яҙғы-йэйге **айҙарҙа,** йәғни ҡорттар үрсеүе һәм иң төп бал йыйыу осоронда тотонола. Был тиклем балды йыйыу өсөн ҡорттар оса торған ике саҡрымға тиклемге радиуста торлө-төрло бал бирсүсс сәскә бик күп булыуы мотлаҡ. Бындай радиуста ҡорттар осөн файҙалы ерҙең майҙаны, йәғни ҡорттарҙың тойәге 1256 гектар тәшкил итә (эммэ был майҙанға ҡорттар файҙаланмай торған урындар — һыу яткылыктары, соҡор-сакырҙар, йырғанаҡтар, уңайһыҙ ерҙәр, төҙөлөштэр һэм башҡалар инмәй).

Бал йыйыу урыны алыҫ булһа, ҡорттар оскан саҡта **аҙыҡты** күберэк тотона, умартаға һутты әҙсрәк килтерә. Бал йыйыу **сығанағы** ике саҡрымдан алыҫырак булғанда, ҡорттар умарталыҡ менэн йәнәштэге үҫемлектәрҙән үҙҙәре йыя алған тиклем **йөктөң** яртыһын ғына килтереп еткерә.

Бал бирә торған үҫемлектәрҙең сәскә ата башлау һәм уның **Күпмегә** тиклем дауам итеү ваҡытын (фенологик күҙәтеүҙәрҙе) иҫәпкә алыу ҙур әһәмиәткә эйә. Ошо ваҡытты иҫәпкә алып, төп бал йыйыуға умарталыктағы эштәр планлаштырыла, әҙерлек алып барыла.

## Һут бүленеүгә тоьҫир итеүсе шарттар

**Бал** ҡорттары һут һәм сәскэ һсркэһе йыйған үҫсмлектәрҙе бал һуты биро торған үҫемлектэр тип атайҙар. **Беҙҙең** республикала ҡырағай бал бирә торған үҫемлектэр 280 торгә [illegible]ш, шулар араһында 150 төрө бал бирә торған үҫемлектәр Аулирлк практик әһэмиәткә эйэ. Тауарлыҡлы бал биреүсе бер [illegible] гиҫтэ тер үҫемлек иҫәплэнә. Бал бирә торған айырым ерҙәрҙең ҡиммәте башлыса баллы үҫемлектәрҙең күплеге һәм сифаты менон билдоләнә.

Бал бирсүсе **үҫсмлектәр,** сәскә атыу ваҡытына, бал йыйыу характерына һәм үҫеү урынына ҡарап, кластарға бүленә. Сәскә атыу ваҡыты буйынса яҙғы, йәйге һәм көҙгө бал биреүсе үҫемлектәр була. Бал йыйыу характеры буйынса һут-һеркә, һут һәм һсрко бирә торған үҫемлектәргә айырыла. Бал ҡорттарын бала ҡорт тәрбиәләү-ашатыу өсөн шулай ук һеркә [illegible]ш итеүлә. Һсрконе тал, бәпембә, саған, һары акация, аҡ

тирәк, шулай уҡ ҡайын, уҫаҡ, сәтләүек ҡыуағы, кукуруз, мәк, ирышы күпләп бүлә. Һут-һеркә төркөмөнә бал бирә торған бик күп үҫемлектәр: йүкә, ҡарабойҙай, көнбағыш, кәрешкә, эспарцет, люцерна һәм башҡалар инә. Был — бал бирә торған үҫемлектәрҙең иң киң һәм мөһим төркөмө, шуның өсөн дә ул умартасылыҡтың төп аҙыҡ базаһы булып тора.

Бал бирә торған үҫемлектәрҙең сәскә атыу ваҡыты һауа шарттарына бәйле, ул төрлө йылда төрлөсә була. Төп бал йыйыу башланыу ваҡытына ҡарап, умартасы бал ҡорттары ғаиләләрен үҫтереү мәлен ашыҡтыра, йәки, кирәһенсә, әкренәйтә ала. Төп бал йыйыуға ҡорттар һанын кәрәгенсә арттырып өлгөрөү, уларҙы бал йыйыуҙа тулыһынса файҙаланыу өсөн, умартасы ҡорттарҙың эшкә һәләтлелеген һаҡлау күҙлегенән сығып эш итә.

Һут бүленеү процесына һәм уның сифатына һауа шарттары йоғонто яһай, быны һеҙгә артабанғы эштә иҫәпкә алырға кәрәк. Һут бүленеүгә һауа температураһы үтә ныҡ тәьҫир итә. Үгәй инә үләне һәм сейә кеүек яҙ иртә сәскә ата торған үҫемлектәр 8 градус йылылыҡта һут бирә башлай, мүйыл +10 градуста. Температураның артабан күтәрелеүе һут бүленеүҙе көсәйтә. Күпселек үҫемлектәр 22—27 градус температурала, 16 градустан түбән температураға ҡарағанда, һутты 2—3 тапҡырға күберәк бүлә. Унан кире күренеш күҙәтелә: температура 27 градустан юғары күтәрелгәндә, һут бүлеп сығарыу кәмей, бөтөнләйгә туҡталып ҡала. Һут бүленеү өсөн төндәрҙең йылы булыуы мөһим, ләкин температураның тәүлек эсендә тирбәлеп тороуы талап ителә, кире осраҡта үҫемлектәр һут бүлеүҙән туҡтай.

Һут бүленеү процесына һыуыҡ, оҙаҡ һуҙылған ямғырҙар, ҡоролоҡ, көслө ел һәм май айы ҡырауҙары сиктән тыш кире тәьҫир итә. Һәм, кирәһенсә, уртаса дымлылыҡ, ҡыҫҡа ваҡытлы йылы ямғырҙары менән ярайһы ғына йылы көндәр торғанда һут бүленеп сығыуға һәйбәт була.

Күпселек үҫемлектәр өсөн 60—80 процент һауа дымлылығы иң яҡшы тип иҫәпләнә. Артыҡ дымлылыҡ үҫемлектәрҙең вегетатив массаһы ҡотороноп үҫеүгә килтерә, был иһә һут бүлеп сығарыуҙы кәметә йәки бөтөнләйгә үк туҡтатып ҡуя. Һауа ҡоро булғанда ла шулай уҡ һут бүлеү туҡтала, ә элгәре бүлеп сығарған һут ҡуйыра, бал ҡорттары уны ауырлыҡ менән генә йыя.

Үҫемлектәр тарафынан һут бүлеүҙә тупраҡ ҙур әһәмиәткә эйә. Әгәр ҙә тупраҡ үҫемлектең үҫеүенә булышлыҡ итһә, ул яҡшы үҫешәсәк, һутты ла күберәк бүлеп сығарасаҡ. Шулай,

кандала үләне, кәрешкә, люцерна эзбизға бай һелтеле тупраҡта күберәк һут бүлеп сығара, ә ҡара кортмәле һәм бөрләгән эсе тупраҡты ярата.

## Мул бал һуты бирә торған үҫемлектәр

Умартасылыҡта бал бирә торған үҫемлектәрҙең һут продуктлылығын билдәләү ғәҙәте бар. Был иһә — бал бирә торған ерҙәрҙең бер гектарынан ҡорттар тарафынан йыйылған бөтә һуттың күләмен билдәләү. Мәҫәлән, һәр гектар тотош йүкәлек массивынан 500 килограмдан алып бер тоннаға тиклем, Башҡортостанда уртаса 600 килограмм һут йыйыла. Ҡарабойҙайҙың һәр гектары 70—90 килограмм бал бирә, был культураны эшкәртеү агротехникаһы юғары булғанда, шул уҡ майҙандан 120—140 килограмға тиклем бал алырға мөмкин, көнбағыштан 30—40 килограмм, ҡандала үләне (һары һәм аҡ) һәр гектарҙан 200—300 килограмм, айырым осраҡта 400—500 килограмға тиклем бал бирә. Әгәр ҙә йүкәне урмандың бал бирә торған «батшаһы» тип атаһалар, ҡандала үләнен дала, ялан үҫемлектәренең «батшаһы»на индерәләр. Тимербулат Мәсәлимовтың 1991 йылда Башҡортостан китап нәшриәте тарафынан урыҫса баҫып сығарылған «Донник» («Ҡандала үләне») исемле китабында, бына тигән бал бирә торған үҫемлек булараҡ, был культура яҡшы яҡтыртыла.

Автор, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт аграр университеты доценты, бик мауыҡтырғыс итеп ҡандала үләненең бөтә үҫтөнлөктәрен, тупраҡтың уңдырышлылығын нисек яҡшыртыуын, дарыу һәм сифатлы бал бирә торған үлән булыуын асып бирә.



*Горчица баҫыуында — мул бал бирә торған үҫемлек*

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... 40 мг һут һыйҙыра торған борлотәүен тултырыу өсөн бал ҡорто бер осоуҙа 200-ҙән кәм булмаған көнбағыш йәки эспарцет, йә горчица сәскәһенә, 15—20 баҡса культуралары сәскәһенә, 130—150 ужым рапсына йәки кориандр, йә сырмалсыҡ сәскәһенә ҡунаҡларға тейеш;

... күпселек үҫемлектәрҙең татлы һутының составында өс төр шәкәр — сахароза, глюкоза һәм фруктоза бар. Улар төрлө үҫемлектә төрлөсә миҡдарҙа була. Ҡорттар күп глюкозалы (көнбағыш, горчица, тиле шалҡан һәм башҡалар) татлы һуттан эшкәрткән бал тиҙерәк ҡомоға. Әгәр ҙә татлы һутта фруктоза күберәк булһа (аҡ һәм һары акация, ашай торған каштан, арса), бал аҡрыныраҡ ҡомоға;

... бик күп үҫемлектәр бер үк ваҡытта һут һәм һеркә бүлә. Ләкин шундай үҫемлектәр ҙә бар, уларҙан ҡорттар бары тик һеркә генә йыя. Ундайҙарға сәтләүек ҡыуағы, мәк, гөлйемеш, люпин, кукуруз һәм башҡалар инә;

... әгәр ҙә умарталыҡтан алыҫ булмаған ерҙә аҙыҡ сығанағы тапһа, ҡорт умарта эсендә, кәрәҙҙәр өҫтөндә «өйөрөлөп бейей». Ә ҡорттоң ҡорһағы менән «ҡыйшаңлаған» бейеүе алыҫыраҡ аралыҡта урынлашҡан баллы үҫемлек йәки һеркә тураһында сигнал бирә.

## ТӨП БАЛ ЙЫЙЫУ ОСОРО

Төп бал йыйыу осоро — ул ҙур майҙандарҙа бал бирә торған ҡиммәтле үҫемлектәрҙең сәскә атыу мәле. Ошо саҡта ҡорттар үҙҙәрен һаҡлыҡ аҙыҡ менән тәьмин итә, ә умарталыҡ тауарлыҡлы бал бирә. Төп бал йыйыу осоро килеп етеүен фенологик күҙәтеүҙәр ярҙамында, үлсәүҙәге умарта күрһәткестәре һәм ҡорттарҙың үҙҙәренең тәртибе буйынса билдәләйҙәр. Ә үлсәүҙәге умарта — бөтә яҡтан да ап-асыҡ булған япма аҫтына үлсәгескә ҡуйылған, көслө ҡорттарҙан торған ғаиләле умарта ул. Уны көн һайын кисен, бөтә бал ҡорттары ла ғаиләгә әйләнеп ҡайтҡас, үлсәйҙәр һәм тәүлек артымды билдәләйҙәр. Ҡорттарҙың осоу радиусында (2—3 саҡрым) ниндәйҙер билдәле үҫемлектәр (мәҫәлән, эспарцет, карабойҙай, йүкә, көнбағыш һәм башҡалар) була. Бал бирә торған ошо үҫемлектәрҙең күпләп сәскә атыуы һәм ҡорттар-

ҙың сәскәләргә осоуы бал йыйыу осороноң килеп еткәнен фаразларға мөмкинселек бирә. Үлсәүҙәге умарта һут ташыуҙың кискен (тәүлеккә 2 килограмдан да ауырыраҡка) артыуын күрһәтә. Ҡорттарҙың тәртибе шаҡтай үҙгәрә. Улар тыныс булып китәләр, хатта рамды умартанан алыуға ла иғтибар итмәйҙәр. Ҡайһы саҡта умартаны битлек киймәйенсә лә ҡарап була. Көндөҙ генә түгел, кисен һәм төндәрен дә умарталыҡта, бер тигеҙ генә булып, берҙәм гөүләү ишетелеп тора: был иһә бал ҡорттары ояны әүҙем елләтә, яңы килтерелгән һуттан һыуҙы айырыуын аңлата.

Ошо осорҙа ҡорттарҙы мөмкин тиклем аҙыраҡ тынысһыҙларға кәрәк. Һәр бер ҡағылыу ҡорт ғаиләһенең ҡуҙғыуына килтерә һәм эшкә һәләтлелеген кәметә. Ҡорттарҙы һуңғы кәрәкле сиктә генә тикшереү һәм бөтә эштәрҙе көндөң икенсе яртыһында ғына башҡарыу тәҡдим ителә (етмәһә, һеҙҙең, эш башлаусы йәш умартасылар, ҡорттарығыҙҙың һаны ла самалы ғына бит). Ошолай эш иткәндә, ҡорттар тонон тынысланаһәм иртәнән үк бал йыйыуҙы әүҙем башлай.

Бал йыйыу башланғас та кәрәк булған осраҡта ояны өҫтәп киңәйтергә (корпустар йәки ҡоро балауыҙ һуҙылған магазиндар ҡуйырға), әгәр ҙә элегерәк эшләнмәгән булһа, ҡорт үрсемдәрен яңынан төркөмдәргә айырырға, йәғни өлгөргән



*«Янғантау» санаторийы умарталығы*

копло үрссмдорҙе ояның өҫтөнә, ә асыҡ үрсемде аҫҡа, ояға ҡуйырға һом йэш ҡорттарҙың ярайһы ғына өлөшен үрсем тәрбиәләүҙән бушатырға, уларҙы һут йыйыу һәм эшкәртеү 'ммено ҡушырға корәк. Бының өсон ино ҡорттоң йоморткa һалыуын сикләйҙәр (ул эш ҡыҫҡа ғына ваҡытта көслө бал йыйыу осоронoң башланып китсүс алдынан, оҙакка һуҙылған осорҙоң икенсе яртыһы ваҡытында эшлэнә).

Бал йыйыу башланыр алдынан умартасы оянан тиҙ ҡомоғоусы баллы рамдарҙы (был бал өйәңке һэм эүернә сэскәле үҫемлектэрҙән, мәҫәлән, ҡыҙыл талдан, рапстан, тиле шалҡандан һ.б. йыйыла) ала. Умартанан иҫке баллы былтырғы рамдарҙы ла (улар тороп ҡалған булһа), рәшә баллы рамдарҙы ла ала. Бындай бал алдағы ҡыш осөн аҙыкка яраҡлы түгел. Уны ашап ҡышлаған хәлдэ ҡорттар үто ныҡ сырхаулай, эстәре китә йәки үлеп үк ҡуя. Бындай баллы рамдарҙы кәрәҙҙәрҙә көпләп ҡуйылған үрсемдэр булған осраҡта ла бал ҡыуғыстан һурҙырып алалар. Асыте үрсемдәре булған кәрәҙҙәрҙән балды һурҙырып алыу рөхсәт ителмәй, сөнки бала ҡорт, ҡарышлауыҡтар ҡойолоп төшөүе ихтимал.

## Ғаиләнең кәрәҙҙәр менән 'тоь.мин ителеше

Төп бал йыйыу осорон оя якшы сифатлы кэрэҙҙэр менән тейешле күләмдә тәьмин ителгән хәлдә генә уңышлы файҙаланырға мөмкин. Ҡайһы саҡта умартасьг ғаилэне ҡараған саҡта айырым кәрәҙҙәрҙә кеплэп ҡуйылмаған аҙ ғына баллы күҙэнэктәр һэм өлөшлэтә генэ һут менэн тултырылған күп күҙәнэктәр күрә. Шунан, ҡорттарға яңы һутты урынлаштырырға урын етерлек, тип яңылыш һығымта яһай ҙа ояны кәрәҙҙәр менэн киңәйтмәй һәм бының менән бал йыйыуға тәҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерә. Әгэр ҙә кәрәҙҙәр менән бер тигеҙ тәьмин ителмәһәләр, көсө һәм эшкә һәлотлелеге буйынса бер тиң ҡорт ғаиләләре балды төрлөсо күләмдә йыясаҡ. Шулай, мәҫәлән, бал йыйыу осоро башланыу мәленә магазины менән бергә 12 рамлы (дадан) умартаны биләүсе ике ғаилэнән өҫтәмә рәүештә икенсе магазин ҡуйылғаны балды күберәк йыясаҡ. Күҙәнәктәрҙең тултырылмаған булыуы ҡорттарҙың умартаға 40 проценттан алып 80 процентка тиклем һыулы шыйыҡ соско һуты килтерсүе менән аңлатыла. Уны балға эшкәрткәндә ҡорттар күп ксно дымды айырып ала (өлгөргән балда 20—21 процент тирәһе һыу бар). Ғәҙәттә һутты бал итеп эшкәртеү 5—6 көн дауам ито. Олгоргән бал менән ҡорттар кәрәҙҙең һәр бер күҙәнәген

тулыһынса тултырып көплэп ҡуя. Бындай күҙәнәктәрҙә 0,43 грамм тирәһе бал була. Әйткәндәй, ҡорттар яңы килтерелгән һут менән күҙәнәктең бары тик өстән бер өлөшөн генә тултыра (0,1.4 грамм тирәһе). Артабан һыу парланып сығыу һәм һут ҡуйыра төшөү менән күҙәнәктә ул тәүге хәленән азая кшю. Ҡорттар күҙәнәктәрҙең бер аҙ өлөшөн тултырырға тырыша, әммә бер ҡасан да төрлө көндәрҙә килтерелгән һутты бер үк күҙәнәккә һалмай.

Ҡорт ғаиләһенең һутты урынлаштырыу һәм эшкортеү өсөн кәрәҙҙәргә талабы бал йыйыуҙың ниндәй булыуына бәйле. Уның көслөрәк булыуына ҡарап, һутты урынлаштырыу һәм балдың өлгөрөүе өсөн кәрәвсле кәрәҙҙәргә лә талабы арта. Кәрәҙҙәр менән етерлек кимәлдә тәьмин итмәгән хәлдә һеҙ етерлек тиклем өлгөрөп етмәгән бал ҡыуып алырға мәжбүр булаһығыҙ, сөнки умартаға көн һайын күберәк һут килтертеү яғын ҡарайһығыҙ бит. Алдан алынған балдың дымлылығы юғары була һәм сифаты буйынса ла өлгөргән балдан айырылып тора. Ул тиҙ генә әсеп бара һәм насар һаҡлана, шуның өсөн дә ундай балды һатырға һәм һатып алырға ярамай.

Бал йыйыу көсәйгән һайын, бал ҡорто ғаиләһенең кәрәҙҙәргә ихтыяжы юғарыраҡ була, һәм улар умартаға ни тиклем әҙерәк ҡуйылһа, балды юғалтыуҙар ҙа күберәк тәшкил итә. Өҫтәмә магазиндарҙы умартаның корпусына элек ҡуйылған өҫтәмәнең аҫтына, йәғни оя корпусы менән ҡуйылған магазин араһына урынлаштыралар. Аҫкы корпуста ҡорттар — яңы һутты, өҫкеһендә өлгергән балды урынлаштырасаҡ, сөнки ҡорттар балды һәр саҡта ла еҫкө корпустарҙа һәм магазиндарҙа урынлаштырырға тырыша. Әгәр ҙә һеҙҙең һаҡлыҡта төҙөлгән әҙер кәрәҙҙәрегеҙ булмаһа, магазиндарҙа яртылаш төҙелгән кәрәҙҙәр йәки балауыҙлы рамдар ҡуялар.

## Бал йыйыу шарттарының үҙенсәлектәре

Төп бал йыйыу осоро түбәндәгесә бүленә. Башланыу ваҡыты буйынса: иртә — июндең икенсе ун көнлегенән башлап, мәҫәлән, ҡурай еләгенән, аҡ кәрешкәнән, төрлө ялан үләндәренән (сабып алынғанға тиклем) һут йыйыу; уртаса — июндең аҙаҡтарынан башлап июлдең беренсе яртыһына тиклем, мәҫәлән, йүкәнән, иртә сәселгән ҡарабойҙайҙан, ҡандала үләненән; һуңғы — июлдең икенсе яртыһынан башлап августың уртаһына тиклем, мәҫәлән, көнбағыштан, ҡандала үләненең орлоҡ участкаларынан, кипрейҙән. Ҡандала үләне һәм кипрейҙың сәскә атыуы июнь аҙағында

башлана һом 35—45 көн дауам итә, шуның есөн һуңғы ике ваҡытты үҙ эсенә ала.

Дауамы буйынса: кыҫка — йүконон (7—12 көн), уртаса — ҡарабойҙайҙан (15—20 кон), дауамлы — ҡандала үләненон, кипрейҙан, ҡарабойҙайҙан, төрлөса срокта сәселгән осраҡта (30—40 көн).

Йышлыҡ, йәғни үлсәүҙэге умартаның көндәлек артымы буйынса: һүрән — 2 килограмға тиклсм; уртаса — 3—4-әр килограмм; көсле — 5—7-шәр килограмм; бик кослө — 8-әр килограмм һәм унан күберәк.

Бал биро торган үҫемлекторгә бәйле рәүештә төп бал йыйыу йүкә, йүкә-тсарабойҙай, ҡарабойҙай, ҡарабойҙай-конбағыш балы булыуы мөмкин. Юғарыла һанап кителгән бөтә үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, бал йыйыуҙың урындағы тибын һүрәтләргә мөмкин. Моҫәлэн, йүкә тибы йүкэлектор ҙур майҙандарҙы биләгән ерҙәргә тура килә, йәғни ҡыҫҡа ваҡытлы, эммә бик көслө бал йыйыу мзле була. Ҡарабойҙай-көнбағыш тибы һуң, дауамлы, уртаса көслө бал йыйыу мәле булып тора. Ҡандала үләненән бал йыйыу — дауамлы, көсле.

Д.Т.Шакиров «Пчеловодство Башкирии» тигән китабында беҙҙең республикала йүкә, йүкә-ҡарабойҙай, ҡарабойҙай-көнбағыш тибын, шулай уҡ бал бирә торған торлө ялан, баҫыу һәм урман аҡландарының үҫемлсктэрен айырым һүрэтләп яҙа һәм: «Башҡортостан территорияһы вс төп тәбиғи зонаға: тау-урман, урман-дала һәм дала зоналарына бүлснэ», — ти. Ҡайһы бер авторҙарҙың мәғлүмәттәре буйынса, һәр зонаға конкрет төп бал йыйыу тибы тура килэ. Моҫәлән, тау-урман зонаһына — йүкә, урман-далаға — ҡарабойҙай тибы һ.б. Лэкин беҙҙең тарафтан Башҡортостандың бал йыйыу шарттарын өйрәнеү шуны күрһәтте: һэр зонала бал йыйыуҙың күрһәтелгэн ике, хатта ес тибы осрай. Шуның өсөн беҙ бал йыйыу буйынса оҡшаш типлы районларҙы бер төркөмгә индерҙек. һөҙөмтәлә дүрт төркөм барлыҡҡа килде:

1. Бал йыйыуҙың йүкә тибы оҫтөнлек иткән районлар: Архангель, Благовещен, Ғафури, Иглин, Нуриман, Тэтешле һәм башҡалар.

2. Бал йыйыуҙың йүкә-ҡарабойҙай тибы өҫтөнлок алған районлар: Ауырғазы, Бәләбәй, Борай, Йылайыр, Йәрмәкәй, Күгәрсен, Әбйәлил һ.б.

3. Бал йыйыуҙың ҡарабойҙай-конбағыш тибы өҫтөн булған районлар: Бишбүләк, Бүздәк, Доүлокэн, Миәкә, Көйөргәҙе, Кушнаренко, Саҡмағош, Стэрлебаш, Стэрлетамаҡ, Федоровка, Шишмә, Әлшәй.

4. Бер типка ла хас булмаған (яландарҙың, котоүлсктор-ҙсн, баҫыуҙарҙың һәм урман аҡландарының торло-торло үләндәренән) бал йыйыу районлары: Баймаҡ, Балтас, Бсло-рст, Дүртөйлө, Илеш, Ишембай, Ҡырмыҫкалы, Салауат, Учалы, Хәйбулла, Шаран.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... «һут» һүҙе (нектар), грек теленән тәржемә итһәң, үлемһеҙлек бүләк итә торған «аллалар эсемлеге» тигән-де аңлата;

... бер ҡалаҡ бал (30 г) әҙерләү осөн 200 ҡорт иң яҡшы йыйым осоронда бер кен буйына һут йыйырға мәжбүр. Яҡынса шунса уҡ ҡорт умартала һутты ҡабул итеү һәм эшкәртеү менән шөғөлләнә. Ошо уҡ ваҡытта ҡорттарҙың бер өлөшө ҙур тырышлыҡ менән ояны елләтә, быныһы иһә һуттан артыҡ һыуҙы парландырыу ниәте менән эшләнә;

... 1 кг бал йыйыу өсөн ҡорттар 4500-гә тиклем осош яһарға һәм 6—10 миллион сәскәнән һут алырға тейеш. Кослө ғаило көнонә 5—10 кг бал (10—20 кг һут) йыя ала.

# VI. Бал корттарын тәрбиәләү һәм үрсетеү

## ҠОРТТАРҘЫ ҠЫШЛАУ УРЫНЫНАН СЫҒАРЫУ

**Яҙғы** йылы көндәр башланыу менән, күстәрҙе баҙҙан сығарған көндән умартасыларҙың яңы сезоны асыла. Улар умарталыҡта тәүге эштәрҙе башҡаралар: ҡорт ғаиләләрен ҡышлаған урындарынан һәм ҡар аҫтынан сығаралар. Был эштәрҙе һеҙгә, башлаусы умартасыларға (кемдәрҙең күстәре бар), ҡасан башҡарырға кәрәк һуң?

Бал ҡорттары иректә ҡышлаған хәлдә тышта һауа температураһы **5—7** градус йылылыҡ булыу менән, тәүге елһеҙ генә торған ҡояшлы көндән үк **таҙартыныу** осошо яһайҙар. Бының өсөн умарталарҙы ҡарҙан, кейәләрҙе үлгән ҡорттарҙан **таҙарталар** һәм кейә алдына, умарталыҡ территорияһына кел йәки тупраҡ һибәләр, һалам, бесән, йәки ағас ботаҡтары һалалар. Һыуыҡ, елле көндәрҙә ҡояш нурҙары ҡорттарҙы осоуға дәртләндермәһен өсөн **(уларҙың** һалҡындан үлеүе ихтимал) умарта ауыҙҙарын, кейәләрен текә итеп ҡуйылған таҡталар менән ҡояштан **ҡаплайҙар**. Ә йылы көндәрҙә иһә был ҡорттар осоп килеп ултыра торған таҡталар алып кейә алдына ҡуйыла. Кейәләрҙе иһә һис кенә лә, бер генә осраҡта ла ныҡлап ябып ҡуйырға ярамай. Ҡайһы бер башлаусы, һәүәҫкәр умартасыларҙың хатаһы ошонан ғибәрәт тә инде.

Әгәр ҙә бөгөн ҡышлатыу урынында һауа температураһы **+3—5** градустан юғары булмаһа, ҡорттарҙы тышҡа сығарыу менән ашығырға кәрәкмәй.

Ғәҙәттә бал ҡорттарын тышҡа тымыҡ, ҡояшлы көндә, умарталар ҡуйыла торған ерҙә ҡар иреп бөткәс, һауа температураһы күләгәлә **+10—12** градусҡа еткән тыныс ҡояшлы **көндәрҙә** генә сығаралар. Был көндәр йылғаларҙа боҙ китеү, үгәй инә үләненең, умырзаяның сәскә атыуы менән тап килә. Умарталарҙы иртәнсәк иртә менән сығаралар, сәғәт 9-ға тамамлайҙар. Кемдәрҙең күстәре күп, уларҙы төнгә ҡаршы, кис ҡояш байыр алдынан сығарыу йәтеш. Был ҡорттар төндә тынысланып, ябай һауа шарттарына өйрәнеп, икенсе көндө йылы булһа, беренсе таҙартыныу осошо яһайҙар.

Тышта һауа температураһы **+6—8** градус булғанда ҡорттарҙы ҡышлау урынынан бик иртә сығарыуҙы ла ҡулланырға мөмкин. Бигерәк тә улар тынысһыҙланһа, умарта кейә-

лоренән күпләп ҡорттар сыға башлаһа. Ә тышта күстәр үҙҙәрен тынысыраҡ тойор. Әгәр кышлатыу урынында (баҙҙа) температура +7—8 градус һәм һауаның дымлылығы 85 проценттан юғары булһа, ул сакта ҡорттар нык геүләйҙәр, кейәнән тышҡа сығалар һәм умартаның алғы стеналарында ауырыу, эс киткән таптар күрено башлай. Бындай осраҡтарҙа бал ҡорттары күсен һауа температураһы +2—3 градус булғанда ла сығаралар, сөнки иректә үҙҙәренең тәбиғи мөхитендә улар үҙҙәрен яҡшыраҡ тоя. Ҡорт күстәрен иртә тышҡа сығарыу — ҡышлау насар, уңайһыҙ үткән осраҡтарҙа уларҙы һаҡлап ҡалыу мөмкинселеген бирә. Яҙын улар яҡшыраҡ үҫсшәләр, көс йыялар. Тоүге сығарған көндә үк көслө күс ҡорттары яҡшы оса.

Көсһөҙ, хәлһеҙ күстәрҙең ояһынан аҙ ғына ҡорт сыға, бик насар осалар. Ошо көндө, ҡорттарҙың осоуы ҡайта, кәмей тошкос, ояларҙы тулыһынса асмайынса ғына бөтә күстәрҙе лә ҡарап, тикшереп сығыу мотлаҡ. Был сакта аҙыктың булыу-булмауын (ситтә торған баллы рамға ҡарап), инә ҡорттоң иҫәнлеген (һалынған йоморткалар, асыҡ һәм ябыҡ — копләнгән үрсем) һәм күстең көсөн (рамдар араһында ҡорттар биләгән аралыҡтарҙан) асыҡлайҙар.

Умарталарҙы ҡышлау урынынан сығарған көндө үк ҡорттар өсөн умарталыҡҡа берәй һауытҡа (бак, ағас һауыт, самауыр) һыу ҡойоп ултыртырға кәрәк. Таҙа, йылымыс 1 литр һыуға 0,01 процент тоҙ ҡушыу ҙа насар түгел, һыуҙы көн һайын алыштырып тороу һәйбәт. Яҙҙан һыу бирмәһогеҙ, ҡорттар уны кырҙа эҙләп, ҡарға, туң ергә, йылғаларҙағы һыуыҡ һыуға төшөп һәлэк булалар.

## Ояларҙы йылытыу һәм корттарҙы туҡландырыу

Умартасы, ҡорттарҙың тәүге осоуын күҙәткәндон һәм ояны ҡарағандан һуң, аҙығы боткән, инә ҡорто булмаған, косһоҙ, насарланыу, эс китеүҙән, кимереүселәрҙән (бигерәк тә сысҡандар), дымлылыҡтан зыян күргән бал тсорттары күстәрен асыҡлай. һәр күстә кәмендә 8—10 килограмм бал һәм һитоле кәрәҙле 1—2 рам булырға тейеш. Кәрәҙле, сифатлы сәскә балы өҫтәп, аҙыҡ запасын тулыландырырға, йәғни 2:1, әгәр ҙо шэкәр самалы булһа, 1:1 нисбәтендә әҙерләнгән йылы һыу һәм шәкәр шәрбәте өҫтәп туйындырырға кәрәк. Уны туҡландырыу урындарына - кәмәшәүҙәргә бирергә йәки бер ашатыуға 2 килограмм иҫәбенән буш кәрәҙҙәргә ҡойорға (сойгүндән уңай) кәрәк. Бындай өҫтәмә емләүҙе көндор

[illegible] **корттарығыҙ** яҡшылап кесәйгәс, көсле күскә **генә бирегеҙ**. Г[illegible]и һыуыҡ **көндәрҙә** шәрбәт ҡатып ҡала, ә [illegible] **көсһөҙ күлһеҙ булһа**, улар биргән сиропты эшкәртә **алмай**. Унлпй гаиләләргә момкин тиклем үҙ аҙығын — бал**ды бирергә кәрәк.** Ояға бирер алдынан, рамдағы кәрәҙле **балды касау**, умарталыҡ бысағы менән асып, ҡупшыталар. **Көсһөҙ** ғаилэго быңдай асылған балды алып ашауы еңслгә **тура** кило. Әгәр ҙә балға шәкәр йәки шәкәр комо ҡушып оҙерләнгән ҡамыр булһа, уны марляға урап киндер япма аҫтына һалырға мемкин. Ул аҙыҡты бал булмағанлыҡтан йәки аҙ булғанға бирэлэр.

Күстэрҙе туҡландырыу алдынан умарта эсендә ҡыштан ҡалған буш һәм бик оҙаҡ тотонолған, ныҡ ҡарайған кәрәҙҙәрҙе, эсегэн һэм үтә ҡомоҡкан, кристалланған балды алырға кәрәк. Быcранып, бал ҡатып, бэҫәреп беткән кәрэҙҙәрҙе лэ яңырталар. Ҡорттарҙың ояларын ситтән, ян-яҡтан һәм өҫтән ентеклэп йылыгталар. Бының осен **мендәрҙәр**, йылытыусы материалдар тултырылған йүргоктор, ҡалын киндер, септә йәки ҡапсыҡтар **файҙаланыла**. Яҙғыһын, **һыуыҡтарҙа** бик мөһим ояларҙы мвмкин **тиклсм кәмстсп-кыҫҡартып,** йылытып торорға кәрэк. Сөнки **һуңғы осор бик көслө** таралған ауырыу — эзбизлы үрсем, **аскосферо**з **һыуыҡ,** йылытылмаған ояларҙа ныҡ үрсей. Кейә**ләрҙе** 1—2 сантимстрға тиклсм кэметолэр, йәғни **2—3** ҡорт инсп сығырлыҡ ҡына булһын. Берҙэн, ояны һыуыҡтан **һаҡлайһығыҙ,** икснсснон, уғры ҡортгар күсте баҫып инә алмаясаҡ.

Ҡорттарҙы йылы, ҡояшлы һәм тымыҡ, елһеҙ **көндәрҙә** ҡарауы еңел. Тулыһынса ояларҙы асмайынса ҡорттарҙы ҡарау +10-12 градуста үткорелэ, ашығыс осраҡтарҙа (өҫтәмэ емләгәндэ, аҙыҡ биргәндә) +6—8 градус булһа ла ярай. Ә умарта төптәрен таҙартып, тулыһынса асып ҡарау 15—17 градус йылылыҡ торғанда, тсорттар үҙҙәрен тыныcыраҡ тотҡан саҡта, үткәреү яҡшыраҡ. Өҫтәүенә, бындай көндәр башланыу менән ҡорттар тәбиғәттән умарталарға сәскә һуты һәм һеркә ташый башлай.

## БАЛ ҠОРТТАРЫН ТӨРЛӨ УМАРТАЛАРҘА АҪРАУ

Башҡортостандың алдынғы умартасылары, ҡорттарҙы ҙур күләмле умарталарҙа аҫрау мснон, күс айырыуға ҡаршы һәр ксмгэ андайышлы **алымдарҙы** ҡулланып һәм ҡорттарҙы ре**зервҡа** бүлеүҙе формалаштырып, топ бал йыйыуға көслө

ғаиләләрҙе файҙалана һәм уларҙы эшкә һәләтлелек хәлендә тота.

Башҡортостан умарталыҡтарында ике корпуслы, күп корпуслы, горизонталь ятмалы һәм 12 рамлы 2—3 магазин өҫтәмәле умарталар ҡулланыла. Бындай умарталарҙа ҡорттарҙы аҫрау технологияһының үҙ үҙенсәлектәре бар.

Умартасылар, бигерәк тә яңы башлап эшкә тотоноусылар, йыш ҡына йүкәнән бал йыйыуға иҫәп тота. Ысынлап та, беҙҙең Башҡортостанда һуңғы йылдарға тиклем йүкәнән йыл һайын тиерлек ярайһы ғына бал алдылар. Баш ҡаланың үҙендә — Өфөлә айырым умартасылар күп йүкә балы йыйыуға өлгәшкән, ҡаланың үҙәгендә (йүкәлектәр тупланған ерҙә) 5—6 күстән өс фләк бал йыйған 1970, 80-се йылдар булды. Һуңғы ваҡытта оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған һыуыҡ яҙҙар, уның ҡырауҙары, һуңынан бер туҡтауһыҙ яуған ҡослө ямғырҙар сәскә һуты бүлеп сығарыуға кире йоғонто яһай. Һөҙөмтәлә күпләп бал йыйыу урынына өҙөк-өҙөк, аҙ-маҙ ғына бал йыйыла. Шул арҡала ҡорттар йыш ҡына айырыу торошона күсеп, йыш күс айыра.

Бөтә ошо тәбиғәт шарттарын иҫәпкә алып, бал ҡорттарын аҫрау һәм үрсетеү буйынса тәжрибәнең самалы булыуҙарын күҙҙә тотоп, беҙ ҡорттарҙы 12 рамлы магазин өҫтәмәләре булған (дадан) умарталарҙа тәрбиәләү һәм аҫрау системаһын тәҡдим итәбеҙ.

## 12 рамлы умарталарҙа ҡорттар тотоу

Башҡортостанда бал ҡорттары ғаиләләренең 30—40 процентҡа тиклемен һәр береһе 435—300 мм ҙурлыҡтағы 12 рамлы умарталарҙа аҫрайҙар, ә бал йыйҙырыу өсөн 435—145 мм ҙурлыҡтағы рамлы магазин өҫтәмәләрен файҙаланалар. Был йәтеш дадан умартаһы ҡорттарҙы аҫрау өсөн уңайлы. Ләкин уның ярайһы ғына етешһеҙлеге лә бар: күләме бәләкәй булыуы ҡорттар ғаиләһенең үҫешен тотҡарлай. 12 рам урынлашҡан оя корпусында 2—3 рам бал, 2—3 рам һитә менән тултырыла, ә үрсем өсөн 6—7 генә рам тороп ҡала, әгәр ҙә 1—2 рам яһалма балауыҙ ҡуйһаң, урын тағы ла кәмей төшә. Ә бит һәйбәт ғаиләлә, уңғай шарттар тыуҙырылған хәлдә, 9—10 рам һәм унан да күберәк үрсем була.

Яҙҙан башлап бындай төҙөлөшлө умартала ҡорттар ғәҙәттә 7—9 рам биләй. Ҡорт ғаиләһе артабан үҫкәндә, умартаға 1—2 кәрәҙ, ә унан яһалма балауыҙлы рамдар ҡуялар. Ғәҙәттә умартала урын етешмәү арҡаһында ояға 2—3 рамдан да күберәк

## ДАДАН УМАРТАҺЫНДА БАЛ ҠОРТТАРЫН АҪРАУ




*I — беренсе өҫтәмәне умартаға ҡуйыу; II — икенсе өҫтәмәне умартаға урынлаштырыу*

яһалма балауыҙ ҡуйып булмай. Йәш ҡорттар кәрәҙ төҙөү буйынса эш менән тулыһынса мәшғүл булмай һәм ғаиләйыш ҡына көс айырыу хәленә килә. Ҡорттарҙы төҙөү эшенә йәлеп итеү өсөн магазинға кәм тигәндә алты яһалма балауыҙлы рам ҡуйырға кәрәк, өҫтәмәләге бөтә ҡалған буш урынға ҡорттар күҙәнәкле кәрәҙҙәр төҙөп өҫтәп торалар. Магазин өҫтәмәһенә төҙөлгән кәрәҙҙәрҙе генә ҡуйырға ярамай, сөнки был ҡорттарҙы көс айырыу хәленә килтерә. Әгәр ҙә һеҙҙең төҙөлгән кәрәҙҙәрегеҙ булмаһа, бөтә рамдарҙы яһалма балауыҙ менән ҡуяһығыҙ, шулай итеп һеҙ ҡорттарҙы эшкә егәһегеҙ. Төҙөлгән кәрәҙҙәрҙе һәм яһалма балауыҙлы рамдарҙы сиратлаштырып ҡуялар (яһалма балауыҙ — кәрәҙ — яһалма балауыҙ һ.б.), магазинды умарта корпусына һуңғы 12-се ояра мын урынлаштырғанда бер үк ваҡытта ҡуялар.

Өҫтәмәгә 12 рамдан кәм ҡуйырға рөхсәт ителмәй, кире осраҡта ҡорттар кәрәҙ күҙәнәктәрен өҫтәп оҙонайтасаҡтар һәм

улар үрсем сығарыу өсөн яраҡһыҙға әйләнәсәк, ҡорт ғаиләһе бал йыйыу осорона етерлек көс туплай алмаясаҡ. Күпселек умартасылар, киреһенсә, инә ҡорттоң магазин кәрәҙснә күсеүсн һәм унда йомортка һалыуын яратмай. Инә ҡорттоң магазинға күсеүен туктатыу өсөн унда 12 урынына 10—11 рам ҡуйырға кәрәк. Ҡорттар был осраҡта кәрәҙҙәрҙе төҙөп еткерә, күҙәнәктәрҙе оҙонайта һәм инә ҡорт бсйек бал күҙәнәктәренә йомортҡалар һала алмай.

Бал йыйыу һуң башланған (июль — август) райондарҙа кослөрәк ғаиләләрҙе үрсетеү осөн, ҡорттар туплаиыуға, оя рамдарының бал, һитә һәм үрсем менән тулыуына ҡарап, инә ҡорт магазин өҫтәмәһенә күсә һәм йомортҡаларҙы ярым рамдарға һала. Инә ҡорт ярым магазин рамдар кәрәҙенә йомортҡаларҙы ни тиклем күбсрәк һалһа, бал йыйыу осорона ғаиләлә ҡорттар шул тиклем күберәк була.

Ояның күләмен артабан киңәйтеүҙе ҡорттар тулыһынса беренсе магазин рамдарын төҙөп бөткәс һәм уларҙы биләгәс үткәрәләр. Умартаға икенсе «төҙөлөш» өҫтәмәһен ҡуялар. Ул иһә төҙөлөшө тамамлаған кәрәҙҙәр һәм яһалма балауыҙлы рамдар менән тултырыла. Кәрәҙҙәр һәм рамдар үҙ-ара сиратташтырып ҡуйыла. Был төҙөлөш өҫтәмәһен ояға индереп, йәғни умартаның оя корпусы менән тәүге өҫтәмә араһына ҡуялар. Шуны иҫтә тотоғоҙ: ҡорттар өҫтәмәгә, әгәр ҙә унда асыҡ төҫлө һәм һарғылт асыҡ төҫлө кәрәҙле рамдар булһа, ихлас күсә, ә кәрәҙҙәрҙә күҙәнәктәр бейеклеге кәметелгән булһа, бигерәк тә яҡшы. Оянан сығыусы ҡорттарҙы ҡыҫмау өсөн өҫтәмәләрҙе өҫтән һәм шәп итеп төшөрөп ҡуймайҙар, ә ҡырҙан, һаҡлыҡ менән генә ҡорттарҙы ситкә этәреп, шылдырып ҡына ҡуялар.

Әгәр ҙә бал йыйыу көслө һәм ҡыҙыу барһа һәм һеҙҙең өҫтәмә магазиндарығыҙ булһа, ул сағында өсөнсө һәм хатта дүртенсе магазиндарҙы ҡуйырға була (уның өсөн тәүге йылда һеҙҙең мөмкинселегеҙ булмаҫ). Былай иткәндә элек ҡуйылған өҫтәмәһен балын ҡыуыу өсөн алалар.

Икс магазинға бер нисә оя рамдары ҡуйырға мөмкин, улар иһә артабан да ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ запасы булдырыу өсөн хеҙмәт итәсәк. Өҫтәмәләрҙе (икәүһен бергә) икенсе корпус итеп тә файҙаланалар. Был осраҡта умартаға ике магазин ҡулланалар. Ул саҡта умартаға ике магазин ҡуялар һәм ҡорттарға ике корпуслы ғаиләләрҙе тәрбиәләгән кеүек тәрбиә бирәләр. Магазиндарҙы ҡуйырҙан алда ҡорттарҙың ояһын (аҫкы корпус) тикшерәләр. Әгәр ҙә кәрәҙҙәрҙә инә көбөләренең булыуын күрһәгеҙ, өҫтәмә ҡулланыу файҙаһыҙ, ҡорттар унда

күсмәйәсәк һәм яһалма балауыҙлы рамдарҙы ла төҙөмәйәсәк. Иң яҡшыһы шул: бындай ғаиләгә күс айырырға мөмкинселек бирегеҙ.

Һеҙгә урта Рәсәй тоҡомло ҡорттарҙың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу мөһим: йыйылған балды улар ғәмәлдә магазин өҫтәмәһенең кәрәҙҙәренә һала. Ә ярым рамдарҙы оялар урынына (йәки киреһенсә) алыштырып ҡуйырға ярамай: 12 рамлы умарталарҙа, башҡа умарталарға ҡарағанда, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡлы рамдарҙы әҙерләүе ҡыйыныраҡ. Шуның өсөн һеҙгә дадан умарталарында ҡорт аҫрау менән бер рәттән бер нисә ғаиләне (был ҡорттар ғаиләһенең бөтә һанының 25 процентын тәшкил итә) оялы рамдарҙа ҡышҡы осорға аҙыҡ әҙерләү өсөн икс корпуслы умарталарҙа тоторға кәрәк.

## ҠОРТТАРҘЫҢ КҮС АЙЫРЫУ ОСОРО. КҮС ЙЫЙЫУ ҺӘМ УМАРТАҒА ЯБЫУ

Ҡорт таныһаң тотоп ал,
күсе һайын бер бот бал.
Халыҡ мәҡәле.

### Күстең сығып китеүе

Күс осоп сығып китеүҙән алда үҙенә яңы йәшәү урыны эҙләү өсөн разведка яһаусы ҡорттарҙы сәфәргә оҙата. Башҡалары, күмәкләп осоп китеү сигналы көтөп, тыныс ҡына ултыра. Көн бик эҫе булғанда, ҡорттар умартанан тышҡа сыға һәм йомғаҡ булып йомарлана ла сукланып аҫылынып тора. Күстәр иртәнге сәғәт 10-дан көн уртаһына тиклем сыға башлай, һауаны геүләгән тауыш менән тултыра, умарта өҫтөндә өйөрөлөп осоп, инә ҡортто көтә. Ул иһә ашыҡмай ғына бөтә ғаилә осоп киләп ҡуна торған таҡтаны байҡай ҙа умартаға кире инеп китә. Йәнә икенсе тапҡыр килеп сыға ла осоп һауаға күтәрелә, шунан бында өйөрөлөүсе ҡорттарҙың төп массаһына ҡушыла. Инә ҡорт ғәҙәттә осоп китмәй, тотҡарланып, таҡтала тора. Нәҡ ошо мәлдә умартаның бер яҡ ҡырында баҫып тороп, уны бармаҡтар менән генә тотоп алырға һәм ситлеккә ултыртырға кәрәк. Шунан уны күс моҙғаһы эсенә урынлаштырырға мөмкин. Күс булып айырылып сыҡҡан ҡорттар инәне еҫе буйынса бик тиҙ эҙләп табып, янына



*Ағасҡа һарыған күс*

йыйыла. Әгәр ҙә умартасы ошо мәлде файҙаланып өлгөрмәһә, ииә ҡорт күс менән разведкасылар күрһәткән урынға осоп китә (һүрәткә ҡарағыҙ). Ғәҙәттә күс бындай урында (ағас ботаҡтарында, ҡыуаҡтарҙа, ҡоймаларҙа) 20—30 минуттан алып 2—3 сәғәткә тиклем, ҡайһы саҡтарҙа бер нисә тәүлеккәсә, разведкасы ҡорттар яңы торлаҡ тапҡансы торорға мөмкин. Күс йыраҡ осоп китмәһен өсөн (быға халыҡтың күптән килгән әмәле бар), уға умартанан сыҡҡан саҡта сеңелсә генә һыу һибәләр. Был иһә ямғыр яуа икәнлекте ишаралай, ҡорттар умартанан алыҫ түгел ергә ҡуна.

Умартанан айырылып сыҡҡан күсте йорт янына ҡундырыу, күс йыйыу буйынса эште еңеләйтеү маҡсатында күләгәрәк урында «Т» хәрефе рәүешендә 2—3 таҡталы бағана ҡуйырға кәрәк (40х60 см ҙурлығында йоҡа таҡта файҙаланыла, ергә ултыртылған бағанаға 2 метр тирәһе бейеклектә ҡатып ҡуйыла). Күстәрҙе алдаштырыу өсөн таҡта ҡағылған бағаналарға берәй киҫәк коңгорт, көңгөрт-һоро төҫтәге балауыҙ элеп ҡуялар, бағанаға лимон бөтнөгөн ышҡып һөртәләр, сөнки был үләндең еҫен бал ҡорттары бик тә хуп күрә. Ошо уҡ маҡсатта умартлыҡ янында йәки урманда ағастарға иҫке кәрәҙҙәр менән тоьмин ителгән хәйлә умарталары ултырталар. Бындай умарталарға күс йыш һырый.

## Күсте йыйыу

Күстс йыйырға тотонорҙан алда һсҙгә аҡ халат һәм биткә селтор кейсрго (ҡорттар яуыз булмаһа ла), күректе тоҡандырырға, күстс күсереп алыу өсвн һоҫко (ҙур ағас ҡалаҡ) эҙерлорго, моҙға (һүрәтте ҡарағыҙ) йәки, япма менән ябып, ниндэйҙер бер йәшник йәки тсап әҙерләрго кэрәк.

Моҙғаны үҙегеҙ эшләй алаһығыҙ. Ул 100 см оҙонлоғондағы, 20---25 см киңлегендәге йүкә ҡабығынан йәки фанерҙан эҙерләнә. Уны дуға һымаҡ бөгэлэр (фанерҙы тәүҙә үк парландырып алырға кәрәк), аҫтан бер башын һындыралар, шулай итеп, моҙғаның төбөн барлыҡҡа килтерәлэр. Остарҙы тоташтырып, моҙғаны арттан таҙа ваҡ тимер сыбыҡ селтәре менэн тарттыралар, алдан уға киндер туҡыманан асып ябылмалы ҡорма, э өҫтөн ырғаҡлы бау (һүрәттә өсөнсө моҙғаны ҡарағыҙ) нығытып ҡуялар. Әгәр ҙэ күс тәпэш ағасҡа һарыһа, ул саҡта укмашып ултырған ҡорттар аҫтына асыҡ моҙғаны (йәки күсермәле йәшник) ҡуялар, уға ҡалаҡ ярҙамында ҡорттар суғын күсерәләр, ә ҡалған **ҡорттарҙы** киҫкен хәрәкәт менэн ботаҡтан һелкетеп тешорәләр. Бынан һуң моҙғаны шул уҡ ағасҡа элеп, асыҡ килеш ҡалдырырға кәрәк. Моҙғаға эләкмәгән ҡорттар оҙаҡ ваҡыт та үтмәҫтән үҙҙәре үк уға йыйылаҫаҡ. Ҡорттарҙы моҙға эсенә индереү өсен күрек тә файҙаланыла.

Ҡайһы саҡта шулай ҙа була: күс яңынан һауаға күтәрелеп осоп, умарталыҡ өҫтөндә өйерөлә-өйөрөлә лә үҙенең умартаһы йәки башҡа урынға ҡуна. Был иһэ ҡорттарҙы моҙғаға һелккән ваҡытта инә ҡорттоң эләкмәүе тураһында һөйләй. Ҡорттар тынысланғас, күсте күсереп ябыуҙы ҡабатларға кәрәк.

Моҙғаға күсерелгән корттарҙы япмаһы менән ябалар ҙа һалҡынса, ҡараңғы урынға (ҡышлау урынына йәки мөгоропко) ҡуялар. Ялан ерҙә уларҙы кис еткэнсе тотоу, күләгәгә ҡуйыу хәйерлерэк, ә унан инде яңы умартаға ябалар. һәр саҡ шул хаҡта белеп торорға кәрәк: күстәр эҫегә бик тиҙ ҡыҙып китэ, йәғни күс ҙур, моҙға бәләкәй булһа, оҫтәүенэ, ҡояш аҫтында торһа, ҡорттар янып үлэ. Тотолған күс моҙғала биш һәм унан да күберэк тәүлеккә тиклем тора ала, уны өҫтәмэ аҙыкландырыу талап ителмәй (сөнки ҡорттарҙың бал йыйыу бөрләтәүендә етерлек бал һуты бар). Лэкин был хәлдэ оҙаҡ тотоу хуп түгел. Күсте айырған көндө үк кисен, 9—10 сәғэт тирәһендә, умартаға ябырға кәрәк.

## Яңы торлакты әҙерләү

Бөтәһенән элек күс өсөн оя әҙерләйҙәр -– был снтсклэп дсзинфекцияланған (быға тиклем файҙаланыуҙа булһа) ҡәҙимгс умарта. Уға 1—2 әҙер кэрэҙ һэм күп итеп яһалма балауыҙлы рамдар ҡуялар (һәр 200—250 грамм ҡорт массаһына бер рам кәрәклектән сығып эш итәләр), йәғни 1 кг айырылып сыккан күскә 3—4-әр рам тура килергә тейеш. Күс яңы умартаны ташлап китмэһен тип, баллы рам ҡуйырға кәрэкмәй **(аҙыҡ** бирмәйһегеҙ), э, киреһенсә, уга асыҡ үрсемле бер рам ҡуяһығыҙ. Быны көндоҙ түгел, ҡорттар булмаған саҡта, күсте ябырҙан алда, кисен эшләйһегеҙ. Үрсемле рамды көсле ғаиләнән нлмрға тэкдим ителә. «Балаларын» ҡорттар күп осраҡта ташлап **китмэй.** Ояны шулай итеп комплектлайҙар: умартаға кэрәҙле **һәм** яһалма балауыҙлы рамдар сиратлаштырып ҡуйыла. Әгәр **ҙв** бал бирһәгеҙ, баллы рамды умартаның эсенә ситкэ ҡуйығыҙ.

## Корттарҙы кейә аша урынлаштырыу

Киссн рамдар менэн тултырылған умартаны яңы урында **Ҡаҙыҡтарға** (ҡалкытмаға) йәки әҙерләнгэн төптәргә ултырталар. Умарта алдына ҡатырға, полиэтилен йэки тукыма йэйергә **кәрәк,** осоп килеп ултырыу таҡтаһына баҫма (фанер йэки **ПШҮга)** ҡуялар, моҙғанан ҡорттарҙы япмаға түгәләр. Ә улар күмпоп, ағым булып, умартаның асып ҡуйылған кейәһено **Цүнәлә.** «Аптырап» ҡалған ҡорттарҙы тотон менэн ҡыуалар.

## Ҡорттарҙы ояның өҫтө аша ябыу

Көн һалҡынса булғанда, рамға йәбештерелгэн яһалма балауыҙ ииығыраҡ саҡта, ҡорттарҙы ояның өҫтө аша урынлаштырырға момкин.

**Әҙерләнгән** умартаға буш магазин йәки корпус өҫтәп ҡуялар **ҙә** **корттарҙы** моҙғанан рамдарға түгәләр. Бөтә ҡорттар ҙа **инеп** киткәс, рамдарға киндер һалып, умартаны ҡапҡасы мснон ябып, кейәне асалар. Әгәр ҙә күс ҙур булмаһа, **ояның** »ссно сит яҡтан йылыткыс (яҫтыҡ) ҡуйыу мотлаҡ.

**Бср кондән** һуң йәки икенсе көндө ояны күҙәтергә кәрәк. **Рамдарҙағы** яһалма балауыҙ өҙөлөү-өҙөлмәүен асыҡлағыҙ. һалынып, ·кнйырылып тешкән балауыҙ бар икэн, уларҙы яһалма **балауыҙлы** яңы рамдар менэн алыштырырға кәрәк.

Күс сығып киткән ғаиләлә, ғәҙәттә, бик күп ҡорт инәһе оялары була. Уларҙы күс сығып киткән көндә ҡырҡып ташлайҙар, тик иң эре, иң етешкән берәүһен генә ҡалдыралар. Йәш умартасылар йыш ҡына бер ҙур хата яһай: бөтә инә көбөләрен ҡырҡып ташлайҙар. Бының менән ғаиләне инә ҡортһоҙ ҡалдырыу ҡурҡынысы аҫтына ҡуялар. Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ҡарт инә ҡорт тәүге күс менән умартаны ташлап киткәндә (1—2 көн) йәш инә ҡорт әле үҙ ояһында ҡала, йәғни тыумаған була. Әгәр ҙә инә көбөләрен алып ташламаһаң, ғаилә күс айырырға мөмкин, тағы ла бер нисә күс сығарыуы ихтимал. Йәш инә ҡорт сыҡҡандан һуң уның аталаныуын, йомортҡалар һала башлауын күҙәтеп торорға кәрәк. Йәш инә ҡорт тәүге танышыу, таҙарыныу осошо яһағанда ҡайһы саҡта юғала, шундай осраҡта ғаиләгә запас инә ҡорт оялары йәки үрсеме, аталанған инә ҡорт бирәләр. Күс айырылып сығып китеп 2—3 аҙна үтеүгә, топ ҡорт ғаиләһен тикшерәләр, йәш инә ҡорт аталанғанмы-юҡмы икәнлеген асыҡлайҙар. Әгәр яңы йомортҡалар һалынған икән, йәш инә ҡорттоң аталаныуын аңлата.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... Лев Толстойҙы ҡорттар менән шөғөлләнеү бик мауыҡтыра, ул ҡорттарҙың тормош рәүешен яҡшы өйрәнә. Күс айырыу осоронда ул өйҙән бер саҡрым ярым алыҫлыҡта ятҡан умарталыҡтан бер нисә тәүлектәр буйынса ҡайтып инмәй, шунда йәшәй, ташкө аштарҙы уға ҡатыны ташып ашата. Л.Н.Толстойҙың «Ясная поляна» усадьба-музейында (Тула өлкәһе) хәҙерге көндә лә ҙур умарталыҡ бар, бында бөйөк яҙыусы тарафынан һатып алынған түмәр умарталар һаҡлана;

... күс айырыу торошон «һүндереү» һәм күстәрҙең юғалыуына юл ҡуймау өсөн, умартала бөтә инә ҡорттар ояларын юҡ итәләр һәм уны көсһөҙ ғаилә урынына ҡуялар. Бында иһә инә ҡорт һаҡлыҡ өсөн 2—3 көнгә ҡаплауыс менән ябып ҡуйыла. Осоусы бал ҡорттары көсһөҙ ғаиләгә эләгеп, бал йыйыу эшенә тотона;

... умартанан сыҡҡан күстәргә юлда һыулы һәм ҡомло ҡаршылыҡтар булмаһа, улар төньяҡ-көнсығыш йүнәлешкә ынтыла;

... 3—4 кг массалы күс бер тәүлектә 11—12 кәрәҙҙе төҙөп алырға, бал йыйыу осоронда 49—60 килограмға тиклем бал йыйырға һәләтле;

... айырған ҡорттар ғәҙәттә саҡмай йәки саҡҡан осраҡтары бик һирәк, сөнки был мәлдә һәр ҡорт ахырғы сиккә тиклем бал менән тулған була (бал борлатәүенә 40—50 миллиграмға тиклем бал йыя) һәм умартасыны күстә алған саҡта ебәргән хаталары өсөн сағырға кәрәк булған хәлдә лә быны эшләй алмай. Шуның өсөн күсте йыйған, уны урынлаштырған (япҡан) саҡта төтөн менән артыҡ мауығырға ярамай. Умартаны бер нисә көн элек ташлап киткән күстәр генә иҫкәрмә тәшкил итә.

## БАЛ ЙЫЙЫУ ҺӘМ БАЛ АЙЫРТЫУ

### Бал алыу

Бөтә ғаиләләр ҙә аҙыҡ запасының тейешле нормаһы менән тәьмин ителгәс (улар бал ҡорттары ояһында бик күп булғас), бал ала башлайҙар. Был эште ятмалы умарталарҙа кәрәҙҙәр тулыһынса етерлек бал менән тулғас, күп корпуслы умарталарҙа — юғары (2—4) корпустар, ә һәр рамдың өҫкө өлөшө (өстән бере) балауыҙ менән көпләнгән йәки «мисәтләнгән» саҡта башҡаралар. Ул балдың бешеүен — уның тейешле дымлылыҡҡа етеүен күрһәтә. Һеҙҙең иғтибарҙы шуға йүнәлтәбеҙ: өлгөрөп еткән 1 литр балдың ауырлығы — 1435 грамм.



Өлгөрөп етмәгән шыйыҡ балды оҙаҡ һаҡлап булмай, ул әсергә, күпсеп сығырға мөмкин. Балдың өлгөрөү-өлгөрмәүен билдәләү өсөн рамды әйләндереп ҡарарға йәки һелкергә кәрәк — өлгөрөп етмәгән бал ағып төшәсәк, ә өлгөргәне — юҡ.

Әгәр ҙә балды ваҡытында айыртып

алмаһаң һом көрөҙҙәрҙе бушатмаһаң, бал ҡорттары татлы һут ЙЫЙыуҙы туктата. Кендөң тәүге яртыһында сәскә һутын күберәк йыйырға момкин булыуын һәм ҡорттарҙың әүҙемерәк ЭШЛӨүен иҫто тотоп, балды тештән һуң, кискә табан алырға Кврәк. Быныһы инде ҡорттарға мәшәкәт тыуҙырмау маҡсаТЫНДа эшләнә. Айыртып алғас, балдан бушаған кәрәҙҙәр шунда уҡ умарталарға кирс ҡуйыла. Төн сыҡкансы ҡорттар тыныслана, кәрәҙҙәрҙе тәртипкә килтеро, таҙарта һәм икенсе конде иртәнсәктән башлап ғәҙәттәгесә эшкә тотона, Бал ҡараған саҡта йылытҡысты һәм өҫке япма таҡталарын алып торалар, унан һзр ҡорт йөрөй торған «урам»ға бер аҙ төтөн өрҙөрәләр, ҡорттарҙы аҫкы рамдарға ҡыуалар. Ҡорттарҙы рамдарҙан һелкеп төшөрәләр, ә төшмәй тороп ҡалғандарын ваҡ щетка йәки ҡауырый, бумала, ҡанат менән һеперәләр. Эште тиҙләтсү һәм ҡорттарҙы артыҡ борсомау өсөн алған рамдар урынына кәрәҙҙәре төҙөлгән һаҡлыҡтағы рамдарҙы ҡуйырға кәрәк. Әгәр ҙә инде улар булмаһа, яһалма балауыҙлы рамдар ҙа ярай.

## Бал айыртыу

Балды айыртҡан саҡта ветеринар-санитар ҡағиҙәләрҙе һаҡларға кәрәк. Ҡулдарҙы йыуыу, аҡ халат кейеү талап ителә. Бина таҙа булырға, унда сит еҫтәр аңкымаҫка тейеш.

Бал ҡыуғысты 25—35 сантимстр бейеклектэге ныҡлы төп — асамайға ултырталар (был һеҙҙең үҙегеҙҙең бейеклеккә бәйле), уның һабын кешенең терһәге менән бер кимәлдә ҡуйырға кэрәк. Бал ҡыуғыстың аҫтындағы һемәктән бал ағыҙыу өсөн биҙрә йәки бидон ҡуйырлыҡ урын булырға тейеш. һемәккә селтэр (фильтр) эләләр, ул аҡкан балды һеҙә. Бал ҡыуғыс эргәһенә баллы көпләнгән кәрәҙҙәрҙең (көбөн) асыу өсөн өҫтәл, шулай уҡ бысаҡты йылытыу өсөн ҡайнар һыу ҡойолған һауыт ултырталар.

Кәрәҙҙорҙән балды алыу эштэрен башҡарыу өсөн ике кеше кәрәк, берәү кәрәҙҙәрҙең мисәтен ҡырҡып аса, ә икенсеһе балды айырта һәм уны һауытҡа ҡоя.

Умарталарҙан алынған бал 30—32 градус тмпературалы була. Иылы парлы бал аҙыраҡ йәбешеүсэн, тиҙ һәм яҡшы айыртыла, сөнки күҙәнәктәрҙән еңел ағып сыға. Әгәр ҙә бинала йылылыҡ 25 градустан юғарыраҡ булһа, балды икенсе кендө иртән айыртып алырға ла мөмкин. Әгәр ҙә бал ваҡытында айыртып алынмаһа, һыуынған кәрәҙҙәрҙе 8—10 сәғәт буйына 25—30 градуска тиклем йылытылған бинала епшетәләр.

Балауыҙлы көптәрҙе асҡан саҡта рамды өҫтәлгә вертикаль килеш ҡуялар. Кәрәҙҙең өҫтөн умартасының кәкре һаплы махсус бысағы менән ҡырҡалар. Бысаҡ эҫе һыуҙа йылытылырға тейеш. Корәҙҙәрҙең көбөн асыу өсөн сонске ҡулланырға ла мөмкин (ул умартасылыҡ магазиндарында осрай). Ике бысаҡ ҡулланһаң, эш йылдамыраҡ барасаҡ: берәүһе менән эшләгән арала икенсеһе йылынып тора. Кәрәҙҙең көпторен асҡанда бер үк ваҡытта корәҙҙәрҙе тигеҙләп тә ҡуйырға кәрәк, уларҙың өҫтөндә бөтә ҡалҡып торған урындар, йыуанайған ерҙәр, рамдың ситендә оролгән оролар ҡырҡып ташлана.

Ике яғы ла асылған рамдарҙы бал айырткыстың барабанына ҡуялар, уларҙы тимер селтәрҙәргә мөмкин тиклем тығыҙ итеп урынлаштырыу хэйерле. Рамдарҙың аҫҡы планкаларын кассетаның әйләнеше йүнәлешендә урынлаштыралар. Ҡаршылағы кассеталарға бер үк ауырлыҡтағы рамдарҙы ҡуйырға тырышығыҙ, юҡһа, бал айырткыс болғанып, ышаныслы эшләмәйәсәк.

Яңынан төҙөлгән һәм бал тулған кәрәҙҙәрҙе айыртҡан сакта, һынмаһын өсөн, кассеталарҙы аҡрын ғына өйөрөлтөп, уның бер яғының яртыһын ғына айырталар ҙа унан рамдың икенсе яғын ойләндереп ҡуялар. Һуңынан кэрәҙҙәрҙе яңынан әйләндереп, тәүге яктың балын аҙағынаса тиклем айыртып алалар. Барабандың хәрәкәте тигеҙ булырға тейеш: тәүҙә аҡрын ғына ойөрөлтөп башлайһың да унан тотканы яйлап ҡына 70—80 ойләнешкә тиклем еткерэһең. Бындай тиҙлектә барабан 250-гә тиклем әйләнеш яһай. Бал тулыһынса сығып бөтһөн осон етерлек әйләнеш ул. Бал айырткыс корпусының кэрәҙ ҡарап торған яҡ стенаһына һирпелә. Ҙур тиҙлектә әйләндерһәң, күҙәнәктәрҙең төбө тишелергә, кәрәҙҙәр ысҡынырға һәм емерелергә мөмкин.

Бал йыйыу яҡшы булған саҡта рамдарҙың көбөн асыуҙы һәм балды айыртыуҙы асыҡ һауала үткәрергә мөмкин — ҡөнһы бал һуты йыйыу менән ҡыҙыҡһынған һәм мауыҡҡан ҡорттар бында осоп килмэй. Ә йыйым бөткәс, бал йыймай торған осорҙа һәм һалҡынсараҡ көндә был эште ҡорттар осоп килә алмаҫлыҡ, ябыҡ бинала башҡаралар.

Эш тамамланғас, бал айырткысты һүтәләр, йыуалар, ҡояшта киптерәләр йәки ентекләп һөртәләр. Өлөштәре тутыҡмаһын өсөн үҫемлек майы һеңдерелгән таҙа сепрәк менән еңелсә һөртөп сығырға кәрәк, ә унан һуң япма ябып, ҡоро урында һаҡлайҙар.

Кәрәҙҙәрҙән айыртып алынған балды эмалле бакка йәки һөт фләгенә, бидонға һалалар һәм уға 2—3 көн тоноп ултырыу

мөмкинлеге бирәләр. Бер нисә көн үтеүгә бөтә балауыҙ валсыҡтары, сүп-сар һәм балға эләккән ҡорттар өҫкә ҡалҡып сығасаҡ — уларҙы, шулай уҡ барлыҡҡа килгән күперекте ҡалаҡ менән алып ташлағыҙ. Күперекте йыйып алғас, таҙа балды вағыраҡ быяла йәки эмалле һауыттарға тултыралар.

Балды айыртып алғандан һуң кәрәҙҙәрҙе киптереү өсөн ҡорттарға бирәләр. Әгәр ҙә ҡорттарығыҙҙың ҡурҡыныслы сире булмаһа, кәрәҙҙәрҙе ялау өсөн теләһә ниндәй ғаиләгә бирергә мөмкин. Ә таҙа ғаиләләр юҡ икән, кәрәҙҙәр элекке умарталарына кире ҡайтарылырға тейеш. Ауырыу ғаилә балын айырым, бары тик һау ғаиләләрҙән балын айыртҡандан һуң ғына айырталар. 2—3 көндән һуң ҡорттар айыртылған рамдарҙы киптереп ҡуя, шунан уларҙы һаҡлауға һалырға мөмкин.

## ҺЕҘ БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?..

... иң күп балды Алыҫ Көнсығышта һәм Себерҙә йыялар. Шундай осраҡтар мәғлүм: йүкә сәскә атҡан осорҙа Алыҫ Көнсығышта үлсәүгә ҡуйылған умартанан көнөнә 30—33 килограмм артым бал алалар. Айырым ғаиләләр Себер шарттарында сезонға 420-шәр, ә Алыҫ Көнсығышта 330—340-ар килограмм тулайым бал йыя;

... бер бал ҡорто ғаиләһе балының уртаса сығышы 15—20 килограмм тәшкил итә. Ә Красноярск крайы Боготольск районының «За коммунизм» колхозы умартасыһы Алексей Демко 1970-се йылдарҙа (әле ул мәрхүм) 160 ғаиләнән торған умарталыҡтың һәр береһенән уртаса 180-шәр килограмм бал алған. Бындай рекордлы бал йыйыуға илдең, шулай уҡ Башҡортостандың бер умартасыһы ла ирешкәне юҡ әле. Ошо күрһәткестәре өсөн берҙән-бер умартасы тәүге тапҡыр Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булды.

## УМАРТАҒЫҘ ҠЫШҠА ӘҘЕРМЕ?

Боронғолар «йыл ҡартая» тип әйткәндәр, йәғни йәй йәй кеүек булмаҫ, ҡыш ҡыш кеүек. Ысынлап та һуңғы йылдар шул ата-бабаларҙың «прогнозы»на тура килә түгелме? Нисек кенә булмаһын, умартасылар өсөн йылда ла умарта күстәрен ҡышҡа яҡшылап әҙерләү бурыс һәм яуаплылыҡ булып тора.

Август аҙағында — сентябрь айында, бал йыйып алыу тамамланғандан һуң, умартасылар ҡорттарға көҙгө ревизия үткәрәләр. Был саҡта һәр умарта күсенең торошон асыҡларға кәрәк: ул көслөмө, унда инә ҡорт бармы, умартала күпме бал бар? Бөтә был мәғлүмәттәрҙе яҙып алырға кәрәк, улар һуңынан кәрәк була.

Умарта күсенең торошон белгәс, умартасы ҡорттар ҡышлаясаҡ ояны әҙерләү эшен башҡара. Был ваҡытта инде бөтә бала ҡорт, үрсем сыҡҡан була, насар эшләнелгән, эшләнеп бөтмәгән, иҫкергән кәрәҙҙәрҙе һәм балы кило ярымдан да аҙ булған рамдарҙы умартанан алалар. Уның эсендә (әгәр булһа) яһалма балауыҙлы рамдарҙы ла ҡалдырмайҙар. Ҡышлау осоронда ҡорттарҙың асығыуына юл ҡуймаҫ өсөн бигерәк тә оя уртаһында аҙ баллы һәм буш кәрәҙле рамдарҙы ҡалдырырға ярамай.

Көҙгө ревизия ваҡытында кәмендә 9 оя рамдары араһын ҡорт биләгән күс көслө ғаилә тип иҫәпләнә. 7—8 оя рамдарында ҡорт булғаны уртаса ғаиләгә инә. 5—6 оя рамда һәм унан да аҙыраҡ ҡорт булһа, улар көсһөҙ тип иҫәпләнә, һәм беҙ уларҙы (күстең хәленә бәйле рәүештә) башҡа күстәр менән ҡушырға йәки көслө ғаиләнән алынған ҡортло рамдарҙы уларға өҫтәп ҡуйырға тейешбеҙ. Умартала бары 3—4 рамды ғына биләгән ҡорттарҙы — ул бик көсһөҙ ғаилә була —



*Умартасылар ояны ҡышҡа йыя*




*Умарта ояларын ҡышҡа йыйыу:*
*1 — бер тигеҙ рамдарҙан уртаса ғаиләгә йыйылған оя;*
*2 — көслө күс ғаиләһенә әҙерләнгән умарта ояһы;*
*а — баллы кәрәҙ; б — буш кәрәҙ; в — бүлем таҡтаһы*

көслө ғаиләгә ҡушырға кәрәк. Шулай итмәһәң, улар ҡыш үлеүгә дусар була. Сибек ғаиләне ҡышҡылыҡҡа ҡалдырырға булһағыҙ, ҡышлау урында оҫкө стеллажға, йылы урынға урынлаштырыу хәйерле. Насар инә ҡорттарҙы (ауырыу, ҡарт), шулай уҡ аталанмаған инә ҡорттарҙы юҡ итәләр һәм уларҙы нуклеустарҙан — бәләкәй запас ғаиләләрҙән (әгәр улар булһа) йәш үрсемле инә ҡорттар менән алмаштыралар.

Бер корпуслы ун ике рамлы дадан умартала ояны ҡышҡылыҡҡа, кәрәҙҙәре менән 8—10 рам ҡалдырып, кәметәләр, ә ҡалғандарын (2—4 рамды) алалар. 8—9 рам менән улар яҡшы ҡышлай. Оя ситенә, иң аҙаҡҡы рам эргәһенә бүлгес таҡта ҡуйырға кәрәк һәм ситенә, ян-яҡҡа йылытыусы мендәр, ә һуңынан тағы бер мендәрҙе киндер өҫтөнән һалыу мотлаҡ. Күп корпуслы америка умарталарында көслө ғаиләне ҡышлатыуға ике корпуста ҡалдыралар (юғары, 2-се корпуста баллы рамдар урынлаштыраһығыҙ), ә көсһөҙ күстәр баллы 10 рамда бер корпуста ҡыш сыға.

Корттарҙы ҡышлыҡҡа тулы ҡиммәтле, сифатлы аҙыҡ менән тәьмин итеү бик мөһим. Уларға рамына йәки йәнәш кәрәҙҙәр, рамдар араһына кәмендә 2 килограмм иҫәбенән иң яҡшы сәскә балын ҡалдыралар, балдың рамда күберәк булыуы ла мөмкин, әгәр 2—2,5 кг һыйҙырыусы баллы кәрәҙҙәр юҡ йәки етмәй икән, ояны 1,5—3—3,5 кг балы булған кәрәҙҙәрҙе сиратлаштырып та төҙөргә була. Ул саҡта йәнәш кәрәҙҙәр араһындағы буш урындарға, бал ҡорттары урынлашҡан ергә яҡынса 2-шәр кг аҙыҡ тура киләсәк. Ояның үҙәгенә 5—6 кг балы булған тулы рамдарҙы ҡуйырға ярамай, сөнки ҡыш ҡорттарҙың күбеһе ошо урынға йыйылып, түбәнге өлөштә булған ҡорттарҙың һалҡындан өшөп һәм сәңгеп һәләк булыуы мөмкин. Һәр ғаиләгә ҡышҡылыҡҡа бөтәһе 25—28 кг аҙыҡ кәрәк: 15—18 кг ояла була, 10—12 кг складта һаҡлана, ул, ҡышлап сыҡҡас, корттарға яҙғы үҫеш өсөн бирелә.

Әгәр ҡорттарҙы ҡышлатыуға ҡалдырған бал сифатһыҙ булһа, гиҙ ҡомоҡһа, шәкәрләнһә, япраҡ балы, рәшә балы осраһа, уларҙы сәскә балы менән алыштыралар йәки өҫтәмә рәүештә шәкәр шәрбәте бирәләр. Балдың сифатын белер өсөн анализға яҡындағы ветеринария лабораторияһына бал ебәрәләр. Сиропҡа ҡушып антибиотик та бирергә кәрәк. Мәҫәлән, киң таралған көслө ауырыу, эҙбизлы үрсем аскосферозға ҡаршы аскоцин препаратын ҡулланалар. Ул умартасылыҡ складтарында, магазиндарында була. Шәкәр шәрбәтен (2:1 нисбәтендә йылы һыу һәм шәкәрҙән эшләнә) август аҙағында бирергә кәрәк. Был эште 5—10 сентябрҙән дә һуңлатырға ярамай, сөнки ул бал ҡорто ғаиләһенең тормошона тығыҙ бәйләнгән.

Умарталарға сысҡандарҙың үтеп инеүенә юл ҡуймау маҡсаты менән кейәләргә селтәрле тимер япма ҡуялар. Ҡорт елеме һәм балауыҙ менән ныҡ ҡапланған киндер япмаларҙы таҙалары менән алмаштырыу мотлаҡ. Умартаның өҫтөнән, сысҡан үтмәҫлек итеп, вентиляция селтәре ябалар.

Әгәр ҡорттар кейәне һәм ояның тирә-яғын елем менән ныҡ һылаһа, был күренеш ҡаты һыуыҡлы һәм оҙайлы ҡыш килеүе тураһында һөйләй.

Һәүәҫкәр башлаусы умартасыларға ошоно иҫтә тоторға кәрәк: киләһе йылда күп бал һәм умартасылыҡтың башҡа продукцияларын мул алыу ҡышлатыуға ҡорт күстәрен ни тиклем үҙ ваҡытында һәм дөрөҫ әҙерләүгә бәйләнгән. Нисек яҡшы әҙерләнһәгеҙ, шул тиклем ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшәсәкһегеҙ.

## УМЛРТА ОЯЛАРЫН ҠЫШҠА ЙЫЙЫУ

Әгәр һеҙ, һоүоҫкәр умартасылар, үҙегеҙҙең умарта күстәрен ҡышкылыкка әҙерләмәгәнһегеҙ икән, булған һуңғы йылы ҡояшлы көндәрҙе файҙаланып, тиҙ арала умарта ояларын ҡышка йыйыу мөһим. «Умартағыҙ ҡышка әҙерме?» тигән мәҡәләлә корәкле коңәштәр бирелгәйне. Умарта ояларын ҡышка йыйыу осөн, оҫтәп, тағы ла ҡимматле кәңәштәр биреү кәрәк.

Ҡышкылыкка умарта ояларын һуңғы тапкыр йыйыу бал ҡорто ғаиләһенең иң аҙаккы бала ҡорто сығып бөтөүенә тура килә. Ул уртаса 10—18 сентябрь көндәре була. Был көндәрҙә инә ҡорттоң бала һалыуҙан туктауы тәбиғи хәл тип аңларға кәрәк. Сентябрҙә тыуған үрсем ятсшы ҡышлай. Ҡышкылыкка ҡалған ҡорттар йэйгелэрҙән ныҡ айырыла. Әгор йәйге осорҙа эшсе ҡорттар 30—45 көн йәшәһә, ә кышгка ҡалғандары 250—270 көн йәшәй (8—9 айға тиклем). Ни өсөн? Уларҙың былай оҙак йәшәүе бала тэрбиәләүҙә, аҙык әҙерләүҙә, шәкәр шәрбәте эшкәртеүҙә һәм башка эштә ҡатнашмауҙары менән аңлатыла. Ҡышка ҡалған ҡорттар, йәйгеләре менән сағыштырғанда, кәүҙәго ҙурыраҡ, эске органдарында май тупланыу сәбәпле тулыраҡ, һимеҙерәк була. Ҡышлаусы ҡорттарҙың тэнендә һыу ҙа аҙыраҡ.

һәүоҫкәр умартасыларға шуны оноторға ярамай: быйыл тыуған үрсем (**сентябрь** айында) кэмендә бер тапкыр осош яһарға тейеш.

Ҡапыл һыуыҡ көҙ, ҡаты кыш иртә **килеп,** һуң сыккан бал ҡорттары осош яһамаһа, улар ҡышлап сыға алмай, үлә. Ҡорттарҙың һуңғы осошо октябрь, ә көҙ йылы тура килһә, октябрь аҙағында булһа, бигерэк тэ **хэйерле.** Сөнки улар ҡышлатыу урынында - - ояларҙа аҙыраҡ ваҡыт буласаҡ тигән һүҙ.

Был айҙа эшсе ҡорттар, ояның уртаһында кәрәҙҙәрҙең аҫкы өлөшвн балдан таҙартып, ҡышкылыкка күс өйорөнэ урын әҙерләй. Умарта ояларын ҡышка йыйыу маҡсаты менән умартасылар һәр күсте ентекләп ҡарап сыға.

Ҡайһы бер умартала, **йәш** үрсем сығып бөткәс, буш кәрәҙҙәрҙе баллылары менән алмаштырырға һәм, күстең көсөнә тсарап (**йәнәш** кәрәҙҙәр араһындағы ҡорттар иҫәбенә), рамдар һанын кәметергә кәрәк. Умарта ояһыгна кәмендә 2 килограмм баллы рамдарҙан торған **кәрәҙҙәрҙе** ҡуялар. һәм уларҙы дөрөҫ урынлаштырыу бик мөһим.

1-се һүрәттә һеҙ бер **тигеҙ** йыйылған умарта ояһын **күрәһегеҙ, Ул** 2-шәр килограмм иҫәбенән ҡуйылған рамдар. Бындай **йыйыуҙы** уртаса ғаиләләргә, йәғни **көҙгөһөн** ҡорттар 7—9 **оя** рамдарын биләгән ғаиләләргә ҡулланалар.

2-се һүрәттә — көслө күс ғаиләһенә йыйылған умарта **ояһы.** Ул осраҡта бүлем таҡтаһы янына күп баллы рам ҡуялар. Ҡалғандарын кәметеп, аҙайтыбыраҡ, ә иң һуңғыһына тулы **баллы** кәрәҙ ҡуйыла.

Күстәрҙең ниндәй көслө булыуына ҡарамаҫтан, өҫтән һәм ин-яҡтан мендәр менән йылыталар (һүрәтте ҡарағыҙ).

Бал ҡорто ғаиләләрен ҡышҡылыҡҡа әҙерләп бөткәс, буш умарталарҙы, корпустарҙы, кәрәҙҙәрҙе ҡышҡы һаҡлау урындарына урынлаштырырға кәрәк.

## БАЛ ҠОРТОНОҢ ТОҠОМДАРЫ

Тоҡом тип бер үк төрлө бал ҡорттары ғаиләләренең ҙур төркөмөн атайҙар. Улар сығышы буйынса төрлө була, **мөхиттең** бер үк шарттарына ҡулайлашҡан физиологик, морфологик һәм хужалыҡ-файҙа билдәләрен йәш быуынға тапшырып ҡалдырыу сифаттарына эйә.

Умартасылыҡта завод әҙерләгән, йәғни культуралы тоҡом юҡ әле, бары тик эволюция (үҫеү) процесында барлыҡҡа килгән һәм тышҡы мөхиттең урындағы шарттарына (климат, бал йыйыу һәм башҡалар) яҡшы яраҡлашҡан абориген йәки ябай тоҡомдар ғына бар. Рәсәй һәм БДБ илдәре территорияһында тәбиғәт-климат шарттары төрлө-сө булғанлыҡтан күп абориген тоҡомдар барлыҡҡа килгән, умартасылыҡтың ҡиммәтле генофондын улар кәүҙәләндерә.

Илдә бал ҡорттарының түбәндәге тәбиғи тоҡомдары бар: урта Рәсәй, һары Кавказ тау, үҙән, һары Кавказ **үҙән,** Карпат, Алыҫ Көнсығыш һәм Украин дала тоҡомдары. Бөтә тор ҡорттар ҙа районлаштырылған, йәғни 1979 йылдың ғинуарында раҫланған тоҡомдо районлаштырыу планына ярашлы рәүештә бал ҡортоноң һәр тоҡомо билдәле бер төбәктә үрсетелә. Башҡортостанда урта Рәсәй тоҡомо тотола. Урындағы ҡорттарҙы таҙа килеш (генофонд йәһәтенән) һаҡлап алып ҡалыу маҡсатында, ситтән башҡа тоҡомдарҙы индереү тыйыла. **Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең** республикаға йыл һайын тиерлек көньяҡ тоҡомо индерелә.

## Ҡара төҫлө урта Рәсәй урман бал ҡорто

Ул Рәсәйҙең, Белоруссияның урманлы зонаһында, Балтик буйы илдәрендә районлаштырылған. Урта Рәсәй тоҡомло ҡорттар Италия тоҡомона ҡарағанда әҙерәк. Эшсе бал ҡорттарының томшоғоноң оҙонлоғо 5,9—6,3 мм. Инә ҡорттоң үрсеү һәләте (йомортҡа һалыу) ҡорт ғаиләләренең иң ҡыҙыу үҫеше осоронда тәүлеккә 1500—2000 йомортҡа тәшкил итә.

Ҡорттоң тәне көңгөрт-һорғолт төҫлө, һары төҫ ҡатышмай. Балдың көбө (балауыҙ япмаһы) аҡ «ҡоро», йәғни кәрәҙ күҙәнәктәренә тултырылған бал менән балауыҙ япмаһы араһында бик бәләкәй үлсәмдә бушлыҡ бар, шуға ла аҡ төҫ өҫтөнлөк итә.

Ояны тикшергән саҡта был ҡорттар үҙҙәрен агрессив, уҫал тоталар, бик ныҡ тынысһыҙланалар, аҫҡа ҡасып тошәләр һәм рамдың түбәндәге бурсаһында бергә уҡмашып, тәлгәшләнеп һалынып торалар. Кире фототаксис, йәғни кәрәҙҙең яҡты яғынан ҡараңғы яғына китеү ныҡ күҙәтелә. Ояларҙы сит бал ҡорттары һөжүменән насар һаҡлайҙар. Ояны бал ҡорто елеме менән уртаса һылайҙар. Урта Рәсәй бал ҡорттары яланға һуңыраҡ осоп сыға һәм умартаға иртәрәк әйләнеп ҡайта, был һәләте менән коньяҡ (Кавказ) ҡорттарынан айырылып тора. Бал йыйыу мәле башланыу менән беренсе сиратта балды ояның өҫкө өлөшөнә, йәғни умартаның өҫтәмәһенә (магазинға) йыялар, унан ғына оя корпустарына күсәләр.

Был ҡорттарҙың балауыҙ бүлеүсе биҙҙәре һәм балауыҙ төҙөү инстинкты яҡшы үҫешкән. Серек ауырыуҙарына, рәшә бал токсикозына һәм нозематозға (ҡорттарҙың йоғошло эс китеүе), коньяҡ тоҡомло ҡорттарҙан айырмалы рәүештә, бик бирешеп бармайҙар.

Ыңғай шарттар булған тәҡлирҙә йүкәнән, кипрейҙан (иван-чай) һәм ҡарабойҙайҙан төп бал йыйыуға ҙур көс туплайҙар. Башҡа тоҡом ҡорттарына ҡарағанда йүкәнән һәм ҡарабойҙайҙан һутты йәһәтерәк йыялар, йүкәнән ҡыҫҡа ғына ваҡытлы бал йыйыуҙы яҡшы файҙаланалар. Ҡышҡы һыуыҡтарға юғары сыҙамлыҡҡа эйә булған был ҡорттар урманлы зонаның ҡаты һыуыҡ шарттарына бик яҡшы яраҡлашҡан. Улар коньяҡ тоҡомло ҡорттарға ҡарағанда бик урлашып бармай.

Урта Рәсәй ҡорттарының кире сифаттары шул: улар бик асыулы һәм күс айырыуға әүәҫ. Ҡайһы бер йылдарҙа умарталыҡтағы бөтә ҡорттар ғаиләләренең 80—90%-ҡа тиклеме күс айырыу хәленә килә. Умарта эсенә һалынған инә

көбөләренең уртаса һаны 25—30-ға тиклем етә. Умартасы инә көбөләрен юҡ итеп йәки ояларҙы ҡапыл киңәйтеп ебәреп кенә күс айырыу хәленең барлыҡҡа килеүен һәр ваҡытта ла туҡтата алмай. Был осраҡта ғаиләнең көнонә 2,5—3 кг бал йыя башлауы ғына ярҙам итергә мөмкин. Ғәҙәттә, күс айырыу осоронда, ҡапыл көслө бал йыйыу (мәҫәлән, йүкәнән) башланһа, ҡорттар ояларғы бөтә инә ҡорттарҙың көбөләрен емерә, кимереп юҡ итә һәм бал йыйыуға тотона. Ҡорттарҙың бындай ҡылығы шуның менән аңлатыла: һут йыйыу инстинкты үрсеү — айырыу инстинктынан өҫтөнлөк ала.

Эҫе климатлы көньяҡ райондарында урта Рәсәй ҡорттары насар үҫешә, бик тиҙ сырхаулай һәм балды әҙ бирә.

## Башҡорт солоҡ ҡорто



*Башҡорт солоҡ ҡорто*

Башҡортостандың тау-урман зонаһында һаҡланып ҡалған урта Рәсәй тоҡомоноң тәбиғи популяцияларының береһе ул. Был популяция ҡорттары әлеге көндәргә тиклем тәбиғи ағас ҡыуышында, йәғни кеше әҙерләгән солоҡтарҙа йәшәй. Тәбиғи шарттарҙа был ҡорттарҙың йәшәү урыны Башҡортостанда Бөрйән районында Ағиҙел буйы, Ҡужа һәм Оло Нөгөш йылғалары үҙәндәрендә урынлашҡан. Бөтә был төбәккә ҡышҡы һыуыҡтарға ныҡ сыҙамлы һәм бал йыйыуҙың урынлағы тибын (йүкәне) файҙаланыуға юғары һәләткә эйә булған ҡара төҫлө урман ҡорттарының берҙәм популяцияһы урынлаштырылған. Эшсе бөрйән бал ҡорттарының томшоғоноң оҙонлоғо — уртаса 6,0—6,2 мм. Бөрйән солоҡ ҡорто урта Рәсәй тоҡомоноң иң таҙа популяцияһын тәшкил итә, ул иһә Көньяҡ Уралда кәм тигәндә лә 1000 йыл йәшәй, ә Бөрйән районы — ҡырылмай-ҡаҡшамай һаҡланған комартҡы кеүек таҙа, саф килеш йәшәгән берҙән-бер урын. «Башҡортостандағы солоҡсолоҡ утрауы, — тип яҙҙы илебеҙҙең танылған журналисы Василий Песков, — боронғо замандың баш һөйәге лә, элекке шөғөлдәр тураһында таштағы ярты-лаш юйылған яҙыу ҙа түгел, ә бәлки заман төпкөлөнән беҙгә тиклем еткән йәнле эш ул! Ҡыҙҙар сафлығындағы Бөрйән урманы — юғарынан осоп үтеүсе самолеттар геүләгән тауыш аҫтында кеше ерҙә мамонттар йәшәгән саҡта уҡ ата-бабалары башҡарған элекке эште дауам итеүсе берҙән-бер урын» (Ҡырағай бал. Комсомольская правда. 1981. 5 дек.).

**Башкортостандың** солоҡ ҡорттарын һаҡлау, өйрәнеү һәм үрсетеү **эше** менән был маҡсатта махсус рәүештә 1958 йылда **төҙөлгән** Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының Ағиҙел буйы филиалы шөғөлләнә. 1986 йылда ул үҙ аллы «Шүлгәнташ» (мәмерйә иссме) тәбиғи ҡурсаулығына әйләндерелде. Ҡурсаулыҡ территорияһында бөрйән ҡорттары ябылған солоҡтар, түмәр умарталар һәм рамлы умарталар урынлаштырылған.

Ҡурсаулыҡ эшселәре был ҡорттарҙың биологик үҙенсәлектәрен өйрәнә, уларҙың файҙалы сифаттарын селекциялай һәм, урта Рәсәй тоҡомло ҡорттарҙың ҡиммәтле популяцияһы буларак, ҡырағай бөрйән ҡорттарының үрсетеү эше менән шөғөлләнә. Ҡурсаулыҡтың бурысы — тоҡомсолоҡто үҫтереү маҡсатында солоҡ ҡорттарын һаҡлау, өйрәнеү, үрсетеү һәм файҙаланыу.

# КӨСЛӨ ҒАИЛӘЛӘРҘЕҢ ӨҪТӨНЛӨКТӘРЕ

Бото ҡотолоу юлы — көслө ғаиләләрҙә.
Г.П.Кандратьев.

## Бал ҡорто ғаиләләренә характеристика

Бал ҡорттары ғаиләләрен уларҙағы ҡорттар күплегенә ҡарап көслө ғаиләләргә, уртасаға һәм көсһеҙҙәргә бүләләр. Ғәҙәттә ҡорт ғаиләләренең көсө умарталағы рамдар һәм «урам»дар (ике рам араһындағы буш урын) һанына ҡарап **үлсәнә.** Шундай тәртип ғәҙәткә ингән: бер оя стандарт рамға (435х300 мм) йәки «урам»ға уртаса **2000—2500** ҡорт урынлаша, уларҙың ауырлығы **200—250** г тәшкил итә (ояның ситке рамдарында ҡорттар кәмерәк, уртала бер аҙға күберәк була, йәйге эҫе көндәрҙә күренеш күҙәтелә).

Иртә яҙын һәм көҙ аҙағында Башҡортостан шарттарында көслө ғаиләләр тиеп ҡорттар тулыһынса **8—9** һәм бынан да күберәк рамды ҡаплаған ғаиләләрҙе һанайҙар. һөҙөмтәлә яҙғы һәм көҙгө **осорҙарҙа** бындай ғаиләләрҙең ҡорттар массаһы ауырлығы уртаса 2 кг-ға яҡын тарта, был иһә 20000 тирәһе ҡортҡа тура килә. Йәйен инде ҡорттар һаны ғаиләлә **2—3** тапҡырға арта. Шундайыраҡ һирәк-һаяҡ осраҡтар ҙа осрап ҡуйғылай: бигерәк көслө ғаиләләр төп бал йыйыу

осорона 6—7 кг-ға барып ето. Ғомолдо иһп Гмп [illegible] лэрҙе бындай тиклем коскә эйо булыут алы [illegible] ксреүс ауырға тошэ, ғәҙәтто умартасылар ғаилоло корнир массаһын уртаса 5 кг-ға тиклем еткереү менон еик юиолор. Төп бал йыйыу алдынан умартаның бер корпусып корт-тар биләүсе ғаилэләр (2,5—3 кг ҡорт) юғары продуктлы була алмай. Көслө ғаилэләр иң мөһим, төп бал йыйыу алдынан 20—24 рамды һәм унан да күберэкте билөргө һәм хеҙмәтләндерергә тейсш, был иһэ ике корпусҡа тигеҙ (йәки 1 оя корпусы һэм 2 магазин икәнлекте аңлата).

## Кесле ғаиләләрҙә үҫкән ҡорттарҙың үҙенсәлектәре

Көслө ғаиләләрҙә көсһөҙҙэргә ҡарағанда йәш ҡорттарҙы үҫтереү есөн тукланыуҙың һәм йылылыҡ режимының яҡшыраҡ шарттары булдырыла; ояның микроклиматы ла (темпсратураның, дымлылыҡтың, газ алмашыныуҙың торошо) тотороҡлораҡ була;

— көслө ғаиләләрҙә үҫкән йәш ҡорттарҙың томшоғо оҙонораҡ, мускулдары һәм ҡанаттары нығыраҡ үҫешкэн, бал борлэтэүенең күләме ҙурыраҡ;

- ҡорттарҙың ғүмере көсһөҙ ғаилә ҡорттарыныҡына ҡарағанда 10 көнгә оҙонораҡ;

— кен итмештең уңайһыҙ шарттарын еңелерәк үткәролэр һом яҡшыраҡ ҡышлайҙар;

— ҡышшау осоронда тере масса берәмегсно (1 кг ҡортҡа) аҙыҡты аҙыраҡ тотоналар;

— яҙ яҡшыраҡ һэм тиҙерәк үҫеиюлор;

— яҙ тиҙ үҫешеү һөҙөмтэһендә иртә бал йыйыу молсн (мәҫәлэн, талдан, сағандан, һары акациянан, емеш-слок ҡыуаҡтарынан) якшы файҙаланалар һәм бер ни тиклсм бал запасын туплайҙар;

— инә ҡорттар көслө ғаиләләрҙә иртә яҙ менэн йомортҡаларҙы байтаҡҡа күберэк һалалар;

— ҡорттар ҡарышлауыҡтары 1,5 тапҡырға ауырыраҡ тарта;

— ҡорттар массаһы 7,3%-ҡа ауырыраҡ;

— ҡорттарҙың аяҡтарында йоморса (һеркә массаһы) 5—7 мг-ға күберок;

— ауырыуҙарға бирешмәүсэнерәктәр, һирәгерәк ауырыйҙар һәм аҙыраҡ сафтан сығалар;

— аҙыраҡ тәрбиә һәм хеҙмәт һалыу талап итәләр;

— бал биреү юғары, йәғни абсолют һандарҙа күберәк бал йыялар, тере масса бирәмегенә лә (1 кг ҡорттар) бал күберәк тура килә:

1 кг ҡорт 7 кг бал йыйған, 1кг-ға — 7 кг бал;

4 кг ҡорт 48 кг бал йыйған, 1кг-ға — 12 кг бал;

6 кг ҡорт 76 кг бал йыйған, 1кг-ға — 13 кг бал;

— кәрәҙҙәрҙе күберәк төҙөй һәм божәктәр менән һеркәләнеүсе ауыл хужалығы культураларын әүҙемерәк һеркәләндерәләр;

— бары тик көслө ғаиләләр булғанда ғына, күс ҡорт айырыу йәки бүлсү юлы менән яңы ғаиләләр алырға мөмкин.

Көслө ғаиләләрҙең юғарыла һанап кителгән бөтә өҫтөнлөктәренән сығып, һеҙ йорт яны умарталығында бары тик көслө бал ҡорто ғаиләләрен генә тоторға кәрәклегенә ышанғанһығыҙҙыр.

# VII. Солоксолоҡ

«Бал ҡорто кәсебе йәһәтенән
башҡорттарҙы уҙып киткән берәй
халыҡ бармы икән...»
Ғалим-географ П.И.Рычков (XVIII быуат).

Нимә һуң ул солоксолоҡ һәм солоҡ умартасылығы нисек барлыҡҡа килгән?

Солоксолоҡ — боронғо кәсеп. Ул, культуралы умартасылыҡтың башланғыс формаһы булараҡ, ҡырағай умартасылыҡтан барлыҡҡа килгән. Осраҡлы ғына табылған ағас ҡыуышлығында оя кешеләр тарафынан юҡ ителә, ә бал запасы һунарсылар тарафынан тулыһынса алып ителә. Ҡырағай умартасылыҡта ҡорттарҙы йәлеп итеү һәм артабан уларҙы күҙәтеү өсөн, баллы кәрәҙ киҫәге ҡуйып, алдатҡыс ем файҙаланалар. Һунар итеүҙең бындай ысулы бик һөҙөмтәле. Икс кеше бер-берсһенән бер ни тиклем аралыҡта ҡорттар өсөн алдатҡыс ем менән баҫып тора. Бал ҡорттары бөрләтәүҙәрен бал менән тултырып ала ла туранан-тура үҙҙәре йәшәгән ергә ашыға. Йүнәлеште билдәләп, ҡорттар осҡан яҡты асыҡлағас, һунарсыларға, бер нөктәлә килеп ҡушылып, ҡортло ағас ҡыуышын табыуы ҡыйын булмай.


*«Шүлгәнташ» ҡурсаулығында түмәр умартаһының төрө*

Ҡорттар менән эш итеү тәжрибәһен туплап, һунарсылыр ояларҙы туҙҙырмау, уларға әҙерләнгән аҙыҡтың бер аҙ өлөшөн ҡалдырыу файҙалыраҡ икәнен яҡшы аңлай. Ул сағында байтаҡҡа әҙерок тотоноуҙар менән, күп ваҡыт һәм хеҙмәт түкмәйенсә, бер нисә йыл буйына шул уҡ ағас ҡыуышынан бал алып торорға мөмкин.

Танылған журналист Василий Песков солоҡсолоҡ тураһындағы «Балға һунар» тигән мәҡәләһендә былай тип яҙҙы: «...кешеләр бик күп быуаттар буйына урмандың төмләкәйсенә, бүләгенә һунар иткән. Шулай ҙа фараҙларға нигеҙ тыуа: бал ҡорто хазинаһын тулыһынса талап китеү аҡылһыҙлыҡ булыуын кеше бик тиҙ төшөнөп ала. Солоҡтоң тағы ла файҙаланыу мөмкинлеге булһын өсөн, балауыҙҙың һәм балдың бары тик бер аҙ өлөшөн генә алырға кәрәк. Уйлап эш итеүҙең йәнә бер аҙымы — корттар өсөн ағас ҡыуышын



*Солоксо Сабит Ғәлин*

әҙерләү. Ҡорт ояһын ағастың олоно эсенә төпкә соҡоп эшләгәндәр. Ҡиммәтле кәсеп бына шулай килеп тыуған» (Комсомольская правда. 1994. 12 авг.).

Ҡорттар ҡуныуға солоҡ әҙерләү өсөн уны ҡарағайҙа, ҡарағаста, йүкәлә, һирәгерәк булһа ла имәндә ерҙән 3 метрҙан алып 17—18 метрға тиклем бейеклектә, яҡшы бал йыйырлыҡ урындан алыҫ түгел, һыу сығанағына яҡын үҫкән ағаста соҡоғандар. Әгәр ҙә килешле ағас табылһа, шунда уҡ солоҡсо уға үҙенең тамғаһын һала — ырыуҙың билдәһен төшөрә, был иһә солоҡло ағастың эйәһе барлығын аңлата.

Ғәҙәттә, солоҡтарҙы йәйен һәм көҙөн соҡоғандар. Көҙгө солоҡтар оҙаҡҡа стә тип иҫәпләйҙәр, уларға ҡорттар ҙа әүәҫерәк ҡуныусан. Бер-ике йыл солоҡтоң яҡшылап кибеүе һәм ҡорттар ҡуныу өсөн әҙер булыуы фарыҙ. Тәүҙәрәк солоҡло ағастың аҫтағы бөтә ботаҡтарын ҡырҡып ташлап, уны айыуҙар туҙҙырып китеүҙән һаҡлайҙар. Ағаста балта менән бер-береһенән бер метр аралыҡта киртектәр (соҡолған соҡор — баҫҡыстар) эшләнә. Уларға баҫа-баҫа махсус рәүештә ҡаты ҡайыштан 4 метр оҙонлоҡта һәм 5—7 сантиметр яҫылыҡта үрелгән бау — кирәм ярҙамында күтәрелергә мөмкин. Солоҡсо үҙе кирәмдең эсендә ҡала, уны өҫкә шылдыра барып, аяҡтары менән киртектәргә эләгеп, бауҙы һаман өҫкә күсерә барып, юғарыға

күтәрелә, тейешле бейеклеккә еткәс, уны биленә бәйләп ҡуя. Ҡулдары бушағас, солоҡсо ағасҡа ҡапҡактан — ҙур тишектән аҫтараҡ махсус баҫып тороу урыны — ләңге бәйләп ҡуя. Шулай итеп, оҙаҡ ваҡыт ҡорттар менән эшләү мөмкинлеге тыуа. Ерҙәге ярҙамсыһы менән үҙ-ара хәбәрләшеү өсөн махсус бау файҙаланыла. Махсус бысаҡ менән ҡырҡып алынған күрәҙле бал силәккә — йүкәнән соҡоп, ҡапҡаслап яһалған һауытҡа йәки батманға һалына.

Солоҡтоң төҙөлөшө һәм уны әҙерләү тураһында ауыл хужалығы фәндәре кандидаты И.В.Шафиҡовтың «Бал ҡортоноң наҙы бар» тигән китабында ентекләп яҙылған.

## БӨРЙӘН СОЛОҠСОЛАРЫ

«Шүлгәнташ» ҡурсаулығына барып күргәнгә, эшләгәнгә тиклем, беҙ, солоҡсолар өлкәнерәк кешеләр булалыр, тип уйлай торғайныҡ. Ғәҙелгәрәй ауылында 35–40 йәшлек солоҡсолар менән осрашҡас, боронғо һөнәрҙең нәҫелдән нәҫелгә күсеп килеүен аңланыҡ. Ҡурсаулыҡ һағы етәксеһе Хәсән Йәһүҙин һәм бүлек мөдире, умартасылыҡ буйынса баш белгес Фидрат Йомағужин солоҡ, түмәр умарта умартасылығының торошо тураһында һөйләнеләр, солоҡсолар менән таныштырҙылар.

Бөгөнгө көнгә ҡурсаулыҡ биләмәһендә яҡынса бал ҡорттарының икс йөҙҙән ашыу ғаиләһе бар, шуларҙың йөҙгә



*Солоҡсо Сынтимер Иҫәнғужин*

яҡыны — солоҡтарҙа, ҡалғандары умартала аҫрала. Солоҡтар Ағиҙел һәм Нөгөш урман хужалыҡтарында урынлашҡан. «Сәфәр утары»ндағы солоҡтарҙан һәм түмәр умарталыҡтарынан тыш (умартасы Миңнеәхмәт Байғазин), ҡурсаулыҡ зонаһындағы Шүлгән мәмерйәһенә яҡын ғына ерҙә рамлы дадан умарталы тәжрибә умарталығы урынлашҡан. Бында умартасы вазифаһын Әсфән Иҫәнаманов башҡара. Элек «Ҡушйылғабаш»та һәм «Бала Туҡай»ҙа тағы ла рамлы ике умарталыҡ булған, әммә унда ҡорттар бөткәс, уларҙы Шүлгәнташ мәмерйәһе умарталығы менән бергә ҡушҡандар.

Ҡурсаулыҡта солоҡсо штат расписаниеһына индерелгән, ул дәүләт хеҙмәткәре булып һанала. Етмәһә, бары тик үҙенең солоҡтарының торошон ғына күҙәтеп, уға ғына яуаплы булып ҡалмай, шул уҡ ваҡытта биләмәнең хужаһы ла — урман хужалығы инспекторы.

Ағиҙел урман хужалығында биш солоҡсо эшләй. Уларҙың һәр береһенә уртаса 6-ар солоҡ беркетелгән. Әлхәм Иҫәнамановта солоҡтарҙың иң күбеһе — бөтәһе 11. Уның атаһы Әксән ағай — элекке тәжрибәле солоҡсо, солоҡсолоҡҡа һөйөүҙе ул Әлхәмдә генә тәрбиәләп ҡалмаған. Ун ике баланан (7 ул, 5 ҡыҙ) Әхтәм, Әнис, Әмин — Нөгөш урман хужалығында солоҡсолар, ә Әсфән, әйтеүебеҙсә, умартасы булып эшләй. Әмин контракт буйынса (солоҡтарҙы ишәйтеү маҡсатында) ҡурсаулыҡҡа ярҙам итә.

Сабит Fәлин, Сынтимер Иҫәнғужин, Басир Мостафин — барыһы ла солоксоларҙың улдары. Ә Хәсән Мостафин — иң өлкәндәре, солоҡсо булып эшләүенә 20 йылдан ашыу.

Шүлгәнташ мәмерйәһендә алыҫ булмаған ерҙәге солоҡло ағасты күрһәтергә беҙҙе умартасылыҡ бүлеге етәксеһе Фидрат Йомағужин менән урман хужалығының өлкән инспекторы Рәйес Fәлин оҙатып барҙы. Улар кирәм, ләңге, эркәтәү кеүек эш ҡоралдарын күрһәттеләр. Солоҡсо Сынтимер Иҫәнғужин, солоҡҡа менеп, уны нисек ҡарарға өйрәтте. Ағасҡа менгәндә солоҡсоноң көсөнә, оҫталығына, таҫыллығына хайран ҡалаһың. Бөтә был сифаттар атай-олатайҙарҙың улдарына, ейәндәренә ҡан менән күсәлер, күрәһең.

Солоҡло ағасҡа тамға һалынған. Һеҙҙе шуларҙың ҡайһы берҙәре менән таныштырабыҙ. Уларҙы беҙгә Фидрат Йомағужин күрһәтте.

Ҡурсаулыҡтың да, солоҡсоларҙың да хәл ителмәгән мәсьәләләре байтаҡ ҡына. Еңел булмаған хеҙмәткә эш хаҡы бик әҙ түләнә. Башҡорт солоҡ ҡорто генофондын һаҡлау буйынса маҡсатҡа йүнәлешле программа юҡ.




*Бөрйән солоксоларының тамғалары*

Бал ҡорто ҡурсаулығы директоры Михаил Косарев менән булған әңгәмә ваҡытында беҙ шуға ышандыҡ: етәксе үҙе ҡурсаулыҡ шарттарында башҡорт солоҡ ҡорттарын һаҡлап алып ҡалыуға һәм үрсетеүгә ышана. Тик бында, ситтән килтерелгән тоҡомдар кеүек, кире тәьҫир итеүсе факторға экология зарары өҫтәлгән. «Шүлгәнташ» республиканың көньяҡ үҙәге (Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалалары) нефть химияһы заводтары яғынан иҫкән елдәр юлында урынлашҡан. Ағыуланған һауа һәм ҡайһы бер йылдарҙағы ҡоролоҡ тау урмандарының ҡороуына, аҡрынлап урман үҫемлектәренең, шул иҫәптән ҡиммәтле бал биреүсе үләндәрҙең дә шиңеүенә килтерҙе. Уйламай хужалыҡ итеү — тау урмандарын рәттән ҡырҡыу, Башҡортостанға, бында урынлашҡан ҡурсаулыҡтарға бер туҡтауһыҙ көньяҡ тоҡомло ҡорт ғаиләләрен, иңә ҡорттарҙы килтереү кире тәьҫир итә.

«Шүлгәнташ» ҡурсаулығында етәкселек һәм эшселәр солоҡ умартасылығын үҫтереү, солоҡ ҡорттарының «Алтын Солоҡ» тигән энтомологик заказнигын булдырыу буйынса бик күп эштәр атҡара. Башҡорт халҡының һәм Башҡортостан Республикаһының милли символы булған башҡорт солоҡ ҡорттарын һаҡлау, артабан үҫтереү өсөн хөкүмәт ярҙамы, дөйөм дәүләт яҡлауы ла талап ителә.

## БАШҠОРТ БАЛЫ

Башҡортостан балы бөтә донъяла юғары баһаланып, Халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә, умартасылыҡ конгресында өс алтын миҙал яуланы. Беренсе алтын миҙал 1900 йылда Парижда үткән Бөтә донъя йәрминкәһендә, икенсеһе — 1961 йылда Эрфуртта (элекке Германия Демократик Республикаһында) беренсе халыҡ-ара күргәҙмәлә йүкә балына, өсөнсөһө — 1971 йылда Мәскәүҙә уҙғарылған умартасыларҙың XXIII халыҡ-ара конгресында бирелде.

Шулай уҡ башҡорт бал ҡорттары ла лайыҡ баһаланды. 1965 йылда Бухареста (Румыния) үткән XX халыҡ-ара конгреста башҡорт ҡортона көмөш миҙал менән диплом бирелде.

Ни өсөн башҡорт балы шундай ҙур баһаға лайыҡ булды?

Башҡорт йүкә балы сәскә балдары араһында тәүге урынды биләй. Уның бер ни тиклем ҡырҡыуыраҡ, әммә татлы еҫен һәм тәмен, аҡһыл төҫөн һәм үтә күренмәлеген һәүәҫкәрҙәр ҙә, белгестәр ҙә һәр ваҡыт юғары баһалай. Көньяҡ Уралдың тәбиғәт шарттары — йүкә урмандары сәскә атҡан мәлдә йәйге ҡояшлы йылы көндәр, уртаса дымлылыҡтағы тау һауаһы йүкә балына хуш еҫ һәм тәбиғи тәм бирә лә инде. Башҡорт йүкә балы башҡа яҡтарҙың балына үҙенең бик һәйбәт сифаты, төҫө, таҙалығы, тәме, хуш еҫе һәм ҡиммәтле дауалау үҙенсәлектәре менән ныҡ айырылып тора.



Архангель, Ғафури, Балаҡатай, Боро, Благовещен, Борйән, Дыуан, Иглин, Ишембай, Күгәрсен, Мишкә, Мәсетле, Нуриман, шулай уҡ Белорет, Ейәнсура һәм Йылайыр райондарында йүкә урмандары байтаҡ майҙандарҙа үҫкәс, бал ҡорттарына ҡайһы бер йылдарҙа йүкә балы йыйырға уңай.

Хәҙерге көндә күңелле ҡырған нәмәләр ҙә бар. Йәшерен-батырыны юҡ, һуңғы йылдарҙа Башҡортостан балының, башҡорт балының дәрәжәһе, ҡыҙғаныска ҡаршы, кәмей төштө һәм даны алтын миҙалдар алған осорҙағы кеүек түгел. Ни өсөн? Серҙәре бөтә кешегә билдәле кеүек. Һуңғы йылдарҙа ҙур уңыш алыр өсөн бөтә ауыл хужалығы, яландағы ҡый үләндәрен бөтөрөргә һәм тупраҡты яҡшыртырға тип, химияға «мөрәжәғәт» итте. Күпләп гербицидтар, пестицидтар ҡулланылды. Һөҙөмтәлә бал ҡорттары, иңкештәр, башҡа бөжәктәр күпләп ҡырылды. Ә тере ҡалғандары умарталарға ағыулы бал ташыны. Һуңғы йылдарҙа кислота ямғырҙары ла йышайҙы. Икенсенән, беҙҙең республика ҡалаларында (әйтәйек, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Белорет һ.б.) заводтар күпләп производство ҡалдыҡтарын һауаға сығара. Улар, елдәр менән таралып, Башҡортостандың байтаҡ райондарын ҡаплап ала. Һөҙөмтәлә бал ҡорттары, бөжәктәр араһында иң һиҙгере, иң наҙлыһы булараҡ, зарарлана һәм һәләк була.

Умартасылыҡты һәм башҡорт бал ҡортон тергеҙеүҙә 2001 йыл һынылышлы булды тип әйтергә мөмкин. 1971 йылдан һуң Бөтә Рәсәй йәрминкәләрендә беренсе тапҡыр ике алтын миҙал яуланылды. 2002 йылдың ғинуарында Берлин ҡалаһында үткәрелгән «Йәшел аҙна — 2002» халыҡ-ара ауыл хужалығы күргәҙмәһендә республика умартасылары ҙур уңыш ҡаҙанды. Улар тәбиғи бал һәм бал ҡортоноң инә ҡорт һөтөнөң юғары сифаты өсөн ике алтын миҙал яуланылар. Конбайыш Европа эксперттарын һәм дегустаторҙарын башҡорт балының иҫ киткес тәме таң ҡалдырҙы.

2006 йылдың октябрь айында Мәскәүҙә үткән «Алтын көҙ — 2006» VIII Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә башҡорт балы 4 алтын миҙал яуланы. Беренсеһе — кәрәҙле бал өсөн, өсәүһе — айыртылған йүкә, ҡарабойҙай һәм сәскә балы өсөн.

Интеллектуаль милекселек, патенттар һәм тауар билдәләре федераль хеҙмәте тарафынан «Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге» дәүләт учреждениеһына 2005 йылдың 26 октябренән 83/1-се һанлы таныҡлыҡ (патент) бирелде. Был таныҡлыҡ «Башҡорт балы» тауарының сығыу урыны менән файҙаланырға хоҡуҡ бирә.

РОССИЙСКАЯ ФЕДЕРАЦИЯ

# СВИДЕТЕЛЬСТВО

**на право пользования наименованием места происхождения товара**

**№ 83/1**

**БАШКИРСКИЙ МЕД**

Обладатель свидетельства: ***Государственное учреждение Башкирский научно-исследовательский центр по пчеловодству и апитерапии, 450059, г. Уфа, ул. Р. Зорге, 9/3, (RU)***

Заявка № **2004722758**

Дата подачи заявки **05 октября 2004 г.**

Зарегистрировано в Государственном реестре наименований мест происхождения товаров Российской Федерации ***26 октября 2005 г***

Срок действия свидетельства истекает **05 октября 2014 г.**

*Руководитель Федеральной службы по интеллектуальной собственности, патентам и товарным знакам*

*Б.П. Симонов*

# VIII. Тәбиғәт мөғжизәләре

### Бал ҡорто нишә «бейей»?

Тотош бал ҡорто ғаиләһенең эшен көйләүҙә 1923 йылда Германияның умартасылыҡ буйынса ғалимы Карл Фриш тарафынан яһалған «Бал ҡорттарының теле» тигән асыш ҙур әһәмиәткә эйә.

Эш башларҙан алда күпселек бал һуты йыйыусы ҡорттар кәрәҙҙәрҙә тыныс ҡына ултыра бирәләр. Ә эҙләнеүсе ҡорттар ялан-ҡырҙарҙы байҡап ҡайтыу өсөн осоп сығалар. Әгәр ҙә эҙләнеүсе ҡорт бал тулы бөрләтәү менән әйләнеп ҡайтһа, ул уны ҡабул итеүсе ҡорттарға тапшыра ла өйөрөлөп йөрөп «бейей» башлай. Был шунан ғибәрәт: эҙләнеүсе ҡорт башҡа ҡорттар тулып торған кәрәҙ буйлап йә уң яҡҡа, йә һул яҡҡа бәләкәй-бәләкәй генә әйләнеш яһап йүгереп йөрөй. «Бейеү» ғәҙәттә бер минут тирәһенән дә артыҡ дауам итмәй. Уны тамамлағас, ҡорт аҙыҡ йыйған урынға ҡабаттан осоп сығып китә.

Тағын башҡасараҡ «бейеү» ҙә бар, ул борғоланыу йәки һигеҙлек (восьмерка) бейеүе тип атала. Ҡорт ярты түңәрәк яһай ҙа унан тура һыҙыҡ буйынса хәрәкәт итә башлаған еренә кире әйләнеп килә. Артабан яңынан икенсе яҡҡа ярты түңәрәк яһай һәм тағын да тура йүгерә. Шулай итеп, уңлы-һуллы йүгереү йәки дуға яһап йүгереү тура хәрәкәт итеү менән сиратлаша. Бынан тыш, тура йүгергән саҡта ҡорт кәүҙәһенең артҡы өлөшөн ҡыйшаңлатҡан һымаҡ итеп йән-яҡҡа борғолай. «Бейеү» ултырған ҡорттарға әйҙәүсе тәьҫир яһай. Уларҙың ҡайһы берҙәре бейеүсе ҡорт артынан йүгерә, мыйыҡсалары («антенна»лары) менән уның ҡорһағына теймергә тырыша. Аҙаҡ уның артынан умартанан осоп сыға. Эҙләнеүсе ҡорт үҙе менән килтергән хуш еҫ буйынса башҡа ҡорттар бал бирә торған үҫемлектәрҙе эҙләп табалар. Умартаға кире әйләнеп ҡайтып, улар ҙа үҙ сиратында бейергә керешәләр һәм бал ҡорттарының яңы төркөмдәрен йәлеп итәләр. Уларҙың барыһы ла бер үк сәскәле үҫемлек төрөн эҙләп таба һәм унда булған һут запасын файҙалана. Әгәр ҡорт тулы йыок менән ҡайтмаһа, бейемәй. Был — эҙләнеүсе ҡорт булған урында бал юҡлығын йәки бик аҙ икәнлеген аңлата.

Ә бал ҡорттары «разведчиктар»ҙың (эҙләнеүсе ҡорттар) артынан баллы урынды нисек табалар һуң? Был ваҡытта хуш еҫ бүлеүсе биҙ эшкә ҡушыла икән. Ул ҡорттоң ҡорһағының (сегменттарының) һуңғы ике быуыны араһындағы арҡа һыртында урынлашҡан. Шәрбәт һурған саҡта ҡорт уны тышҡа ҡабартып сығара. Шул саҡ емеш-еләк еҫе авдып китә. Бына шул ҡуҙғытҡыс фактор булып тора ла инде. Бейеүсе ҡорт һауала үҙ артынан ҡалдырған хуш еҫле эҙ буйлап башҡа ҡорттар баллы урынға йүнәлә. Ошолай итеп, «бал юлы» һалына ла инде.

Бына шулай, бал ҡорто бәләкәй гснэ, ә улар тормошонда күпме сер ята.

## Геүләү коды

Бөжәктәрҙең геүләүен барығыҙ ҙа ишеткәнегеҙ барҙыр. Ҡанаттары һелкенгәндон буштан-бушҡа сыккан тауыш был, тип уйлай торғанһығыҙҙыр. Улай ғына түгел икән. Баҡтиһоң, ҡанаттары осоу хеҙмәтен генә үтәмәй, ә улар ярҙамында геүлоп, бөжәктәр аралаша ла.

Электротехниктар йыш ҡыша юғары вольтлы трансформаторҙарҙың ләпәкәй себендәр менән тулыуына зарланалар. Бөжәкторҙең былай үлеүе уларҙың инә енеско ҡарата романтик тартылыуы менән аңлатыла. Күпселек трансформаторҙар, баҡтиһәң, инә ләпәкәйҙәр менән бер тауышлы итеп геүләйҙәр икән.

Серәкәйҙорҙең бер терлө геүләүе - йыйылыу сигналы... Ата серәкойҙәрҙе бигерәк тэ секундына 500—550 тапкыр тирбәлгән тауыпп йәлеп итә. Уларҙы инә серәкәйҙәр ошондай тиҙлек менән ҡанат ҡағып үҙенә саҡыра.

Дошмандарынан ҡаскан саҡта серәкәй хәүефлелекте иҫкәртеүсе бөтөнләй башҡа тауыш менән геүләй. Уны ишсткән ҡәрҙәштәре тиҙерәк башы һуккан якка ҡасыу яғын ҡарай. Инженерҙар ошондай тауыш сығарыусы прибор уйлап тапкандар. Уны өйгә йәки туристик сәйәхәт ваҡыттарында палатка эсенә ҡуйһаң, серәкәйҙәр һинс эллә ҡайҙан урап үтер. Приборҙы ҡулға ла тағып йөрөргә була.

## Ҡырмыҫҡалар — урман һаксылары

Ҡыҙғылт-һары ҡырмыҫҡаларҙың көсө буйынса һәр урта̄са иләүе тәүлеккә йөҙ меңгә яҡын, о бер йәйҙә 4—5 миллион зарарлы бөжәктәрҙе юҡ итә. Италия Альптарын-

да эшсе ҡырмыҫҡаларҙың дөйөм һаны яҡынса 300 миллиард тәшкил иткән бер миллиондан ашыу ҡырмыҫҡа илэүс бар икән. Йыллыҡ эүҙемлектең 200 конө эсендә үҫемлектәр һаҡсыларының был армияһы 14 400 000 (ун дүрт миллион дүрт йөҙ мең) кг, йәғни 15 мең т тиерлек зарарлы бөжәктәрҙе юҡ итә. Ҡыҙғылт-һары ҡырмыҫҡаларҙың үҫемлектәр өсөн файҙалы эшмәкәрлеге (ҡороткостарҙы юҡ итеү буйынса ғына түгел, о, бәлки, тупраҡ яһау буйынса ла) хәҙерге кондә бөжәктәрҙең был төркөмо буйынса энтомологияның үҙаллы тармағын ойоштороу осөн ерлек бирҙе.

## Бал корттарының дошманы

Ҡырмыҫҡалар, урман һаҡсылары һәм «санитар»ҙары булараҡ, зарарлы бөжәктәрҙе юҡ итеү буйынса ҙур эш башҡаралар. Ләкин улар умартасылыҡҡа теҙәтеп булмаҫлыҡ зыян да килтерәләр. Ҡырмыҫҡалар умарталарға баҫып инәләр. Илоүрренә балды ташып, уны әром-шәрәм итәләр. Улар умартан;ш бал запасын тотошлай урларға, тәүлеккә бер килограмға тиклем һәм унан да күберәк балды ташып алырға һәлотле. Көсһөҙөрәк умарталарҙан хатта ҡорттарҙың йоморҡкаларын да алып китэлэр.

Ҡырмыҫҡалар ҡорт ғаиләләренә төрлө ауырыуҙар ҡуҙғытҡыстарын индереүе ло ихтимал. Уларҙы ҡурҡытыу өсөн томат, бесәй үләне, алтын сәскә (хризантема) кеүек үҫемлектәрҙе ()айҙалаңалар. Был үҫемлектэрҙе умарталыҡтарҙа сэсеп үҫтеролор. Ошо ук маҡсатта метил менэн этил спиртын, көкөрт поро[Иогын һэм аш тоҙон ҡулланалар. Ул матдәләрҙе умарталыҡҡа кергэн ҡырмыҫҡаларҙан һаҡланыу өсөн һауытҡа һалып утырталар.

## Ни эшләп бөжәктәр лампочкаға кағылып һуғыла?

Бөжэктәрҙең ҡояшты түгел, ә ғәҙәттэге лампочканы күргән саҡтағы тортибе ҡыҙыҡлы. Уның нурҙары ҡояштыҡы ксүск параллель түгел, ә радиаль тарала. Бөжәктәр был осраҡта п;| уларға ҡарап йүнәлеш ала, ләкин нурҙар шул бср үк секторға төшерлөк итеп оса, улар яҡтылыҡҡа боролорМ Мөжбүр була һәм кәкере урынына логарифмик спираль (ишслмәле һыҙыҡ) яһап хәрәкәт итә. Бына ни өсөн беҙ кайһы саҡта бөжәкторҙең электр лампочкаһы тирәлоп ҡағылып һуғылыуын һәм яһалма яҡтылыҡта үҙенә короклс курсты һала алмауын күҙәтәбеҙ.

## Бал корттарының биологик «сәғәте»

Бал ҡорттарының ватсытты белеү тойғоһо якшы үҫешкән, уларҙың «эске сәғәте» бар. Ҡорттар сәскә атып ултырғи үҫемлектәргэ бары тик һут һом һеркә йыйып алып булған сакта ғына осоп килэлэр. Күҙәтеүҙәр шуны күрһэтте: ҡорттар ваҡытты белеү тойғоһона эйә һәм үҙ хәрәкәттәрен ҡояштың хәрәкәтенә, һауаның торошона һәм ҡайһы ерҙә булыуыиа бәйләнешһеҙ башҡара. Билдәләнсүенсә, тәжрибә үткәрслсүсо бал ҡорттары хронометрик аныҡлыҡ менон көн һайын бср үк ваҡытта шәкор ҡушылған һыу эсергә барған. Бындай аныҡлыҡ бал ҡорттарында ҡояшҡа бәйләнешле түгслмс икәнлеген тикшереп ҡарау өсен тәжрибә үткәрелеүсе ҡорттар булған умарта яһалма яктылыҡ менән яктыртылған ҡараңғыраҡ бүлмәго күсерелгән. Тәбиғи яктылыҡтан айырыу ҡорттарҙың тэртибенә һис кенә лә тәьҫир итмәй: улар тәмле һыу эсеү өсөн минутын минутына тура килтереп, ҡояш яктыһындағы кеүек бер үк ваҡытта йүнәләләр.

Ғалимдар шундай тәжрибә үткәргән: тәмле һыуҙы Парижда ҡабул итеп өйрәтелгзн (тәбиғи яктылыҡтан мәхрүм ителгән бина эсендә) бал ҡорттары самолетта Нью-Йоркка килтерело. Нью-Йоркта (тәбиғи яктылыктан мәхрүм ителгән бина эсендә) ҡорттар тәмле һыу эсеү өсөн теп-теүәл Париждағы кеүск ваҡытта бара, ә бит был ике ҡалала ваҡыттың айырмаһы 5 сәғәт тәшкил итә.

## Малаймы йәки ҡыҙмы?

Имә бал ҡорто кәрәҙҙәр буйлап гиҙеп йөрөй, шул саҡ һәр күҙәнәккә ул үҙенең мыйыҡсаһын — «антенна»һын төшөрә, бында иһә ҡорттоң яңы быуыны йәшәйәсәк. Әгәр ҙә күҙәнәк бәләкәй булһа, тсорттоң мәней өсөн насосы эшләп китә, ул бер нисә мәнейгә йомортҡаға юл аса, улар уны аталандыра ла инде. Бер нисэ минуттан һуң инэ ҡорт аталанған йомортҡаны бер күҙәнәккә һала: бер ни тиклем ваҡыт үткәс, унан йә бал ҡортоноң тағын бер яңы эш ҡорто, йә яңы инә ҡорт барлыҡҡа килә. Ләкин әгәр ҙә күҙәнәк ҙур булһа, инә шунда уҡ уның эсенә аталанмаған йомортҡа һала, унан инде бары тик һоро, йәғни ата ҡорт барлыҡҡа килергә мөмкин. Шулай итеп, һиҙеү тойғоһо һәр бал ҡорто төрөнөң енесен билдәләй.

## Осоп йорөүсе «оркестр»

Бал ҡорттары, иңкештәр, себендәр һәм серәкәйҙәрҙең телмәр ағзалары юҡ. Улар һаңғырауҙар һәм хәрәкәт итмәгән саҡта телһеҙҙәр ҙә. Әммә осоп киттеме, шунда уҡ һауа геүләү һәм безелдәү тауышы менән тула. Был бөжәктәр — үҙҙәре осоп йөрөүсе бер «оркестр». Скрипканың, роялдең, виолончелдең тауышы ҡылдарҙа тартыу һәм клавишаларға баҫыу арҡаһында килеп сыға. Ә бөжәктәрҙең ауаһында осҡан саҡта ҡанаттары йыш-йыш елпенә. Шуның өсөн дә тауыш барлыҡҡа килә.

Себен секундына — 330, иңкештәр — 220, йөк менән осоусы бал ҡорттары — 300, йеҡһеҙҙәре — 440 тапҡыр ҡанат ҡаға. Бал ҡортоноң безелдәүе буйынса, табышҡа табан осоп китеп барамы, йә иһә умартаға ҡайтып киләме икәнлеген белеп була. Ҡанаттарын йышыраҡ ҡаҡҡан һайын тауыш нәҙегерәк булып сыға. Мәҫәлән, нәҙек итеп кенә безелдәүсе серәкәй секундына 500—600 тапҡыр ҡанат ҡаға.

### Кешенең хәүефле йәнәштә йәшәүселәре

Себендәр 60-тан ашыу төрлө-төрлө ауырыуҙарҙы таратыусылар булып һанала. Улар араһында кешелек донъяһының иң ҡәһәрле ғазабы булған ҡорһаҡ тифы, эс китеү, бруцеллез ауырыуҙары бар. Тикшергән саҡта бер себендең өҫтендә 6 миллионға тиклем бактерия барлығы асыҡланған, ә бөжәктәрҙең эсәк-ҡарынында уларҙың һаны 28 миллионға тиклем барып етә! Ҡаланың санитария ҡағиҙәләренә ҡаршы булған райондарында себендәрҙә 500 миллионға тиклем микроорганизмдар булырға мөмкин.

# IX. Башҡортостан умартасылығы

## ҺАНДАР ҺӘМ ФАКТТАР

— Республикала 2006 йылдың 1 ноябренә бөтә төр милеккә ҡараған хужалыҡтарҙа 16 100 умарталыҡ булып, уларҙа 268,7 мең бал ҡорто ғаиләһе тотола. Шул иҫәптән ауыл хужалығы предприятиеларында — 20,6 мең, крәҫтиән (фермер) хужалыҡтарында — 15,6 мең, шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа — 213,7 мең, бөләкәй ауыл хужалығы предприятиеларында 17,4 мең бал ҡорто ғаиләһе иҫәпләнә.

— 2006 йылда республикала 11057,8 т тулайым бал (бер бал ҡорто ғаиләһенә 41,2 кг), шул иҫәптән 4481,1 т тауар балы (бер бал ҡорто ғаиләһенә 18,53 кг) етештерелгән.

— Башҡортостанда потенциаль бал запасы 525 мең т тирәһе тәшкил итә. Шуның өстән бер өлөшөн (33% тирәһе), йәғни 175 мең тоннаһын ғына бал ҡорттары йыя ала. Тауар балының уртаса продуктлылығы бер бал ҡорто ғаиләһенә 40 кг тәшкил иткән осраҡта, республикала 1 миллион 350 мең күс тоторға мөмкин.

— 2005 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан «2006—2010 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһында умартасылыҡ үҫеше» концепцияһы һәм маҡсатлы программаһы ҡабул ителде.

— «Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге» дәүләт учреждениеһы Рәсәй Федерацияһының 33 төбәгендә 1300 сауҙа нөктәләрендә башҡорт балын һатыуға сығара.

## УМАРТАСЫЛАРҘЫҢ РЕСПУБЛИКА КОНКУРСТАРЫ

**Умартасыларҙың I Республика конкурсы** 1998 йылдың 25 августында Дыуан районы Мәсәғүт ауылы «Михайловский» совхозы умарталығында уҙғарылды. Умартасыларҙың республика һәм район конкурстарын үткәреүҙә был район башлап ебәреүсе булып сығыш яһаны. Конкурста 34 райондан 45 умартасы ҡатнашты. Ярыштар ике этапта үткәрелде: тәүгеһендә уларҙың теоретик белемдәре тикшерелһә, икенсе этапта уны ғәмәлдә ҡулланыу оҫталыҡтары баһаланды. Беренсе урынды Мишкә районы «Ҡаран» совхозынан

Х.Ә.Әхмәтова, икенсе урынды Дыуан районы «Михайловский» совхозынан Н.И.Сазанов, өсөнсө урынды Йәрмәкәй районы «Спартак» берләшкән крәҫтиәнләр хужалығынан Х.З.Йыһаншин яуланылар.

**II Республика конкурсы** 1999 йылдың 11—12 авгусында Миәкә районы «Ҡаран» ауыл хужалығы кооперативы биләмәләрендә үткәрелде. Был конкурста «Ҡаран» ауыл хужалығы кооперативынан Х.Ә.Әхмәтова (1-се урын), Бөрйән районы «Алға» берләшкән крәҫтиәндәр хужалығынан Ш.З.Ғәҙәмшин (2-се урын), Стәрлетамаҡ районы «Заря» берләшкән крәҫтиәндәр хужалығынан Н.И.Онищенко (3-сө урын) еңеүселәр булды.

**III Республика конкурсы** 2000 йылдың 11 авгусында Бөрйән районында булды. Еңеүселәр түбәндәге категориялар буйынса билдәләнде: йәмәғәт секторы умартасылары, фермерҙар һәм уҡыусылар. Йәмәғәт умарталыҡтары умартасылары араһында 1-се урынды Бөрйән районы «Алға» берләшкән крәҫтиәндәр хужалығынан Ш.З.Ғәҙәмшин, 2-се урынды Стәрлетамаҡ районы «Заря» берләшкән крәҫтиәндәр хужалығынан Н.И.Онищенко, 3-сө урынды «Ҡаран» ауыл хужалығы кооперативынан Х.Ә.Әхмәтова яуланылар. Фермерҙар араһында беренсе һөҙөмтәне Благовещен районынан Л.А.Плотникова күрһәтте, икенсе урын Асҡын районынан А.Ф.Муллахмәтовҡа, өсөнсө урын Әбйәлил районынан Р.В.Насырйәновҡа бирелде. Уҡыусылар араһында урындар түбәндәгесә билдәлән-

*III Республика конкурсы еңеүсеһе Шәмсетдин Ғәҙәмшин*





*VI конкурстың судья коллегияһы ағзалары*

де: 1-се урында — Әтек урта мәктәбенән Й.Капаров, 2-се урында — Тимер урта мәктәбенән И.Ҡолдобаев, 3-сө урында — Иҫке Собханғол урта мәктәбенән Ф.Ғизуллин. Иҫке Собханғолдан килгән солоҡсо Ш.Иманғоловҡа иҫтәлекле бүләк тапшырылды.

**IV Республика конкурсы** 2001 йылдың 22—23 авгусында Мәләүез районында Ногөш һыуһаҡлағысы биләмәләрендә үтте. 2001 йылда республикала иң яҡшы умартасы тип Стәрлетамаҡ районы «Заря» ауыл хужалығы кооперативынан Н.И.Онищенко танылды. Икенсе урын Мәләүез районы «Рассвет» крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары берләшмәһенән М.Ғ.Йәмилевҡа, өсөнсө урын Бөрйән районы «Салауат» агросәнәғәт хужалығынан Ю.Ш.Һөйөшевҡа бирелде. Умартасы фермерҙар араһында Күгәрсен районынан Г.А.Ракитин, Ҡыйғы районынан М.Т.Йосопов һәм Ғафури районынан М.З.Килмөхәмәтовтар иң көслөләр тип билдәләнде.

**V Республика конкурсы** 2005 йылдың 26 авгусында Стәрлетамаҡ районының Наумовка ауылында уҙғарылды. Тәүге тапҡыр был конкурста «Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге» дәүләт учреждениеһы инициативаһы менән һәм уның эскиздары буйынса эшләнгән башҡорт умартасыларының байрағы күтәрелде. Был юлы 42 райондан 42 умартасы көс һынашты. Конкурс ике этапта үтте. Беренсе этапта ярышта ҡатнашыусылар 30 минут эсендә 12 һорауға яуап бирергә, ә икенсе этапта бер-бер артлы 4 задание үтәп, үҙҙәренең оҫталыҡтарын күрһәтергә тейеш ине. Архангель районы «Надежда» яуаплылығы сикләнгән



*Конкурстың иң йәш бәйгесеһе*
*Ейәнсуранан Айнур Ҡолмөхәмәтов*

йәмғиәттән Венер Зөлҡәрнәев еңеүсе тип билдәләнде. Икенсе урынды Нуриман районынан О.Ю.Савицкий һәм өсонсө урынды Әлшәй районы «Шафран» совхозынан Р.И.Зарипов яуланы.

Әбйәлил районынан тәжрибәле умартасы З.А.Нигмәтуллинға һәм Стәрлетамаҡ районынан конкурста ҡатнашыусы иң йәш умартасы 18 йәшлек М.Ғайсинға иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

**VI Республика конкурсы** 2006 йылдың 25 авгусында Архангель районы Абҙан ауылы эргәһендә үткәрелде. Конкурста 48 райондан 59 умартасы ҡатнашты. Ярыштар ике этапта үткәрелде: беренсеһендә умартасылар теоретик һорауҙарға яуап бирҙе, икенсеһендә үҙҙәренең һөләттәрен практик яҡтан күрһәтте (бал ҡорттарын тәрбиәләү һәм үрсетеү, уларҙы ауырыуҙарҙан дауалау). 1-се урынды Әлшәй районы «Шафран» совхозы умартасыһы Радик Зарипов, 2-се урынды Архангель районы «Надежда» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттән Винил Яҡшымбәтов, ә 3-сө урынды Баҡалы районы «Звезда» хужалығынан Азат Миниғолов яуланылар.

Киләһе VII Республика умартасылар конкурсы Әлшәй районында, VI Республика конкурсы еңеүсеһе Радик Зариповтың тыуған яғында үткәреләсәк.

## МӘКТӘПТӘРҘӘ УМАРТАСЫЛЫҠ ДӘРЕСТӘРЕ

1999 йылдың йәйендә Башҡортостан Республикаһының Халыҡ мәғарифы министрлығы, Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында беренсе булып, Башҡортостан Республикаһының дөйөм белем биреү мәктәптәренең 10—11-се кластары өсөн уҡыу планы һәм «Умартасылыҡ» фәне программаһын ҡабул итте.

Тәүге тапҡыр «Умартасылыҡ» фәне 1998 йылда Бөрйән районының 16 урта, 2 төп дөйөм белем биреү мәктәбендә индерелде. Ыңғай тәбиғәт шарттары, урындағы умартасыларҙың һәйбәт традициялары Бөрйән төбәге мәктәптәрендә нәҡ ошо тармаҡты үҫтереүгә булышлыҡ итә. Был ерҙә умартасылыҡ менән борон-борондан шөғөлләнәләр.

Халыҡ кәсептәрен, атап әйткәндә, умартасылыҡ традицияларын өйрәнеү, һаҡлау һәм тергеҙеү республиканың күп кенә мәктәптәре өсөн профилле уҡытыу маҡсаты булып тора. Бөгөн «Умартасылыҡ» мәжбүри фән, факультативтар йәки түңәрәк буларак, Башҡортостан Республикаһының 40 районында 200-ҙән ашыу мәктәптә өйрәнелә. Асҡын, Бөрйән, Нуриман, Тәтешле райондары хакимиәттәре башлыҡтары З.И.Насыров, И.Ф.Зарипов, М.И.Тимерғазин, Ф.Т.Ғәйнаншин үҙ райондары мәктәптәрендә «Умартасылыҡ» фәнен уҡытыу мәсьәләләрен шәхси контролдә тоталар һәм үҙҙәренең хужалыҡтарында ла ҡорт аҫырайҙар. Район мәктәптәрендә уҡытыу буйынса ыңғай тәжрибә тупланды.





*Архангель районының Тирәкле урта мәктәбендә умартасылыҡ класын асыу*

Бөрйән районы Ырғыҙлы урта мәктәбенән Михаил Симонов, Ғәҙелгәрәй урта мәктәбенән Рафиҡ Йомағужин, Ҡотан төп дөйөм белем биреү мәктәбенән Рифҡәт Ғәҙелшиндар ҡорттарҙы тотоу һәм ишәйтеү буйынса үҙ тәжрибәләрен уҡыусылары менән ихлас уртаҡлаша. Әйткәндәй, был мәктәптә теплица ла бар, ә 15 күс тотолған умарталыҡта 2003 йылда 255 килограмм тауар балы йыйып алғандар. Балды һатып, мәктәпкә ике теген машинаһы һәм компьютер һатып алғандар. Ҡыҫҡаһы, балалар өҫтәмә һөнәргә эйә булалар, ә мәктәп үҙенең матди базаһын нығыта. Бөгөнгө көндә Бөрйән районының мәктәп умарталыҡтарында күстәр һаны 100-гә етә. Район мәғариф бүлеге көсө менән ике «Йәш умартасы» район конкурсы ойошторолған.

2000-се йылдар башында Әбйәлил районының биш мәктәбендә умартасылыҡ дәрестәрен мәктәп директорҙары үҙҙәре алып барҙы. Йылайыр районының Байғужа урта дөйөм белем биреү мәктәбенең умартасылыҡ уҡытыусыһы Рәшит Мырҙагилдин солоҡсолоҡ нигеҙҙәре буйынса ла уҡыусыларға белем бирә. Шуныһы ҡыуаныслы: Рәшит Дәүләткилде улы үҙенең хеҙмәте менән уҡыусыларҙа ҡорттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятып ҡына ҡалманы, тирә-яҡтағы ауылдарҙа күптәр уның ярҙамында ҡорт тота башланылар һәм бының өсөн уға бик рәхмәтлеләр.

Мәктәптәрҙә умартасылыҡ дәрестәрен һәм уҡыу умарталығы ойоштороу өсөн күп көс һәм сығымдыр талап ителмәй. Уҡытырға теләгән балалар менән эш итеүҙе һәм мәктәп умарталығы ойошторорға теләгән умартасы йәки һәүәҫкәр умартасы кәрәк. Әгәр мәктәптә умарталыҡ булмаһа, эште башлап ебәрергә 2—3 бал ҡорто ғаиләһе лә етә. Дәрестәрҙе ойоштороусы уҡытыусы үҙенең умарталығына ла экскурсияға йөрөтөүе насар булмаҫ.

Умартасылыҡ барыбыҙ осон дә файҙалы тармаҡ. Юҡҡа ғына халыҡ та, балы барҙың даны бар, тимәгән. Шуға күрә умартасылыҡ дәрестәре республикабыҙҙың башҡа мәктәптәрендә лә индерелер, тигән өмөттәбеҙ һәм беҙ, умартасылыҡ буйынса белгестәр, был тармаҡ буйынса эште йәнләндерергә ярҙам итербеҙ.

***

2005 йылдың 27—28 июнендә Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй урта мәктәбе базаһында «Белем бирсү учреждениеларында умартасылыҡ торошо һәм үҫтереү перспективалары» тигән темаға республика семинар-кәңәшмәһе үтте. Мәктәп умарталығында уҡытыусы Р.F.Йомағужин эш тәжрибәһе менән уртаклашты. Ғәҙелгәрәй мәктәбе директоры Ә.С.Сафина умартасылыҡ продукцияһын мәктәптең матди-техник базаһын нығытыуҙа файҙаланыу тураһында сығыш яһаны.

«Умартасылыҡ» программаһы авторы, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Р.F.Ноғоманов Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрендә умартасылыҡ технологияһын уҡытыу методикаһы менән таныштырҙы.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Бөрйән районындағы умартасылыҡ нигеҙҙәрен уҡытыу тәжрибәһен республика мәктәптәренә лә таратырға кәрәк тигән берҙәм фекергә килде.

## Башҡорт бал ҡорто тоҡом булып раҫланды

«Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге» дәүләт учреждениеһының башҡорт бал ҡортон үрсетеү һәм тергеҙеү буйынса күп йыллыҡ ғилми-тикшеренеү эштәрен алып барғандан һуң, Мәскәү ҡалаһында Рәсәй Федерацияһының Селекция ҡаҙаныштарын һынау һәм һаҡлау буйынса Дәүләт комиссияһының 2006 йылғы 4 октябрь ҡарары менән башҡорт бал ҡортона 44736-сы һанлы таныҡлыҡ бирелде.

2006 йылдың октябрь айында Мәскәүҙә үткән «Алтын көҙ — 2006» VIII Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә яңы тоҡомдо сығарыу өҫтөндә, уны раҫлау һәм умартасылыҡта тоҡомсолоҡ эше юғары күрһәткестәргә өлгәшкәне өсөн башҡорт бал ҡорто 3 алтын миҙал яулаша.

РОССИЙСКАЯ ФЕДЕРАЦИЯ

Государственная комиссия Российской Федерации
по испытанию и охране селекционных достижений

# СВИДЕТЕЛЬСТВО

**№ 44736**

**Пчелы медоносные**

# БАШКИРСКАЯ

выдано в соответствии с решением Государственной комиссии Российской Федерации по испытанию и охране селекционных достижений от 04.10.2006

ПО ЗАЯВКЕ № 9358550 С ДАТОЙ ПРИОРИТЕТА 29.12.2005

Заявитель(и)
**ГОСУДАРСТВЕННОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ "БАШКИРСКИЙ НАУЧ.-ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИЙ ЦЕНТР ПО ПЧЕЛОВОДСТВУ И АПИТЕРАПИИ"**

Автор(ы) : АБДУЛОВ Т.Ф., БУРАНБАЕВ Н.И., ГИНИЯТУЛЛИН М.Г., ЗУЛЬКАРНАЕВ В.Х., ИСХАКОВ Ю.Г., ИШЕМГУЛОВ А.М., КАИПКУЛОВ Р.Н., КИНЗЯБАЕВ Р.Х., СУЮНОВ Н.С., ТИМИРЬЯНОВ Н.Р., ТУЛУМБАЕВ Ф.Ф., ХУСАИНОВА Н.Н., ШАКИРОВ Ф.А., ШАНГАРАЕВА Г.С., ШАФИКОВ И.В.

*Зарегистрировано в Государственном реестре селекционных достижений, допущенных к использованию*

*Председатель* *В.В. Шмаль*

## X. Балдан да шәп дауа юҡтыр

### КӘРӘҘЛЕ БАЛ

Эшсе ҡорттар кәрәҙҙәрҙә сәскәләрҙән йыйып эшкәртелгән һеркәне һаҡлай. Балауыҙлы балды ашап, беҙ организмыбыҙҙы аҡһым, углевод, витамин кеүек файҙалы матдәләр менән туҡландырабыҙ. Былдай юл менән балауыҙҙың ниндәйҙер бер өлөшө ашҡаҙанға бара, ләкин ул аш һеңдереү процесына зыян килтермәй. Улай ғына ла түгел, ашҡаҙан менән эсәктәргә килеп эләккәс, балауыҙ адсорбент кеүек тәьҫир итеп, организмдағы зарарлы аҙыҡтарҙы сығарыуға булышлыҡ итә. Балауыҙ сәйнәү тештәрҙе, ауыҙ ҡыуышлығын таҙарта, дезинфекциялай.

Халыҡ медицинаһы энтузиасы, Америка докторы Д.С.Джарвис бал һәм балауыҙҙы бал кеүек организмға шифалы әмәлдәрҙе айырып күрһәтә. Ул түбәндәге өҫтөнлөктәрҙе билдәләй: бал аш һеңдереү трактының лайлалы тиреһен ҡаҡшатмай, организм уны тиҙ һәм еңел үҙләштерә, ауыр физик эштән һуң көсто тиҙ ҡайтара, бөйөрҙәр уны яҡшы үткәрә, кешене тынысландыра, йүткереүҙе баҫа, артрит менән ауырығандарҙың ауыртыуын ала.

Балауыҙлы бал тын алыу системаһы ауырыуҙарын дауалау өсөн иң һәйбәт сара. Был осраҡта балын тулыһынса ҡыуып алған кәрәҙҙәрҙәге балауыҙ айырыуса шифалы. Балды «һағыҙҙы» сәйнәү тын алыу трактына һәйбәт йоғонто яһай. Уларҙы даими рәүештә файҙаланыу бронхитты, бронхопневмонияны, бронхиаль астманы, гайморитты, тын ҡыҫылыуҙы дауалауҙа ярҙам итә. Балды көн дә ҡабул итеү ҙә дауаланыу курсына инә. Шулай ҙа кәрәҙле балды сәйнәү яҡшыраҡ, әгәр ҙә уны табып булмай икән, аш мәлендә бер аш ҡалағы менән бал ҡабыу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә. Кәрәҙле бал сәйнәү тағы ла тәмәке тартыуҙы ташларға теләүселәргә был насар ғәҙәттән ҡотолорға ярҙам итә.

Бал йыйыу осоронда, умарталыҡтарҙа бал ҡыуғанда һеҙгә йыл буйына етерлек балауыҙлы бал алып ҡалырға кәрәк. Бының өсөн бал ҡыуыр алдынан кәрәҙҙең ҡырҡып ташлана торған балауыҙлы еҫтө бигерәк тә яҡшы, уны умартасылар «забрус» тип йөрөтә. Әгәр ҙә кәрәҙҙең еҫтө ҡатһа, уға эҙ генә бал еҫтәгеҙ, ул ваҡытта сәйнәүгә еңелерәк булыр.

Сәләмәт булығыҙ!

# ФАЙҘАЛЫ КӘҢӘШТӘР

**Һыуык тейгән саҡта** балды төнгөлөккә ҡайнар сәй йәки һөт (1 стаканға 1 аш ҡалағы бал), лимон һуты (100 грамм бал һәм бер йәки ярты лимон), ҡурай еләге һәм башҡа үләндәр менән эсергә тәҡдим ителә.

1 литр һыуға 0,5 кг һуған, 50 г бал һәм 40 г шәкәр һалырға, һүрән генә утта ярты сәғәт ҡайнатырға. Һыуытылған һарҡындыны шешәгә ҡойорға һәм тығыҙ итеп ябырға. Көнөнә **4—6** аш ҡалағы эсәләр.

1 аш ҡалағы миҡдарындағы үгәй инә үләне үҫемлектәренең киптерелгән япраҡтарын 1 стакан ҡайнар һыуҙа сәй һымаҡ бешерәләр. Аҙ ғына һыуыталар, һөҙәләр һәм 1 аш ҡалағы бал өҫтәйҙәр. Йүтәлде йомшартыу сараһы булараҡ, көнөнә **2—3** мәртәбә берәр аш ҡалағы эсергә ҡуш.

2 аш ҡалағы киптерелгән (йәки 100 грамм яңы йыйылған) ҡурай еләге емештәре 1 стакан һыуҙа бешерелә, 10—15 минуттан һуң 1 аш ҡалағы күләмендә бал өҫтәлә һәм йылы килеш тирләткес дарыу сифатында ҡулланыла.

**Грипп менән ауырығанда** киң билдәле булған халыҡ сараһы — бал-һарымһаҡ бутҡаһы файҙалы. Уның өсөн ҡабыҡтан таҙартылған һарымһаҡты ҡырғыста ҡыралар, 1:1 нисбәтендә бал менән (йүкә балы яҡшыраҡ) бергә бутайҙар һәм йоҡлар алдынан 1 аш ҡалағы миҡдарында ашап, йылы һыу эсәләр. Дауалау курсы — **3—5** көн. Ҡатнашманы ҡулланыр алдынан ғына әҙерләйҙәр.

**Тымаулағанда** сей ҡыҙыл сөгөлдөр һутына бал өҫтәргә лә һәр танау тишегенә 4—5 тапҡыр **5—6-шар** тамсы тамыҙырға.

**Йүткергәндә** бик һәйбәт сара — бал менән лимон һуты. Бер лимонды аҙ ғына һыуға һалып, экрен генә янған утта 10 минут тирәһе бешерергә кәрәк. Шунан уны алып урталай ярырға ла, һутын һығып, ике аш ҡалағы глицерин өҫтәргә, болғатырға һәм стакан тулғансы бал ҡойорға.

**Йоҡоһоҙлоҡ интектергәндә** балдың тынысландырыусы тәьҫире файҙаланыла. Бер аш ҡалағы бал һалынған бер стакан йылымса һыу һеҙҙе тәрән һәм тыныс йоҡо менән тәьмин итер.

**Ҡан баҫымы юғары булғанда** бал менән йәшелсә һуттары эсеү тәҡдим ителә. Мәҫәлән, сөгөлдөр, кишер, шалҡан һутын һәм балды бер тигеҙ күләмдә (әйтәйек, берәр стакан) алып болғаталар. 2—3 ай дауамында 3 тапҡыр, ашарҙан бер сәғәт

алда, бер аш ҡалағы эсергә. Ҡатнашманы һалҡын урында һаҡларға кәрәк.

**Юғары әселекле гастрит ауырыуында** көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 1,5—2 сәғәт алда бал ашарға. Бынан тыш, уны йылы һыуҙа иретеп, көнөнә 120—150-шәр грамм эсергә. Дауалау курсы — 1,5—2 ай.

**Түбән әселекле гастрит ауырыуында** балды ашар алдынан ҡабул итергә кәрәк. Ул һалҡын һыуҙа иретелергә тейеш. Уны көнөнә 120—150-шәр грамдан арттыра барып эсергә. Дауалау курсы — 1,5—2 ай.

**Ашҡаҙан шеше (язва)** менән ауырығанда балды аҙыҡ ҡабул иткәнгә тиклем 1,5 сәғәт алдан йәки ашағас 3 сәғәттән һуң эсергә кәрәк. Балды иртәнге һәм төшкө ашҡа тиклем 1,5—2 сәғәт алдан һәм төшкө аштан һуң 3 сәгәт үткәс ҡулланыу яҡшыраҡ.

Балды йылы һыу менән ҡатнаштырып эсеү зарур, был иһә ашҡаҙан мускулатураһының тонусын кәметеүгә һәм ҡатнашманың яҡшыраҡ һеңеүенә булышлыҡ итә.

**Бөйөрҙә таш** булғанда, 20 грамм ҡыҙыл көртмәле япраҡтарын баллы (бер аш ҡалағы дәүмәлендә) бер стакан һыуға төнәтеп, берәр стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсәләр.

**Йөрәк эшмәкәрлеге насарайғанда, бөйөр ауырыуҙарында** бер аш ҡалағы кипкән гөлйемеште (100 грамм яңы бешкән емештәрҙе) 1 стакан ҡайнар һыу менән бешерергә. 10 минут ҡайнатҡандан һуң, 12—24 сәғәткә һыуытырға ҡуйырға, һөҙөргә, емештәрҙе һығып айырып алырға, һарҡындыға бер аш ҡалағы бал һалырға һәм болғатырға. Яртышар стаканлап көнөнә 2—3 тапҡыр эсергә. Эсемлекте тәүгә бер нисә тәүлектә файҙаланырға. Балаларға ла, өлкәндәргә лә файҙалы.

Ҡайһы бер кешеләр ҡорт балын ҡулланыуҙан баш тартыуын уның шәкәрҙән ҡиммәтерәк булыуы менән аңлата, ә һаулыҡ бит барыһынан да ҡиммәтерәк. Сәләмәтлегенде йәш саҡтан уҡ йүнләп һаҡламаһаң, барыбер дарыуҙарға күпләп аҡса тотонорға кәрәк буласаҡ. Шуның өсөн дә бал ҡулланыу — аҡсаны һаҡлауҙың иң уңышлы юлы. Шәкәрҙе, кәнфиттәрҙе, төрлө-төрлө шоколадтарҙы һәм дарыуҙарҙы аҙыраҡ, ә саф, таҙа сәскә балын күберәк ҡулланығыҙ. Ул сағында бик күп ауырыуҙар һеҙҙе ситләтеп үтер.

# БАЛ ИҪЕРЕКТЕ АЙНЫТА

Халыҡ медицинаһында лаяҡыл иҫерек кешеләрҙе айнытыу ысулдары күптән бар. Моҫәлән, ҡырҡ йәштән уҙған ир ай буйы туктауһыҙ эсә. Дауаханаға килтерелгән саҡта ул үлемесле хәлдә була. Уға 6 ҡалаҡ ҡорт балы ашаталар, 20 минут үтеүгә тағы ла бирәләр. Ир 40 минут эсендә бөтәһе 18 ҡалаҡ бал ҡабул итә. Артабан дауалауҙы шулай дауам итәләр: һәр тапкыр 6-шар балғалаҡтан торған өс дозаны 20 минут һайын ашаталар. Икенсе көндө иртән пациенттың хәлен тикшерәләр. Ул иртәнге һигеҙенсе яртыға тиклем йоҡлай. Эскесе ирҙең 20 йыл дауамында былай йоҡлағаны булмай. Уянғас та, уға тағы ла 20 минут аралыҡ менән 6-шар балғалаҡтан торған 3 доза, шунан һуң шыйыҡ итеп бешерелгән йомортка бироләр. Ун минут үтеүгә йәнә 6 балғалаҡ бал ашарға ҡушалар. Иртәнге аш алдынан дауаланыусы 4 балғалаҡ бал, **бер стакан томат** һуты һәм бер киҫәк йомшаҡ ит ашай. Десертка тағы ла 4 балғалаҡ бал ҡабул итә.

Иптәше әлеге ирҙең киске аш өҫтәленә бер шешә спиртлы эсемлек килтереп ҡуя, тик тегеһе ситкә этәрә һәм үҙенең башкаса араҡы эскеһе килмәүе тураһында белдерә. Ысынлап та, ир бер ҡасан да ауыҙына араҡы алмай.

Халыҡ медицинаһы эске килеү теләгенең үтә лә нык булыуын организмда калий етешмәүе менән аңлата. Калийҙың бынамын тигән сығанағы булған ҡорт балы спиртка булған һыуһынды кәметә (спиртка хатта сирҡанып ҡарау тойғоһо барлыкка килә) һәм айнытыу процесын уңышлы башкара.

Дания табибы Ларсен, иҫерек кешегә яртышар сәғәт аралыҡ менән ике тапкыр бирелгән 125 грамм доза ҡорт балы **уны** айыҡ хәлгә килтерә, тип билдолой. Бының сообе шунда: балда бик юғары күләмдә фруктоза бар, был иһә алкоголдең тәьҫир итеү көсөн нейтраллəштереүгә булышлыҡ итә.

(Материал Америка докторы Д.С.Джарвистың «Бал һәм башка тукланыу ризыҡтары» тигән китабынан алынды).

# БАЛДАН ЯҺАЛҒАН ШИФАЛЫ ЭСЕМЛЕКТӘР

Мин үҙем унда булдым, бал эстем,
мыйыҡтарҙан ағып торҙо — ауыҙға
элэкмәне: иҫеренкерәп тә кителде,
тамаҡ та туйҙы.
Халыҡ әкиәте башы.

## Рецепттар

### Балдан әҙерләнгән эсемлек

Бер стакан ҡайнаған һыуға: 20—25 г бал, 1 лимон кислотаһы талап ителә. Эҫе һыуға бал һалалар ҙа 3—4 минут ҡайнаталар. Кәрәк тип һанаһағыҙ, лимон кислотаһы өҫтәргә мөмкин. Әҙерләнгән эсемлек тап-таҙа булырға, үтә күренеп торорға тейеш, шуның өсөн уны бик ентекләп һөҙәлор. Өҫтәлгә уны һыуытылған хәлдә ҡуялар.

### Бал, кишер һәм лнмондан яһалған эсемлек

2 аш ҡалағы бал, 1 кг кишер, стакан ярьш һыу, бер бөтен лимон һуты, тоҙ, тәмсно ҡарап йәшсл укроп.

Кишерҙе һәйбәтләп щетка менән йыуырға, ваҡ ҡырғыс аша үткәрергә, һутын һығып алып, ҡайнатып һыуытылған һыу менән бутарға, оҡшаған тәмлелектә тоҙ, лимон һуты һәм бал һалырға кэрәк. Әҙер эсемлеккә ваҡ ҡына итеп туралған йәшел укроп өҫтәргә мөмкин.

### һалкын баллы эсемлек

100 г бал, 2 йомортка, 1/2 стакан ҡаты сәй, 1 стакан шэкәр, 2 лимон.

Йомортканың һарыһын бал менән бутарға, утка ҡуйып, ҡаты ҡайнар сәй менән ҡатыштырып иҙергә, лимон һуты өҫтәргә кэрэк. Унан ул һыуытыла, бейек фужерға ҡойола ла һыуыткыста тотола. Өҫтәлгә сығарырҙан алда һәр фужерға өҫтөнә шәкәр, бер лимон һығып алынған һутты һәм һөҙмәне өҫтәп һалалар.

## Бал

25 г бал, 0,5 г хуш еҫле борос, 0,5 лавр япрағы, 1 г имбир, 5 г дәрсен, 7 г ҡәнәфер, 200 г һыу.

Ҡайнар һыуға имбир, дәрсен, ҡонофср, хуш еҫле борос һәм лавр япрағы һалырға. Ҡайнап сыҡҡан һауытты плитонән алырға һәм уның ҡапҡасын тын сыҡмаҫлыҡ итсп ябып ҡуйырға. 10—15 минуттан һуң бал өҫтәргә, эсемлекте ентсклэп болғатырға һәм һөҙөргә.

## Баллы эсемлек

Ҡырғыстан үткәрелгән алманы 4 аш ҡалағы бал, ярты лимон һуты һәм 2 стакан һот мснон ҡатыштырып болғатығыҙ. Стакандарға бүлсп ҡойоғоҙ һом бик йоҡа ғына итеп ҡырҡылған алма киҫәге менән матур тоҫ бирсгеҙ.

## Баллы кеүәҫ

Бэләкэй мискәгә бал, йоҡа ғына итеп түңәрәклэп киҫелгэн лимон, кипкән йеҙөм һалалар, уға он һәм сүпрэ болғатылған ҡайнап һыуытылған 8 л һыу ҡоялар. Бер тэүлектән һуң 1 л ҡайнар һыу оҫтэйҙәр. Түңәрәк лимондар һәм йөҙөм өҫкэ ҡалҡып сыҡкас, шыйыҡсаны иләк аша һөҙәләр. Кеүәҫте шешәләргә ҡоялар, уларҙың һәр береһенең өҫтөнә 2—3-әр йөҙөм һалып, тығын тығып, яткырған килеш һалҡын урынға һаҡларға ҡуялар. 2—3 тәүлектән һуң кеүәҫ ҡулланыуға эҙер була.

Составы: 800 г бал, 9 л һыу, 800 г йөҙөм, 2 лимон, 2 аш ҡалағы аршын оно, 15 г сүпрә.

## Баллы эсемлек

Корт балын ҡайнар һыуҙа иретерго. Шәрботте 25°С температураһына тиклем һыуытырға, уға сүпрэ, лимон һуты өҫтәргә лэ эсетеү өсөн 10—12 сәгәткә йылы урынға ҡуйырға. Ошолай эшләгәндән һуң эсемлекте һоҙорго һәм һыуытырға.

Рецепт: 750 г һыу, 250 г бал, 5 г сүпро, лимон һуты.

## Дауа балы

Был эсемлек йәнләндерә торған көскә эйә. Ул һау кешегә лә, ауырыу кешегә лә файҙалы. Күңелгә ятышлы һәм хуш еҫле.

Әҙерләү ысулы. Кәстрүлгә 15 л (60—65 стакан) һыу ҡойорға һәм утҡа ултыртырға. Һыу йылына башлағас, 1,5 л (6 стакан) бал һалырға һәм һүрән генә утҡа ҡуйырға. Был баллы һыу 1,5 сәғәт дауамында ҡайнарға тейеш, әйткәндәй, өҫкә ҡалҡып сыҡҡан күбекте алып торорға кәрәк. Бынан һуң ул быяла һауытҡа ҡойола һәм һыуытыла. Әҙер ҡатышма 30—35°С температураға тиклем һыуынғас, уны мискәгә бушатырға. Тишеген тығып ҡуйырға ярамай. Әгәр ҙә бәләкәй мискә булмаһа, уның урынына быяла һауыт ҡулланалар. Ҡапҡасын тығыҙлап ябыу кәрәкмәй, уны йылымса ҡараңғы урынға ҡуйыу мотлаҡ.

5—10 көндән һуң әсеү башлана. Ике аҙнанан һуң әсеүҙең беренсе осоро тамамлана, һәм шул саҡ йәш эсемлекте икенсе бер һауытҡа күсереп ҡойоу тәҡдим ителә, сөнки теге һауыттың төбөндә кәрәкмәгән һарҡынды барлыҡҡа килә. Уны түгергә кәрәк.

Әсеүҙең икенсе осоро 10—14 көн. Унан эсемлек һалынған һауытты тығыҙ итеп тығып, томалап ҡуйырға кәрәк. 3—4 аҙнанан һуң дауа балы әҙер була: уны шешәләргә ҡойоп, һалҡынса урынға ҡуялар. Тиҙҙән ул бик ныҡ күперә башлай. Бына шул саҡ ул эсеү өсөн әҙер була ла инде.

Әҙерләнгән бал оҙаҡҡа һуҙыла торған ауырыулы кешеләргә, өлкән йәштәге кешеләргә файҙалы булһа ла, телэһә ниндәй араҡыла була торған ағыулы майҙар тотмауға, зарары булмауға ҡарамаҫтан, уны әҙләп-әҙләп кенә эсеү тәҡдим ителә.

# БАЛ КОСМЕТИКАҺЫ

Ҡорт балы косметикала йыш ҡулланыла. Бит һәм муйын тиреһен тәрбиәләүҙә балдан эшләнгән маскалар бигерәк тә файҙалы: улар тирене баланыҡы кеүек итеп йомшарта, туҡландыра, тонусты күтәрә, биткә саф төҫ бирә. Баллы маскаларҙы йыш ҡулланғанда, йөҙҙәге кытыршылыҡтар шымарып, һырҙар яҙылып китә. Шуны иҫәпкә алып, китап уҡыусыларға бер нисә рецепт тәҡдим итәбеҙ.

Ҡоро тире өсөн. Әгәр ҙә биттә, муйында һырҙар барлыҡҡа килә башлаһа, түбәндәге маска бик файҙалы. Иҙелгән йомортҡа һарыһына бер аш ҡалағы бал һалып бутарға ла 15—20 минутҡа биткә һыларға кәрәк. Аҙаҡ бүлмә температураһындағы һыу менән йыуып төшөрөргә. Аҙнаһына 2—3 тапҡыр даими рәүештә эшләргә.

Ҡоро һәм уртаса королоҡтағы тире өсөн. 100 г бал, 25 мл спирт, 25 мл ҡайнаған һыуҙан йәки 100 г балға бер лимон йә иһә 100 мл ҡайын еләге һуты ҡушып эшләнгән маска ла ҡоро, уртаса тирегә файҙалы. 15 минуттан һуң битте йылы һыу менән һабынһыҙ йыуырға.

Йомортҡаның һарыһын ике сәй ҡалағы үҫемлек майы, ярты шар ҡалаҡ алма һуты һәм бал һалып иҙергә. Йылымыс йүкә сәскәһе төнәтмәһе менән битте йыуғандан һуң, әлеге ҡатнашманы 5—7 минут аралыҡ менән 2 тапҡыр һөртөргә кәрәк. 10—15 минуттан һуң, һыуынған төнәтмәгә манып, мамыҡ менән йыуып алырға.

Ике аш ҡалағы балға бер аш ҡалағы лимон һуты һалып эшләнгән маска ла бик һәйбәт. Уны 10 минуттан һуң һалҡын һыу менән йыуып төшөрөргә.

50 г аҡ онға бер йомортҡаның ағын һәм бер сәй ҡалағы бал һалып бутарға. Һеңеп сыҡҡан ҡатнашманы биткә һыларға ла, 15 минут тотҡандан һуң, йылы һыу менән йыуырға кәрәк.

Уртаса, ҡәҙимге тире өсөн. Ике аш ҡалағы онға бер йомортҡаның ағын, бер сәй ҡалағы бал һалып, ныҡ итеп бутарға.

Ҡамырға оҡшаған был ҡатнашманы **биткә,** муйынға һылап 10—15 минут тотҡандан һуң йылы һыу менән иыуып төшөрөргә.

**Майлы тире өсөи.** Был осраҡта бал менән ҡырғыс аша үткәрелгән яңы эремсскте ҡушып маска эшләйҙәр. **Уның** өсен **бер аш** ҡалағы эремсек һәм ярты сой ҡалағы бал һалып бутайҙар **ҙа** биткә һылайҙар. 20 минуттан һуң иылы һыу менән һаҡ ҡына йыуып алалар. Эремсектең еңелсә әселеге тирене тарттыра, уны сафландырып, матурлап сбәрә, ә аҡһымы менән бал тирене туҡландыра, тонусын күтәрә, уға сәләмәт төҫ бирә.

**Һорау.** Минең атайым Баймаҡ районы I Эткол ауылында йәшәй, күптән инде бал ҡорттары менән шөғөлләнә. Һәр ваҡыт атайымдың уң ҡулы булдым. Ул мине гел үҙе ҡорт ҡарарға алып йөрөнө.

Атайыма бер нисә умартасы ҡоралы алып биргем килә. **Уларҙы ҡайҙан һатып алырға була?**

**Яуап.** Умартасы ҡоралдарын һәм корок-яраҡтарын, умартасылыҡ хаҡындағы **китаптарҙы** һатып алыу өсөн, шулай уҡ ҡортсолоҡ буйынса һорауҙар мснон республиканың, райондарҙың түбәндэгс умартасылыҡ ойошмаларына мерәжәғәт итергэ мөмкин:

**«Умартасылык һлм апитерапия буйынса**
**Башкортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге»**
**дәүләт учреждсниеһы:**

450059, Офо калаһы,
Зорге урамы, 9/3.
тел.: (347) 223-03-74, факс 223-13-89

Ошо уҡ адрес буйынса умартасылыҡ магазины урынлашҡан.

**Башҡортостан умартасылык тәжрибә станцияһы:**

452470, Иглин районы,
Оло Теләк ҡасабаһы.
тел.: (295) 2-44-36, 2-44-25

**Умартасы магазины:**

450077, Өфө ҡалаһы,
Достоевский урамы, 97.
тел.: (347) 273-31-15, 272-42-51

**Умартасыларҙыц район-ара бүлексәләре, складтары:**

453100, Стәрлстамаҡ ҡалаһы, Совет урамы, 47.
452320, Бөрө ҡалаһы, Фрунзе урамы, 34.
452600, Туймазы ҡалаһы, Ленин урамы, 11.

**Умартасылыҡ коралдары заводы:**

453124, Стәрлетамаҡ ҡалаһы, Халтурин урамы, 192.
тел.: (3473) 25-10-32, 25-65-36

**Бал ҡорто продукцияһы эшкәртеү буйынса**
**тәжрибә-эксперименталь комбинатыныц**
**яһалма балауыҙ эшләү цсхы:**

450038, Өфо ҡалаһы,
Октябрҙең 40 йыллығы урамы, 22.
**тел.:** (347) 264-35-62, 264-40-17

Бында иретелгән балауыҙ эшкәртелеп, яһалма балауыҙ етештерелә.

Шулай уҡ райондарҙа ла (барыһында ла түгел) умартасылыҡ ҡоралдары һәм ҡорамалдар һатыу буйынса складтар бар. Улар республиканың ҡалаларында, күп район үҙәктәрендә эшләй.

**һорау.** Аскосфероз (эзбизлонгән үрссм) ауырыуы Башҡортостанға ҡайҙан килгән?

**Яуап.** Был ауырыуҙың беҙҙә нисек килеп сығыуы тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Умартасылар фекеренсә, ул ауырыу беҙгә ситтән, Балтик буйынан (Латвия, Литва илдәренән) килгән аҙыҡ — канди (шәкәр-аҡһым ҡамыры) аша күскән. Әҙерләнгән аҙыкта ул ауырыуҙың ҡуҙғатҡысы бәшмәк булған.

Икенсе бер умартасыларҙың әйтеүенә ҡарағанда, көньяҡ ҡорттарын килтергәндә был зарарлы ауырыу беҙҙең урта Рәсәй тоҡомло башҡорт ҡорттарына күскән.

**һорау.** Матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларында умартасылар һәм умартасылыҡ тураһында материалдар, тапшырыуҙар буламы?

**Яуап.** һуңғы ун -ун биш йыл осоронда республика йәштәр гәзите «Йәшлек», ул ваҡыттарҙа (1994—1996) мохәррире Нияз Сәлимов, хәбәрсе Гөлсимә Ризуанова тәҡдиме менән «Балсы ҡулынан бал тамыр» рубрикаһы аҫтында Рафиҡ Ноғоманов умартасылыҡ дәрестәре алып барҙы. 1998—1999 йылдарҙа республика татар йәштәре гәзите «Өмет» (мөхәррире Фаил Фәтхетдинов, хәбәрсеһе Вәсилә Камалетдинова) умартасылыҡ буйынса дэрестәр ойоштороп биреп барҙы. 2000 йылдан алып даими рәүештә «Йәшлек», «Йәншишмә», «Башҡортостан» гэзиттәре умартасылыҡ темаһын яҡтыртып баралар. 2003 йылда Башҡортостан йәштәренең «Шоңкар» журналы баш мөхэррире Иршат Теләүембәтов тәҡдиме менән умартасы дәрестэре алып барылды.

Башҡортостан телевиденисһы «Тамыр» телерадиостудияһы 1997 йылда етәксеһе Луиза Фархшатова тәҡдиме менән «Сәңгелдәюжә ике өлөштән торған «Бал ҡорттары илс» һәм «Бал ҡорттары йоҡларға ята» тигән ҡыҙыҡлы тапшырыу ойошторҙо. Режиссеры Рузил Имамов, сценарий авторы Риф Арыҫланов. һуңғыһы тапшырыуҙарға Диләә Булгакова һүҙҙәренә «Беҙ, беҙ, беҙ бал ҡорто, беҙ» йырын яҙҙы. Өфөнөң 41-се урта мәктәбенең башланғыс синыф укыусыһы Фәрхәд Әбделғужин, балалар баҡсаһына йөрөүсе һеңлеһе Гөлнара Әбделғужина һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Гүзәл Сәғитова ролдәрҙе оҫта башҡарҙылар. Яңы яҙылған йыр Лиана Хобибуллина башҡарыуында тәүгә яңғыраны.

1999 йылдың көҙөндө Башҡортостан **телевидениеһының** баш мөхәррире Гәүһәр Батталова етәкселегендә Бөрйән районы Әтек ауылы «Алға» хужалығының алдынғы умартасыһы Шәмсетдин һәм атаһы, тәжрибәле умартасы Зойтүн Ғәҙәмшиндар тураһында тапшырыу ойоштоҙолдо.

Бөрйән районы «Таң» гәзите (мөхәррире Юлай Манапов) **умартасыларҙың,** солоҡсоларҙың махсус бите «Алтын Солоҡ» сығара.

Башҡортостан радиоһы «Юлдаш» каналы хәбәрсеһе Венера Ситдиҡова «Бал ҡортоноң наҙы бар» рубрикаһы аҫтында даими рәүештә тапшырыуҙар алып бара.

Башҡорт ҡортона, башҡорт балына, республика умартасылары бәйгеләренә арнап Башҡортостан телевидениеһы студияһы **тапшырыуҙар ойоштороп** күрһәтеп **тора.**

Һорау. Рәсәй Федерацияһы «Умартасылыҡ **тураһында»** Законы ҡабул ителдеме һәм қосондомо?

**Яуап.** Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһының II саҡырылыш депутаттары 1998 йылда Закон проектын **әҙерләнеләр.** Уның өҫтөндә РФ Дәүләт Думаһы Аграр **мәсьәләләр** буйынса Комитеты эүҙем эшләне. Комитет рәйесе Чернышев **А.Л. (хәҙер** Ырымбур өлкәһе губернаторы) етәкселегендә депутаттар Жакслык Алтынбаев һәм Борис Данченко «Умартасылыҡ тураһында» Закон проектын ентекле әҙерләп, депутаттар ҡарамағына тикшереү өсөн Пленар ултырышҡа сығарҙылар. Ләкин ЛДПР фракцияһы лидеры В.В.Жириновский был законды ҡабул итеүгә ҡаршы сығыш яһаны: «Әгәр беҙ бөгөн «Умартасылыҡ тураһында» Закон ҡабул итһәк, иртәгә кәзә, һарыҡтар, суҡалар, тсоштар һәм башҡа хайуандар тураһында Закондар ҡабул **итергә** кәрәк буласаҡ!»

1998 йылдың 20 ноябрендә РФ Дәүләт Думаһы **депутат**тары күпселек тауыш менән «Умартасылыҡ тураһында» РФ Законын ҡабул иттеләр. Шул уҡ йылдың 2 **декабрендә** РФ Федерация Советы ағзалары был законды хупланы. Рәсәй Федерацияһының элекке Президенты Б.Н.Ельцин РФ «Умартасылыҡ тураһында» Законға ҡул ҡуйманы.

Шулай итеп, РФ «Умартасылыҡ тураһында» **Закондың** юридик көсө **юҡ,** ә беҙ Башҡортостан **Республикаһының** «Умартасылыҡ тураһында» Законы нигеҙендә эш алып **барабыҙ.**

*РФ Дәүләт Думаһы II — **III саҡырылыш***
*депутаттарының **ярҙамсыһы***
*Рафик НОҒОМАНОВ **яуап бирҙе.***

# Умартасылыҡ тураһында Башҡортостан Республикаһы Законы

**(Башҡортостан Республикаһының 1997 йылдың 2 июлендәге 98-з һанлы, 2002 йылдың 16 декабрендәге 396-з һанлы, 2004 йылдың 1 октябрендәге 103-з һанлы закондары редакцияһында)**




Ошо Закон бал ҡорттарын үрсетеү, тотоу, һаҡлау, уларҙы энтомофиль ауыл хужалығы үҫемлектәрен һеркәләндереү өсөн файҙаланыу, умартасылыҡ продукттары алыу, эшкәртеү буйынса, шулай уҡ умартасылыҡтың һөҙөмтәлелеген күтәреү өсөн шарттар тыуҙырыу, физик шәхестәрҙең һәм ойошмаларҙың, шул иҫәптән умартасылыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең һәм умартасылыҡ өсөн ҡорамалдар етештереүселәрҙең хоҡуҡтары һәм мәнфәғәттәре үтәлеүен тәьмин итеү буйынса эшмәкәрлектең хоҡуҡи һәм иҡтисади нигеҙҙәрен билдәләй.

# I БҮЛЕК
# ДӨЙӨМ ПОЛОЖЕНИЕЛАР

**1-се статья. Ошо Законда ҡулланылған төп төшөнсәләр**

Ошо Законда түбәндәге төп төшөнсәләр ҡулланыла:

умартасылыҡ — бал, балауыҙ һәм өҫтәмә продукт (умарта елеме (прополис), инә ҡорт һөтө, ҡорт ағыуы) алыу, шулай уҡ энтомофиль ауыл хужалығы культураларын һеркәләндереү өсөн бал ҡорттарын үрсетеү, тотоу һәм файҙаланыу менән шөғөлләнеүсе ауыл хужалығы тармағы;

умартасы — умартасылыҡ менән шөғөлләнеүсе физик шәхес;

умарта күсе — бер инә ҡорттан, эшсе һәм әреғорттарҙан торған бал ҡорттары берләлеге;

умарта — бал ҡорттарының яһалма торлағы;

умарталыҡ — умарта күстәре һәм умартасылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн кәрәкле мөлкәте менән билдәле бер урында урынлаштырылған умарталар;

стационар умарталыҡ — йыл әйләнәһендә даими бер урында урынлаштырылған умарталыҡ;

күсмә умарталыҡ — бал йыйыу сығанаҡтары йәки энтомофиль ауыл хужалығы үҫемлектәре массивтары янында урынлаштырыла торған умарталыҡ;

индивидуаль умарталыҡ — граждандың биләмәһендә, файҙаланыуында һәм (йәки) хужалыҡ итеүендә булған умарталыҡ;

умартасылыҡ продукцияһы — бал ҡорттары етештергән продукция (бал, балауыҙ һәм башҡалар), шулай уҡ бал ҡорттары үҙҙәре һәм ҡорт инәләре;

кәрәҙ — машина ярҙамында соҡорлап бал ҡорттары күҙәнәктәре яһалған балауыҙ табаҡтар;

ҡорт инәһе — бал ҡорттарын тыуҙырыусы инә ҡорт;

умарта күсе — топ күстә үҙ аллы яһалған һәм тәбиғи күс айырыу мәлендә унан үҙе осоп сыҡҡан яңы күс;

бал ҡорттары тоҡомо — аныҡ географик йәшәү зонаһында тәбиғи һәм (йәки) яһалма һайланыш йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән, был шарттарға яраҡлашҡан һәм нәҫел буйынса тотороҡло тапшырыла торған биологик һәм хужалыҡ билдәләре берлеге менән айырылған умарта күсенең билдәле бер төркөмө;

бал ҡорттарының популяцияһы — билдәле бер территорияла барлыҡҡа килгән һәм дөйөм генофондҡа эйә булған бал ҡорттары тоҡомо сиктәрендәге умарта күстәре берлеге;

энтомофиль үҫемлектәр — бөжәктәр ярҙамында һеркәләнделерә торған үҫемлектәр;

бал йыйыу сығанаҡтары — бал һуты һәм һеркә яһаусы үҫемлектәр, бал йыйыусы ҡорттар өсен тәбиғи аҙыҡ сығанағы булып хеҙмәт итәләр һәм бал йыйыуҙы тәьмин итәләр;

умартасылыҡ ҡорамалдары — умартасылыҡта төп һәм ярҙамсы эштәрҙе башҡарыу есөн тәғәйенләнгән ҡулайламалар, ҡоралдар, механизмдар һәм башҡа йыһаздар;

умартасылыҡ эшмәкәрлеге субъекттары — төп эшмәкәрлектәре умартасылыҡ һәм умартасылыҡ ҡорамалдары етештереүгә бәйле булған физик шәхестәр һәм ойошмалар.

**2-се статья. Башҡортостаи Республикаһының умартасылык тураһындағы закондары**

Башҡортостан Республикаһының умартасылыҡ тураһындағы закондары Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына, Баигкортостан Республикаһы Конституцияһына нигеҙләнә һәм ошо Закондан һәм башҡа норматив хоҡуки акттарҙан тора.

## II БҮЛЕК

## УМАРТАСЫЛЫҠ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНЕҮ

**3-сө статьл. Умартасылыҡ** мснэн **швғөлләнеү хоҡуғы һәм умарта күстәрен тотоу нормалары**

Башҡортостан Республикаһында умартасылыҡ менән шөғөлләнергә теләгән физик шәхестәр һәм ойошмалар умартасылыҡ менән шөғөлләнеү хоҡуғына эйә.

Умарталыҡтарҙа умарта күстэрененң һаны сикләнмәй.

**4-се статья. Умартасылыҡ һәм умартасылыҡ продукцияһын эшкәртеү өлкәһендә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге**

Физик шәхестәр һәм ойошмалар, шул иҫәптән умартасыларҙың йәмәғәт берләшмәләре, Рәсәй Федерацияһы закондарына ярашлы умартасылыҡ һәм умартасылыҡ продукцияһын эшкәртеү өлкәһендә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге алып барыуға хоҡуҡлы.

**5-се статья. Умартасылыҡ елкэһендә тоҡомсолоҡ эше**

Тоҡомсолоҡ материалын етештереү һом эш итеү менән шөғөлләнеүсе тоҡомсолоҡ умарталыҡтары, фермер хужалыҡтары һәм айырым кешеләр тарафышан умартасылыҡ өлкәһендә тоҡомсолоҡ эшен алып барыу Рәсой Федерацияһы закондарына ярашлы лицензия булғанда тормошҡа ашырыла.

**6-сы статья. Умарта күстәрен иҫәпкә алыу**

Умарта күстәрен иҫәпкә алыу Башҡортостан Республикаһы Хекүмэте билдәлэгэн тортиптэ бойомға ашырыла.

**7-се статья. Умартасылыҡ продукцияһын һатыу**

Балды һәм умартасылыҡтың башҡа продукцияһын һатыу, продукцияның ГОСТ-ҡа ярашлылығына ветеринар-санитар паспорты һәм лаборатор тикшсренсүҙорс булғанда, ҡорт эйәләренең үҙ ҡарамағына һәм һөйлошсп килсшеү хаҡтары буйынса тормошҡа ашырыла. Умартасылыҡтың ялған продукцияһын һатҡан өсөн ғәйеплеләр Рәсәй Фсдерацияһы законларына ярашлы яуаплылыҡҡа тарттырыла.

**8-се статья. Умартасылыҡ эшмэкарлеге субъекттарына һалым һалыу**

Умартасылыҡ эшмәкэрлеге субъскттарына һалым һалыу, шулай уҡ уларға һалым һэм башҡа льготалар биреү Рәсәй Федерацияһы закондарына ярашлы тормошка ашырыла.

**9-сы статья. Умарта күстәре мензн умарталарҙы урынлаштырыу**

Физик шәхестәр һэм ойошмалар умарта күстәре менән умарталарҙы, уларҙың һанын сикләмойенсә, бал ҡорттарын тотоуҙың зоотехник һәм ветеринар-санитар нормаларын һәм ҡағиҙәләрен үтәп, үҙҙәренең уларға бирелгән ер участкаларында урынлаштыра.

Физик шәхестәр һәм ойошмалар умарта күстэре менән умарталарҙы һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, мәғариф учреждениеларынан кешелэрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин иткән алыҫлыҡта урынлаштыра.

Умарта күстәре **менән** умарталар ер участкаһында унын сиктәренән кәмендә ун метр алыҫлыкта урынлаштырыла, шулай булмағанда, умарта күстәре менән умарталар кәмендә ике метр бейеклектә урынлаштырыла йәки күрше ер участкаһынан бина, ҡоролма, ҡаралты, йә ике **метрҙан** да кэм булмаған ҡуйы ҡыуаҡлыҡ менэн айырылырға тейеш.

Күсмә умарталыҡтар бал йыйыу сығанаҡтары эргәһендә бср-береһенэн кәмендә бер ярым километр алыҫлыкта һәм стационар умарталыҡтарҙан ос километр алыҫлыкта урынлаштырылырға тейеш.

Күсмә умарталыҡтарҙы бал йыйыу сығанаҡтары янына **элсгерәк** урынлаштырылған башҡа умарталыҡтан бал ҡорттары осоп үткән урында урынлаштырыу рөхсәт ителмәй.

Физик шәхес һом ойошма күсмэ умарталыкты урынлаштырғандан һуң вәкәләтле дэүлэт органына уның тураһында мәғлүмәттәрҙе хәбәр итергә һәм умарталыктың ветсринар-санитар паспортын күрһэтерго бурыслы.

**10-сы статья. Умартасылыҡ олклһендә эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыу осен ер участкалары биреү**

Умартасылыҡ елкәһендә эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыу өсөн ер участкалары физик шәхестәргэ һәм ойошмаларға Рәсәй Фсдерацияһы һэм Башҡортостан Рсспубликаһы закондарына ярашлы бирелә.

**11-се статья. Умарта күсторен энтомофиль үҫемлектәрҙе һеркәләндереү есөн файҙаланыу**

Физик шәхестәр һэм ойошмалар бал ҡорттары ярҙамында энтомофиль үҫемлектәрҙең уңдырышглылығын күтореү маҡсатында килешеү нигеҙендә умартасылыҡ эшмэкәрлеге субъекттарына умарта күстәрен (умарталыҡтарҙы) урынлаштырыу өсөн урын бирә ала.

## III БҮЛЕК

## УМАРТАСЫЛЫҠ ӨЛКӘҺЕНДӘ МИЛЕК МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

**12-се статья. Умартасылыҡ влкәһеидә мөлкэт мөиәсәбәттәре**

Умартасылыҡ һәм умартасылык продукцияһын эшкәртеү елкәһендз эшмәкәрлск алып барғанда мөлкэтте биләү, файҙаланыу һәм эш итеү мәсьәләләре Рәсәй Федерацияһы закондары билдолэгэн тәртиптә койләнә.

## IV КҮЛЕК

## УМАРТАСЫЛЫҠ ӨЛКӘҺЕНДӘ ИДАРА ИТЕҮ

**13-сө статья. Идара итеү органдары**

Умартасылыҡ олкәһендә идара итеү Башҡортостан Республикаһының дәүлот власы органдары тарафынан тормошҡа ашырыла.

**14-се статья. Башкортостан Республикаһының дәүлот власы органдарыньщ умартасылыкты үҫтереүҙә катнашыуы**

Башҡортостан Республикаһының дэүлэт власы органдары умартасылыҡты һом умартасылыҡ ҡорамалдарын етештерсүҙе үҫтереүгә **һәм** юғары һоҙөмтәлелеккә өлгәшеүгә булышлыҡ итә, бал ҡорттарын һаҡлау, умарта күстэрен нэтижоле файҙаланыу буйынса **граждандарҙың** һэм ойошмаларҙың тоҡдимдәрен иҫәпкә ала.

**15-се статья. Умартасылык өлкәһендә Башҡортостан Республикаһы дәүләт власы органдарының вәкәләттәре**

Умартасылыҡ олкәһсндэ Башҡортостан Республикаһы дәүләт власы органдарының воколәтторенә түбэндэгеләр инә:

умартасылыҡты һәм умартасылыҡ ҡорамалдары етештереүҙе үҫтереүҙең республика һом урындағы программаларын эшләү һәм бойомға ашырыу;

умартасылыҡ олкәһендо нормалар һом ҡағиҙолэрҙе раҫлау;

умартасылыҡ һәм умартасылыҡ ҡорамалдары стештереү өлкәһендәге эшмокәрлекте иктисади дәртләндереү;

бал ҡорттарын аҫрауҙың зоотехник һәм встеринар-санитар нормаларының һом ҡағиҙэләренең үтәлешенә, умартасылыҡ продукттарының сифатына контроль тәьмин итеү;

бал корттарының ауырыуҙарын иҫкэртеү, уларҙы дауалау, умарта күстэренең короткостарына ҡаршы көрәш һәм бал ҡорттарын пестицидтар һәм агрохимикаттар менэн ағыуланыуын иҫкәртеү буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыуҙы тэьмин итеү;

умартасылыҡ һәм умартасылыҡ ҡорамалдары етештереү өлкәһендә халыҡ-ара хеҙмәттошлеккә булышлыҡ итеү;

умартасылыҡ өлкәһендэ белгестэрҙе профессиональ әҙерләү һэм ҡайтанан әҙерләү буйынса эшмэкорлекте координациялау;

умартасылыҡ өлкәһендэ селекция-тоҡомсолоҡ **эшен** координациялау, бал ҡорттарының районлаштырылған тоҡомдарын, селекцион умарталыҡтарын һәм заказниктарын үҫтерсүгә булышлыҡ итеү;

бал ҡорттарын файҙаланыу һәм **уларҙы** кайтанан етештереү торошона, умартасылыҡ продукттарын **эшкәртеү** сифатына Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы закондары билдәләгән тэртиптә дэүлэт контролен тормошҡа ашырыу;

умартасылыҡ һәм умартасылыҡ ҡорамалдары етештереү өлкәһендә норматив хоҡуки акттар **эшләү** һәм ҡабул итеү;

агросәнәғәт комплексына Башҡортостан Республикаһы бюджетында ҡаралған доүләт ярҙамы саралары сиктәрендә

умартасылыҡ эшмәкәрлеге субъекттарына финанс йәһәтенон ярҙам күрһәтеү;

умартасылыҡты үҫтереүгә, эпизоотияларҙы, бал ҡорттарының карантинлы һәм айырыуса хәүефле ауырыуҙарын бөтөроүгә, умартасылыҡ өлкәһендә фәнни тикшеренеүҙәр үткәреүгә, бал ҡорттарының генотиптарын һаҡлау буйынса саралар үткәреүгә сығымдарҙы финанслауҙы бойомға ашырыу;

умартасылыҡты һэм умартасылыҡ корамалдары егештереүҙе үҫтереү өсөн сит ил инвестицияларыш йәлеп итеүгэ булышшыҡ итеү;

умартасылыҡ эшмәкәрлсге субъекттарына һалым һәм башҡа льготалар биреү;

умартасылыҡты һәм умартасылыҡ ҡорамалдары етештереүҙе үҫтереүгә йүнәлтелгән эшҡыуарлыҡ, инновацион һәм башҡа эшмэкэрлеккә булышлыҡ итеү;

эске һәм тышҡы баҙарҙарҙа күп һоралған юғары технологиялы, фэнни нигеҙгә ҡоролған, конкуренцияға һэләтле умартасылыҡ ҡорамалдары етештереүҙе тәьмин итеү;

умартасылыҡ һом умартасылыҡ ҡорамалдары етештереү өлкәһендәге башҡа мәсьәләләрҙе көйләү.

**16-сы статья. Көсөн юғалтҡан. — Башҡортостан Республикаһының 2004 йылдың 01.10. ЮЗ-з һанлы Законы**

## V БҮЛЕК

## БАЛ ҠОРТТАРЫН ҺАҠЛАУ

### 17-се статья. Бал корттарын һаҡлауҙы ойоштороу, умартасылык влкәһендэ зоотехник һәм ветеринар-санитар контроль

Бал ҡорттарын һаҡлауҙы ойоштороу Башҡортостан Республикаһы дәүләт власының вәкәләтле органдары тарафынан башҡарыла.

Бал ҡорттарын тотоуҙың зоотехник һәм ветеринар-санитар нормаларының һәм ҡағиҙәләренең үтәлешенә контроль Рәсәй Федерацияһы һэм Башҡортостан Республикаһы закондары билдәләгән тәртиптә тормошҡа ашырыла.

### 18-се статья. Умартасылыкта ветеринар-санитар күҙәтеү

Умартасылыҡта ветеринар-санитар күҙәтеү Башҡортостан Республикаһының Ауыл хужалығы министрлығы ҡарамағындағы Ветеринария идаралығы, район һәм ҡала ветеринар станциялары тарафынан тормошҡа ашырыла.

Ветеринар-санитар учреждениелар умартасыларға бал ҡорттарының эпизоотик ауырыуҙары осрағында, экологик сэбэптор арҡаһында уларға ҡырылыу янағанда мəғлүмəт биреү һом консультатив эш, ҡорт ауырыуҙарын диагностикалау, умартасыларҙы встеринар препараттар һəм бал ҡорттарын һаҡлаусы саралар менон тэьмин итеү юлы менəн ярҙам күрһэтə, бал ҡорттары ауырыуҙарын иҫкэртеү һэм дауалау буйынса хеҙмəттэр күрһэтэ, умарта күстэрсн, ҡорт инəлəрен һəм умартасылыҡ продукттарын индереүгə һэм сығарыуға, шулай уҡ умартасылыҡтың һатыла торған продукцияһы сифатына билдэлəнгəн тортиптə күҙэтеүҙе бойомға ашыра.

## 19-сы статья. Бал ҡорттарын һаҡлауға һəм һөҙөмтəле файҙаланыуға топ талаптар

Бал ҡорттарын һаҡлауға һом һөҙомтэле файҙаланыуға төп талаптар булып түбəндэгелəр тора:

бал ҡорттарын фонни нигеҙлэнгэн, һоҙомтэле файҙаланыу һэм ҡайтанан етештереү;

бал ҡорттарының йэшоү мехитсн, үрсеү шарттарын, миграция һəм күсеп йореү юлдарын һаҡлау;

баҡсаларҙың, энтомофиль ауыл хужалығы культураларының һəм ҡырағай хəлдэ үҫеүсе флораның һеркəлэндереүгə мохтаж булған бөтə территорияһын бал ҡорттары менəн кəрəгенсə тултырыу;

умарталыҡтарҙы ветеринар-санитар хеҙмəтлэндереү, умартасыларҙы бал ҡорттарын тэрбиəлэү һэм аҫрау мəсьəлəлоре буйынса фəнни консультация менэн тоьмин итеү, ветврачтар һəм башҡа белгестэрҙең ғəмəли ярҙамы;

Бал ҡорттарын һаҡлау түбəндəге юлдар менəн тəьмин ителə:

физик шəхестəрҙең һом ойошмаларҙың бал ҡорттарын тотоуҙың һəм умарта күстəре менəн умарталарҙы бал йыйыу сығанаҡтары эргəһендə у]5ынлаштырыуҙың зоотехник һəм ветеринар-санитар нормаларын һом ҡағиҙəлəрен үтоүе;

физик шəхестэрҙең һəм ойошмаларҙың тирə-яҡ мохиттс, бал ҡорттарының күсеп йөрөү һəм миграция юлдарын һаҡлау талаптарын үтəүс;

умарта күстəре булған умарталарҙы емерелеүҙэн һаҡлау;

бал ҡорттары ауырыуҙарын иҫкəртеү, умарта күсторе ҡоротҡостары менəн көрəшеү;

умарта күстəрен тотҡарлыҡһыҙ күсереүгə булышлыҡ итеү;

бал ҡорттарын һаҡлау өлкəһендə фəнни тикшеренеүҙəр ойоштороу;

умартасылыкты һәм бал ҡорттарын киң мәғлүмәт саралары аша пропагандалау, бөтә граждандарҙа ла бал ҡорттарына ҡарата гуманлы менәсәбәт тәрбиәләү.

Бал ҡорттары ауырыуҙарын иҫкортеү, уларҙы дауалау, умарта күстәре ҡороткостары менән көрәш, шулай уҡ кәрәҙ етештереү Рәсәй Федерацияһының ветеринария закондарына һәм Башҡортостан Республикаһы закондарына ярашлы үткәрелә.

Физик шәхестәрҙең һәм ойошмаларҙың умарталыҡтарының ветсринар-санитар паспорттары булырға тейеш. Умарталыҡтарҙың ветеринар-санитар паспорттарын биреү һәм алып барыу вәкәләтле дәүләт органы билдәләгән тәртиптә башҡарыла.

**20-се статья. Бал корттарының йәшәү һәм эшмәкәрлек мехитен, үрсеү шарттарын, күсеп йөрөү урындарын һәм миграция юлдарын һаҡлау**

Ойошмалар, крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары һәм граждандар, объекттарҙы төҙөгәндә һәм реконструкциялағанда, яңы технологик процестар индергәндә, мелиорация, ерҙәрҙе, күп йыллыҡ ағастарҙы һәм урман массивтарын файҙаланыу буйынса эштәр башҡарғанда һәм бал ҡортоноң торошона тәьҫир итеүсе башҡа эшмәкәрлек алып барғанда, уларҙың йәшәү мөхитен, бал ҡорттарының һаҡланыуы һәм йәшәүе өсөн айырыуса ҡиммәтле булган участкаларҙың һәм үҫемлектәрҙең тейелгеһеҙлеген һаҡлау буйынса сараларҙы тәьмин итергә бурыслы.

**21-се статья. Бал ҡорттарын ауыл һәм урман хужалыҡтарында кулланылған химиялаштырыу сараларыпан һаҡлау**

Ауыл һәм урман хужалыҡтарында химиялаштырыу сараларын ҡулланыу, уларҙың билдәләнгән тәртиптә **раҫланған** исемлегенә ярашлы, бал ҡорттарын һаҡлау ҡағиҙәләре ҡәтғи үтәлгәндә генә рөхсәт ителә.

Бал биреүсе төп үҫемлектәр сәскә аткан ваҡытта баҫыуҙарҙы, баҫыу һаҡлағыс урман һыҙаттарын һәм ағас-ҡыуаҡлыҡтарҙы эшкортеү есөн пестицидтар ҡулланыу тыйыла.

Бал биреүсе үҫемлектәрҙе эшкәртеү өсөн химик саралар ҡулланыусы ауыл хужалығы предприятиелары һәм ойошмалары эшкәртелеүсе участкаларҙан ете километрға тиклем радиуста умарталыҡтары булған ойошмаларҙы һәм физик шәхестәрҙе эш башланырға биш кон алдан был турала яҙма йоки урындағы матбуғат аша иҫкәртергә, ҡулланыла торған препарат тураһында, уның ағыулылыҡ кимәле һәм

умарта күстәрен изоляциялау ваҡыты тураһында хәбәр итергә бурыслы.

### 22-се статья. Урман хужалмғм һом ауыл хужалығы эштәрен башкарғанда бал ҡорттарын һаклау

Урмандарҙың продуктлылығын күтэрсүго йүнэлтелгән саралар умартасылыҡ өлкәһендәге эшмәкэрлекте һеҙөмтәле башҡарыуҙы тәьмин итеүсе **талаптарҙы** иҫэпкә алып үткәрелә.

Рәсой Федерацияһы закондары, Башҡортостан Республикаһы закондары менән билдәләнгән **урмандарҙың** санитар торошон һәм уларҙы яңынан үҫтереү шарттарын яҡшыртыу буйынса сараларҙан һәм башка осраҡтарҙан тыш, умарта күстәре булған стационар умарталыҡтар урынлаиғкан һэм халыҡ йәшәгән урындарҙан ос километрға тиклем радиуста бал һуты биреүсе йүкә, саған, тал, акация ағастарын ҡырҡыу, шулай уҡ тал ҡайырыһын оҙсрлоү тыйыла.

Урман хужалыҡтары иҫәбсндә торған һәм һаҡланыуы осөн улар яуап биргән умарта күсторс оялаған йәки ояламаған ҡыуышлы ағастар ҡырҡылырға тейеш түгсл.

Урмандарҙағы ҡорт күстәрс ояларынан бал ҡорттарҙы алып ташламайынса һәм юҡ итмәйенсә, бал ҡорттары оялаған ҡыуышлы ағастарҙы ҡырҡмайынса, уларҙың ояларында кәрэкле аҙыҡ запасын ҡалдырыу шарты менон алына.

Бал ҡорттары куп **осҡан** осорҙа энтомофиль ауыл хужалығы культураларын сабыу тыйыла.

### 23-со статья. Бал кортгарының айырыуса ҡиммәтле популяцияларыи һэм урындағы тоҡомло ҡорттарҙы үрсетеү һәм файҙаланыу

Үрсетеү һәм файҙаланыу осон өҫтенлөк Башҡортостан Республикаһында районлаштырылған бал ҡорттары тоҡомдарына бирелә. Башка тоҡомло умарта күстәрен һэм ҡорт инэләрен ситтән килтереү Башҡортостан Республикаһы территорияһындағы дәүләт ветеринар күҙәтеү органдары менән килешеү буйынса тормошка ашырыла.

Физик шәхестэрҙе һәм **ойошмаларҙы** бал ҡорттарының айырыуса ҡиммәтле тоҡомдары һәм урындағы бал ҡорттары тоҡомдары менон тәьмин итеү өсөн билдәләнгән территорияларҙа (улар тэбиғи йәшогән ареалдарҙа) тоҡом репродукторҙары (селекцион умарталыҡтар) булдырыла.

Тоҡом репродукторҙары (селскцион умарталыҡтар) тирәләй радиусы кәмендә ун биш — егерме километр булған һаҡлағыс участкалар билдәләнэ, был территорияға башка популя-

циялы умарта күстәрен һәм ҡорт инәләрен, бал ҡорттарының бүтон тоҡомдарын, шулай уҡ сығышы **билдәһеҙ** булған умарта күстәрен һәм ҡорт инәләрен индсреү тыйыла.

**24-се статья. Физик шәхестәргә һәм ойошмаларға бал ҡорттары өсөн хәүеф тыуҙырған хәл-шарттар** тураһыпла **хзбәр итеү**

Физик шәхестәр һәм ойошмалар тирә-яҡ тәбиғәт мөхитенең торошо, шулай уҡ бал ҡорттары өсөн хәүеф тыуҙырған хәл-шарттар тураһында ваҡытында, тулы һәм дөрөҫ мәғлүмәт алыуға хоҡуҡлы. Физик шәхестәргә һәм ойошмаларға тирә-яҡ тәбиғәт мохитенең торошо, шулай уҡ бал ҡорттары есөн хәүеф тыуҙырған хәл-шарттар тураһында хәбәр итеү киң мәғлүмәт саралары аша башҡарыла.

**25-се статья. Умарта күстәрен ташығанда булышлык күрһәтеү**

Умарта күстәрен ташыу махсус вәкәләтле тейешле дәүләт органдары менән килешелгән **маршруттар** буйынса үткәрелергә тейеш.

Умарталар артыҡ йылыныуҙан һәм умартала һауаның дымлылығы ҡапыл күтәрелеүҙән умарта күсен һәләкәттән һаҡлап ҡалыу өсөн вәкәләтле органдарҙың умарта күстәрен ташыусы транспорт сараларының ун биш минуттан артыҡ туҡтап тороуына юл ҡуйылмаҫҡа тейеш.

Кәрәк булған осраҡтарҙа махсус вәкәләтле тейешле дәүләт органдары умарта күстәрен **ҡаршылыҡһыҙ** ташыуға булышлыҡ күрһәтә.

Күсмә умарталыҡтар өсөн йыһазландырылған тағылмалар, платформалар, павильондар һом күсермәле будкалар технологик ауыл хужалығы ҡорамалдарына инә.

**26-сы статья. Башҡортостан Республикаһы Умартасыһы көнө**

Август айының икенсе йәкшәмбеһен Башҡортостан Республикаһы Умартасыһы көнө тип билдәлоргә.

# УМАРТАСЫЛЫҠ БУЙЫНСА БАШҠОРТСА-УРЫҪСА ҺҮҘЛЕК

Айыу баланы — жимолость
Акһырғаҡ — чемсрица
Арса — вереск обыкновенный
Асыҡ үрсем (йоморткалар, ҡарышлауыҡтар) — открытый расплод
Аҫҡы ҡапҡас — подкрышник
Ата (эре, әре, һоро) ҡорттар — трутни
Аталанған инә ҡорт — плодная пчелиная матка
Аталанмаған инә корт — неплодная, отрутневевшая матка
Аталанған йоморткалар — оплодотворенные яйца
Аталанмаған йоморткалар — неоплодотворенные яйца
Ата корттар кәрәҙ күҙәнәктәре — трутневые ячейки
Баҙ — зимовник, омшаник, подвал, помещение для зимовки пчел
Бал бөрләтәүе — медовый зобик
Бал ҡорто ғаилоһе, умарта күсе — пчелиная семья
Бал ҡыуғыс (ҡыуҙырғыс, айырткыс) — медогонка
Бал (сәскә) һуты, татлы һут — нектар
Балауыҙ айырып, бүлеп сығарыу биҙҙәре — восковыделительные железы
Балауыҙ иретә торған һауыт — воскотопка
Балауыҙ «көҙгөләре» — восковые «зеркальца»
Балауыҙ көйәһе — восковая моль
Балауыҙ оролары «телсәләр» — восковые наросты — «язычки»
Балауыҙ тәңкәләре, пластинкалары — восковые чешуйки, пластинки
Баллы кәрәҙҙәрҙе аса торған бысаҡ, сәнске — нож для распечатывания **сотов**, пасечная вилка
**Биткә** селтәр (битлек, **күҙлек)** — лицевая сетка
Буш кәрәҙле рамдар — сушь
Бүлем таҡтаһы — вставная доска, диафрагма
Бүре йүкәһе, бүре еләге — волчъе лыко, волчеягодник
Бәпембә — одуванчик
Вертикаль терәүле умарталар — вертикальные ульи-стояки
Гел оре корттар үҫеп сығыусы ғаилә — трутовочная семья
Горизонталь ятмалы умарталар — ульи-лежаки
Дәрсен — корица
Еҙтөймә — пижма обыкновенная
Енес ағзалары үҫеп етмәгән ҡорттар — пчелы-трутовки

Ино көбө(ләре), оялары — маточник(и)
Ино ҡорт һөтө — маточное молочко
Йыйым — медосбор, взяток
Йәнәш кәрәҙҙәр, рамдар араһы, ҡорттарҙың йөрөү юлдары — «урамдары» — улочка пчел (межрамочное простанство)
Йәттә — пыльцевая обножка
Йәш бала ҡорт, үрсем — расплод, пчелиная «детка»
Кейәү үләне — чабрец, тимьян, богородская трава
Киндер япма — холстик
Көпләнгән, ябыҡ үрсем — печатный, запечатанный, зрелый расплод
Күрек, төтәткес — дымарь
Күс — пчелиный рой
Күс (рамдар менән) — пчелопакет
йөрөтә торған ҡап — переносной ящик
Күсереп йөрөтә торған йәшник — ложка (черпак) для сбора роя
Күс йыйыу өсөн ҡалаҡ — кормушка(и) для пчел
Кәмәшәү(ҙәр) — вика
Кәрешкә — средостение сота
Кәрҙҙле рам уртаһы — подставка для улья
Ҡаҙыҡ, ҡалҡытма умартаға — дурман
Ҡара зирә — черника
Ҡара көртмоле — чернокорень
Ҡара тамыр — закристаллизовавшийся, засахарившийся мед
Ҡомоҡҡан, шәкәрләнгән бал — проиолис
Ҡорт елеме — личинка пчелы
Ҡорт ҡарышлауығы — куколка пчелы
Ҡорт ҡурсағы — заразный понос пчел, нозематоз
Ҡорттарҙың йоғошло эс китеүе — зимний клуб пчел
Ҡорттарҙың ҡышҡы күс өйөрө — поилка для пчел
Ҡорттарға һыу эсергес, һуғарғыс — гвоздика
Ҡәнәфер — магазин, магазинная надставка
Магазин өҫтәмәһе, ялғанмаһы — роевня
Моҙға (тубал, тәгәс, ҡаяҙ) — хоботок
Морон — усики, «антенны»
Мыйыҡсалар — сперматозоид (мужское семя)
Мәней — бузина
Өскат — верхние челюсти
Өҫкө яңаҡтар — «тештәр» — каток комбинированный для навашивания рамок
Рамдарға яһалма балауыҙ йәбештереүсе кәтүк — падевый мед
Рәшә бал

| | |
|---|---|
| Солоҡ, солоҡ ағас | — борть, бортевое дерево |
| Сүл боросо, кәрләс, ҡуян кобеҫтәһе | — очиток |
| Сым | — пассчная проволока |
| Сырмалсыҡ | — чина |
| Сәскә балы | — цвсточный мед |
| Сәскә һеркоһе | — цвсточная пыльца |
| Сәтләүек ағасы | — орсшник, лсщина обыкновенная |
| Сәтләүек япрағы | — ореховый **лист** |
| Тағатылмай торған умарталар | — нсразборные ульи |
| Талпан ауырыуы | — варроатоз |
| Тамға | — родовой знак, обозначающий владельца бортевого дерева |
| Тилебәрән, тиле орлоҡ | — белена |
| Тиле шалкан | — сурепка |
| Түмәр **(дүңгәк)** умарта | — колода, колодный улей |
| Тыраж | — шершень |
| Тәрбиәләүсе ҡорттар | — пчелы-кормилицы |
| Умарталыҡ бысағы, ҡасауы | — пасечная стамеска |
| Умарта кейәһе | — леток улья |
| Умарта төбө | — дно, донышко улья |
| Умарта төптәрен таҙартыусы бәләкәй һоҫко | — скребок-лопаточка |
| Умартаның осоп килеп ултырыу таҡтаһы | — прилетная доска |
| Урта Рәсәй тоҡомло ҡорттар | — среднерусская порода пчел |
| Үлмәҫгөл, шиңмәҫгөл | — бессмертник, цмин |
| Үрсем, бала ҡорт | — расплод |
| һаҙанаҡ, сабыр үләне | — багульник болотный |
| һарымһаҡ | — чеснок |
| һитә | — перга |
| һитә һом бал ҡатыштьфылған аҙыҡ | — медоперговая смесь |
| һүтелмәле күп корпуслы умарталар | — разборные многокорпусные ульи |
| Шәкәр-аҡһым ҡамыры | — канди (корм для пчел) |
| Шәкәр комо | — сахарная пудра |
| Шәкәр шәрбәте | — сахарный сироп |
| Эт теле | — костолом (псов язык) |
| Эшсе ҡорттар | — рабочие пчелы |
| Эшсе ҡорттар кәрәҙ күҙәнәктәре | — пчелиные ячейки |
| Әрем | — полынь |
| Юғалған йәки ҡапыл үлгән инә ҡорт урынына яңы инә көбө төҙөү | — свищевой маточник |
| Юғалған инә урынына сыккан яңы инә ҡорт | — свищсвая матка |
| Яираҡ балы | — медвяная роса |
| Яһалма балауыҙ | — искусственная вощина |

# ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ


*АветисянГ.А.* Разведение и содержание пчел. М., Колос, 1983.

*Богдшюва О.В., Сербовка В.И.* Народные рецепты медовой кулинарии. Калининград: Кн.издателъство, 1994.

***Буренин Н.Л., Котова Г.Н.*** Справочник по пчеловодству. М.: Агропромиздат, 1985.

*Власов В.Н.* Башҡорт балы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983.

***Герасимов А.С.*** Медовые напитки **(рецепты).** Йошкар-Ола, 1990.

*ДжарвисД.С.* Мед. Лечение медом и другими естественными продуктами. М., Селена, Яуза, 1993.

***Зарецкий Н.Н.*** Использование пчел в **теплицах.** М.: Россельхозиздат, 1985.

***Зарецкий Н.Н.***Приусадебная пасека. М.: Нива России, 1992.

*Зарецкий Н.Н.* Приусадебная пасека. М.: Нива России, 1992.

*Иойриш Н.П.* Пчелы — человеку. М.: Наука, 1974.

Коллектив авторов. Все о меде. **Уфа,** 1991.

*Кривцов Н.И., Лебедев В.И.* Получение и использование продуктов пчеловодства. М.: Нива России. 1993.

***Лебедев В.И.,*** *БилашН.Г.* Биология медоносной пчелы. М.: **Агропромиздат, 1991.**

*Масалимов Т М.* Донник. Уфа: Башк.кн.издателъство, 1991.

***Нуждин А.С.*** Пасека на приусадебном участке. М.: Росагропромиздат, 1991.

*Полтев В.И., Нешатаева Е.В.* Болезни и вредители пчел. М.: Колос, 1997.

*Тименский П.И.* (составитель). Калсндарь пчеловода. М.: Россельхозиздат, 1977.

*Тименский П.И.* Приусадебная пасека. М.: Агропромиздат, 1988.

*Тименский П.И.* Юному пчеловоду. М.: Росагропромиздат, 1988.

*Халифман И.А.* Они летят по заданию. М.: Московский писатель, 1973.

*ШакировД. Т.* Пчеловодство Башкирии. Уфа: Башк.кн.издательство, 1992.

*Шафиков И.В.* Бал ҡортоноң наҙы бар. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992.

*Шестов П.В., Казакое П.К.* Домашние вина натуральные. М.: Столица, **1991.**

## ЙОКМӘТКЕҺЕ

Баш һүҙ..........3

Нисек умартасы булырға?..........**4**

**I. Умартасылыҡ тарихынан**..........6
Бал ҡортоноң тарихы..........6
Умартаның тарихы..........8
Умарта һәм умарта яһау..........9
Умартасы ҡоралдары..........**16**

**II. Бал ҡортоноң йәшәйеше**..........**18**
Бал ҡорто ғаиләһе..........18
Бал ҡортоноң анатомияһы..........24
Бал ҡорто ояһы һом уның микроклиматы..........28
Балауыҙ бүлеп сығарыу һәм кәрәҙ төҙөү..........31
Бал ҡорттарынын аҙығы, уларҙын туҡланыуы..........37
Бал ҡорттарының инстинкттары..........41
Ни өсөн ҡорттар күс айыра?..........44

**Ш. Бал корггары менэн нисек эш итергэ?**..........51
Ҡорт сакканда **ярҙам** итеү..........55

**IV. Бал ҡортоноң ауырыуҙары һәм ҡороткостары**..........59
Бал кортон тотоуҙың ветеринар-санитар ҡағиҙәләре..........59
Ауырыуҙар хаҡында ҡыҫҡаса белешмә..........60
Талпан ауырыуы (варроатоз)..........61
Аскосфероз ауырыуы һәм уны дауалау..........64
Бал кортоноң ҡороткостары..........66

**V. Умарталыҡтың аҙыҡ базаһы**..........71
Төп бал йыйыу осоро..........74

**VI. Бал ҡорггарын тәрбиәләү һәм үрсетеү**..........**80**
Ҡорттарҙы ҡышлау урынынан сығарыу..........80
Бал ҡорттарын төрлө умарталарҙа аҫрау..........82
Ҡорпарҙың күс айырыу осоро..........86
Күс йыйыу һәм умартаға ябыу..........86
Бал йыйыу һәм бал айыртыу..........91
Умартағыҙ ҡыигка әҙерме?..........94
Умарта ояларын ҡышка йыйыу..........98
Бал ҡортонон тоҡомдары..........**99**
Көслө ғаиләләрҙең өҫтөнлөктәре..........**102**

солоҡ....105
лоҡсолары....107
шш....110

**ғәт мөғжизәләре**....113

**ртостан умартасылығы**....118
м фактгар....118
арҙың республика конкурстары....118
ҙә умартасылыҡ дәрестәре....122

**да шәп дауа юҡтыр**....126
ал....126
**әнәштәр**....127
те айныта....129
алкан шифалы эсемлектәр....130
тикаһы....133

**ҙарға яуаптар**....135

**лыҡ тураһында Башҡортостан Республикаһы**

**оны**....138

лыҡ буйынса башҡортса-урыҫса һүҙлек....149

-ан әҙәбиәт....152

*Учебно-методическое пособие*

**НУГУМАНОВ Рафик Гумерович,**
**ИШЕМГУЛОВ Амир Минниахметович**

СОВЕТЫ ПЧЕЛОВОДА

*(иа башкирском языке)*

*Рецензент*
*кандидат сельскохозяйственных наук*
*ШАФИКОВ Иений Вахитович*

Мөхәррире *Ә.Д. Сәлихова*
Рәссамы *Л.А.Анисимова*
Биҙәүсе мөхәррире *А.Р.Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Э.Ф.Кәлимуллина*
Корректорлаусы *Э.Ф.Кәлимуллина*

Йыйырға бирелде 15.11.2006.
Баҫырға кул ҡуйылды 03.10.2007.
Ҡағыҙ форматы 60x84 1/16.
Ризография ысулы менән баҫылды.
Мәктәп гарнитураһы.
Шартлы баҫма габ. 9,07. Иҫәп-баҫма таб. 9,48.
Тиражы 1850 дана. Заказ № 90.

**«Гилем»** нәшриәте
ҡорамалдарыида баҫтырылды.
450077, Өфө ҡ., Кирова ур., 15
Тел.: (347) 272-36-82, 273-05-93 (факс)
gИt:m@anrb.ru

## БАШҠОРТОСТАНДА ҺУҢҒЫ ЙЫЛДАРҘА УМАРТАСЫЛЫҠ ХАҠЫНДА ТҮБӘНДӘГЕ КИТАПТАР БАҪЫЛЫП СЫҠТЫ

1. Вахитов Р.Ш. Пчелы и люди. 1992. — 228 с.
2. Шакиров Д.Т. Пчеловодство Башкирии. 1988, 1992. — 304 с.
3. Шафиҡов И.В. Бал ҡортоноң наҙы бар. 1992.— 176 б.; 2006. — 190 б.
4. Шакиров Д.Т. Приусадебная иасека. 1996. — 120 с.
5. Власов В.Н., Хайретдинов Л.Г., Шафиҡов И.В. Календарь пчеловода Башкортостана. — 3-е изд. 1996. — 256 с.
6. Власов В.Н. Башкирская пчела — бесценный дар природы. 2005. — 366 с.
7. Шакиров Д.Т. Словарь-справочник пчеловода. 1998. — 215 с.
8. Ишемгулов А.М. Селекция башкирской популяции пчел. 2001.
9. Шакиров Д.Т. Пчеловодство. Учебник для 10—11 классов общеобразовательных учреждений Республики Башкортостан. 2003. — 144 с.

# УМАРТАСЫ КӘҢӘШТӘРЕ

